РӘШИТ САБИТОВ

ҺҮНГӘН ЙОНДОҘ ЯКТЫҺЫ

РӘШИТ
САБИТОВ

ҺҮНГӘН ЙОНДОҘ ЯКТЫҺЫ

Повестар һәм хикәйәләр

ӨФӨ
БАШҠОРТОСТАН КИТАП НӘШРИӘТЕ
1988

84Баш
С12

Рәссамы *Искәндәр Нигәмәтйәнов*

Сабитов Рәшит
С12 Һүнгән йондоҙ яҡтыһы. Повестар һәм хикәйәләр. — Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1988. — 256 бит.

Рәшит Сабитовтың был китабына ингән повестарында һәм хикәйәләрендә актив позициялы тынғыһыҙ йәш геройҙар һүрәтләнә. Характерҙары менән төрлө-төрлө булһалар ҙа, уларҙы тыуған крайҙы өйрәнеүҙә, тәбиғәтте уяу һаҡлауҙа һәм колхозға баҫыу эштәрендә ярҙам итеүҙә уртаҡ маҡсаттар берләштерә.

С $\frac{4803010200 - 174}{М121(03) - 88}$ 112—88 84Баш

ISBN 5—295—00124—5

© Башҡортостан китап нәшриәте, 1988 й.

Повестар

АҒЫМ ҮРЕНӘ

ҠАЛМАНАЙҘА БОҘ КИТКӘНДӘ

Алтын ҡояш сағыу нурҙары менән бөтә донъяны ҡойондороп, ҡарҙары ireп бөтөп барған баҫыу өҫтөнә һабан турғайы көмөш моңдарын сәскәндә, мәктәп формаһы кейгән ун дүрт йәштәрҙәге өс малай Ҡалманай йылғаһы буйына яҡынлашты. Уларҙың береһе — Илнур, буйға ҡалҡыуыраҡ, яурынға ла ҡалыныраҡ, ҡауын һымаҡ оҙонса йөҙөнә оҙон танау һуҙылып төшкән, күҙҙәре ҙур, үҙҙәре зәп-зәңгәр. Ә малайҙарҙың ҡалған икеһе буйға бер сама, тик Хәсән кәүҙәгә

баҙығырақ. Уның йөҙө, күктәге ҡояш һымаҡ, түм-түңәрәк, тыңлауһыҙ ерән сәстәре тырпаиышып тора. Өсөнсө малай — Рәфҡәт исемле. Уның буй-һыны ла, яңаҡтары ла ҡаҡсараҡ, ҡуңыр йөҙлө, ҡап-ҡара күҙҙәре, ыҫмалалай ҡап-ҡара сәстәре иғтибарҙы тартып тора.

Бына малайҙар, яр буйына килеп етеп, Ҡалманай йылғаһына һоҡланып ҡарап торҙолар. Нисек ажарланған, гәйрәтләнгән ул! Ҙур-ҙур боҙ киҫәктәрен уйынсыҡ урынына өйрөлдөрөп ағыҙа. Улай ғына ла түгел, ана ҡолас етмәҫ өйәнкене төбө-тамыры менән аҡтарған да елдертеп алып китеп бара.

Хәсән, ҡапыл тынлыҡты боҙоп:

— Хәтәр бит, ә! — тип Илнурға ҡараны. Тегеһе, уны хуплап:

— Әйе, яҙ көнө беҙҙең Ҡалманай бер шашынып ҡала инде ул, — тип ҡуйҙы.

Шунда Рәфҡәт, ҡулы менән йылға үренә күрһәтеп, ҡыҫҡырып уҡ ебәрҙе:

— Ҡарағыҙ әле, ҡарағыҙ! Һыу өҫтөн иңләп бер боҙ килә. Хоккей майҙанына оҡшаған.

Шул боҙ яғына ҡарашын йүнәлткән Хәсән:

— Ысынлап та, хоккей майҙаны бит. Ана, ҡапҡа урындары, — тине.

Башҡалары менән сағыштырғанда һарыҡ көтөүе араһындағы үгеҙ һымаҡ күренгән бер ҙур боҙ малайҙар торған тәңгәлдән үтеп китте лә алыҫ түгел йылға бөгөлөндә ярҙы барып һөҙҙө һәм шытырлап өс-дүрт киҫәккә ярылды.

Хәсән, нисектер, көрһөнөп ҡуйҙы.

— Был тиклем боҙҙар ҡайҙарҙан килә икән, малайҙар, ә? — тине.

Илнур, юҡҡа иҫең киткән икән тигәндәй, йылмайғандай итте.

— Ҡайҙан килһен улар, Ҡалманай үренән инде.

Хәсән, уны ишетмәгәндәй:

— Улар беҙгә килеп еткәнсе әллә ниндәй матур ерҙәрҙе үтәләрҙер инде, — тине.

Рәфҡәт тә Илнур һымаҡ көлөмһөрәне.

— Беҙҙән түбәндә лә матур ерҙәр күптер инде ул. Шуларҙы күреп, бер йөрөп ҡайтһаң икән.

— Ҡыҙыҡлы фекер, — тине Илнур, уйға ҡалып.

— Эйе шул, — тине Хәсән, ҡапыл дәртләнеп. — Ҡалманайҙың башына ла сәйәхәт итергә мөмкин инде.

— Ә ниңә Ағиҙелгә ҡойған еренә түгел? — тип ҡаршы төштө Рәфҡәт.

Хәсән, шуны ла аңламайһыңмы ни тигәндәй, башын сайҡап алды.

— Һуң Ағиҙелде күргәнең юҡмы ни? Ул алыҫ түгел, ҡасмаҫ. Ә бына үҙ йылғабыҙҙың башлаған урынын, йылға тыуған ерҙе күреү — был ҡыҙыҡ, исмаһам. Шулай бит, Илнур?

— Минеңсә лә шулай, — тине Илнур, етдилек һаҡлап. — Был турала ныҡлап уйлашырбыҙ әле. Тик быны әлегә бер кемгә лә һөйләмәйек. Үҙебеҙҙең сер булһын.

— Булһын, — тине Хәсән, шатланып. — Беҙҙән һүҙ сыҡмаҫ.

Башта үҙе шаяртып ҡына әйткән фекер Рәфҡәтте лә вайымһыҙ ҡалдырманы.

— Эйе-эйе, сер булһын, — тине ул.

Ә Ҡалманайҙы иңләп-буйлап боҙҙар ағылды ла ағылды.

ТАҒЫ КЕМДЕ АЛЫРҒА?

Етенсе класта география дәресе бара инە. Саҡ ҡына шаҙраҡ өлкән йәштәге уҡытыусы апай карта әргәһенә сыҡҡан уҡыусыға һорау бирҙе:

— Аҡиҙел ҡайҙан башлана?

Шул саҡ Ҡалманай буйындағы кисәге һөйләшеү ҡылт итеп Хәсәндең хәтеренә төштө лә күңелен тулҡынландырҙы ла ебәрҙе. Дәрес ҡайғыһы китте, уйҙары эллә ҡайҙарҙа йөрөнө. Бер аҙҙан ул портфеленән бер бит ҡағыҙ алды ла яҙа башланы:

«Илнур!

Ҡалманай башына барыу хаҡында һөйләшәйек әле бөгөн. Мәктәптән ҡайтҡас, һеҙгә йыйылырбыҙ, йәме.

Хәсән».

Яҙыуын ныҡлап төрөп, бер иптәше аша алдараҡ ултырған Илнурға бирҙерҙе. Тегеһе ҡағыҙҙы алыу менән, күҙ йөрөтөп сыҡты ла, Хәсән яғына боролоп, йылмайып башын ҡаҡты. Риза, йәнәһе.

Хәсән былай һәйбәт уҡыусыларҙан һаналһа ла, иғтибарын дәрескә йүнәлтә алманы, хыялы менән Ҡалманай буйҙарын ҡыҙырҙы. Унан үҙҙәре менән сәйәхәткә тағы ла кемде алыу тураһында баш ватты. Күҙ алдынан тиҫтәләп малайҙы уҙғарҙы. Һәр ҡайһыһының уға оҡшап бөтмәгән яҡтары бар. Шулай ҙа ул Әмин исемле ипҡәшенә туҡталды. «Дөрөҫ, ул бер аҙ маҡтансыҡыраҡ, — тип фекер йөрөттө малай. — Хәйер, уға йыуан беләктәре менән аҙыраҡ маҡтанырға ла мөмкин. Ә сәйәхәт ваҡытында ундағы көстөң кәрәк булыуы бар».

Хәсән менән Илнур мәктәптән ҡайтырға бергә сыҡты. Ҡабаланмай ғына атламаҡсы ине улар. Әммә үҙҙәренән алдараҡ ашығып китеп барған Рәфҡәтте күреп, аҙымдарын тиҙләтә төштөләр.

— Эй, Рәфҡәт, ҡайҙа шулай сабаһың? — тип өндәште Хәсән.

— Әсәһе бешергән һурпаны тиҙерәк һемерергә, әлбиттә, — тине Илнур, шаяртып.

— Ысынлап та, асыҡтырҙы, — тине Рәфҡәт, иптәштәрен көтөп алып.

Хәсән шунда уҡ һүҙ башланы:

— Сәйәхәткә өсәү генә сыҡмабыҙ бит. Тағы берәйһе кәрәк булыр. Кемде алабыҙ?

Рәфҡәт, ни әйтер икән тип, Илнурға ҡараны. Тегеһе:

— Тағы бер иптәш кәрәк, әлбиттә, — тине, ҡояш нурҙарынан сағылған күҙҙәрен ҡыҫып. — Азатты алайыҡ.

Рәфҡәт шунда уҡ башын сайҡаны:

— Юҡ, шәп йүгерһә лә, бер ҙә юҡҡа бәхәсләшергә ярата ул. Минеңсә... минеңсә, Вәли ҡулайыраҡ булыр.

— Юҡ-юҡ, — тип киҫкен ҡаршы төштө Илнур, — ҡыҙыу бит ул, этәс кеүек...

Хәсән, үҙенең уйын әйтергә ваҡыт еткәнен тойоп:

— Ә Әмингә нисегерәк ҡарарһығыҙ? — тип һораны.

— Әй, маҡтансыҡ, маҡтансыҡтың арты асыҡ, — тине Илнур, унан өҫтәп ҡуйҙы: — Етмәһә, үҙ һүҙле лә.

— Улай тип кенә ҡырт киҫмә әле, — тине Хәсән, бирешмәҫкә теләп. — Етешһеҙлектәр һәр ҡайһыбыҙҙа ла бар ул. Ә Әмин көслө, сәйәхәттә ундайҙарҙың кәрәк булыуы бар.

Илнур, ҡаршы килеп, нимәлер әйтмәксе ине, Рәфҡәт өлгөрөрәк булып сыҡты.

— Әмин ярайһы егет ул.

Илнур телен тешләне. Ә Хәсән йылмайып ебәрҙе.

— Килештек, улайһа. Рәфҡәт, һеҙгә Әмин яҡын ғына бит, төштән һуң Илнурҙарға алып кил. Сәйәхәт хаҡында шунда ныҡлап һөйләшербеҙ.

САФА МЕНӘН АҠТЫРНАҠ

Әминдәрҙең өйө Рәфҡәттәрҙекенә бер нисә йорт аша ғына. Әре бүрәнәләрҙән һалынып, тәҙ-

рә ҡапҡастары, кәрниздәре бер ниндәй семәрһеҙ генә яһап ҡуйылған. Өс тәҙрәһе урамға ҡарап тора.

Рәфҡәт ҡапҡанан кергәндә, Әмин ҙур ғына утын түмәрен тәгәрәтеп маташа ине. Ул, иптәшенең килеүенә ҡыуанғандай, көлөмһөрәне лә элеге түмәрҙе ике ҡуллап тәүҙә күкрәгенә, унан баш өҫтөнә күтәрҙе. Көсәнеүҙән күҙҙәренең ағы ялтыраны, урттары ирләндеке кеүек ҡабарҙы.

— Ярай-ярай, маҡтанмаһаң да була, — тине Рәфҡәт, ирекһеҙҙән ауыҙын йырып.

Теге, ауыр тын алып, өҙөк-өҙөк мығырланы:

— Маҡ-тан-май-йым. Улай тиһәң, мә, үҙең күтәреп ҡара.

Әмин түмәрҙе ҡапыл Рәфҡәттең аяҡ аҫтына ташланы, тегеһе ҡурҡышынан ситкә һикерҙе. Был Әмингә ҡыҙыҡ тойолдо, көлөп ебәрҙе:

— Ха-ха-ха... Йә, күтәреп ҡара әле.

Рәфҡәттең асыуы килде. Ул, сәмләнеп, түмәргә барып тотондо. Ҡыҙарынып-бүртенеп, ерҙән айырып алып күкрәгенә күтәрҙе, ләкин, нисек кенә көсәнмәһен, артығына хәленән килмәне, түмәрҙе ергә ташланы.

Әмин ҡәнәғәтләнеү менән:

— Ә-ә, бына күрҙеңме, кем маҡтана! — тине һәм, ике ҡулын күтәреп, беләк мускулдарына ишара яһаны.

— Йә, ярай, көслөһөң инде, — тине Рәфҡәт вайымһыҙ ғына. — Шуның өсөн дә һиңә бер эш менән килгәйнем бит.

— Ниндәй эш ул? — Әмин Рәфкәткә якынлаша төштө.

— Беҙ Калманай башына барырға йыйынабыҙ.

— Касан? Иртәгәме? Ял көндөмө?

— Ашыкмай тор, — тине Рәфкәт һәм, мәгәнәле генә карап, телен шартлатып куйҙы. — Укыуҙар тамамланғас. Тик әлегә сер был. Үҙебеҙҙән башка бер кем дә белергә тейеш түгел. Шул сәйәхәт тураһында бөгөн Илнурҙарҙа ныклап һөйләшергә булдык. Малайҙар һиңә килергә кушты.

— Ниндәй малайҙар?

— Ну, Илнур, Хәсән...

— Әһә, киттек, улайһа...

Уларҙы Илнур менән Хәсән көтөп тора ине инде.

— Әмин батыр ҙа килде. Команда тулы, былай булғас, — тине Хәсән, кыуанғандай.

Бындай һүҙҙәр Әмингә оҡшай инде ул, ауыҙы йырылып уҡ китте.

— Сәйәхәткә бөгөндән әҙер!

Уның кылығы Илнурға ла кыҙыҡ тойолдо, тик ул етдилеген юғалтманы.

— Бөгөндән кәрәкмәй, Әмин, — тине ул һәм уның ҡалын яурынына еңелсә һуғып алды. — Укыуҙар бөтһөн, көндәр йылынһын әле.

Малайҙар аҙбар буйында ятҡан бүрәнә әҫтөнә ултырышты. Бында һалҡынса, елдән дә ышыҡ, ҡояш нурҙары ла сағыуырақ төшә.

— Малайҙар, — тине Рәфҡәт көтмәгәндә, — Ҡалманай буйлап йәйәүләп барырбыҙмы икән?

Хәсән, ғәжәпләнеп:

— Бына ҡыҙыҡ, йәйәүләп бармай, осоп бараһыңмы ни? — тине.

Ә Әмин, шаяртып:

— Рәфҡәттең атаһы конюх булғас, ат менән елдерергә уйлайҙыр, — тип өҫтәне.

Хәсән менән Әмин көлөшөп алды. Рәфҡәт үҙе лә йылмайҙы, әммә шунда уҡ:

— Кәмә менән дә мөмкин бит әле, — тип ҡуйҙы.

Илнур, шуны ғына көткән кеүек:

— Һәйбәт фекер был, — тине.— Ысынлап та, ниңә шул хаҡта уйлашмаҫҡа?

Хәсән ҡулбашын һикертеп ҡуйҙы.

— Кәмә менән ағымға ҡаршы ҡыйыныраҡ булыр ул.

— Булһа һуң! — тине Илнур. — Бер ҡыйындың — бер рәхәте: ҡайтҡанда йырлап ҡына елдерәсәкбеҙ.

Рәфҡәт, үҙенең ярым шаярып әйткән һүҙҙәренең етди ҡабул ителеүенә ҡыуанып:

— Кәмә тапһаҡ, һай, шәп булыр ине лә ул! — тине.

Әмин, беләк мускулдарына күрһәтеп:

— Кәмәне ағым үренә лә ишәбеҙ уны, тик табылһын ғына, — тине.

Кәмәне ҡайҙан алырға? Был һорау һәр ҡайһыһының күңелен өйкәне. Шул хаҡта бергәләп

һөйләшә башлағанда ғына ҡапҡала овчарка тоҡомона тартым һары этен эйәрткән Сафа күренде. Кәүҙәгә йоҡа, буйға ла бәләкәй ғенә.

— Кәрәкле кишер япрағы,— тине Әмин, сертләтеп ергә төкөрөп.

Сафа туп-тура малайҙар эргәһенә килде. Оло кешенең усы аяһындай ғына йөҙөндә ниндәйҙер ҡыҙыҡһыныумы, тулҡынланыумы һиҙелеп тора.

— Ниңә килдең, Сафа? — тип һораны Илнур тыныс ҡына.

— Мин... ни... — тип Сафа үҙенең һоро күҙҙәрен Илнурға текләне.— Ҡалманай башына һеҙҙең менән барырға теләйем...

Малайҙар, аптырашып, бер-береһенә күҙ аттылар: йәнәһе, серҙе кем асты икән? Буласаҡ сәйәхәт тураһында Сафа ҡайҙан белгән?

Бер аҙҙан ғына Илнур телгә килде:

— Беҙ бер ҡайҙа ла барырға йыйынмайбыҙ бит.

— Ә был нимә һуң? — Сафа куртка кеҫәһенән бер ҡағыҙ сығарҙы ла Илнурға тотторҙо.

Уны күргәс тә, Хәсән үҙенең яҙыуын танып ғәжәпләнде. Илнурға шиксел ҡараш ташланы. Ә Илнур, уҡып сыҡҡас, ҡағыҙҙы парта аҫтына төшөрөп ебәреүен, һуңынан алырға онотоуын хәтерләп, үкенеп ҡуйҙы. Ул, ҡағыҙҙы һелкеп, Сафаға текләне:

— Ҡайҙан таптың быны?

— Мәктәп буйынса дежурный инем. Класы-

ғыҙға ингәс, парта аҫтығыҙҙа ошоно күрҙем дәалып ҡараным.

— Башҡаларға күрһәтмәнеңме?

— Юҡ.

— Яҡшы иткәнһең. Ә хәҙер тай бынан. Был ҡағыҙҙа яҙылғандарҙы онот. Сер ул. Аңланыңмы?

Сафа урынынан да ҡуҙғалманы.

— Әгәр мине ҡыуһағыҙ, серегеҙҙе һаҡлай алмам шул, — тине ул иҫе лә китмәй.

Илнур, ни эшләйбеҙ тигәндәй, иптәштәренә ҡараны.

— Бына бер бәйләнсек, әй...

Шул саҡ Әмин, үҙенең көсөн күрһәтер саҡ еткәнен самалап, Сафаның ҡаршыһына килеп баҫты. Ҡулын күтәреп, ҡалын мускулын һелкетеп алды.

— Әгәр хәҙер үк, серегеҙҙе бер кемгә лә һөйләмәйем, тимәһәң, ошо рәшәткә аша баҡсаға ырғытам үҙеңде.

— Ҡуй, Әмин, теймә уға, имгәтеп ҡуйыуың бар, — тине Рәфкәт, уның еңенән тотоп.

Ә Сафа китергә уйламаны ла, бары йылмайҙы ғына:

— Улай янаһаң, серегеҙҙе иртәгә үк бөтә мәктәп беләсәк.

Әмин түҙмәне, уны яғаһынан әләктереп алды.

— Әле һин шулаймы, кәзә бәрәсе...

Малайҙар араға керергә өлгөрә алмай ҡалды, Аҡтырнаҡ асыулы, ҡурҡыныс күҙҙәрен Әмингә

төбәп, аҡештәрен ялтыратып ырылдап ҡуйҙы. Әмин шунда уҡ Сафаның яғаһын ебәрҙе лә ситкәрәк тайпылды.

— Яклаусыһы бар берәүҙең, — тип мығырланы ул.

Быға тиклем үҙен бик етди тоткан Илнур ҙа был юлы көлөмһөрәне.

— Ярай, Әмин, — тине ул килешеүсән тон менән, — дүрт егет эргәһенә йоҙроҡтай малай һыйыр әле. Беҙ уны һынаныҡ та инде: ебектәрҙән түгел...

Хәсән дә йылмайып ҡуйҙы.

— Ни эшләрһең икән һин беҙҙең менән?

— Аш бешереүсе булырмын. Атай-әсәй эштә саҡта аш-һыуҙы мин гел үҙем әҙерләйем.

— Якшы, тине Илнур, уны хуплап. — Флотса әйтһәк, беҙҙең кок булырһың.

Сафаның ҡыуанысынан ауыҙы ҡолағына етә яҙҙы.

— Ҡаршы килмәһәгеҙ, үҙем менән Аҡтырнаҡты ла аласаҡмын. Аҡыллы эт ул. Походта кәрәк буласаҡ.

— Эттең зыяны теймәҫ. Ни тиһәң дә — һаҡсы, — тине Хәсән, Сафаның ҡулбашына ҡулын ҡуйып.

Әмин һаман тынысланып бөтмәгәйне.

— Үҙе генә етмәгән, этен дә эйәртмәксе. Нимәгә инде ул әрәм тамаҡ! — тип һөйләнде.

Ләкин был һүҙҙәргә иғтибар итеүсе булманы.

Биш малайҙан, бер эттән торған төркөм шулай ойошто.

КӘМӘ БУЛАСАҠ

Малайҙар оҙаҡ һөйләште. Юлға үҙҙәре менән ниндәй әйберҙәр алырға, нисек туҡланырға, сәйәхәт ваҡытында нәмәләр менән ҡыҙыҡһынырға — береһе лә ҡалманы.

Илнур, әҫер төшкәс кенә, иптәштәрен оҙатты, үҙе өйҙәренә инергә ашыҡманы, нисек кәмә табыу хаҡында уйланды. Малайҙарҙан был турала күңел йыуатырлыҡ фекер булманы. Ул үҙе генә: «Кәмә табырға тырышырбыҙ», — тине. Ошо һүҙҙәрҙе әйткәнсе үк уның башында бер уй тыуғайны. Тик уны әлегә иптәштәренә асырға ҡабаланманы. Их, уйы барып сыҡһа икән!.. Уның капитан булып, диңгеҙҙәрҙе, океандарҙы гиҙергә хыялланыуын күптәр белмәй. Әммә шул яҡты хыялыңа юлды ауылың эргәһенән аҡҡан йылға буйлап сәйәхәттән башлау насармы ни! Малайҙың йөрәге ҡанатланып ҡуйҙы. Кәмә була ҡалһа, ул да, иптәштәре лә уны «карап» тип атаясаҡ.

...Илнурҙың атаһы — балта оҫтаһы. Ябай ултырғыс яһауҙан алып өй һалыуға тиклем бөтә эште белә. Уны Ҡаран ауылында «оҫта» тип кенә йөрөтәләр. Малай атаһының кәмә яһағанын күргәне юҡ. Әммә уның был эште лә булдырасағына ышана ине.

Киске аштан һуң Илнур дәрес әҙерләне. Ул

өҫтәл артында газета уҡыған атаһына ҡарап-ҡарап алды. Атаһының уйсан күҙ ҡарашы, оҙон йоҡараҡ танауы, һыҙылып киткән ҡара мыйығы һәм тамырҙары бүртеп торған һөйәксел ҙур ҡулдары — бөтәһе лә үтә таныш, яҡын малайға.

Хәбиб ағай бер мәл Илнурҙың үҙенә төбәлгән ҡарашын тойоп:

— Йә, улым, ни әйтерһең? — тине.

Илнур шунда уҡ күңелен өйкәгән һорауын бирҙе:

— Атай, һин кәмә яһай беләһеңме?

— Уның нимәһе бар. Беләм, әлбиттә.

— Ни... атай, — Илнур тулҡынланыуҙан тотлоҡто, — миңә, юҡ миңә генә түгел, беҙгә, йәғни биш малайға, кәмә яһап бирмәҫһеңме?

— Нимәгә ул?

— Ни... — тип тағы тотлоҡто Илнур, әйтергәме-юҡмы тигәндәй уйланып торҙо. Юҡ, ниндәй генә сер булмаһын, атаһынан уны йәшерә алмай ул. — Кәмәлә Ҡалманай башына барырға уйлайбыҙ. Бөтәбеҙ — биш малай, бер әт. Тик әлегә был беҙҙең сер...

— Шулаймы? — Хәбиб ағай саҡ ҡына, мыйыҡ аҫтынан ғына йылмайып ҡуйҙы. — Иптәштәреңде ата-әсәләре ебәрерҙәрме һуң?

— Беҙ ҙур бит инде. Ебәрерҙәр, тип уйлайым.

— Шулай ҙа...

— Әллә, атай, мине лә ебәрмәҫ инеңме?

Хәбиб ағай бер аҙ уйға ҡалып торҙо ла:

— Һиңә ышанам мин, — тине. — Тик уйығыҙ тормошҡа аша-нитә ҡалһа, нәмәләр алырға, нисек йөрөргә кәңәш-теләктәремде әйтермен. Хәҙер кәмә мәсьәләһе... Уға һәйбәт таҡта кәрәк. Ә беҙҙә ул аҙыраҡ бит әле. Ҡайҙан табырға икән?

— Таҡта табылыр, атай, — тине Илнур, күңеле күтәрелеп. — Иптәштәрем дә килтерер. Кәмә бөтәбеҙ өсөн бит.

— Улайһа, яһарға була. Таҡтағыҙҙы әҙерләй башлағыҙ. Тик иптәштәреңә ныҡлап әйт: ата-әсәләренән һорап ҡына алһындар. Аңланыңмы?

— Аңланым, атай. Уныһы өсөн борсолма. — Илнурҙың шатлығы эсенә һыйманы. «Былай булғас, эш бешә», — тип уйланы ул.

ЙӘНӘ БЕР СЕР

Әминдең ике туған ағаһы ауылға ҡайтты. Өҫтөндә — моряк формаһы. Ағиҙел йылға пароходствоһында эшләй икән. Ул Әмингә Өфөнән Әстрханға ҡәҙәр барыуы, Каспий диңгеҙен күреүе, унда һыу инеүе, һары комонда ҡыҙыныуы хаҡында һөйләне. Әстрхан ҡауын-карбузының тәмен дә хәтергә төшөрҙө.

Шул саҡ Әмин дә түҙмәне, үҙҙәренең Ҡалманай башына барырға йыйыныуҙарын әйтеп һалды. Ағаһы, мыйыҡ аҫтынан ғына көлөп:

— Ниңә Ҡалманай тамағына төшмәйһегеҙ? Ағиҙелгә барып етһәгеҙ, унан Кама менән Волга ла алыҫ түгел. Ә Волгаға сыҡһаң, Каспий диңге-

ҙенә — бер аҙым. О, диңгеҙҙе бер күреүең ни тора! Бына минең телняшкалағы һыҙықтарҙай береһе артынан икенсеһе буй-буй һуҙылған зәңгәр тулҡындар, алтын ҡомло пляждар, көньяҡ ҡояшы...

— Унда тиклем кәмәлә барып етеп буламы ни? — тип шик белдерҙе Әмин.

Тегеһенең иҫе лә китмәне.

— Бик теләһәң — була! — тине, ҡустыһын шаяртыуын дауам итеп. — Ә беҙҙең пароходҡа ултырһаң, бигерәк тә шәп, ҡояшта ҡыҙынып, тирә-яҡҡа һоҡланып ҡына бараһың.

Әминдең ауыҙы асылды, әҫәрләнеп тыңланы ул. Тик көтмәгәндә һүҙҙәре бүленде, ағаһын саҡырып алдылар. Ә икенсе көндө Әмин мәктәптән ҡайтыуға, ул Өфөгә киткәйне инде.

Ағаһының һүҙҙәрен ысынға алған Әминдең хыялдары ҡабынды ла китте. Ҡалманай башына барыу бәләкәй, артыҡ мөһим булмаған бер нәмә һымаҡ күренде. «Унда, күп тигәндә, ике-өс шишмә барҙыр инде, — тип уйланы ул. — Минең шишмә күргәнем юҡмы ни! Ана, Ҡалманайҙың текә яр аҫтында әллә нисәһе ағып ята. Шулай булғас, ағым ыңғайына йөҙөү яҡшыраҡ бит. Ағиҙелгә генә түгел, Камаға, ағай әшләгән пароходҡа эләгеп, Волгаға, унан диңгеҙгә барып етергә лә мөмкин. Ул ерҙәрҙә күпме тарихи урындар, ҡомартҡылар барҙыр!»

Эйе, Әминде тарих та ҡыҙыҡһындыра. Был фәндән, дәрестәрҙе ныҡлап уҡып, гел «бишле»

ала ул. Әммә был сәйәхәттә уны тулҡынландырған нәмә тарих ҡына түгел. Бөҙрә аҡ яллы ҙурҙур тулҡындарҙы ярып йөҙөүсе мөһабәт караптар, шаярып, уйнап-көлөп, һыу ингән малайҙар күҙ алдына килде. Хыялы менән мәңге йәшел кипаристарҙы, пальмаларҙы күреп һоҡланды. Тәлгәштәре ҡыуаҡтарын һырып алған йөҙөмдәр, һап-һары емештәренән һығылып ултырған өрөктәр, абрикостар, яландарында тәгәрәшеп ятҡан күнәктәй ҡауын-карбуздар, уның күҙҙәрен осҡонландырып, ауыҙына һыуҙар килтерҙе. «Аһ, быны Ҡалманай башы менән сағыштырырға мөмкинме һуң! — тине ул эсенән. — Ни булһа ла, малайҙарҙы ағым ыңайына йөҙөүгә күндерергә кәрәк. Улар менән Ағиҙелгә етһәм, ни эшләргә үҙем белермен».

«Үҙем белермен» тигәне Әминдең иң ҙур хыялы инде. Ағиҙел йәки Кама буйындағы берәй пристандә аҡаһы хеҙмәт иткән пароходҡа әләгеп, тәбиғәттең бөтә гүзәллеген күреп, ял итә-итә диңгеҙгә тиклем юл тотоу ине уның уйы. Аҡаһы, моғайын, ҡунаҡ итеп кенә алып барыр әле.

Был хаҡта оҙаҡ ҡына уйлап йөрөгәс, яңғыҙыма күңелһеҙ булыр тип, малай үҙе менән бер иптәш тә алырға ҡарар итте. Аҡаһы, һис шикһеҙ, иптәшен дә һыйҙырыр. Пароход ҙур, ике бәләкәй малай нимә уға...

Тик серҙе кемгә тишергә һуң? Илнурғамы? Хәсәнгәме? Әллә Рәфҡәткәме? Әмин Сафаны иҫәпкә алманы. Байтаҡ баш ватҡас, хәлдең төр-

лө яҡтарын үлсәүгә һалып ҡарағас, Рәфҡәтте үҙе өсөн иң ҡулай юлдаш тип тапты: йомшаҡ күңелле, тиҙ килешеүсән, серҙе тота белә.

Әмин өҫтәл артынан һикереп торҙо ла урамға ашыҡты. Зәңгәр күктән балҡып ҡараған ҡояш та, ҡурала баҡырған ҡыҙыл һыйыр ҙа, күршеләрҙә тамаҡ ярып ҡысҡырған этәс тә уның иғтибарын тарта алманы. Ул, үҙ уйҙарына күмелеп, шәп-шәп атланы. Рәфҡәттәргә юл тотто. Дуҫын үҙ ягына ауҙарһа, икәүләп Илнур менән Хәсәнде лә сәйәхәтте ағым ыңайына йүнәлтергә күндерерҙәр. Ҡалай шәп булыр!

Рәфҡәт өй алдына сыҡҡан да аҙбар башындағы ояһы өҫтөндә сыбыҡҡа ҡунып һайраусы сыйырсыҡҡа төбәлеп ҡарап тора. Әмин килеп ҡул башына ҡағылғас ҡына, ул, уянып киткәндәй, боролоп ҡараны.

— Ә-ә, һинме ни, — тине ул, ғәжәпһенеп.

— Килдем әле, — тине тегеһе, саҡ ҡына көлөмһөрәп. — Ниңә шул сыйырсыҡҡа ҡарап иҫеңе китте?

— Улай тимә, — тине Рәфҡәт, үпкәләгәндәй. — Бик матур һайрай ул.

Әмин ҡулын ғына һелтәне.

— Эй, юҡ менән баш ватма...

Рәфҡәттең йәне көйөп китте шикелле, бер оя өҫтөндәге сыйырсыҡҡа, бер Әмингә ҡарап:

— Ҡоштарҙы яратмайһың икән, был — хөрт, элбиттә. Тик уларҙы яратҡан кешене кәмһетмә һин, — тине.

— Ярай-ярай, мин шаярттым ғына, — тип, үҙенә хас булмағанса, артҡа сигенде Әмин. Әйе, ул әле иптәшенең көйһөҙ ҡылына ҡағылырға теләмәй ине.

— Шулай тип ҡотол, — тине Рәфҡәт, нисектер, күңеле күтәрелеп.

Шуны ғына көткәндәй, Әмин уға яҡыныраҡ килде.

— Ни... Рәфҡәт, һиңә бер һүҙем бар...

— Ниндәй һүҙ ул?

— Ни... — Әмин тауышын тағы ла әкренәйтә төштө, — беҙ сәйәхәткә Ҡалманай башына түгел, уның Ағиҙелгә ҡойған еренә барайыҡ. Малайҙарҙы ла шуға күндерәйек.

Рәфҡәт иптәшенә ғәжәпләнеп ҡараны.

— Ниңә? Малайҙар риза булмаҫ.

— Һинең менән мин аяҡ терәп һөйләшһәк, ҡайҙа китерҙәр тиһең?

— Минең үҙемдең дә Ҡалманай башына барғым килә шул.

— Һи-һи-һи, — тип көлөп ҡуйҙы Әмин, унан, ҡапыл етдиләнеп: — Диңгеҙгә тиклем сәйәхәт итеү мөмкинлеге бар бит, — тине.

Рәфҡәттең ҡап-ҡара күҙҙәре баҙлап китте.

— Нисек?

— Ағайым моряк булып эшләгән пароходта. Ул үҙе әйтте...

Әмин ағаһы менән һөйләшеүен, үҙенең хыялдарын һөйләп биргәс, Рәфҡәт, урынында сыҙап тора алмай тапанып, ҡулдарын ыуып ҡуйҙы.

— Һай, шәп булыр ине диңгеҙҙе күреп ҡайтһаң! Бөтә малайҙар, ҡыҙҙар шаҡ ҡатыр ине!

— Улай ғына тиһең, — тип өҫтәне Әмин, — уҡытыусыларҙың, бөтә ауылдың иҫе китер ине. Йә, нисек?

— Нисек кенә тиһең әле! Шә-әп!

— Улайһа, былай итәйек, — тине Әмин шыпырт ҡына. — Малайҙарға, беҙ Ҡалманай башына бармайбыҙ, түбәнгә, Ағиҙел яғына, юл тотһағыҙ ғына һеҙгә юлдаш була алабыҙ, тиәйек. Беҙҙең шартты ҡабул итмәһәләр, серҙе бөтә ауылға таратыу менән ҡурҡытырбыҙ. Ә Ағиҙелгә барып еткәс, беҙ икәү үҙ юлыбыҙ менән китербеҙ, башҡалар — ҡайтыр. Уларҙы ла алыр инем, ағайым күпһенер шул, асыуланыр. Беҙҙең был маҡсат хаҡында бер кемгә — ләм-мим...

— Әлбиттә... — Рәфҡәт ни өсөндөр уйланып торҙо.— Серҙе асабыҙ тип, малайҙарҙы асыуландырмайыҡ. Бармайбыҙ, тип тә әйтмәйек. Улай егетлек булмай ул. Былай ғына өгөтләйек, дуҫтарса. Ҡалманай башына барыу ҙа һәйбәт бит.

Әминдең йөҙө боҙолдо.

— Нимәһе һәйбәт уның?

— Шундай ҙур йылғаның башланған ерен күрәбеҙ... Әллә ағайыңдар үтә торған пристангә автомашинала ғына барабыҙмы?

Әмин, кәйефе ҡырылып, ҡулын һелтәне:

— Улай ҡыҙыҡ түгел. Малайҙарҙан айырылмаҫҡа ине. Ағайыма ла шулайыраҡ әйткәйнем. Сәйәхәт — сәйәхәт булһын инде.

— Ярай ҙа малайҙар риза булһа,— тине Рәфҡәт, ниңәлер икеләнеп.

— Үҙем һөйләшермен улар менән. Һин хуплап ҡына торорһоң.

— Ярай һуң.

Бына шулай йәнә бер сер тыуҙы. Ни менән бөтөр ул?..

«КАРАП» ӘҘЕР!

Илнурҙың йөҙө көмөш тәңкәләй балҡыны. Ул аҙбар буйында ыҫмала еҫе аңҡытып яткан өрәңы кәмәгә ымлап:

— «Карап» әҙер! Бөгөндән сәйәхәткә китергә мөмкин! — тине.

Малайҙар кәмәгә һоҡланып ҡараны. Ысынлап та, нисек матур яһалған! Фабриканан сыҡҡанмы ни! Ҡойроҡта, урта тәңгәлдә һәм морон өлөшөндә ултырырға йәтеш кенә урындары ла бар. Илнурҙың атаһы Хәбиб ағай нык тырышҡан. Малайҙарҙан берәр-икешәр таҡта килтертте лә үҙҙәренән үк шып-шыма итеп йышҡы менән йыштырҙы. Бөтә нәмәләре әҙер булғас, бөгөн, Илнур мәктәптән ҡайтыуға, атаһы кәмәне ҡороп та ҡуйған. Уны икәүләп ыҫмалалап та алдылар...

— «Карап»ҡа исем кәрәктер ул, — тине Сафа, йылмайып.

Малайҙар йәнләнеп китте.

— Ысынлап та.

— Ниндәй исем ҡушабыҙ?

Бер-бер артлы төрлө исемдәр әйтелде: Сала-

уат, Аврора, Башҡортостан, Варяг, Салют... Тик ҡайһыһына тыҡталырға ла белмәнеләр. Шунда Хәсән, уртағарақ сығып:

— «Дункан» тиһәк, нисек булыр? — тине, Илнурға төбәлеп.

Тегеһе уйланғандай итте лә:

— «Дункан», — тип ҡабатланы, — Жюль Верндан... Һәйбәт, минеңсә.

Был исем башҡаларға ла оҡшаны.

— Сәйәхәтселәр карабы, — тине Хәсән. — Капитан Грантты эҙләп, ул карап менән диңгеҙҙәр, океандар гиҙгәндәр. Беҙ ҙә бит сәйәхәтселәр булабыҙ инде, үҙебеҙсә. Уҡыуҙар бөтөп, һыу инерлек йылы көндәр килеү менән, Ҡалманай үренә юл тоторбоҙ.

— Ә ниңә түбәнгә түгел? — тине Әмин, башҡаларҙы аптырашта ҡалдырып.

— Иҫке ауыҙҙан яңы һуҙ, — тине Хәсән. — Тәүҙә үк Ҡалманайҙың башына барырға һөйләшкәйнек бит.

Инде Рәфҡәт тә, Әминде яҡлап:

— Малайҙар, әйҙәгеҙ Ҡалманай тамағына барайыҡ. Ағиҙелдән нисек пароходтар үткәнен күрербеҙ. Ағым ыңғайына кәмәбеҙ ҙә балыҡ һымаҡ йөҙөр, — тине.

— Ә ҡайтыуы? — Илнур Рәфҡәткә һораулы ҡарашын төбәне.

Тегеһе, аптырабыраҡ ҡалғандай:

— Ну... нисек тә ҡайтырбыҙ әле. Бер ҙә булмаһа, кәмәне ташланыҡ киттек, — тине.

Илнур мыҫкыллы көлөмһөрәне:

— Ай-һай, аҡылыҡ алтын икән. Бына тигән кәмәне ташла ла кит, имеш. Юҡ инде, уныһы булмаҫ.

Тик Әминдә еңермен тимә. Ҡарбуз кеүек йомро башын сайҡай-сайҡай һаман үҙенекен тылҡыны ул.

— Юлыбыҙ бары тик түбәнгә генә. Унда Аҡиҙел, аҡ пароходтар, шуларҙың береһендә — минең ағай...

— Юҡ-юҡ, улай бармай, — тине Хәсән, үҙ һүҙләләнеп. — Үрҙә беҙҙе серҙәр, матурлыҡтар көтә. Бәлки әле, граждандар һуғышы партизандары эҙенә лә юлығырбыҙ.

Әмин ҡыҙа төштө, күмер кеүек ҡара күҙҙәренән бына-бына осҡондар сәсрәр һымаҡ ине.

— Түбәндә лә — матурлыҡтар, тарихи урындар... Түбәнгә тигәс, түбәнгә!

— Юҡ, үргә! Унда, Ҡалманай башында, минең ҡарт олатайым партизан булып, аҡтарға ҡаршы һуғышҡан, ти. Күптән түгел генә атайым һөйләне.

— Буш һүҙҙе лыҡылдама. Бары тик түбәнгә!

Шул саҡ быға ҡәҙәр шым ғына торған кескәй Сафа ҡапыл ҡысҡырып ебәрҙе:

— Ниңә бәхәсләшәһегеҙ? Шыбаға тотошоғоҙ. Кем өҫкә сыға, шул еңә.

Әмин Сафаға боролдо:

— Ә һин кем яклы?

— Мин?.. Мин бер кем яклы ла түгел. Үргә

барһағыҙ ҙа, түбәнгә төшһәгеҙ ҙә — минең өсөн барыбер.

Әмин уға күҙенең ағын әйләндереп ҡарап ҡуйҙы.

— Их һин... Ҡиблаһыҙ.

Хәсән дә ҡыҙып алғайны. Көтмәгәндә Сафаның тәҡдименә ҡушылып:

— Улайһа, шыбаға тотошабыҙ, — тине.

Әмин ҡулын һелтәне:

— Ярай, һеҙҙеңсә булһын.

Сафа салбар ҡайышын сисеп алды ла, уның таралғыһын усына йомарлап, Әмингә өндәште:

— Тот әйҙә, һинән башлайыҡ.

Әмин уға күҙ ташланы ла ҡайышты ныҡ итеп тотоп алды. Ул, әлбиттә, үҙенең һүҙен һүҙ итеренә өмөтләнә ине. Шул уҡ теләк Хәсәнде лә ҡайышҡа үрелергә мәжбүр итте.

— Ныҡ тот, ҡулыңды шыуҙырма, — тине Әмин, Хәсәнде үртәп.

Тегеһе бирешмәне:

— Минең ҡул ҡамырҙан түгел.

— Ҡулың тимер булһа ла, мин өҫкә сығасаҡмын.

— Ә мин өҫкә сығып ҡуйһам?..

— Уныһы булмаҫ...

— Күрерһең бына.

Ул арала шыбаға тотоусылар ҡайыштың осона яҡынлашты. Һуңғы тотам ҡалғас, Хәсән, ҡәнәғәтләнеп, йылмайып ебәрҙе.

— Әһә, ағайың еңдеме! Әйттем бит мин һиңә.

Тик шыбаға тотошоу Әминде тынысландырманы.

— Юк-юк, бер генә тапкыр һынау етмәй бында. Фәҙел булмай. Хәҙер бакыр акса ташлайык, — тип кыскырҙы ул, кыҙарынып.

Шул сак араға Илнур керҙе.

— Етте, Әмин, еңелдең, юк менән башты әйләндермә. Сәйәхәткә әҙерлек тураһында һөйләшәйек. Тиҙҙән укыуҙар тамамлана.

Әмин, эсендәге ярһыуын тыйып, тынырға мәжбүр булды. Ул үҙен көслөләрҙән иҫәпләһәлә, Илнурҙан шөрләй ине. Ләкин эсенән: «Ярай, юлға сығығыҙ әле. Мин һеҙгә картәсәйегеҙҙе танытырмын. Нисек боролоп кайтыуығыҙҙы һиҙмәй ҙә калырһығыҙ», — тип янаны.

Малайҙар оҙак кына гәпләшеп ултырҙы. Улар яңы тыуған «Дункан» «караб»ының капитаны итеп бер тауыштан Илнурҙы һайланы.

— Капитан итеп һайлағанһығыҙ икән, малайҙар, бер һүҙһеҙ мине тыңлаштан булһын, — тине Илнур. — Башта ук шуны килешеп куяйык.

— Ярай.

— Әлбиттә, — тиеште тегеләре.

Тик Әмин генә, турһайып, һүҙгә катнашманы.

ИРТӘНГЕ СӘҒӘТТӘ!

Бортына зәңгәр буяу менән «Дункан» тип яҙылған «карап» эргәһенә беренсе булып Илнур үҙе килеп етте. Тауҙар артынан күтәрелеп килгән кояштың тәүге нурҙары талғын ғына ағып

яткан йылға һыуын да, уның өҫтөнән күтәрелгән шыйык томанды ла алһыу төҫкә мансыған. Эргәлә генә, талдар араһында, ошо гүзәл иртәне данлағандай, әллә күпме ҡоштарҙың дәртле сутылдашҡаны ишетелә. Капитан Илнур күңеле менән иртәнге сафлыҡты, күркәмлекте тойһа ла, уйында икенсе нәмәләр ине. Һөйләшеү буйынса, һәр кем икмәк, йоморт ҡа, консерва, картуф, шәкәр, тоҙ һәм башҡа ризыҡты етерлек алып килерме? Хәйер, уныһы булыр ҙа ул. Ә сәйәхәт нисегерәк килеп сығыр? Экипажда берҙәмлек, дуҫлыҡ яғы ҡыуанырлыҡ түгел: Крылов мәҫәлендәге аҡҡош, суртан, ҡыҫала һымағыраҡ. Юл мажаралары, мәшәҡәттәр уларҙы берләштерһә ярай ҙа бит. Әлбиттә, Илнур атаһының кәңәштәрен тотасаҡ.

Илнур «карап»ҡа рюкзағын урынлаштырғас, уң яғына аҫылған планшет һымаҡ нәмәһенән үҙе яһаған картаһын сығарҙы ла, уны йәйеп, һоҡланғандай ҡарап торҙо. Картаһында аҡ ҡағыҙға йылға һәм уның буйындағы ҡайһы бер ауылдар төшөрөлгәйне. «Ҡалманай башына тиклем һикһән саҡрым самаһы, — тип уйланы ул. — Дүрт көндә, моғайын, барып етербеҙ». Шунан ул, барлағандай, «планшет»ындағы компасын, блокнотын, ручка һәм ҡәләмен һәрмәп ҡараны. Картаһын ипләп кенә урынына тыҡты.

Шул саҡ яр буйында Хәсән күренде.

— Капитанға сәләм! — тине ул, шаяртып.

Илнур уға башын ғына ҡағып ҡуйҙы, өндәшмәне. Бары тик:

— Малайҙар күренмәнеме? — тип һораны бер аҙҙан.

Хәсән, рюкзагын һала-һала:

— Юк, — тине, ҡояш сыҡҡан яҡҡа ҡарап. — Ниндәй матур иртә!

Кәмә уртаһында торған Илнур, йөҙөнә ябырылған серәкәйҙәрҙе ҡыуып:

— Матурлыҡҡа матур ҙа, тик серәкәй тынғы бирмәй, — тине.

Шул саҡ талдар араһында шыптырлаған тауыш ишетелде. Ауыл яғынан Аҡтырнағын эйәрткән Сафа килә ине. Ул яҡынлашҡас:

— О-һо, үҙең бәләкәй булһаң да, ҙур тоҡсай алғанһың әле, — тине Илнур.

— Аҡтырнаҡҡа ла ҡайһы бер нәмәләр кәрәк бит, — тине Сафа, рюкзагын ергә төшөрөп.

Хәсән, эттең башынан һыйпап:

— Аҡтырнаҡ хаҡында һәр ҡайһыбыҙ ҡайғыртырға тейеш, — тине.

Был һүҙҙәрҙе ишетеп, Сафа шат йылмайып ҡуйҙы.

Бер аҙ тын торҙолар. Унан Илнур, ауыл яғына ҡарап:

— Әллә был Әмин менән Рәфҡәтте әсәләре ебәрмәйме икән? — тине.

Хәсән көрһөнөп ҡуйҙы.

— Бәлки, йылға үренә табан бармаҫҡа булғандарҙыр. Ҡайғырмайыҡ әле. Әйҙә, «карап»ты һыуға төшөрә башлайыҡ.

Малайҙар, талдарҙы аралап, «Дункан»ды

һыуға этәрҙе. Ул түбәнгә ыңғайланы һәм, һыуға барып төшкәс, бер аҙ сайҡалып торҙо.

Бына талдар араһындағы һуҡмаҡта ике малай — Әмин менән Рәфҡәт күренде. Ни өсөндөр Әминдең йөҙө һытыҡ, ә тегеһенеке уйсан ине.

Илнур, уларҙы күреү менән, тауышын күтәрә төшөп:

— Ниңә һуңға ҡалдығыҙ? — тип өндәште.

— Әминдең әсәһе ебәрмәй торҙо, — тине Рәфҡәт.

Ләкин Рәфҡәт алдаша ине. Кисен, барырға булып, әҙерләнеп ҡуйһа ла, иртәнсәк уянғас, Әмин карауатта ята бирҙе. Рәфҡәт килеп ингәс тә, торорға ашыҡмайынса: «Минең һүҙҙе иҫәпкә алманылар, бармайым», — тип киреләнде. Рәфҡәт уны көйләп алып сыҡҡансы, байтаҡ ваҡыт үтте.

Бынан һуң малайҙар күп һөйләшеп тормаҡылар. Һәр ҡайһыһы, шул иҫәптән Аҡтырнаҡ та, «карап»тағы үҙ урындарына ултырғас, капитан тәүге әмерен бирҙе:

— Куҙғалырға!

Ишкәксе Хәсән, ҡойроҡта ултырған Илнур ишкәктәр менән әтә-әтә «карап»ты ярҙан айырып, Ҡалманай үренә йүнәлттеләр.

АҒЫМ ҮРЕНӘ

Малайҙар, тырышып-тырмашып, үҙҙәренсә «карап» тип атаған ябай кәмә менән һаман ағым үренә йөҙҙө. Таныш ярҙар артта ҡалды. Ҡояш

ҡыҙҙыра башланы. Ләкин йылға өҫтөндә еләҫ, һалҡынса, ишкәкселәргә генә эҫе. Сөнки һөҙәк ярлы, һыу буйҙарында ваҡ ташлыҡтар йәйелеп яткан үҙәндәргә сығыу менән, Ҡалманайҙың ағымы көсәйҙе, ул «карап»ты алға үткәрмәҫкә тырышты, ишкәктәргә көсөргәнешлекте әҙ генә кәметһәң дә, артҡа ағыҙҙы. Әммә малайҙар сәмле ине шул. Улар, бер-береһен алмаштырып,ештәрен ҡыҫып, ҡайырып-ҡайырып ише, ә ҡойроҡта ултырғаны һайыраҡ урындарҙа ҡолғаны йылға төбөнә терәп этә-этә ярҙамлашты. «Карап», ағым көсөн еңеп, әкренләп булһа ла алға үрләне. Әле яңы ғына ишкәксе урынын алған Әмин көрһөнөп ҡуйҙы.

— Их, ағым ыңғайына ҡайһылай ҙа шәп елдерер инек! Тыңламанығыҙ шул мине.

Уның бындай һүҙҙәре ғәҙәтигә әйләнгәнлектән, бер кем дә иғтибар итмәне. Һәр ҡайһыһы, нисектер, үҙ уйҙары, хәстәрлектәре менән мәшғүл ине. Ана, Хәсән яр буйындағы ҡуйы ҡыуаҡлыҡтарға, улар араһынан мөһабәт булып ҡалҡып торған олпат тирәктәргә, түбәләре болоттарға тейә яҙған тауҙарға һоҡланып бара. «Йәмле шул беҙҙең яҡтар», — тип ҡуя эсенән. Тағы ла күпме йәм-күркәмлектәр күрәсәген уйлап, йөрәге ҡыҫылып-ҡыҫылып ала.

Ә Рәфкәт өҙөк-өҙөк ишетелгән ҡоштар тауышына ҡолаҡ һала. «Карап» бөҙрә талдар эргәһенән үтеп барғанда, нимәгәлер иғтибар итеп, йөҙө яҡтырып, күҙҙәре баҙлап китте уның.

— Ҡарағыҙ әле, ҡарағыҙ! — тип ҡыскырҙы ул ҡапыл.

— Нимә бар тағы?

Бөтәһе лә Рәфҡәт күрһәткән яҡҡа төбәлде. Унда ҡуш йоҙроҡ ҙурлыҡ бер нәмә тал ботаҡтарында аҫылынып тора ине.

— Нимә һуң ул? — тип һораны Хәсән, ҡыҙыҡһынып.

— Ҡош ояһы бит, — тине Рәфҡәт, ғәжәпләнгәндәй. — Ана, инеп-сығып йөрөү өсөн яһалған «ишеге»лә бар.

— Оҫта эшләнгән был оя, — тине Сафа, «карап»ты туҡтатыу өсөн талға тотоноп. — Ниндәй ҡоштоң ояһы икән был?

Рәфҡәт ҡәнәғәтләнеүҙән йылмайып ҡуйҙы:

— Шуны ла белмәйһегеҙме? Бәләкәй ҡарабаш турғай ояһы ул. Рустар ремез тиҙәр. Бына шундай тыныс йылға, күл буйҙарында, сәңгелдәк һымаҡ, талдарға аҫып яһай ул ояны.

— Белә ҡоштар «профессоры», — тине Әмин дә, беренсе ҡатештәрен йылтыратып.

— Ярай, куҙғалдыҡ! — Был Илнур тауышы.

«Карап» йәнә алға китте. Ишкәксегә ҡойроҡта ултырған Хәсән дә ярҙам итте. Ул, Әмин теләгәнсә түгел, үргә табан барыуҙарына ҡәнәғәт ине. Әйе, Ҡалманай башын күреп ҡайтырҙар. Йылға башланған ерҙе!

Әмин, тирләп-бешеп ишә-ишә, «карап»ты алға үрләтә. Тороп-тороп, үҙенең ағым ыңғайына йөҙөү тураһындағы хыялын уйлап, йөрәге әсенеп

кит... Бындай сақта ишкәктәрен һүлпәнерәк йөрөтә башлай. Ләкин үҙенә ҡаршы ултырған Илнурҙың күҙ ҡарашын тойоп, ишкәккә ныҡлабыраҡ тотона. Бер аҙҙан тағы йомшара. Күңеленән төрлө уйҙар үтә. «Йылға башын күрәм тип, шулай көс түгеп, ошо остоҡ ҡына кәмәлә бар инде, — ти ул, асыу менән ишкәктәрҙе һыуға батырып. — «Карап», имеш. Етмәһә, «Дункан»... Ниңә китергә булдым һуң әле мин былар менән? Ниңә әле Рәфҡәттең өгөтөнә бирелдем?» Үҙенең «оло» хыялы алдында әле кәмәлә барыуҙары көлкө булып тойолдо уға.

— Арыным, — тине ул бер аҙҙан. — Кем мине алмаштыра?

Илнур, үтәнән-үтә күргәндәй, уға төбәлә:

— Ниндәй арыу ти тағы? Яңыраҡ ҡына ултырҙың бит. Әле ана Сафа ла һинән күберәк иште.

— Минең башҡаларҙа эшем юҡ, арыным, — тип ныҡышты Әмин.

Илнур башын сайҡап ҡуйҙы.

— Йә ярай, арығанһың икән, Рәфҡәт алмаштырыр.

Рәфҡәт шунда уҡ, «карап»ты бер аҙ сайҡалтып, Әмин эргәһенә килде. Улар урындарын алмашҡансы, кәмә әкрен генә артҡа сигенде. Әммә оҙаҡҡа түгел. Рәфҡәт ишкәктәрҙе әләктереп алды ла ныҡлап ишә башланы. Әмин менән серҙәре береккәс, иптәштәре алдында үҙен, нисектер, уңайһыҙ тоя ул. Көньяҡ йәмдәре, шаулы диңгеҙ

ҙә күңелен арбай шул уның, Илнурҙарҙан да айырылғыһы килмәй. Шунлыктан үҙен ике ут араһында хис итә.

Ҡалманай ҡапыл һулға боролдо ла, яр буйҙарындағы туғайлыкты ваҡ саукалыҡ алмаштырҙы. Унда һыйыр көтөүе йөрөй ине. Күрәһең, был бейек үләнле урынға яңыраҡ килеп сыҡҡандарҙыр. Яр башында, йылғаға ҡарап, ҙур ғына ҡыҙыл үгеҙ тора. Уны күреп, Аҡтырнаҡ ҡапыл һауһаулап өрөп ебәрҙе. Шунда малайҙар бөтәһе лә эткә боролдо.

— Аҡтырнаҡ та үҙенең барлығын һиҙҙерҙе, — тине Илнур, уны хуплаған һымаҡ.

Ниңәлер уйға талыбыраҡ килгән малайҙарҙың телдәре сиселеп китте.

— Беҙҙе яклаусы бар, — тине Хәсән.

Рәфҡәт, ишкәктәрҙе батырып ишә-ишә:

— Эйе, Аҡтырнаҡтың тауышы көр, — тип әтте маҡтап алды.

Әмин, иптәштәре менән килешмәгән һымаҡ:

— Яклаусы, имеш. Кемдән ҡурсалай ала ул? — тип һөйләнде.

Сафа уға үпкәле ҡараш ташланы ла, этен иркәләп:

— Аҡтырнаҡмы?.. Үҙен күрһәтер әле, — тине.

Сәйәхәтселәр ҙур булмаған Игенсе ауылы тапҡырына килеп етте. Күрше генә булғас, малайҙар уны яҡшы белә. Яр буйындағы ағаслыктар аша бары тик ике-өс өйө генә күренә.

— Ошо тирәлә төшкөлөккә туҡталайыҡ инде, — тине Әмин, ҡояшҡа ҡарап.

Илнур яурынын йыйырып ҡуйҙы. Унан картаһын алып ҡараны ла:

— Иртәрәк әле, был ауылды үтеп, бер аҙ барайыҡ. Алда — Әрәмә ауылы. Шуны үткәс туҡтарбыҙ, — тине.

Тиҙҙән Ҡалманай аша һалынған ағас күпер, һыу инеп йөрөгән бала-саға, балыҡсы малайҙар, һирәкләп өлкәндәр ҙә күренде. Ҡармаҡ һалып торған, шаҡмаҡлы күлдәк кейгән бер малай сандыр иптәшенә, Илнурҙарҙы күрһәтеп:

— Ҡарәле, кәмәләренә «Дункан» тип яҙғандар, хәсрәт сәйәхәтселәр, — тине, һәм улар икеһе лә шарҡылдап көлдө.

Илнурҙың уларға яуап бирергә теле ҡысытып ҡуйһа ла, түҙҙе, өндәшмәне. Бары тик бер аҙҙан үҙ алдына:

— Көлгән булалар хөрәсәндәр. Үҙҙәренә бындай кәмә әләкһә, нимә генә ҡыланмаҫтар ине! — тип ҡуйҙы.

Был осраҡта Әмин дә һүҙһеҙ ҡалманы, күҙҙәрен ҡояшҡа ҡыса төшөп:

— Улар дөрөҫ әйтә: хәсрәт сәйәхәтселәр беҙ, — тине.

— Юҡты һөйләп килмә әле, — тине Илнур, асыуланып. — Беҙ — ысын сәйәхәтселәр, тыуған яҡты күрергә, өйрәнергә сыҡҡанбыҙ. Шулаймы, малайҙар?

— Шулай, әлбиттә, — тине Хәсән, ихлас килешеп.

— Беҙ — бөйөк сәйәхәтселәр, — тине Сафа, бер аҙ шаяртып.

Был һүҙҙәр Әмингә етә ҡалды. Әсен тотоп:

— Ха-ха-ха! — тип ҡысҡырып көлөп ебәрҙе. — Үәт «бөйөк» сәйәхәтселәр. Ха-ха-ха...

Был юлы башҡаларҙың да ауыҙҙары йырылды. Сафаның шаяртыуы уларға ла оҡшап ҡуйҙы, ахырыһы.

Ағас күперҙе үтеп, йәнә ике саҡрым самаһы киткәс, бөҙрә талдар үҫкән ҡырсынлы урында төшкө ашҡа туҡтанылар малайҙар. «Карап»тың когы, йәғни ашнаҡсыһы, Сафа ең һыҙғанып сәй ҡайнатырға тотондо.

* * *

Тамаҡ туйҙырып, бер аҙ ял иткәс, капитан фарманы менән малайҙар йәнә юлға ҡуҙғалды. Илнур ишкәктәргә үҙе тотондо. Әммә бер саҡрым самаһы киттеләрме-юҡмы, кисеү-шаршыға килеп төртөлдөләр. Ағым был урында шундай көслө ине, нисек кенә тырышһаң да, үргә барырлыҡ түгел. Етмәһә, әле тегендә, әле бында һыуҙан ҙур-ҙур таштар сығып тора. Капитан маңлайынан ағып төшкән борсаҡтай тирҙәрен ҡулы менән һөрттө лә, аптырап, иптәштәренә ҡараны:

— Нимә эшләйбеҙ?

Хәсән, ҡойроҡта ҡолғаһы менән кәмәне артҡа сигенеүҙән туҡтатырға тырышып:

— Сисенәйек тә, ошо шаршыны үткәнсе, «карап»ты һөйрәп барайык, — тине.

Был тәкдим капитанға урынлы һымак тойолдо. Ул, Әмингә төбәлеп:

— Кем көслө, кем курҡмай, шул, сисенеп, «карап»ты буксирға алһын, — тине.

Әмин, карашын ситкә бороп:

— Минән булмай, — тине.

Хәсәндең уға асыуы килеп куйҙы. «Сәйәхәткә алырға үҙем тәкдим иттем бит. Иҫәр мин», — тип уйланы ул, көйәләнеп. Шунда уҡ урынынан тороп, тиҙ генә сисенде лә һыуға төшөп тә китте. Уға Сафа эйәрҙе. Рәфкәт тә сисенә башлағайны, Илнур туҡтатты.

— Бында икеһенең дә көсө етер, алдағыларында беҙ төшөрбөҙ, — тине.

Һыу тубыҡтан саҡ юғары, тик шаршыға каршы атлау ифрат ҡыйын ине. Хәсән «карап» моронондағы бауҙан тартып, Сафа иһә арттан этеп, әкрен генә алға атланылар. Аяҡ аҫтарында эреэре тайғаҡ таштар. Хәсән бер нисә аҙымдан тайып йығылып, һалҡынса һыуға ҡойоноп сыҡты. Аяғы ауыртһа ла, рәхәт булып ҡалды үҙенә. Ә кәмә бик үк еңел түгел ине. Шулай ҙа Хәсән менән Сафа уны тәрәнерәк, ташһыҙыраҡ урындарҙан алға үрләтте.

— Әйҙә, шәберәк тарт, на! — тине Әмин, алға, Хәсән яғына ҡарап һәм аҫтыртын көлөп.

Башҡалар уның урынһыҙ шаяртыуына ку-

шылманы. Хәсән үҙе лә иғтибар итмәне. Илнур, дуҫының хәленә кергәндәй:

— Хәсән, ярҙамға төшәйекме әллә? — тип өндәште.

— Юҡ-юҡ, әллә ни ауыр түгел дә, — тине тегеһе артына боролмай ғына.

Әмин йәнә ауыҙын йырҙы:

— Нисауа, Хәсән көслө ул.

Был юлы Илнур Әмингә асыуланып, тегеһе бер семтеп ҡуймай булдыра алманы.

— Эйе, Хәсән маладис ул, ҡайһы бер беләге йыуандарҙан көслөрәк тә, ихтыярлыраҡ та, — тине, йөҙөндә етдилек һаҡлап.

Әмин Илнурҙың ни әйтергә теләгәнен аңланы, әлбиттә. Әммә сер бирмәне.

— Шулайҙыр, шулайҙыр,— тигән булды, көлөп.

Хәсән менән Сафа «Дункан»ды бер аҙ үрләткәс, шаршы бөтөп, йылға тәрәнәйә башланы. Малайҙар «карап»ҡа, үҙ урындарына, менеп ултырҙы.

— Күлдәктәрҙе сисеп, ҡояшта ҡыҙынып барһаҡ та була икән, — тине Сафа.

Тик капитан уны хупламаны.

— «Карап»та яланғас бармаҫҡа, — тип бойорҙо ул. — Беҙ, сәйәхәтселәр, һәр ваҡыт формала булырға тейеш. Ял иткән саҡта ғына ҡыҙынырға мөмкин.

Илнур был хаҡта алдан уйлап ҡуйғайны инде. Әлегә тиклем малайҙар ҡыҙынманы. Бөгөн

килеп, сағыу ҡояш аҫтында яланғас барһалар, эҫе ҡабып, сирләп йөрөйәсәктәр.

Сәйәхәтселәр һәүетемсә генә алға юл тотто. Малайҙар алмашлап ишә-ишә бер аҙ арып та, ялҡып та киттеләр шикелле. Ләкин быны береһе лә һиҙҙерәһе итмәне.

«Дункан» Ҡалманайҙың талғын аҡҡан урындарына килеп инде. Үҙ яйың менән ишһәң дә ярай хәҙер!

«Карап»тың алғы осона ултырып алған Сафа уң яҡтағы текә яр өҫтөндәге бейек-бейек өйәнкеләргә ҡарап бара. Бер нисә ерҙә улар, яҙғы ташҡындар мәлендә һыуға ауып, йыуан беше тамырҙары менән генә ярға әлегеп торалар. Шул көйө лә япраҡ ярғандар, йәшәүҙәрен дауам итәләр.

Көмөш таҫмалай һыҙылып аҡҡан Ҡалманай, уның буйҙарында йәшел диңгеҙҙәй урмандар, туғайлыҡтар, болондар... Уларҙа күпме йән эйәләре йәшәй! Айыу, бүре, мышы, төлкө, һеләүһен, бурһыҡ, ҡуяндар... Иҫәпһеҙ-һанһыҙ ҡоштар... Шуларҙы уйлаһаң, ҡыуанмаҫҡа мөмкинме! Эйе, беҙҙең Урал төбәктәре үҙе бер хазина инде ул!

Сафа алда Ҡалманайға ҡушылған бер йылғасыҡты күрҙе. Ул ярайһы уҡ алыҫтан, урмандар менән ҡапланған тауҙар араһынан, килеп сыға ла киң генә яланды ярып үтеп, өлкән туғаны менән тоташа. Уның буйҙары ла бөҙрә талдарға күмелгән.

— Анау ҡушылдыҡ тамағында туҡтайыҡмы әллә? — тине Сафа, алға күрһәтеп.

Бәләкәй йылға малайҙарҙы ҡыҙыҡһындырҙы. Бөтәһе лә ҡараштарын шунда йүнәлтте.

— Ысынлап та, матур урын да баһа, — тине Хәсән.

— Арыта ла башланы, тәүге көнгә ярап торор, — тине Рәфҡәт Илнурға.

Тегеһе, бер аҙ уйланып, картаһына ҡарап алғас:

— Булмаһа, туҡталайыҡ. Бында ҡармаҡ һалырға ла, ял итергә лә уңайлы, — тине.

ТЫНҒЫҺЫҘ ТӨН

Комташтарҙан торған яр буйына, теге йылғасыҡ ағып төшкән моронға, «Дункан» килеп туҡтаны. Малайҙар тиҙ генә «карап»тан һикерешеп төштөләр ҙә, уны ҡороға тартыбыраҡ, йыуан ғына талдың төбөнә бәйләп, рюкзактарын таллыҡ буйына килтереп ҡуйҙылар. Аҡтырнаҡ еҫкәнә-еҫкәнә тирә-йүнде әйләнеп сыҡты. Унан, нимәлер әҙләгәндәй, ҡайҙалыр инеп юғалды.

Көн кискә ауыша башлағайны. Шулай ҙа йылы, ҡояш нурҙары ла артыҡ һүрелмәгән. Малайҙарҙың күңелдәрен күтәрергә теләгәндәй, таллыҡтан ҡоштар һайраҡаны ишетелә.

Илнур менән Сафа ҡармаҡ һалырға әҙерләнде. Капитан фарман бирергә лә онотманы:

— Башҡалар усаҡ яғыу өсөн ҡоро-һары әҙерләй. Сафа менән беҙ кискелеккә балыҡ ҡаптырабыҙ.

Илнур менән Сафа ҡармаҡтарын емләп йылғаға ташланылар ҙа, күҙҙәрен ҡалҡыуыстарына төбәп, балыҡ ҡапҡанын көттөләр. Бәләкәй йылға Ҡалманайға ҡушылған урында тыныс ҡына ятыу хасил булған. Илнурҙың иҫәбе буйынса, бында балыҡтар һуғылып китергә, был тирәне үҙҙәренең яратҡан төбәктәре итергә тейеш. Ысынлап та, оҙаҡ та үтмәне, Илнурҙың ҡалҡыуысы һелкенеп ҡуйҙы, шунан ҡапыл ғына һыуға батты.

— Ана, ҡара, ҡапты! — тине Сафа ла, ҡалҡыуысҡа үрелеп ҡарап.

— Күрәм, ҡысҡырма, — тип бышылданы тегеһе һәм сыбыҡ тоткан ҡулын алғараҡ һуҙҙы ла ҡыҙыл ҡанатлы көмөш балыҡты ярға ырғытты.

— Һай, ҡапты бит әй, — тип, Илнурҙан алда Сафа ҡысҡырып ебәрҙе, унан сыбығын ярға ҡуйып, балыҡҡа ташланды. — Ҡыҙыл күҙ, ҡыҙыл күҙ!

— Улай шаулама әле, ҡармағыңды ҡара, — тине Илнур, асыулана төшөп.

Сафа ҡармағына боролғайны, һыу өҫтөндә үҙ ҡалҡыуысын тапманы. Ул, ҡабаланып, сыбығына тотондо, ебе скрипка ҡылылай тартылғайны. Малай, сыбығын күтәрә башлағайны, ҡарағуҡсыл һыртлы, ҙур башлы балыҡ һыу өҫтөнә ҡалҡты ла, ҡойроғо менән ҡаты ғына һуғып, кире сумды. Ҡармаҡ сыбығы көйәнтәләй бөгөлдө. Күҙҙәре дүрт булған Сафаға Илнур:

— Һөйрәп, һөйрәп кенә сығар, — тип ҡысҡырҙы. Тик тегеһе тыңламағас, Илнур үҙе килеп

Сафа ҡулынан сыбыҡты тартып алды ла балыҡты иплэп кенэ ярға ыңғайлатты. Был ярайһы ғына ҙур ажау ине. Ярға сығарғас, Сафа ҡыуаныстан хатта һикергелэп алды.

— А-а, ниндэй ҙур!

Илнур ҙа йылмайып ҡуйҙы.

— Былай булғас, балыҡ һурпаһы бешэсэк!

Былар балыҡ ҡаптырған арала башҡалар бэлэкэй йылға буйындағы таллыҡтарҙан ҡоро сытыр-сатыр йыйҙы, усаҡ урыны эҙерлэне. Унан улар һыу инергэ төштө. Көн буйы йылынған йылғала ҡояш байыр алдынан һыу инеүҙең лэззэтен кем белмэй!

Сафа үҙҙэренэн аҫтараҡ шау-гөр килеп һыу ингэн иптэштэренэ ҡыҙығып ҡараһа ла, балыҡ ҡаптырыуҙан туҡтарға иҫэбе юҡ ине. Эммэ уға һыу инергэ лэ, йэнэ балыҡ ҡаптырырға ла тура килмэне. Үҙе менэн бергэ торған капитандың:

— Сафа, бар, усаҡ яғып, һурпа бешерэ башла, — тигэн фарманы уны ҡармағын йыйырға мэжбүр итте. Рюкзактар ҡуйылған урында Сафаны, ҡойроғон болғап, Аҡтырнағы ҡаршы алды. Малай уға иғтибар ҙа итмэне, усаҡ яғып ебэрҙе, таған ҡорҙо. Ҡоро сыбыҡ-сабыҡ бик тиҙ дөрлэп янып китте. Сафа бэлэкэй биҙрэ менэн һыу килтереп, тағанға элде лэ картуф эрсергэ кереште. Шунда уҡ ҡомда гэплэшеп яткан иптэштэре яғына башын бороп:

— Хэсэн, Эмин, балыҡ таҙартығыҙ! — тип ҡысҡырҙы.

Сафа, ысын кок һымаҡ, бөтәһен дә теүәл эшләне. Усаҡ өҫтөндәге биҙрәгә әрселгән картуфты урталай ярып ҡына һалды ла, һыуы бер аҙ ҡайнағас, балыҡтарҙы сумдырҙы. Былай иткәс, балыҡ менән картуф бер сама бешеп сыға, иҙелмәй.

Сафа һуған, борос кеүек тәмләткестәр ҙә алғайны.

Малайҙар балыҡ һурпаһын яратып ашаны. Хатта Әмин дә ниндәй ҙә булһа мыҫҡыллау һүҙе эйтергә баҙнат итмәне. Ә «карап» капитаны һауытындағы һурпаны, икмәк менән ҡушып, тәмләп ашап бөттө лә:

— Беҙҙең «Дункан» когы Сафа Ғариповҡа киске ашты яҡшы эҙерләгәне өсөн рәхмәт белдерәм, — тине.

Был һүҙҙәр шаярып эйтелһә лә, бер кем дә көлмәне, уны һәр кем ысын итеп ҡабул итте. Ә Сафаның ауыҙы ҡолағына еткәйне.

Эңер ҙә төштө. Тын ғына аҡҡан йылға өҫтөндә унда-бында балыҡ ҡарпығаны күҙгә салынды. Эргәләге болонда бытбылдыҡтың дәртле тауышы ишетелде. Таллыҡтар ниндәйҙер шом менән уралды. Сафаны ҡурҡыумы, борсолоумы тойғоһо биләп алды. Тик быны ул бер кемгә һиҙҙермәне. Хәйер, төнгә ҡаршы бындай хисте башҡалар ҙа кисерҙе шикелле. Илнур һүнеп барған усаҡҡа ҡараш ташланы ла:

— Төнгөлөккә утын күберәк кәрәк булыр, — тине һәм урынынан торҙо. — Әйҙәгеҙ, тағы ла бер аҙ ҡоро-һары йыйып киләйек.

Малайҙар дәррәү урындарынан ҡуҙғалды. Усаҡ эргәһенән китеүҙәре булды, уларға серәкәйҙәр ябырылды. Был бәләне береһе лә иҫкә алмағайны. Әле килеп, көндөҙгө йомшаҡ ел баҫылғас, ул үҙен ныҡ һиҙҙерҙе. Рәфҡәт зарланып та алды:

— Төндә серәкәйҙәргә нисек түҙербеҙ икән?

— Түҙербеҙ, — тине Илнур, артыҡ иҫе китмәйенсә, һәм таллыҡ араһына инеп китте.

Уның артынан башҡалар эйәрҙе. Серәкәйҙәр малайҙарҙы көтөп кенә торғандай, «без», «без» тип, тирә-яҡта болоттай өйөрөлдө. Бер аҙҙан Сафа таллыҡ араһынан атылып килеп сыҡты. Уның сәбәләнеүенә хәтта артынан килгән Аҡтырнағы ла ҡапыл өрөп ҡуйҙы. Был өрөү Сафаға, серәкәйҙән ҡотоҫ остомо? тигәндәй, яңғыраны. Малай тирә-яғына ҡаранып алды ла йәнә таллыҡҡа сумды. Төн буйына усаҡҡа утын күп кәрәк буласағын яҡшы аңлай ине ул.

Оҙаҡламай ҡоро-һары һәм киҫкәләр ҡосаҡлап, малайҙар бер-бер артлы усаҡ янына йыйылды. Әминдең йөҙө уйсан: серәкәйҙәр уның да кәрәген биргән шул. Бына нисәнсе ҡат инде ул үҙ-үҙенә: «Ниҙә юлға сыҡтым?» — тигән һорауҙы бирә. Уға был сәйәхәт бер ҙә күңелле түгел. Инде башҡалар ҙа үкенәлер һымаҡ тойола уға.

— Кем бөгөн төндө дежурный була? — тип һораны Илнур, усаҡҡа утын өҫтәй-өҫтәй.

— Мин, — тине Хәсән.

— Мине ҡуйығыҙ, — тине Рәфҡәт тә.

Әммә Илнур Сафаға боролдо:

— Әйҙә, бөгөнгә Аҡтырнағың менән һин бул әле.

Сафа, честь биргәндәй, ҡулын сикәһенә тейҙереп:

— Есть, иптәш капитан! — тигән булды һәм, шунда уҡ урынынан тороп, үҙ вазифаһын үтәй ҙә башланы. Ҡалманай буйында ятҡан серек бер түмәрҙе усаҡҡа килтереп һалды. Тиҙҙән, серәкәйҙәрҙе өркөтөп, тирә-яҡҡа ҡара-һоро төтөн йәйелде.

Малайҙар аҙыраҡ һөйләшеп ултырҙылар ҙа, курткаларын аҫтарына йәйеп, өйҙән алған юрғандарына төрөнөп, усаҡ тирәләй йоҡларға ятты.

Төн уртаһы күптән ауышҡайны инде. Сафа ултыра бирҙе, Аҡтырнағы ла уның эргәһендә башын ал аяҡтарына ҡуйып күҙҙәрен йомдо. Эт—эт инде: аҙ ғына ҡыштырлауға ла, алыҫтан килгән тауышҡа ла уның ҡолаҡтары ҡуҙғалып-ҡуҙғалып ҡуйҙы.

Сафа, ҡыҙарып торған аяҙ көнбайышҡа ҡарашын төбәп, уйға сумды. Күҙ алдына әсәһе, атаһы, һеңлеһе килеп баҫты. Улар хәҙер йоҡлайҙыр. Атаһы, гәҙәтенсә, тамаҡ ҡырып ҡуялыр. Сәйәхәткә китмәһә, Сафа ла күптән ятҡан булыр ине. Әсәһе, моғайын, уның янына килеп, арҡаһынан ҡағып, башынан һыйпап китер ине. Шундай саҡта уға әсәһенең ҡытыршыраҡ ҡулдарынан ниндәйҙер йылылыҡ, рәхәтлек яғылып ҡалғандай була һәм ул бик тиҙ татлы йоҡоға тала.

Ауыр көрһөнгән тауыш Сафаның татлы уйҙарын бүлде. Әмин һикереп тороп ултырҙы.

— Йоҡлап булмай, серәкәй тынғы бирмәй, — тине ул, әсенеп.

— Төрөнөбөрәк ят, — тип кәңәш итте уға Сафа.

— Төрөнөп ҡарайым да ул, тик барыбер ҡайҙандыр инәләр ҙә йә танау, йә ҡолаҡ төбендә генә безелдәй башлайҙар. Йоҡлап ҡара унан...

Башҡа малайҙар ҙа әйләнде лә тулғанды. Серәкәйҙәр бер кемгә лә тынғы бирмәне. Сафа усаҡты тағы ла нығыраҡ яндырҙы. Теге серек бүрәнә киҫәге лә, инде тамам кибеп, дөрләп ҡабынып китте. Әммә серәкәйҙәр юрған аҫтына, малайҙарҙың йөҙҙәре йәшеренгән урынға, юл тапты. Уларҙың әсе итеп безелдәүҙәре лә янғын машинаһының сиренаһы һымаҡ тетрәткес тәьҫир итә ине.

Шулай ҙа бер мәл усаҡ тирәһе тынып ҡалды. Сафа, ултырған килеш, үҙе лә йоҡомһорай башлағайны. Ҡапыл Аҡтырнағының, нимәлер һиҙенеп, өрә башлауын ишетеп, күҙҙәрен асты. Тап шул саҡ әте абалап өрә-өрә болон яғына сабып китте. Сафа ла, йәһәт кенә тороп, уның артынан ташланды. Аяҙ күктән яртылаш кәмегән ай һәм секрәйеп ҡараған йондоҙҙар яҡтыһында төлкөгә оҡшаған йәнлекте шәйләп ҡалды һәм йылмайып ҡуйҙы.

Аҡтырнаҡ теге йәнлекте бер аҙ ҡыуып оҙат-

ҡас. Сафа менән усаҡ янына ҡайттылар. Был ваҡытта малайҙар ҙа тороп ултырғайны.

— Нимә бар унда? — тип һораны Илнур.

— Төлкө шикелле, — тине Сафа тыныс ҡына.

— Бәлки, бүрелер? — тине Әмин, күҙҙәрен йылтыратып.

Хәсән йылмайып ҡуйҙы.

— Әллә айыумы?

Малайҙар ҡапыл көлөп ебәрҙе. Әминдең кәйефе ҡырылды. Ул Хәсәнгә асыулы ҡараны ла юрғанына төрөнөп урынына ауҙы.

— Төлкө бында ризыҡ еҫен тойоп, берәй нәмә сәлдереп булмаҫмы тип килгәндер инде, — тине Илнур, ултырған көйө. — Аҡтырнаҡ һиҙгән бит үҙен. Маладис! Ышаныслы һаҡсыбыҙ бар, былай булғас...

Был төндә береһенең дә йоҡоһо йоҡо булманы. Иртән, яҡтырыу менән, бөтәһе лә аяҡҡа баҫты, һәр кем ауыҙын асып иҫнәне, тәндәрендә ауырлыҡ тойҙо. Әмин серәкәйҙәр талауҙан шешенгән күҙ ҡабаҡтарын ыуа-ыуа:

— Булмай былай, малайҙар, яҡшы саҡта ысҡынайыҡ ҡайтыр яҡҡа. Нисек шулай ғазапланып сәйәхәт итмәк кәрәк? — тине.

Рәфҡәт тә уға ҡушылды:

— Ысынлап та, гел былай йоҡламай төн үткәрһәң, бер нисә көндән аяҡ һуҙыуың бар.

— Һуҙмабыҙ, — тине Илнур, үҙ-үҙенә ныҡ ышанып, бер аҙ тын торғас, өҫтәп ҡуйҙы: — Сәйәхәтселәр юлдан кире боролмай.

— Дөрөҫ! — тип күтәреп алды Хәсән. — Серәкәйҙәрҙән ҡурҡҡандарға ҡайтып китергә лә мөмкин.

Әмин ауылға тайыу мәсьәләһен үҙенсә төндә үк хәл иткәйне инде. Әле Хәсәндең мыҫҡылдап эйткән һүҙҙәрен ишеткәс, уйға ҡалды. Бөгөн ҡайтып китһә, иптәштәре: «Серәкәйҙән ҡурҡып ҡасты»,— тип көләсәктәр. «Юҡ, түҙергә кәрәк. Ҡайтыр өсөн, бәлки, башҡа сәбәп табылыр».

АҘАШЫУ

Сәйәхәттең икенсе көнө лә үтте. Малайҙар яр буйындағы бер аҡланда серәкәйҙәр менән һуғышса-һуғышса төн ҡундылар ҙа иртүк йәнә юлға ҡуҙғалдылар. Илнур картаһын алып, текләп торҙо ла:

— Алда — Ҡобау ауылы. Шунда магазинға һуғылып китербеҙ, — тине.

Ишкәктәрҙе дәртле йөрөтөп, ҡолға менән арттан этә-этә, сәйәхәтселәр «карап»ты алға ҡыуҙылар. Төшкә табан Ҡобау ауылы тәңгәлендә туҡталып, магазиндан икмәк, пакетлы аш, шәкәр алып киттеләр.

Ҡалманай өҫкә ауып торған ҡуйы урмандар әсенән аға ине хәҙер. Уның үҙәне тарайҙы, һыуы һайыға төштө. Яр буйҙарындағы йүкә, ҡарама, саған һәм башҡа ағастар йомшаҡ ҡына елгә лә япраҡтарын шыбырлатып, ә иҫәпһеҙ-һанһыҙ ҡоштары һәр ҡайһыһы үҙ йырын һуҙып, сәйәхәтселәрҙе сәләмләп ҡала ине.

Тәбиғәт күркенә бөтөнләй вайымһыҙ кеше юктыр донъяла. Ә Хәсән йәшенә хас булмағанса ярата уны. Урман менән йылғаға малайҙың ихтирамы айырыуса ҙур. Ни өсөн? Ул быны үҙе лә аңлата алмаҫ ине.

Бына әле Хәсән тирә-йүнде сихырланған һымаҡ күҙәтә. Ниндәй матурлыҡ, мөһабәт көс был урмандарҙа! Ниндәй олпатлыҡ һәм сабырлыҡ! Их; фотоаппараттары ла юҡ шул, исмаһам. Был гүзәллекте тел менән аңлатып буламы ла, бөтәһен дә хәтерҙә ҡалдырырға мөмкинме!

Хәсән түҙмәне, ҡояш саҡ-саҡ төшлөктән уҙҙа ла:

— Әллә ошонда туҡталайыҡмы? Тирә-яҡ менән танышыр инек. Ғәжәп урындар бит! — тип Илнурға өндәште. Тегеһе иптәштәренә күҙ ташланы. Кәмәне алмашлап ишә-ишә, ярайһы уҡ арығайнылар инде. Хәсәндең тәҡдименә йөҙҙәре яҡтырып китте. Быны күреп, капитан ишкәксе Әмингә шунда уҡ әмер бирҙе:

— Боцман, «Дункан»ды причалға, анауы һөҙәгерәк ярға йүнәлт.

«Карап» ярға килеп төртөлгәс тә, һикерешеп төштөләр ҙә уны, ҡороға тарта биреп, йыуан ғына тамырға бәйләп ҡуйҙылар. Унан яр өҫтөнә менделәр. Был урында урман бер аҙ артҡа сигенгән дә ҙур булмаған аҡлан барлыҡҡа килгән. Унда клевер, кәрешкә, ҡыңғырау сәскә, ҡыяҡ үләндәр үҫкән. Араларында балтырған, айыу көпшәләре күренә.

Илнур, ҡарашы менән тирә-яҡты байҡап:

— Утын күп, балыҡ тотоу өсөн уңайлы, ашты балтырған ҡушып бешерергә мөмкин, — тине.

Оҙаҡламай яр буйында усаҡ ҡабынды. Малайҙарҙың һөйләшкән тауыштары тирә-йүнде йәнләндереп ебәрҙе. Үлән араһында, еҫкәнеп, быршылдап, Аҡтырнаҡ йөрөп ята. Күрәһең, унда ниндәйҙер йән эйәһе бар ине.

Малайҙар балтырған йыйып килтергәс, Сафа уйға ҡалды: нисек бешерергә? Шулай ҙа йүнен тапты. Башта ваҡлап туралған балтырғанды ныҡлап ҡайнатты, бешеп сыға яҙғас ҡына, һауытҡа пакетлы ашты һалды. Бына тигән балтырған һурпаһы килде лә сыҡты. Малайҙар маҡтай-маҡтай ашаны.

Капитан Сафаға ҡарап күҙ ҡыҫып ҡуйҙы.

— Ашыңа — «бишле». Һауыт-һабаны йыйыштырайыҡ та ҡармаҡ һалырға төшәйек. Кискелеккә — балыҡ булыр.

Хәсән дә урынынан күтәрелде:

— Рәфкәт, әйҙә бер аҙ урман, ҡош-ҡорт күреп ҡайтабыҙ.

Рәфкәт һикереп торҙо ла Әмингә төбәлде.

— Һин бараһыңмы?

Тегеһе өндәшмәне. Хәсән менән Рәфкәт китергә ҡуҙғалғас ҡына, урынынан тороп, уларға әйәрҙе. Өс малай иҫке бер һуҡмаҡ менән урман эсенә атланы. Барған һайын ағастар ҡуйыра төштө. Йүкә сәскәләренән бал еҫе аңҡый. Тармаҡланып үҫкән мөһабәт имәндәр, киң япраҡтарына

төрөнгән зифа сағандар, аҡһыл ҡытыршы ҡабыҡлы ҡарамалар, олпат ағастар араһына һыйынып ултырған йыла, муйылдар һәр ҡайһыһы тәбиғәттте күркәмләндерә, тулыландыра ине. Серәкәйҙәр тынғы бирмәһә лә, малайҙар бында үҙҙәрен, нисектер, иркенерәк, күңеллерәк хис итте.

Хәсән ағастарға ҡарап килһә, Рәфҡәт ҡоштарҙы күҙәтте. Әмин дә тәбиғәткә вайымһыҙ түгел. Ул да уның биҙәктәрен күрә, тыштан һиҙҙереп бармаһа ла, үҙенсә һоҡлана ине.

Бына Рәфҡәт, тармаҡлы ҡарт ҡараманың ҡороған ботағында һикерәндәп йөрөгән ҡара башлы йәшкелт ҡошсоҡҡа күрһәтеп:

— Ана, ҡарабаш турғай, — тине.

— Беләбеҙ, өй тирәһендә лә була ул, — тине Әмин.

Шунда Рәфҡәт ниндәйҙер ҡоштоң «Үә-әт, үә-әт» тигән һымаҡ яңғырауыҡлы тауышын ишетеп, ҡолаҡ һалып торҙо ла ҡыуанғандай ҡыскырып ебәрҙе:

— Үтәбикә-иркәбикә!

Хәсән элеге ҡошто әҙләп:

— Тауышы шәп тә, үҙе күренмәй, — тине.

— Осраһа, күрһәтермен, — тине Рәфҡәт, тирә-яҡҡа ҡараныуын дауам итеп. — Һарғылт ҡына матур бер ҡош ул. Һарығаш та тиҙәр уны. Мин йырсы барҡылдыҡтарҙы ла, себен, таҙ турғайҙарын да таныйым. Ана, имән олоно буйлап бер ҡош шыуышып йөрөй. Күрәһегеҙме?

— Эйе, эйе, — тине Әмин дә, — нисек йығы-

лып төшмәй? Үҙе бәләкәй генә, беҙ кеүек сукышлы...

— Шыуышҡаҡ тигән ҡош ул.

Малайҙар ҡоштар менән мауығып бөтә донъяларын оноттолар, урманға һаман эскәрәк инделәр, хатта һуҡмаҡтан тайпылыуҙарын да һиҙмәнеләр.

Ә Рәфҡәткә ҡоштар тураһында һөйләргә генә булһын: әллә ниндәй сипылдыҡ, һылыуҡас, алағанат, ҡыҙылгөйроҡтар тураһында бөтә белгәндәрен сығарып һалыр. Ҡайһы берҙәрен күрһәтеп, тауыштарын да тыңлатты. Уның ҡоштар донъяһын яҡшы белеүенә Хәсән көнләшеп ҡуйҙы.

Малайҙар бер мәл, ҡайтырға тейешлектәрен ҡапыл иҫтәренә төшөрөп, тирә-яҡтарына күҙ һалһалар, ҡайҙа килеп сыҡҡандарын да айыра алманылар.

— Юлыбыҙ, моғайын, был яҡҡалыр, — тине Хәсән, ҡулын һуҙып.

— Әйттең һүҙ, — тине Әмин асыуланғандай, — унда түгел, бына был яҡҡа беҙҙең ҡайтыр юл.

Рәфҡәт ике малайға ла аптырап ҡараны.

— Туҡтағыҙ әле, малайҙар, һеҙ ни һөйләйһегеҙ, минеңсә, юл был яҡҡа бит.

— Их, Илнурҙан, исмаһам, компас та алып китмәгәнбеҙ бит.

Өс малай уртаҡ фекергә килә алмай, ошо урында бер аҙ тапанғас, ҡояшҡа күҙ һалмаҡсы булды. Тик күкте болот ҡаплағайны шул. Ориен-

тирға өмөт юғалды. Төрлө ҡоштар тауышынан һәм ағас япраҡтарының елгә ҡыштырлауынан башҡа бер ни ҙә ишетелмәне.

Малайҙар, бәлки, Ҡалманай буйына барып сығырбыҙ әле, тип Хәсән күрһәткән яҡҡа атланы. Бындай осраҡта кемгә лә булһа берәүгә буйһонорға кәрәк бит.

Әмин, Рәфҡәткә асыуланып, төкөрөнөп ҡуйҙы.

— Һинең әкиәтеңде тыңлап...

— Ниндәй әкиәт? Ҡоштар — иң матур йән әйәләре...

Әмин, етте тигәндәй, ҡулын һелтәне.

Эйе, урман серле шул ул. Һәр аҙымыңа күҙ-ҡолаҡ булып йөрөмәһәң, нисек аҙашҡаныңды һиҙмәй ҙә ҡалаһың...

Байтаҡ барғас, малайҙар, туҡталып, тирәйүндәренә ҡаранып алдылар. Урман ҡуйыра, ҡараңғылана төштө. Кис тә яҡынлашалыр инде. Малайҙарҙың йөҙҙәренә борсолоу сыҡты.

— Юҡ, беҙ һаман эскә инәбеҙҙер,— тине Хәсән, көрһөнөп.

— Улайһа, кирегә китәйек, — тине Әмин, ысынлап ҡайғыға ҡалып.

Рәфҡәттә лә шунда уҡ төҫ ине.

— Әйҙәгеҙ, берәй юлға йәки һуҡмаҡҡа барып сығырбыҙ әле.

Ел көсәйҙе шикелле, урман шомло шауланы. Ябалаҡтың, «а-һа-һа» тип, шаҡылдап көлгәндәй тауышы яңғыраны. Ямғыр һибәләй башланы. Хәсән үҙенең ғәмһеҙлеге, урманға инеү юлын бил-

дәләй бармауы өсөн үкенә ине. Әмин иһә малайҙарға эйәреүенә, гөмүмән, был сәйәхәткә ниңә сығыуына үртәнеп бөтә алманы. Ауылда тороп ҡына ҡалһа, рәхәтләнеп ял итер, туйғансы йоҡлар, Ҡалманайҙа һыу инер, гер, утын түмәре күтәреп, көсөн арттырыр ине. Бәлки, пароходҡа, ағаһы янына ла юл тотор ине.

Рәфҡәт, борсолһа ла, юлды табасаҡтарына ышанды. «Их, тиҙерәк ҡояш сыҡһа икән», — тип уйланы.

Урман эсләп йөрөй торғас, бер мәл Хәсән үҙҙәренән ун-ун биш аҙымда ваҡ ағастарҙың ҡапыл һелкенешеп ҡуйыуына иғтибар итеп, шып туҡтаны. Уға ҡарап, башҡалар ҙа атламаҫ булды. Малайҙар бөтәһе бер юлы ваҡ ағастар араһынан ҡалҡып торған айыу башын күреп күҙҙәре маңлайҙарына менде. «Сигенергә!» — тип бышылданы Хәсән, ҡаушауҙан телен саҡ-саҡ әйләндереп. Әмин шунда уҡ боролдо ла йүгереп тә китте. Уның артынан Рәфҡәт ташланды. Айыу, малайҙарҙың ығы-зығыһын күреп, үкереп ебәрҙе. Әкрен-әкрен артҡа сигенгән Хәсән уның эргәһендә өйрөлгән бәләкәй генә балаһын да шәйләп алды. Бындай айыуҙың уҫаллығы хаҡында кемдәндер ишеткәнен хәтерләп, ҡаушауы арта төштө. Көтмәгәндә бер ағасҡа аяғы әләгеп, ҡоланы ла ҡуйҙы һәм шунда айыуҙың үҙенә табан ыңғайлағанын һиҙенеп, һикереп торҙо ла артына ҡарана-ҡарана йүгереп китте. Ә айыу уны әҙәрлекләп юрта уҡ башланы. Улай ғына түгел, малайға ул яҡынлаша

бара ине шикелле. Хәсән аҙымын тиҙләтә төштө, шул ыңғайға йыртҡысҡа күҙ ташлау өсөн башын борҙо һәм ҡапыл, ярҙан һикергәндәй, түбәнгә осто. Ярай әле, ниндәйҙер көс менән артҡа саңҡайып өлгөрҙө һәм соҡор төбөндәге иҫке япраҡтар өҫтөнә аяғы менән килеп төштө. Шунда уҡ уның танауына серек ағас еҫе бәрелде. Ярайһы уҡ тәрән был соҡорҙоң стеналарында аркысторҡос әллә күпме тамырҙар күҙгә ташланды.

Шул саҡ өҫтә ағастар ҡыштырлағаны, айыуҙың ырылдап ҡуйыуы ишетелде. Ул, соҡор ситенә килеп етеп, аҫҡа ҡараны. Төптә, ағас тамырҙары аҫтында, стенаға терәлеп, ҡатып ҡалған малайҙы күрмәһә лә, еҫен һиҙепме, тағы ырылдап ҡуйҙы. Унан соҡор ситендәге ҡыуаҡтарҙы ҡыштырлатып бер тирәлә өйрөлдө. Дүрт мөйөшлө, оло ғына өй урыны ҡаҙҙар был соҡорҙоң ҡаршы стенаһы ишелеп һөҙәкләнгәйне. Шул яҡҡа сыҡҡа, айыу Хәсән янына иркенләп төшәсәк. Малай йыртҡыстың һәр аҙымын тойоп ултырҙы. Был тотҡонлоҡтан тиҙерәк ҡотолғоһо килде. «Ah, бынан һыпыртһа икән был мәхлүк! Аҫылынып торған анау тамырҙарға йәбешеп, һә тигәнсе өҫкә күтәрелер инем», — тип уйланы Хәсән. Ул арала айыу, шаян балаһын юллапмы, ситкәрәк китте. Ләкин Хәсән сығырға ашыҡманы. Ул тыныслана төштө. Ниҙәлер атаһы менән әсәһен хәтеренә төшөрҙә, йөрәге ҡысылып ҡуйҙы. Улар малайҙарының бында ултырғаныҡ белһәләр, ни эшләрҙәр ине икән? Икеһе лә, айырыуса әсәһе, уның өсөн

үлеп тора бит. Дөрөҫ, атаһы бер аҙ ҡырыҫырақ, аҙ һүҙле. Әммә Хәсән өсөн бөтәһен дә эшләргә әҙер. Бынау «карап»ты яһарға тақта кәрәк булғас, аҡаһы күршеләренән һорап алып бирҙе. Ә әсәһе? Тәмле-татлы аштарҙы кем бешерә? Ул. Бер һиҙәбе өҙөлөп төшһә лә, кем күрә һала? Ул.

Әмин менән Рәфҡәт айыуҙың Хәсән артынан китеүен күреп ҡалғайны. Алыҫ йүгермәнеләр, йыуан ғына саған төбөндә тукталдылар ҙа бер-береһенә борсоулы ҡараш ташланылар.

— Хәсәнгә ярҙам итәһе ине, — тине Рәфҡәт.

Тегеһе яурынын йыйырҙы.

— Нисек ярҙам итәһең? Күҫәк күтәреп айыу ҡаршыһына барайыҡмы ни?

Рәфҡәт уйға ҡалып торҙо ла:

— Ҡыҫҡырайыҡ, берәй таяҡ менән аҡаҫҡа һуғайыҡ, — тине.

— Айыу үҙебеҙгә ташланһа?

— Улайһа, бына саған башына менәйек.

Рәфҡәт шулай тигәс тә, сағанды ҡосаҡлап алды ла юғарыға үрмәләй ҙә башланы. Шыма олон буйлап бер аҙ күтәрелгәс, беренсе ботаҡҡа баҫты ла иптәшенә өндәште:

— Берәй таяҡ килтер әле.

Әмин ныҡ ҡына бер ҡоро ҡарама ботағын табып, Рәфҡәткә һуҙҙы.

— Мә, мин менгәнсе тауышланмай тор.

Әмин саған олоно буйлап үрмәләй башланы, тик бер аҙ күтәрелгәс, кире шыуып төштө, һәләте етмәне.

— Кыйын икән дә был ағас буйлап үрмәләү, — тине ул, аптырап.

— Кыйын шул, утын түмәре күтәреү ише генә түгел, — тине тегеһе.

Әмин, устарын төкөрөкләп, йәнә саганды ҡосаҡланы. Был юлы ул, инде шыуып төштөм тигәндә, Рәфҡәт баҫҡан ботаҡҡа саҡ тотоноп өлгөрҙә.

Улар юғарыраҡ күтәрелделәр ҙә бер ауыҙҙан ҡысҡырып та ебәрҙеләр.

— А-ау-у...

— А-а-а...

Рәфҡәт таяғы менән саған олонона һуғып шаҡылдата башланы.

Соҡор төбөндә ултырған Хәсән быны ишеттте һәм иптәштәренең уны онотмауын, ҡотҡарырға тырышыуҙарын аңланы. Әммә айыу тап шул саҡта соҡорҙоң ҡаршы яғынан килеп сыҡты һәм Хәсән янына төшөргә самаланы. Тик әлеге ҡысҡырыу, шаҡылдатыу уны һиҫкәндерҙе. Етмәһә, шунда уҡ әт өргәне, шуның артынса уҡ кемдеңдер нескәрәк тауыш менән: «Һа-һа-һа», — тип һуҙып ҡысҡырғаны ишетелде. Айыуҙы, тауыштарҙан бигерәк, әт өрөүе тынғыһыҙланы булһа кәрәк. Ул соҡор ситенән ситкәрәк тайпылып, ҡолаҡ һалғандай башын әйеберәк торҙо, ҡәнәғәтһеҙлек менән ырылдап ҡуйҙы ла әкрен генә был тирәнән тайыу яғын ҡараны. Был ваҡытта: «Вау-вау...» — тигән тауыш йәнәшәлә генә яңғыраны. Хәсән быныҡ Аҡтырнаҡ булыуына төшөндө. Ә

эт соҡор эргәһендә туҡтап та тормай айыу киткән яҡҡа сапты. Уның ярһып өрөүе шаҡтай алыҫтан ишетелде.

Хәсән тамырҙарға тотоноп өҫкә күтәрелде. Тап шул ваҡыт уның ҡаршыһына Сафа килеп сыҡты.

— Ни булды һеҙгә? Ни эшләп ҡайтмайһығыҙ?

— Аҙаштыҡ. Етмәһә, балалы айыуға осраныҡ, — тине Хәсән һәм үҙҙәре менән булган хәлдәрҙе һөйләп бирҙе.

Сафа, аптырап та, ғәжәпләнеп тә:

— Ярай эле, Илнур һеҙҙе юлларға мине Аҡтырнаҡ менән ебәрҙе, — тине.

Шул саҡ бер яҡтан Әмин менән Рәфҡәттең, икенсе яҡтан Аҡтырнаҡтың килгәне күренде. Хәсән иптәштәрен һәм этте ҡосаҡ йәйеп ҡаршы алды. Был минутта уға гел асыуын килтергән, кәйефен ҡырған Әмин дә яҡын булып тойолдо. Ул иң башта, Аҡтырнаҡтың йөнөнән һыпырып:

— Ай-һай батыр эт икәнһең, һин, — тине.

Аҙашып йөрөгәндә һәм ағас башында ултырғанда: «Был бәләнән ҡотолһам, ҡайтып ҡына китәм инде», — тип үҙен үҙе нығытҡан Әмин, иптәштәренең шат ҡиәфәттәрен күргәс, бер һүҙ әә өндәшмәне, телен тешләне.

Малайҙар элеге соҡорҙо, тирә-йүнде ҡарап сыҡтылар. Йәнә өс һайыраҡ соҡор таптылар. Былары, ситтәре ишелеп, иҫке япраҡтар төшөп, ныҡ ҡына күмелгәйне. «Былар ниндәй соҡорҙар

икән?» — тип, малайҙар аптырашып торғанда, арырақ йөрөгән Сафа ҡапыл ҡысҡырып ебәрмәһенме!

— Килегеҙ әле, килегеҙ!

Йүгерешеп барһалар, ни күрһәндәр, бер тимер ҡаҙыҡ ултыртылған, уға ҡалай беркетеп, сокоп, шундай һүҙҙәр яҙылған: «Был урында 1919 йылдың апрелендә Алтынсуриндың партизан отряды урынлашҡан булған».

Иң беренсе булып Хәсән телгә килде.

— Фәжәп ергә юлыҡтыҡ беҙ, — тине ул, ҡыуанып.

Рәфкәт, ҡапыл уйға ҡалып:

— Шундай ергә килеп сығырбыҙ тип кем уилаған! — тине.

— Эйе, — тине Хәсән дә, — ошо урынды күреү өсөн генә лә походҡа сығырға мөмкин. Бәлки, минең ҡарт олатай Алтынсурин отрядында булғандыр әле.

Әминдең һарыуы ҡайнай башланы.

— Нимәгә иҫегеҙ китте инде. Оҙаҡламай ҡараңғы төшә бит.

Уға бер кем өндәшмәне. Ысынлап та, көндөң кискә ауышыуын һәр кем тойҙо. Шунда уҡ Сафа, иптәштәрен ашыҡтырып:

— Әйҙәгеҙ, Илнур борсола торғандыр, — тине.

* * *

Малайҙар үҙҙәрен урман эсенә алып ингән һуҡмаҡтан эллә ни алыҫ та түгел, бер ярты саҡ-

рымда ғына йөрөгәндәр икән. Улар төйәккә килеп еткәндә, ҡояш күптән байығайны инде. Быны көндөң һүрәнләнеүенә, томһаланыуына ҡарап та айырырға мөмкин ине. Ел көсәйгәйне, Ҡалманай, тынғыһыҙланып, аҡ күбекле тулҡындарын ярға ҡаҡты.

Илнур ҡыуыш ҡороп маташа ине. Башта иптәштәренә асыуланып:

— Ҡайҙа шул тиклем оҙаҡ йөрөйһөгөҙ? — тип өндәшһә лә, ни булғанын белгәс: «Әлдә ул был бәләһеҙ ҡотолғандар», — тип ҡыуанып ҡуйҙы, унан малайҙарҙы ныҡлап киҫәтте: — Бынан һуң бер-беребеҙҙән айырылмаҫҡа, урман төпкөлөнә китмәҫкә!

Илнур ҡыуыштың ҡорамаһын яһап бөткәйне. Уны ышыҡларға, нимә менәндер көпләргә кәрәк ине. Капитан елме, дауылмы ҡайырып төшөргән ҙур саған ботағына күрһәтеп:

— Япраҡтары бер аҙ шиңә башлаһа ла, әшкә ярарлыҡ, — тине лә элеге ботаҡ янына барып, ҡулындағы бәләкәй балтаһы менән уны тунай ҙа башланы һәм: — Ҡыуышты яҡшылап япһаҡ, арлы-бирле ямғырҙан да, серәкәйҙәрҙән дә ҡотоласаҡбыҙ, — тип ҡуйҙы.

Ысынлап та, саған ботаҡтары менән ҡаплатҡас, ҡыуыш ярайһы килеп сыҡты. Уның алдында дөрләп усаҡ ҡабынды. Сафа картуф менән балыҡ һурпаһы бешерҙе. Шуны икмәк менән һуҡҡас, малайҙарҙың кәйефе күтәрелеп китте. Быға тиклем ике төн серәкәйҙәрҙән яфаланып йүнләп

һөйләшә лә алманылар. Бөгөн тыныс ине. Хәсән Урал батыр тураһында әкиәтте һөйләй башлағас, бөтәһе лә тынып ҡалды. Шулгәндең, атаһының һүҙен тотмай, бәләгә тарыуы, йә айыуға, йә бүрегә, йә арыҫланға әйләнеп, урман-тауҙарҙы ҡыҙырып йөрөүе, унан күлгә батып һәләк булыуы уларҙы бошондорҙо, ә Урал батырҙың тиңдәшһеҙ бәһләүән булып үҫеүе, Йәншишмәне ҡурсып, дейеүҙәр менән ҡаһармандарса алышыуы, үлер алдынан да Йәншишмәнең һыуын үҙе әсмәй, тыуған ергә бөркөүе һоҡландырҙы. Күҙе йомолоп барһа ла, Сафа тойғоһон белдермәй булдыра алманы:

— Вәт, исмаһам, әкиәт! Урал батыр кеүек булһаң ине!

— Бул! — тип көлөп ҡуйҙы Әмин.

— Ярай, малайҙар, йоҡлайыҡ, — тине Илнур, иҫнәп.

Ә дежурный Хәсәндең генә йоҡларға хаҡы юҡ ине. Хәйер, уға иптәшкә Аҡтырнаҡ бар. Малай усаҡҡа утын өҫтәне лә бер килке эттe иркәләп йыуанды. Унан усаҡтан ситкә, урман яғына күҙе төшөп, шомланып ҡуйҙы. Елгә яп-раҡтарын ҡыштырлатыусы, шығырлаусы ағастар араһы ҡап-ҡараңғы, эллә ниндәй серҙәр менән тулылыр һымаҡ ине. Ен-пәрейҙәр, албаҫты һәм мәскәй әбейҙәр тураһындағы әкиәттәр, өлкән йәштәге кешеләрҙең һөйләгәндәре хәтеренә килеп, нисектер, ҡалтыранып ҡуйҙы Хәсән. Ләкин шунда уҡ үҙен ҡулға алып, былар хаҡында

оноторға тырышты. Юҡ, күңеленә кереп, бөтә хыялыңды биләп алған нәмәләрҙән ҡотолоп булмы ни... Шулай ҙа көндөҙ үҙен айыуҙан ҡоткарған баҙ иҫенә төшкәс, уйҙары көтмәгәндә икенсе йүнәлештә аға башланы.

Көрәктәр, балталар менән, тирләп-бешеп землянка ҡаҙыусы тиҫтәләгән кешеләр күҙ алдына килде. Ер ҡаты, өҫтәүенә, тамыр-томорҙар ҡамасаулай. Әммә партизандар ныҡыштар, ҡаҙа башлаған соҡорҙо тәрәнәйткәндән-тәрәнәйтә баралар. Шунан уны үҙҙәре йәшәрлек, ел-ямғыр теймәҫлек, һалҡында өшөмәҫлек хәлгә килтергәндәрҙәр...

Ә бына уларҙың тәрән бер соҡоро бөгөн уға, Хәсәнгә, бәләнән ҡотолорға ярҙам итте. Рәхмәт һеҙгә, партизан-олатайҙар!

Был баҙ нимә булды икән? Склад-фәләндер... Унда аҙыҡ-түлек, ҡорал һәм кәрәк-яраҡтар һаҡланғандыр. Шуға күрә быныһын тәрәнерәк итеп ҡаҙығандарҙыр...

Хәсән, уйланып ултырып, утыны янып бөткән усағын да онотто. Улай ғына ла түгел, йоҡо уны ла яғаһынан бөрөп ала башланы. Малай, уға ҡаршылыҡ күрһәтеп, күҙҙәрен асырға тырышып ҡараны. Әммә улар үҙҙәренән-үҙҙәре йомолдо. «Әҙ генә баш терәп алғандан бер ни ҙә булмаҫ әле», — тигән уй, томан эсендә аҙ ғына сағылып киткән яҡтылыҡ шикелле, ярым йоҡоло аңын ярып үтте, һәм малайҙың башы ҡыуыш «стенаһына» ауышып төштө.

Ә был төндө Әмин керпек ҡаҡманы. Уйланды ла уйланды. Ул да ауылды, үҙҙәренең өйҙәрен һағынды. Унан да бигерәк, диңгеҙ тулҡындары, көньяҡ ҡояшы туҡтауһыҙ күңелен ҡытыҡланы. Был юлға сығыуына үкенде. «Их, мин — иҫәр, — тине ул эсенән, — ниңә Ҡалманай тамағына барырға айырым команда төҙөмәнем икән? Ни эшләп шул уй элегерәк башҡа килмәгән? Хәҙер ҙә һуң түгел. Тик был малайҙарҙы нисек кире бороло́рға мәжбүр итергә?.. Былай эт һуғарып йөрөү тамам туйҙырҙы инде».

Таңға табан ел баҫылды. Болоттар таралып, күк йөҙөндә йондоҙҙар йым-йым итте. Шуны ғына көткән кеүек, безелдәшеп, эллә ҡайҙарҙан серәкәйҙәр ҡыуыш эсенә лә килеп инде. Уларҙың «моңдары» ҡыуыш эсендәге малайҙарҙың да ҡолаҡ төптәрендә яңғыраны. Тик ул бөгөн уларҙы уята алманы. Ә йоҡоһоҙ Әминде тынғыһыҙланы. Ул башын саҡ ҡына күтәреп ҡараны ла ҡыуыш ауыҙында йоҡлап ултырған Хәсәнгә күҙе төштө. «Йоҡлай шикелле», — тип уйланы ул һәм шунда башына ҡыйыу фекер килде. Әмин ипләп кенә ҡыуыштан сыҡты, тирә-яҡҡа ҡарап алды. Усаҡ һүнгән, Хәсән ысынлап йоҡлап киткән. Тик Аҡтырнаҡ ҡына уяулығын юғалтмаған. Әминдең ҡыштырлауына, ҡолаҡтарын торғоҙоп, баҡтын күтәрҙе лә киренән алғы тәпәйҙәре араһына төшөрҙө. Уның был хәрәкәтенән, үҙ кешеһең эле, серем итһәм дә була, тигәнде аңларға мөмкин ине. Хәйер, Әмин уға иғтибар ҙа итмәне. Уның

ҡарашы Хәсәнгә туҡталды. «Әһә, йоҡла, йоҡла, — тине ул, зәһәр көлөмһөрәп. — Айыу тырнағына әләгә яҙһаң да, ҡайтырға теләк белдермәгәйнең, бөгөн, бәлки, башҡасараҡ уйларһың».

Әмин һаҡлыҡ менән генә яр аҫтына төштө лә «карап» янына килде. «Етте һиңә беҙҙе яфаларға, ана бара юлың», — тип, бауын сисеп, кәмәне Ҡалманай эсенә этеп ебәрҙе. Ул, гүйә, теләр-теләмәҫ кенә ағым ыңғайына йөҙөп китте.

Әмин иһә һаҡлыҡ менән генә ҡыуышҡа инеп ятты. Аҡтырнаҡ шиксел ҡарап ҡуйһа ла, тауыш сығарманы. Ә ҡыуыш эсендәге малайҙар, танауҙары тирәһендә серәкәйҙәр ҡайнашыуҙан тынғыһыҙланып, бошорғоланып, бер ни һиҙмәй йоҡлай бирҙе.

«МОРОН ТӨШӨРМӘГЕҘ, МАЛАЙҘАРҺ»

Хәсән, иртәнге һалҡынға өшәнеп, уянып китте. Яҡтырғайны. Ул, ҡыуыштан сығып, тирәяғына ҡаранып алды. Донъя серле лә, күркәм дә булып күренде уға. Бына әргәлә генә үләндәрҙә гәлсәр мәрйендәр һымаҡ ысыҡтар йымылдай. Урман эсенән ниндәйҙер ҡоштарҙың бер-береһен уҙҙырырға тырышҡандай сутылдашҡаны ишетелде. Һыу өҫтөнә яңы ғына һауылған күбекле һөттәй аҡ томан йәйелгән. Йылға аръяғындағы ҙур булмаған үркәс тауҙарҙы ҡаплаған урмандар ҙа шыйыҡ аҡ томанға уранған. Ә тауҙар аръяғында көнсығыш яҡ үтә ҙур байраҡтай алһыу төҫкә мансылған.

Хәсән тәбиғәттең иртәнге хозурлығына һоҡланып ҡарап торҙо. «Аһ, ошо матурлыҡтарҙы түкмәй-сәсмәй картинаға төшөрөп алһаң ине», — тип уйланы ул. Шунда урман яғынан килеп сыҡҡан Аҡтырнаҡтың ҡыштыр-ҡыштыр йөрөүе уның уйҙарын бүлде. Ул артына боролоп ҡараны ла һүнгән усаҡты күрҙе. Сүгәләп, бер сыбыҡ менән уның көлөн болғатты. Әнә осондай ғына осҡондар күренгеләй ине әле. Хәсән улар өҫтөнә ҡоро сыбыҡ-сабыҡ ташланы ла усаҡҡа өргөләне. Тиҙҙән усаҡ, тирә-йүнгә һорғолт төтөн таратып, ҡабынып китте. Донъя йәнләнеп, тағы ла йәмләнеп киткәндәй тойолдо Хәсәнгә. Ул ялҡын өҫтөнә утындар ташланы ла, рюкзагынан блокнотын алып, кисәге көн тураһында ҡөндәлек яҙа башланы. Үҙҙәренең айыуға юлығыуҙарын һүрәтләгәс, партизандар төйәге булған урынды тасуирланы. Унан: «Алтынсурин тураһында ишеткәйнем дә шикелле. Тик кемдән? Атайымдан түгелме икән? Ул нимәлер үҙенең олатаһы, йәғни минең олатайҙың атаһы хаҡында ла һөйләгәйне шул. Ул да партизан булып, Ҡалманай буйында һуғышҡан бит инде. Их, ғәмһеҙлек! Атайымдан ошо хаҡта ентекләп һорашаһы ҡалған. Бәлки, мине йыртҡыс тырнағынан ҡотҡарған соҡорҙо ҡарт олатайым һәм уның ҡоралдаштары ҡаҙығандыр», — тип яҙҙы.

Хәсән блокнотын ҡабат рюкзакка һалғанда, Илнур ҡыуыштан килеп сыҡты ла һүҙһеҙ-ниһеҙ яр буйына барып баҫты. Ул да һыу өҫтөндә ап-

аҡ мамыҡ шикелле түшәлеп ятҡан томанға тәжәпләнеп күҙҙәрен текләне. Шул «мамыҡ»ҡа салҡан ятып, ләззәтләнеп булалыр һымаҡ тойолдо уға. Әммә уны был тойғо оҙаҡ биләмәне. Илнур «карап»ты күргә теләп, ҡарашын яр аҫтына текләне һәм, аптырап, ҡыскырып ебәрҙе:

— «Дункан» ҡайҙа булған?»

Илнур эргәһенә Хәсән йүгереп килде.

— Бәй-бәй... Кистән көслө ел сыҡҡайны. Әллә тулҡын ҡағып, «Дункан»ды алып киттеме икән?

— Кем бәйләп ҡуйғайны?

Хәсән уйлап торҙо ла:

— Сафа, буғай... — тине.

— Йүнләп бәйләмәгәндер...

Был һөйләшеүҙе ишетеп ятҡан Сафа ҡыуыштан атылып килеп сыҡты.

— Мин ныҡлап бәйләгән кеүек инем. Төндә берәйһе килеп алып китмәнеме икән?

Илнур уға теклә не:

— Улай булһа, Хәсән йоклаған осраҡта ла, Аҡтырнаҡ һиҙмәҫ инеме ни?

Сафаның этенә күләгә төшөргөһө килмәне.

— Юҡ, һиҙер ине, — тине ул. — Ихтимал, мин хөртөрәк бәйләгәнмендер.

Уның күңелендә бер иптәшенә ҡарата шиге булһа ла, өндәшмәне. Ҡыуыштан килеп сыҡҡан Рәфҡәт тә был хәлгә аптыраны, ни уйларға ла белмәне. Яр буйындағы иптәштәренең шау-шыуына уянып, ҡолаҡтарын ҡарпайтып тыңлап ят-

ҡан Әмин Илнурҙың хәл иткес һүҙен көттө. Уға ҡалһа, капитан бына-бына: «Ни эшләйбеҙ? «Карап» булмағас, әллә ҡайтыр яҡҡа һыпыртабыҙмы?» — тиер һымаҡ тойолдо. Ләкин Илнур ундай һүҙҙе әйтмәне, көрһөнөп, уйға ҡалып торған иптәштәренә йылмайып ҡараны.

— Морон төшөрмәгеҙ, малайҙар! Беҙ үҙ ғүмеребеҙҙә беренсе тапҡыр сәйәхәткә сыҡтыҡ. Еңел түгел. Ләкин беҙ Ҡалманай башына барып етергә тейешбеҙ. Йәйәүләп булһа ла... Ихтимал, киләсәктә беҙ ҙур-ҙур йылғаларҙы ла, бейек тауҙарҙы ла, диңгеҙҙәрҙе лә, хатта океандарҙы ла күрербеҙ. Әммә мин шулай уйлайым: ошо сәйәхәт иң иҫтәлекле һе, иң ҡәҙерле һе булып ҡалыр, моғайын. Ә хәҙер, Хәсән — һин, Рәфҡәт — һин, Ҡалманай буйлап түбәнгә йүгерегеҙ. «Дункан» ағып китһә, берәй ерҙә тотолорға тейеш...

Хәсән менән Рәфҡәт шунда уҡ яр буйлап йән-фарманға йүгереп киттеләр. Сафа сәй ҡайнатыуға, йылға өҫтөндә кәмәлә икәү күренде. Улар алыҫтан уҡ ҡул болғаны. Йәнәһе, беҙ — Хәсән менән Рәфҡәт, «карап»ты таптыҡ. Сафа ҡыуаныстан: «Ура!» — тип ҡыскырып ебәрҙе.

Илнур уға ҡушылмаһа ла, иркен тын алды. Тик Әминдең йөҙөндә генә ҡыуаныс күренмәне. «Их, барып сыҡманы», — тип үкенде ул.

ӘМИН АСЫУЛЫ

Малайҙар юлға иртә ҡуҙғалды. Хәл йыйғайнылар инде. Алға ярайһы уҡ йәһәт йөҙҙөләр.

Әмин «карап»ты бөтә көсөнә ҡайырып-ҡайырып иште. Илнур, уға ҡарап: «Был да тырыша башланы шикелле», — тип уйланы. Ул Әминдең һарыуы ҡайнауын, асыуын ҡайҙа ҡуйырға белмәй, ишкәктәргә йүнәлтеүен башына ла килтермәй ине.

Рәфҡәт, ярҙан һыуға ауған өйәнке тамыры өҫтөндә ултырған аҡ түшле һорғолт бер ҡошсоҡҡа күрһәтеп:

— Ана, һыу турғайы, — тине. — Ул бик оҫта сума...

— Һыуғамы? — тип һораны Сафа, ғәжәпләнеп.

— Һыуға булмай ҡайҙа булһын, — тине Рәфҡәт.

— Унда ни эшләй һуң ул?

— Аҙыҡ эҙләй. Һыуҙағы төрлө ҡорттар, селбәрәләр менән туҡлана ул.

— Юҡ-барҙы һөйләп килмә эле,— тине Әмин, асыуын тышҡа сығарып.— Һинең әкиәтеңде тыңлап, бәләгә бер тарый яҙҙыҡ бит инде.

Рәфҡәттең кәйефе ҡырылды.

— Мин юҡ-барҙы һөйләмәйем, — тине ул, үҙенә хас булмағанса, киҫкенлек менән. — Һин бына, юҡ-барҙы уйлап, беҙгә бәлә теләп йөрөйһөңдөр.

«Был минең хаҡта артығын лыҡылдап ташламаһын тағы», — тип, шикләнеп, Әмин телен тешләне, әммә асыуы һаман баҫылманы. Ярҙан һыуға ауған ҡарамаға барып тотолған «карап»ты

иптәштәренең табып алып ҡайтыуы уның күңелендә ҡабат-ҡабат ярһыу уята ине.

Ҡуҙғалып киткәс, оҙаҡ та барманылар, бер ҙур ғына ауыл тапҡырынан үттеләр. Шаҡтай иртә булыуға ҡарамаҫтан, яр буйында бер нисә балыҡсы күҙгә салынды. Береһе, һоро костюм, эшләпә кейгән егет кеше, «Дункан»ға, ундағы малайҙарға ҡарап, йылмайып, ҡул болғап ҡалды. Илнурҙың быға тағы күңеле кителеп ҡуйҙы. Ул ауылдар тапҡырында малайҙарҙың да, өлкәндәрҙең дә үҙҙәренә ғәжәпләнеп, ҡыҙыҡһынып, хатта көнләшеп ҡарауҙарын, ирекһеҙҙән йылмайып ҡуйыуҙарын аңламай ине, әлбиттә.

Ауылды үтеп китеүгә, Ҡалманайҙың йәнә бер ҡушылдығы күренде.

— Их, шунда ҡармаҡ һалаһы ине,— тине Сафа, ҡушылдыҡҡа төбәлеп.

— Һиңә бары шул ғына булһын, ҡиблаһыҙ,— тине Әмин, уны тиргәп. Тик тегеһе уға бер һүҙ ҙә өндәшмәне.

Капитан иһә әүәҫ ҡармаҡсы булһа ла, был юлы Сафаның үҙенә ишараһын яуапһыҙ ҡалдырҙы. Уның өсөн хәҙер алға табан йәһәтерәк йөҙөү бөтәһенән дә мөһимерәк ине.

Ҡушылдыҡты уҙғас, Ҡалманай тарая, һайыға төштө, ағымы саҡ ҡына талғынланды. Шунлыҡтан «карап» алға йәһәтерәк китте.

Яр буйы тәбиғәте лә үҙгәрҙе, төрлөләнде. Уң яҡ ярҙа бейек-бейек тауҙар ҡалҡты. Ул ҡарағай, шыршы урмандары менән ҡапланғайны. Һул

яҡ ярҙа урман элеккесә ҡатнаш ағастарҙан тора, тик имән, саған, йүкә, ҡарамалар араһында ҡарағай менән шыршы ла күҙгә ташлана ине.

Малайҙар бөгөн төшкө ашҡа ла туҡтаманылар. Юл ыңғайында, бер-береһен алмаштырған арала, икмәк менән балыҡ консерваһы ҡапҡылап алдылар. Көн кискә ауышып, инде тамам арығас, улар капитандарына ҡарап-ҡарап ҡуйҙылар. Ни әйтер, йәнәһе. Илнур уларҙы аңлай ине, ләкин туҡталырға ашыҡманы.

«Карап» морононда ултырған Сафа, үҙенең Аҡтырнағының башынан һыйпап:

— Һиңә рәхәт, бер ни эшләмәй ятып ҡына бараһың, — тине.

Әлеге мәлдә ишкәксе вазифаһын үтәгән Хәсән, Аҡтырнаҡҡа үтә бер яғымлылыҡ менән ҡарап:

— Уға һүҙ әйтмә, ул — беҙҙең һаҡсы, терәк, — тине.

Әминдең ҡара күҙҙәренең ағы асыу менән ялтырап ҡуйҙы.

— Һаҡсы, имеш. Әрәм тамаҡ ул.

Әминдең тәүге көндән үк Аҡтырнаҡты яратып бөтөрмәүен белгәнлектән, малайҙар уға ҡаршы ни ҙә булһа әйтеп, һүҙ ҡуйыртып торманылар. Үҙ-ара сөкөрләшеп, тәбиғәт күркенә һоҡланып бара бирҙеләр.

Нинһайәт, капитан, яр буйындағы асыҡлыҡҡа күрһәтеп:

— Ошо тирәгә тукталһаҡ, нисегерәк булыр икән? — тип һораны.

Хәсән, шул яҡка текләп:

— Һәйбәт урын һымаҡ, — тине.

Сафа менән Рәфкәт тә хупланы.

— Тукталайыҡ ошонда.

— Матур аҡлан!

БРАКОНЬЕРҘАР ҺАБАҠ АЛЫРҒА ТЕЙЕШ

Яңы урынға килеп туктағас, Илнур, ғәәәтенсә, тирә-йүнде ҡарап сыҡты ла:

— Эйе, ярайһы урын, — тине, ҡыуанып.

Ҡыуыш ҡороп, усаҡ тирәһендә ашап ултырғанда, Аҡтырнаҡ, ҡолаҡтарын шымартып, Ҡалманай үренә ҡарап-ҡарап алды, нимәгәлер тынғыһыҙланғандай итте. Уның ҡылыҡтарын белеп бөткән Сафа:

— Үрҙә нимәлер бар, — тине, башы менән ишаралап.

— Бәлки, берәй йәнлек-фәлән йөрөйҙөр, — тине Хәсән.

Әмин көлөмһөрәне.

— Сыҡсан булмаһа?

Ашап бөткәйнеләр инде. Сафа Хәсәнгә өндәште:

— Әйҙә шул яҡҡа барып киләйек.

Тегеһе шунда уҡ урынынан һикереп торҙо. Улар Ҡалманай буйлап һаҡлыҡ менән генә атланы. Балыҡсылар тарафынан ағастар аралап шаҡ-

тай таҡыр һуҡмаҡ һалынғайны. Малайҙарға Аҡтырнаҡ та эйәрҙе. Уның менән күңелдәренә тынысыраҡ ине.

Бер аҙ барғас, ҡолаҡтарына һыу шыптырлағаны ишетелгәндәй булды, Сафа бер шыйыҡ сыбыҡ һындырып алды ла этенә муйынсаҡ яһап, уны етәкләп тотто. Күп тә үтмәне, урман араһынан бер асыҡлыҡ күренде. Унда, яр буйында, бер ир кеше усаҡ яғып маташа. Ә икенсеһе, сандыр ир, резина кәмәне һыуҙан сығарып тора ине.

— Ана, йылғаны иңләп ау ҡалҡыуыстары күренә, — тине Хәсән, ярым бышылдап.

— Эйе, — тине Сафа, тартылған этен тыйып. — Браконьерҙар, моғайын. Төнгә ҡаршы ау һалғандар.

Аҡтырнаҡ, өрөргә теләп, ырылдарға иткәйне, Сафа уға:

— Туҡта! — тине, асыулана биреп.

Аҡтырнаҡ, тынысланып, хужаһына һыйынды.

Хәсән теге ике ирҙән ҡарашын алмай ғына:

— Ҡайттыҡ, — тине. — Малайҙар менән кәңәшләшәйек әле. Был браконьерҙарҙы аҡылға ултыртып булмаҫмы?

Улар ҡыуыш янына әйләнеп килгәндә, иптәштәре йоҡларға йыйына ине. Инде ярты төн етеп килһә лә, күҙ бәйләнмәгәйне әле. Ел баҫылды, серәкәйҙәр безелдәп оса, ләкин малайҙар, тәүге көндәге кеүек, туҡтауһыҙ сәбәләнмәйҙәр. Күрәһең, кеше серәкәйгә лә өйрәнәлер.

Браконьер балыҡсылар тураһында һөйләп

биргәс тә, капитан, ятҡан еренән тороп, усаҡ эргәһенә сыҡты.

— Беҙ уларҙың ауҙарын юҡ итергә тейешбеҙ.

Хәсән башын сайҡап ҡуйҙы:

— Ҡурҡынысыраҡ бит эле...

Әмин йөҙөн сирҙы.

— Йә бәләгә тарырбыҙ. Ниңә юҡ менән булашырға?

Илнур асыу менән:

— Браконьерҙар һабаҡ алырға тейеш,— тине.

Сафа, усаҡ эргәһенәрәк йылышып:

— Мин дә шулай уйлайым, — тине.

Хәсән Илнурға төбәлде.

— Ҡурҡынысыраҡ, әлбиттә, шулай ҙа, ауҙарын юҡ итә алһаҡ, ну шәп булыр ине!

Әмин ҡулын һелтәне.

— Теләһәгеҙ ни эшләгеҙ...

Рәфҡәт, өндәшмәһә лә, Илнур менән Хәсән яҡлы ине.

Ярты төн ауышҡас, Сафа менән Рәфҡәт браконьерҙарҙы ҡуҙәтергә китте. Улар бер-ике сәғәттән генә әйләнеп килде.

— Йоҡланылар, шикелле, — тине Сафа. — Оҙаҡ ҡына һөйләшеп, араҡы эсеп ултырҙылар ҙа баштан-аяҡ төрөнөп, усаҡ эргәһенә тәгәрәнеләр. Хырылдағандары әллә ҡайҙан ишетелеп тора.

Илнур, хуплап, Сафа менән Рәфҡәттең яурындарына еңелсә һуҡҡылап ҡуйҙы.

— Яҡшы! — Унан, Хәсәнгә ҡарап: — Хәҙер — беҙҙең сират, — тине.

Илнур менән Хәсән, «карап»ка ултырып, ағым үренә йөҙҙө. Бик һаҡ ҡыланды улар. Ишкәктәрҙең шығырлауы ла, һыуға тейеүе лә ишетелмәй ине тиерлек. Йылға өҫтө ҡарағуҫҡыл көмөшләнеп, шомло булып күренә. Тороп-тороп һиҙелер-һиҙелмәҫ һалҡынса ел иҫеп ҡуя.

Илнур кәмәне ауҙың арыяҡтағы таяғына йүнәлтте. Моронда ултырған Хәсән, килеп етеү менән, таяҡты ипләп кенә күтәрҙе лә бауҙарын киҫеп тә төшөрҙө. Ауҙың был яғы һыу түбәненә ағып китте. Унан Илнур һаҡлыҡ менән генә кәмәне теге яҡҡа ыңғайлатты. Хәсән уның оҫталығына һоҡланып ҡуйҙы.

Яр буйына яҡынлашҡас, өҫтә, һүнеп бөткән усаҡ эргәһендә, бер-береһенә яҡын ғына ятҡан ике кәүҙәне шәйләне Хәсән. Ул көсөргәнеш менән шуларҙы күҙәтте. Бына береһе, ҡуҙғалып, ыңғырашҡандай итте. «Әллә йоҡламағанмы икән? Тороп китмәһә ярар ине», — тип теләне малай, борсолоп. Тәне буйлап эске бер ҡалтырау үтте.

Ул арала «карап» икенсе таяҡ янына килеп етте. Хәсән уға килеп тотондо ла тулҡынланыуҙан йәһәтерәк күтәрҙеме, таяҡ кәмә ситенә «тыҡ» итеп тейеп ҡалды. Ҡаушауынан малай яр башына алан-йолан ҡарап алды: «Уянмаҙылармы?» Ул-был һиҙелмәне. «Ашыҡ» тигәнде аңлатып, Илнур уға ҡулын һелкте. Хәсән бәкеһе менән ауҙың бауҙарын киҫеп, таяғын тегеһе кеүек үк һыуға ташланы. Ә ауҙың бер осон ҡулына урап, иптәшенә «китәйек» тип ишара яһаны.

Ағым ыңғайына шым ғына ҡайтып еттеләр. Ауҙы һөйрәп сығарып, киҫкеләп-йыртҡылап бөткәс, Ҡалманайға ағыҙып ебәрҙеләр.

Эште тамамлағас, йылғаға ҡарап торған Илнурға:

— Яр башынан һеҙҙе Рәфҡәт менән икәү күҙәтеп торҙоҡ, — тине Сафа.

Илнур уға боролдо.

— Ниңә?

— Улай-былай булһа, Аҡтырнаҡ менән иҡтибарҙарын үҙебеҙгә тартмаҡсы инек.

— Шәп иттегеҙ, малайҙар, — тип һүҙгә ҡушылды Рәфҡәт тә. — Бер ни һиҙмәнеләр, ахмаҡтар.

Улар ҡыуыш әргәһенә күтәрелгәндә, Әмин ғырлап йоҡлағанға һалышып ятты. Малайҙар киткән арала ул үҙҙәренең икмәктәре, пакетлы аштары һалынған рюкзакты ҡыуыштан ҡырҡилле аҙымдағы бер соҡорға, ҡуйы үлән, сытырмалыҡ араһына, илтеп ташланы. «Иртәгә ни эшләрһегеҙ икән? Тағы ла боролмаһағыҙ, күҙ күрер», — тине ул, иптәштәренә яңы бәлә вәғәҙә иткәндәй.

«ҺАЙ, МАТУРҠАЙЫМ, БАТЫРҠАЙЫМ...»

Илнур үҙе дежурный булғас, төн буйы йоҡламаҫҡа тырышты. Теге балыҡсыларҙың килеп сығыу ихтималын уйлап, усаҡты ла әҙ генә, серәкәйҙәрҙе ҡурҡытырлыҡ ҡына итеп быҫҡытып ултырҙы.

Иптәштәре йоҡоға сумып, үҙе генә ҡалғас, ауылды, атаһы менән әсәһен, ағаһы менән һеңлеһен хәтеренә төшөрҙө. Атаһының уйсан, әшлекле, әсәһенең яғымлы, көләс йөҙҙәре күҙ алдына килде лә йөрәге ашҡыныу менән тибеп ҡуйҙы. Бөтә сәйәхәтселәр ҙә ата-әсәләрен, яҡындарын, тыуған яҡтарын һағынғандарҙыр. Ләкин кире боролмағандар. Берингты, Миклухо-Маклайҙы, полярник Шмидтты ал... Ниндәй генә ҡыйынлыҡтар кисермәгәндәр!..

Илнур ҡапыл үҙен ысын караптың ысын капитаны итеп күҙ алдына килтерҙе. Бына улар алыҫ бер илгә диңгеҙ ярып алға ынтыла. Тауҙай тулҡындар ажарланып карапҡа урғыла, уны күтәреп һуғып, упҡын ҡосағына ташларға теләй. Ләкин батыр капитан Илнур Шәмсуров карапты дауыллы диңгеҙҙең ҡоторонҡо тулҡындары аша ҡыйыу алып бара.

Ул шулай татлы хыял тулҡынында йөҙөп нисек күҙҙәре йомолғанын да һиҙмәй ҡалды. Шунда уҡ уны сәйер бер төш биләп алды. Диңгеҙ буйлап карапта баралар, имеш. Ҙур-ҙур тулҡындар уларға ябырыла. Ләкин бирешмәйҙәр, бары алға ғына ынтылалар. Капыл ҡайҙандыр ҡот осҡос ҙур йыртҡыс килеп сыҡты. Ул, ҡойрсоғон борғолап йөҙә-йөҙә, ауыҙын асып карапҡа яҡынлаша, бына-бына йота. Ләкин капитан Илнур артиллеристарға йәһәт команда бирә: «Атырға!» Пушка ут бөркә, ни өсөндөр, уның тауышы сыҡмай, ә снаряды йыртҡыстың асыҡ

ауыҙына инеп китә. Ул, ҡурҡышынан күҙ асып йомғансы боролоп, караптан ситкә ҡасып китә. Быға тиклем, ни булыр инде, тип ҡото осоп торған Илнур, теге йыртҡыстың ҡасыуын күреп, ҡысҡырып көлөп ебәрә: «Ха-ха-ха! Тамағыңа ултырҙымы!..»

Илнур уянып китте. Яҡтырғайны инде. Тәбиғәттән ниндәйҙер сафлыҡ аңҡый. Ҡалманай, уның аръяғындағы тау битләүҙәрен ҡаплап алған урмандар өҫтөнән шыйыҡ төтөн һымаҡ быу күтәрелә, эргәләге ағастар араһында ҡоштар сырсыу килә. Бына тынғыһыҙҙар! Нисек йоҡолары килмәй?! Аҡтырнаҡ та йылға буйында еҫкәнеп йөрөп ята.

Илнур, кисәге браконьер балыҡсыларҙы хәтеренә төшөрөп, шул яҡҡа барып килмәксе итте. Киткән булһалар, тиҙ генә ашап-эсеп алырға ла юлға ҡуҙғалырға кәрәк.

Малай яр буйы һуҡмағынан әкрен генә атланы. Һалҡынса ине. Үләндәрҙән аяғына, салбар балағына ысыҡ тамсылары яғылды. Браконьерҙар урынлашҡан аҡланға етәрәк ул әйелә төштө, ҡарашын алға төбәне. Аҡланда берәү ҙә күренмәне. Ул, яҡыныраҡ барып, бер ағас төбөнә боҫто. «Киткәндәр, ахыры», — тип уйлап бөтөргә лә өлгөрмәне, балыҡсыларҙың береһе — сандыры — яр аҫтынан өҫкә күтәрелде. Илнур унан ағас артына ҡасмаҡсы булып, ҡапылыраҡ ҡуҙғалдымы, аяғы аҫтында нимәлер шытырланы ла ҡуйҙы. Теге балыҡсы ялт итеп уға ҡараны ла, күреп,

яңғырауыҡлы сәрелдек тауыш менән ҡыскырып ебәрҙе: «Ә-ә, ҡарап тораһыңмы, киткәндәр, тип уйланыңмы?» Ул шомло ҡиәфәт менән Илнурға табан килә башланы. Малай тиҙ генә боролдо ла ағастар араһынан йүгереп китте. «Ю-уҡ, минән ысҡына алмаҫһың, мөртәт, — тип екеренде теге. Илнур үҙенең артында уның ҡайнар һулышын тойғандай булды. Ул йүгереүен тиҙләтә төштө. Иптәштәре янына илтә торған һуҡмаҡтан бармай, һулғараҡ, урман эсенә, елдертте. Был тирәлә ағастар һирәк, шаҡтай иркенләп йүгерергә мөмкин ине. Шунлыҡтан балыҡсы-браконьер әкренләп малайға яҡынлаша ине. Илнур бер боролоп ҡараған арала уның асыулы аҡыш күҙҙәрен, ас яңаҡлы йөҙөн күреп ҡалды. Унан шәфкәт көтөп булмай ине. Ҡыуып тотһа, үлтергәнсе туҡмауы ла ихтимал. Был осраҡта малайға кем ярҙам итә ала? Шунда Илнур Аҡтырнаҡты иҫенә төшөрҙө лә өҙөп-өҙөп ҡыскырып ебәрҙе: «Аҡтырнаҡ! Аҡтырнаҡ! Маһ... маһ...» Яуап оҙаҡ көттөрмәне. «Вау-вау», — тигән таныш һәм күңелгә яҡын тауыш урманды яңғыратты. «Аһ, хәсис!» — тине арттан ҡыуып килгән браконьер, ауыр һулап. Ул Илнурҙы инде килеп тоттом тигәндә, Аҡтырнаҡтың ҡалын тауыш менән өрөп ебәреүе һәм яман ырылдап ҡуйыуы уны шунда уҡ туҡталырға мәжбүр итте. Улай ғына ла түгел, ҡаршыһында асыулы ҙур әтте күргәс, йәһәт кенә боролдо ла бер ни булмағандай китеп барҙы. Аҡтырнаҡ, урман яңғыратып өрә-өрә, уны бер

аҙ оҙатты ла, мин үҙ бурысымды үтәнем тигәндәй, әйләнеп тә килде. Илнур уны муйынынан ҡосаҡлап алды ла:

— Һай, матурҡайым, батырҡайым, һаҡсыбыҙ, яҡлаусыбыҙ беҙҙең, — тип һамаҡланы.

«...АРТЫҠ КӨЙМӘЙЕК ӘЛЕ»

Илнур Аҡтырнаҡ менән төйәккә әйләнеп килгәс, ҡыуыш ауыҙына сүгәләп, Сафаны уятты.

— Тор, иртәнгелеккә берәй нәмә эҙерлә. Ә мин серем итеп алайым.

Сафа ҡуҙғалып ҡуйҙы.

— Хәҙер...

Илнур уны аҙырак көттө лә, тауышын күтәрә төшөп:

— Йә, тораһыңмы, юҡмы? — тине.

Сафа теләр-теләмәҫ кенә урынынан күтәрелде. Үҙенә текләп, көтөп торған Илнурға ҡарап алды ла ҡыуыштан килеп сыҡты, эскә табан башы менән ишаралап:

— Бар, йоҡлап ал, — тине...

Илнур иптәштәренең шаулашҡанына уянып китте.

Сафа, көрһөнөп:

— Ҡайҙа булыр икән ул? — тине.

Хәсәндең аптырап һөйләнеүе ишетелде.

— Бөтә ерҙе ҡарап бөттөк — юҡ бит.

— Ҡайһығыҙҙың эше был, малайҙар? — тине Сафа, хафаланып. — Шаяртһағыҙ, рюкзакты килтерә һалығыҙ. — Берәү ҙә өндәшмәгәс, Сафа,

ярһып, Әмингә ябырылды: — Бындай эш, килһә, һинең ҡулдан ғына килер. Икмәктәрҙе йәшерһәң, табып бир яҡшы сакта. Беҙҙең унда бөтә запасыбыҙ.

— Нимә тип миңә бәйләнәһең? — тип екерҙе Әмин. — Күрәләтә бәлә яғаһың. Икмәк менән шаярырға мин баламы ни?

Илнур эштең ниҙә икәнен аңлағайны инде, һикереп торҙо ла иптәштәре янына килеп баҫты.

— Икмәк юғалғанмы ни?

— Эйе шул, — тине Сафа, әсенеп.

Илнур һалҡын ҡанлы булырға тырышты.

— Беҙҙең хәлдәр ҡыҙыҡ әй: йә «карап» ағып китә, йә икмәк юғала. Шулай ҙа күрмәгән-белмәгән көйө, кешегә бәйләнмә, — тине ул Сафаға. — «Урлаған бер гөнаһлы, урлатҡан меңгөнаһлы», — ти минең өләсәй. Шуның кеүек булмайыҡ. Һеҙ йоҡлағанда беҙ Аҡтырнаҡ менән теге браконьерҙар туҡталған ергә барып әйләндек. Шул арала, бәлки, ҡыуыш тирәһенә берәйһе килеп сыҡҡандыр. Кем белә? — Шунан Илнур борсоулы ҡарашы менән иптәштәрен байҡаны. — Йәгеҙ, икмәкһеҙ ни эшләйбеҙ?

Әминдең эсенә йылы йүгерҙе. Капитан, нинһайәт, быны хәҙер: «Ҡайтыр яҡҡа ҡуҙғалмай булмаҫ, ахыры», — тип әйтер һымаҡ ине. Ләкин был юлы ла улай булып сыҡманы.

— Икмәк тип, артыҡ көймәйек әле, — тине Хәсән. — Аҙмы-күпме аҡсаларыбыҙ бар бит. Яҡындағы берәй ауылға инеп, һатып алырбыҙ.

— Ысынлап та, — тине Сафа, йәнләнеп. — Бәлки, яҡын-тирәлә лә ауыл барҙыр. Мин кисә төндә эт өргән, этәс ҡыскырған тауыштар ишеткәндәй булғайным.

— Улайһа, хәҙер беләбеҙ уны, — тине Рәфҡәт һәм аҡлан ситендә башҡа ағастарҙан ҡалҡыбыраҡ ултырған ҡарағайға табан йүнәлде. Ул ағас баштарына үрмәләргә әүәҫ ине. Бәләкәйерәк саҡта ҡош ояларын туҙҙырғаны ла булды. Үҫә төшкәс, бындай эштең насарлығын аңланы һәм ҡоштарҙы ярата, уларҙың йырҙарын ихлас тыңлай, йәшәү рәүештәрен өйрәнә башланы.

Рәфҡәт ҡарағайҙың шып-шыма олонона һоҡланғандай ҡарап торҙо ла, устарын төкөрөкләп, маймыл етеҙлеге менән юғары үрмәләне. Ағастың осона етәрәк туҡтаны ла, бер яҡҡа ҡайырылып ҡарап, ҡыскырып ебәрҙе:

— Ана, бер ҙур ғына ауыл. Бынан бер-ике саҡрымда ғына.

Рәфҡәт ҡарағай башынан төшкәс, Илнур, ептәштәрен үҙ тирәһенә йыйып:

— Мин, Хәсән, Әмин — өсәүләп ауылға барып килербеҙ, — тине. — Сафа менән Рәфҡәт бында ҡалһын.

Был һүҙҙәрҙән һуң, Әминдең йөҙө, теше һыҙлаған кешенеке кеүек, һытылып ҡуйҙы.

ЯТ МАЛАЙ МЕНӘН ОСРАШЫУ

Малайҙар ауылға килеп ингәс, таҙа ҡарағай бүрәнәләрҙән һалынған. кәрниз һәм тәҙрә ҡап-

ҡастары зауыҡ менән семәрләнгән ыҡсым өйҙәргә ҡыҙыҡһынып ҡарап барҙылар. Урман буйында ғына йәшәгәс, был ауыл кешеләре йорт-ҡаралтыларҙы, ысын хужаларса, ныҡлап, матурлап төҙөгәндәр.

Илнур ҡапҡа төбөндә торған ялан аяҡлы һигеҙ-туғыҙ йәшлек бер малайҙан:

— Был ауылдың исеме нисек? — тип һораны.

— Алтынсурин.

— Алтынсурин?

— Эйе. Элекке исеме Сабаталы булған.

Малайҙар, бер-береһенә ҡарашып, йылмайышып ҡуйҙы. Илнур малайҙан һорашыуын дауам итте.

— Сабатаны күргәнең бармы һуң?

Малай, юҡ тигәнде аңлатып, башын сайҡаны.

— Ә магазин бынан йыраҡмы?

— А-а-нау яҡта, кирбес йортта, — тине малай, урам осона табан күрһәтеп.

«Кирбес йорт» тигәне — бер ҡатлы ҙур ғына бина. Ул икегә бүленеп, бер яғында — кейем-һалым, икенсе яғында аҙыҡ-түлек һатыла икән. Әлегә ишектәре бикле. Илнурҙар иртәрәк килгәндәр шул. Магазин алдында шаҡмаҡлы күлдәк, джинсы салбар кейгән ҡуңыр йөҙлө малайҙан башҡа бер кем дә юҡ.

— Аһ, ҡасан асылыр инде? — тине Илнур, магазинға ымлап.

— Туғыҙҙа, — тине ят малай, быларға ҡарамайынса ғына. — Тағы егерме минут бар әле.

— Тағы егерме мину-ут! — тине Әмин, һуҙып.

Ят малай Илнурҙарға текләп ҡарап торҙо.

— Һеҙ был ауылдан түгелһегеҙ, әйе бит?

— Түгел. Ә ниңә? — тине Илнур ҡоро ғына.

— Былай ғына... Ҡайҙан киләһегеҙ?

Илнур уға сәйерһенеп ҡарап алды.

— Күпте белһәң, тиҙ ҡартайырһың.

Ят малай үпкәләмәне, киреһенсә, йылмайып ҡына ҡуйҙы.

— Мин үҙем дә был ауылдан түгел.

Илнурҙың йөҙө асыла төштө.

— Ҡайҙан?

— Ҡалманайбаш ауылынан.

— Ҡалманайбаш ауылынан? Беҙ шул яҡҡа китеп барабыҙ бит. Бынан алыҫмы әле ул?

— Һигеҙ саҡрым.

Хәсән ҡыуанысынан ҡысҡыра төшөп:

— А-а, Ҡалманай башына алыҫ түгел, улайһа, — тине.

Теге малай тағы йылмайҙы:

— Ҡалманайбаштан биш саҡрым тирәһе генә.

Малайҙар шымып ҡалды. Илнур ят малайға йәнә баштан-аяҡ ҡарап алды.

— Ә һин ни көтәһең бында?

— Велосипед камераһы бар, тигәйнеләр. Булһа, шуны алам да ҡайтып китәм. Ун көн элек үк олатайымдарға килгәйнем. Ә һеҙ йәйәүләпме?

— Юҡ, кәмәлә, — тине Илнур.

Ят малайҙың йөҙө балҡып китте.

— Кәмәлә? Бына был шәп, исмаһам. Бәлки, мине лә үҙегеҙ менән алырһығыҙ?

Илнур иптәштәренә ҡараны.

— Ҡыҫығырақ булмаҫмы?

Хәсән яурынын йыйырып ҡуйҙы.

— Һыйырбыҙҙыр, моғайын.

— Улайһа, алабыҙ.

Оҙаҡламай магазиндар асылды. Һатыуҙа ик-мәк юҡ ине. Илнурҙар печенье, консерва, шәкәр алып сыҡҡанда, ят малай уларҙы көтөп тора ине инде.

— Камера булған да бөткән. Их, кисә килә алманым шул, — тине ул, күңелһеҙләнеп.

— Нисауа, — тине Илнур, уны йыуатып. — Иҫкеһен ямап эшкиндерерһең әле. Ә кәмәгә камера кәрәкмәй.

— Дөрөҫ, кәрәкмәй.

— Әйткәндәй, һинең исемең кем һуң әле? — тип һораны Илнур.

— Иршат, — тине теге.

— Мин — Илнур, был — Хәсән, ә был баҙыҡ кәүҙәле — Әмин батыр.

Малайҙар, йылмайышып, танышып бөткәс, урам буйлап шәп-шәп атлап китеп барҙылар. Ҡалманай буйына етәрәк Сафа менән Рәфҡәт уларға ҡаршы сыҡты. Йөҙҙәре шат, үҙҙәре ни өсөндөр тулҡынланған һымаҡ. Илнур, быны күреп:

— Ни булды? — тип һорай һалды.

— Икмәкте таптык, — тине Сафа, коя балкып.

— Нисек? Кайҙан?

Сафа, кулы менән күрһәтә-күрһәтә:

— Актырнак анау ерҙә еҫкәнә, өргәндәй итә. Ни бар икән тип, янына барһам, бер соҡор төбөндә, үлән һәм сыбык-сабык араһында, беҙҙең рюкзак ята, — тине.

— Үәт, әт, исмаһам, был Актырнак! — тине Илнур, кыуанып. — Рюкзакка сыскан-фәлән теймәгәнме?

Сафа башын сайҡаны.

— Юк. Рюкзак әргәһендә йомарланған бер терпе лә бар ине. Шул һаҡлағандыр.

Был һүҙҙәрҙән малайҙар көлөшөп алды. Әмин дә, үҙен көсләп булһа ла, йылмайҙы.

ТЕТРӘТКЕС ХӘБӘР

Ауылдан ҡайтҡас, малайҙар күмәкләп сәй әсеп алдылар ҙа тағы «карап»ҡа тейәлеп, һыу үренә йөҙҙөләр. Иршат шунда уҡ ишкәктәргә тотондо. «Карап»ты йылға ситләтеп ағым үренә оҫта ғына алып китте.

Илнур, уның таҫыллығын баһалап:

— Ишә беләһең икән, — тине.

— Белмәй ни, беҙ Ҡалманай буйынан да, — тине Иршат, ғорурланған һымаҡ.

Һөйләшеп килеп, байтаҡ араның артта ҡалыуы һиҙелмәне лә. Ҡалманайҙың йәнә бер ҡу-

шылдығын үтеп киттеләр. Иршат, сылтырап ағып яткан шул йылғасыҡҡа күрһәтеп:

— Был — Етеҙәк тип атала, — тине һәм һул яҡта зәңгәрләнеп торған үркәс тауҙарға ишаралап: — Анау тауҙар араһынан ағып сыға, — тип өҫтәне.

«Карап» морононда ултырған Сафа артына боролдо.

— Унда булғаныҡ бармы ни?

— Походҡа барғайныҡ. Ул тирәләге ҡуйы урман эсендә Алтынсурин етәкселегендәге партизандар отряды йәшеренеп яткан урын бар.

— Ундай урынды беҙ ҙә күрҙек, — тине Хәсән.

— Ҡайҙа?

— Бынан ун биш саҡрымлап түбәндә.

— Нисек унда барып сыҡтығыҙ?

Иршатҡа бөтәһен дә һөйләп бирергә тура килде. Ул, сәйәхәтсе тиҫтерҙәренә һоҡланып:

— У-у, һеҙ мажараларға тарып бөткәнһегеҙ икән, — тине. — Ярай әле имен ҡотолғанһығыҙ. Ҡалманай буйы урмандарында Алтынсурин отряды төйәк иткән бер нисә төбәк билдәле, тиҙәр шул.

Ишкәксе урынын алған Хәсән үҙ эше менән мәшғүл булһа ла, һөйләшеүҙәргә ҡолаҡ һалып килә ине.

— Якташтары бик ихтирам итәләрҙер, күрәһең, Алтынсуринды, — тине.

Иршат ихлас баш ҡаҡты.

— Эйе. Һеҙҙең менән уның тыуған ауылында осраштык бит. Элекке Сабаталыға яҡташтары уның исемен ҡушҡандар. Беҙҙең пионер дружинаһы ла уның исемендә.

— О-о, — тип ғәжәпләнде Рәфҡәт. — Батыр кеше булғандыр. Һин уның хаҡында беләһеңдер бит?

Иршат, эллә минән көләһеңме тигәндәй, сәйерһенеп, ҡаштарын өҫкә күтәрҙе.

— Белмәҫкә ни! Ул Балтика морягы булған. 1918 йылдың башында Сабаталыға ҡайтҡан. Уны волком секретары итеп ҡуйғандар. Хәҙергесә әйткәндә, райком секретары инде. Тик оҙаҡ та үтмәй аҡ чехтар, уларға ҡушылған аҡ гвардиясылар беҙҙең яҡтарға ла килеп сыҡҡан. Алтынсурин бер төркөм иптәштәре менән урманға ҡасҡан. Урындарҙа аҡтарға әлеккән большевиктарҙы, совет яклыларҙы ҡотҡарыу буйынса күп кенә ҡыйыу һөжүмдәр ойоштороған. Дошмандарҙың ҙур ғына отрядтарын да юҡ иткәләгән.

Ун һигеҙенсе йыл аҙағында аҡ чехтар, Ҡыҙыл Армия тарафынан ецелеп, Башҡортостандан китә. Алтынсурин үҙ эшенә ҡайта. Ауылдарҙа Совет власын нығытыу менән шөғөлләнә. Ләкин ун туғызынсы йылдың март аҙаҡтарында колчаксылар беҙҙең яҡтарға килеп етә. Был юлы Алтынсурин көслөрәк партизан отряды ойоштора, аҡтарға ҡыйыу һөжүмдәр яһай, уларға һис тынғы бирмәй. Сабаталыла ла, Ҡалманайбашта ла, Таллыгүлдә лә партизандарҙың мәргән утынан

бик күп колчаксы юк ителә, коралдары, азыктүлек запастары тартып алына. Ләкин актар за тик ятмай. Партизан отрядына бер хыянатсы үтеп инә. Шуның арзамында актар партизандарга көслө засада ойоштора. Был алышта күпселек партизандар, уларзың батыр командиры ла һәләк була. Бынан һуң озакламай актар безҙең якты калдырып китә. Шунан бирле күпме йылдар үтә, ә Алтынсуриндың, уның көрәштәштәренең батырлығы онотолмай.

Иршат һөйләүҙән туктағас та:

— Һин күп беләһең икән! — тине Илнур, һокланыр.

— Мин тарихты яратам, — тине Иршат. — Ә тарих, минеңсә, тыуған яктарыңды өйрәнеүҙән башлана ул.

— Мин дә тарихты яратам, — тине Әмин. — Тик мин дәреслекте генә укыйым шул.

— И-һи, улай ғына етмәй, дәреслекте беҙ бөтәбеҙ зә укыйбыҙ инде, — тине Иршат, йылмайып.

Хәсән дә Иршаттың күп белеүенә көнләшеп ултырзы. Быға саклы үҙҙәренең тыуған яктарының тарихын, батыр кешеләрен өйрәнмәүенә үкенеп куйзы. Күңелендәге серен сисергәме, юкмы тип, икеләнеп килде-килде лә әйтергә булды:

— Беләһеңме, Иршат, минең олатайзың атаһы, йәғни карт олатай за ошо тирәләге партизан отрядына киткән дә ауылға әйләнеп кайтма-

ған. Ақтар менән һуғышта үлгәндер инде. Атайым ошо хақта һөйләгәйне...

— У-у, — тип ҡыуанысын белдерҙе Иршат,— ҡарт олатайың партизан булған, тимәк! Ни эшләп быға тиклем ҡыҙыҡһынманығыҙ?

— Ҡыҙыҡһынманыҡ инде, — тине Хәсән, уңайһыҙланып.

— Һеҙ ҡайһы ауылдан әле?

— Ҡарандан.

Иршаттың күҙҙәре ҙур асылып, ауыҙы йырылып-йырылып ҡуйҙы.

— Ҡарандан, Ишемйәр районынанмы?

— Әйе-әйе, — тине Хәсән, ҡабаланып.

Башҡалар ҙа һаҡайып ҡалды. Ә Иршат ҡыуанысынан урынынан уҡ тороп китте, хатта «карап» сайҡалып ҡуйҙы. Әммә быға берәү ҙә иғтибар итмәне. Әмин дә, ишеүенән туҡтап, Иршаттың ауыҙына төбәлде, «Дункан» әкрен генә ағым ыңғайына китә башланы.

— Беләһегеҙме, малайҙар, беҙҙең ауыл эргәһендә һәләк булған бер партизандың исеме күптән түгел генә асыҡланды, — тине Иршат. — Батырҙарҙың батыры булған ул. Кем әле исеме? Фамилияһы? — Ул бер аҙ ғына уйланып торҙо ла: — Ә-ә... Бәхтиәр... Ирғәлин, — тип ҡысҡырып уҡ ебәрҙе.

Хәсән һиҫкәнеп китте, ныҡ тулҡынланыуҙан сикәләре шунда уҡ янып сыҡты:

— Был, моғайын, минең ҡарт олатай. Исеме лә, фамилияһы ла тура килә.

— Бына кызык! — тине Рәфкәт.

— Был кызык кына түгел, барыбыз өсөн дә кыуаныс та! — тине Илнур.

Бөтәһе лә Хәсәнгә төбәлде. Ә уның йөҙө балкый ине.

— Карт олатайым табылды һымак. Нығлап белешмәй кайтып булмаҫ.

— Әлбиттә, белешерһең, — тине Илнур.

Уға Иршат өҫтәне:

— Ярҙам итермен... Кулдан килгәнсә. Һәр хәлдә, беҙҙең ауыл эргәһендәге обелискыға Бәхтиәрҙең исеме яңырак яҙылып куйылды.

КАЛМАНАЙБАШ КҮРЕНДЕ

Калманайбаш ауылына кәҙәр йәнә ике ҙур булмаған кушылдык осраны. Береһен инеш тиһәң дә була. Бынан һуң Калманай тағы ла тарайҙы, һайыкты. Бер нисә шаршылыкты үткәндә, Актырнактан башка бөтә экипажды төшөрөп, «Дункан»ды һөйрәргә тура килде. Хәйер, Калманайҙың нигеҙҙә тыныс йылға булыуы сәйәхәтселәрҙе күп кенә бәләләрҙән котҡарғандыр, моғайын.

— Быға тиклем гел көнсығышка йөҙгәйнек, хәҙер юлыбыҙ тап төньякка табан боролдо, — тине Илнур, компасына карап.

— Эйе, — тине Иршат, — хәҙер Калманайҙың башына кәҙәр гел ошо йүнәлештә барырға тура киләсәк.

Төш ауышып күп тә үтмәне, йылға буйында ҙур ғына ҡырсынлыҡ, унда кейемдәрен сисенеп ташлап, сыр-сыу килеп һыу инеүсе бала-саға, уларҙан өҫтәрәк — ҡармаҡ һалыусылар күренде. Ҡырсынлыҡтың арғы ситендә ҡыҙыл мәтеле бейек кенә яр һуҙылып, унан эллә ни алыҫ та түгел ауыл өйҙәренең ҡалай түбәләре ялтырашып, телевизор антенналары һерәйешеп күккә ашып тора ине.

Иршат, шул яҡҡа күрһәтеп:

— А-а-на беҙҙең ауыл, — тине.

Ул сәйәхәтсе тиҫтерҙәренә әҫенеп бөткәйне инде. Тегеләре лә уны киң күңелле, алсаҡ булғаны өсөн шунда уҡ үҙ иттеләр. Хатта Аҡтырнаҡ та уға, ҡойроғон болғап, ихтирамын белдерҙе.

— Малайҙар, мин бөгөн һеҙҙе үҙебеҙгә ҡунаҡҡа саҡырам, — тине Иршат, алсаҡ йылмайып. — Минең атай менән әсәй — ябай кешеләр. Мин дуҫ күргән кеүек, улар ҙа һеҙҙе яҡын итәсәктәр.

Малайҙарҙың йөҙҙәре ниндәйҙер эске бер йылылыҡ, өмөт менән балҡып китте. Һәр үҫмер кеүек, улар ҙа ҡунаҡҡа барырға, яҡты йөҙ күрергә, тәмле-татлы аштар менән һыйланырға ярата ине. Тик капитан ни әйтер? Уға төбәлделәр. Ә ул ебеп төшмәне. Капитан булған кеше бөтәһен дә тәрәнерәк уйларға, алданыраҡ күргә тейеш шул. Дөрөҫөн әйткәндә, ул өлкәндәрҙең: «Ҡайҙан, нисек киләһегеҙ? Атай-әсәйҙәре-

геҙҙән рөхсәт алдығыҙмы? Нисек ебәрҙеләр?» — тигән һәм башҡа һорауҙарынан һаҡая ине. Әйе, улар рөхсәтһеҙ китмәнеләр, билдәле. Сафаны әсәһе ебәрмәҫкә тырышҡас, малай иҫ: «Ҡасып булһа ла китәм», тип шаулаҡас, уныҡ әсәһе менән Илнурҙың үҙенә һөйләшергә тура килде. Әлегә Сафа һынатманы. Ә эте үҙе бер хазина булды...

— Рәхмәт, Иршат! Беҙ, элеккесә, Ҡалманай буйына урынлашырбыҙ. Беҙҙең янға үҙең килерһең, — тине Илнур, уйҙарын төйнәп.

Өҙөп эйтелгән был һүҙҙәрҙән һуң, Иршат көсләшеп торманы.

— Һеҙ ҡайҙа туҡталырһығыҙ икән? — тип кенә һораны.

Илнур әйәге менән йылға үренә ишаралап:

— Саҡ ҡына арыраҡ, тынысыраҡ урында туҡталырбыҙ, — тине.

Иршат, үҙҙәренә ҡыҙыҡһынып ҡараусы малай-шалайға иғтибар ҙа итмәй, шаршылыҡтан «Дункан»ды үткәрешеп ебәрҙе лә:

— Мин оҙаҡламай килеп етермен, — тип, ҡул болғап тороп ҡалды.

БӘХТИӘР — ХАЛЫҠ БАТЫРЫ

Ҡалманай үрендә ысынлап та төйәк өсөн уңайлы урындар етерлек ине. Әммә береһе Илнурға айырыуса оҡшаны. Ҡалманайбаш ауылы тәңгәлендә аръяҡлап ҙур булмаған болонлоҡ һу-

ҙыла, ә ҡаршы яҡ яр ҡуйы бөҙрә талдарға күмелгән. Яҙғы ташҡын ваҡытындалыр, бер өйәнке һыуға ауған да бер нисә тамыры менән генә ярға эләгеп ҡалған. Уның япраҡтары шиңә башлаған. Арала әле йәшелдәре лә күренә.

Илнур, өйәнкегә күрһәтеп:

— Бында балыҡ ҡармаҡларға һәйбәт. Ятыуыраҡ урын, — тине.

Сафа ла уны хупланы.

— Эйе, бында ажау менән ҡыҙыл күҙ сиртергә тейеш.

Хәсән, болон арҡаҙындағы уҡтай ҡарағайҙар һибелгән ҡалҡыулыҡтарға ишаралап:

— Тәбиғәт тә матур, әкиәттәге кеүек, — тип куйҙы.

Әминдең иҫе китмәне:

— Беҙҙең яҡтарға етмәй. Йүкә, саған, имәндәре булмаған урман урманмы ни ул! Ҡалманай ҙа бында һай ғына, киңлеге лә ун метрҙан артмай.

— Һәр яҡтың үҙ матурлығы, — тине Хәсән.

Йылғаға ҡарап уйға ҡалып торған Рәфҡәт башын сайҡап ҡуйҙы.

— Матур урын. Шулай ҙа үҙебеҙҙең яҡтар һағындырҙы.

— Атай менән әсәйҙе, тиң, — тине Хәсән, йылмайып.

— Уныһы ла бар инде.

Илнур киҫкен генә ҡулын һелтәп алды.

— Етте, малайҙар, һағыш хистәренә бирелер

вақыт түгел. Кискә қоро-һары әҙерләргә, балық тоторға ла кәрәк. Әле иртә, бәлки, магазинға ла өлгөрөрбөҙ. Икмәк аҙ қалған. Ул да иҫкергән.

Малайҙар арлы-бирле итеүгә, Иршат килеп тә етте.

— Әһе-ей, сығып алығыҙ әле! — тип тауыш бирҙе ул арғы яқтан. Қултығына нимәлер қыҫтырып алғайны.

Уны күргәс, малайҙарҙың йөҙҙәре яқтырып китте. Қармақ һалып торған Илнур әйберҙәр янындағы иптәштәренә өндәште:

— Берәйегеҙ Иршатты сығып алығыҙ инде.

Былай ҙа Рәфқәт урынынан қуҙғалғайны инде. Ул ашығып «карап»ка йүнәлде.

Иршат йылға аша сыққас, Илнур менән Сафа ла уның әргәһенә килде. Иршат қулындағы төргәкте капитанға һуҙҙы.

— Бына, әсәй һеҙгә күстәнәс ебәрҙе.

Илнур төргәкте алып систе лә, йылмайып, иптәштәренә қараны. Алдарында ауыл мейесендә бешкән түңәрәк икмәк балқып тора, әргәһендә банка менән яҡы айыртқан қаймақ та бар ине.

— У-у, шәп! — тине Илнур, қыуанып.— Рәхмәт, Иршат! Хәҙер рәхәтләнеп сәйләп алайық әле.

Малайҙарҙың күңелдәре күтәрелеп китте. Хатта Актырнақ та, күстәнәстән үҙенә лә өлөш сығаһын һиҙенгәндәй, қойроғон болғап, малайҙар тирәһендә бөтөрөлдө.

Сафа өсөн усақ яғыу, күп һынауҙар үтеп,

ҡоромланып бөткән алюмин сәйнуктә Ҡалманай һыуын ҡайнатыу ғәҙәти эш ине. Ә төш ваҡытында ла әл-йөл генә ҡапҡылаған малайҙар яңы икмәк менән яңы ҡаймаҡты һыпырҙы ғына, оҙаҡламай быяла банка ялт итеп ҡалды. Сәйҙән һуң Иршат, урынынан тороп:

— Хәҙер мин һеҙҙе ике партизанға ҡуйылған обелискыға алып китәм, — тине.

— Яҡты күҙҙә барып ҡайтайыҡ әйҙә, — тине Хәсән дә, шунда уҡ аяғына баҫып.

Башҡалар ҙа урындарынан ҡуҙғалды. Тик Илнур ҡарашы менән иптәштәрен байҡап алды ла:

— Ә бында кемдәр ҡала? — тип һораны, берене лә өндәшмәгәс: — Әмин, һин дежурный, ҡоро-һары әҙерләй тор, Сафа, һин балыҡ тот. Кискә һурпалыҡ булыр, — тине.

Әмин йөҙөн һытып ситкә боролдо. Уның малайҙарҙан ҡалғыһы килмәй ине. Ләкин ул — дежурный, төйәк һаҡсыһы. Унан һуң капитандың әмерен бер һүҙһеҙ үтәргә килешкәйне улар.

Малайҙар, Иршатҡа эйәреп, Ҡалманай буйлап атланы. Болондо үткәс тә, һуҡмаҡ уларҙы әрәмәлеккә алып инде. Бында муйыл, балан, артыш ҡыуаҡтары араһында өйәнке һәм ректәр ҙә күренгеләй ине. Аҫта, күләгәлә, билгә етеп ҡыяҡ үләндәр үҫкән. Йылан кеүек борғоланған һуҡмаҡ менән барҙылар-барҙылар ҙа йәнә ҙур ғына болонға килеп сыҡтылар. Уның арғы яғы урманға барып терәлә ине.

— Ана, урман буйында обелиск ҡалҡып тора, — тине Иршат, ҡулы менән төртөп күрһәтеп.

— Эйе, күрҙек, — тине малайҙар һәм туптура шунда йүнәлделәр. Уларҙы обелиск тирәяғында ҡып-ҡыҙыл сәскә атып ултырған ҡәнәферҙәр ҡаршы алды. Ә мәрмәр ташҡа бронза төҫөндәге буяу менән:

«Бында 1919 йылдың 12 майында колчаксыларға ҡаршы көрәштә ҡаһармандарса һәләк булған

Фома Иванович Петров
Бәхтиәр Ғизетдин улы Иргәлин

ерләнгән.

Халҡыбыҙҙың азатлығы, бәхете өсөн ҡорбан булгандарҙың яҡты иҫтәлеге алдында баш эйегеҙ!» — тип яҙылғайны.

Малайҙар обелиск алдында тын ғына баҫып торҙо. Бер аҙҙан Иршат, ғорурланған һымаҡ:

— Был һәйкәлгә беҙҙең пионер дружинаһы шефлыҡ итә. — тине.

Хәсән яңы иптәшенә айырыуса йылы ихтирам менән ҡараны.

— Тырышлығығыҙ күренеп тора. Ә уларҙың нисек һәләк булғандарын беләһеңме һуң?

Иршат башын эйеп уйға ҡалып торҙо. Унан:

— Аҙ ғына беләм, — тине. — Улар, партизан отрядының сигенеүен ҡаплап, колчаксыларға ҡаршы торғандар, үҙҙәре үлһәләр ҙә, иптәштәрен эҙәрлекләүҙән ҡотҡарғандар. Был турала Ҡал-

манайбаш мәктәбендәге ошо партизандарға арналған мөйөштәге яҙмаларҙан да белеп була.

Хәсән шунда уҡ һорай һалды:

— Мәктәбегеҙҙә шундай мөйөш тә бармы ни әле?

— Бар. География уҡытыусыһы ойошторған Мәжит Зәбихович, хәҙер пенсияла инде ул. Таллыгүлдә йәшәй.

— Минең ҡарт олатай хаҡында унда ни ҙә булһа бармы һуң?

— Уны яңыраҡ астыҡ бит әле.

— Ҡасан?

— Үткән йыл ғына. Ә исемен обелискыға быйыл май айында ғына яҙып ҡуйҙыҡ.

Иршаттың һуңғы һүҙҙәренән һуң Хәсән, ҡарт олатаһының аҡ мәрмәр таштағы исеменә ҡарап, ғорурланып ҡуйҙы, күңелендә быға тиклем кисерелмәгән оло хистең тамыр йәйеүен тойҙо. Бәхтиәр олатаһы тураһында атаһының һөйләгәнен томанлы ғына хәтерләп, ул ваҡыттағы үҙенең вайымһыҙлығына ғәжәпләнде.

— Малайҙар, — тине ул ҡапыл, — мин ҡарт олатайым хаҡында күберәк белеп ҡайтырға уйлайым. Иртәгә Ҡалманайбашҡа барып, мәктәптәге яҙмаларҙы күсереп алырға ине.

Илнурҙың был арала тартылып, тағы ла оҙонсалана төшкән йөҙө, ҙур зәңгәр күҙҙәре ҡараңғыланып китте.

— Һин нимә, Хәсән, беҙҙе кемгә һанайһың? — тине ул. — Бәхтиәр олатайыңды һин

үҙеңдеке тип кенә уйлайһыңмы? Уның тормош юлын, батырлығын үҙең генә өйрәнергә хаҡлы тип иҫәпләйһеңме? Яңылышаһың. Бәхтиәр олатай беҙҙең ауыл батыры, халыҡ батыры. Барыбыҙ өсөн дә ҡәҙерле. Шуға күрә уның хаҡында беҙҙең дә күберәк белгебеҙ килә. Йә, һеҙҙеңсә нисек, малайҙар?

— Беҙҙеңсә лә шулай, һин әйткәнсә, — тине Рәфҡәт.

Хәсәндең күҙҙәре нурланып китте:

— Бергәләп булғас, бергәләп, улайһа...

САФА ӘМИНДЕ ФАШЛАЙ

Әмин тыштан бер ни булмаған кеүек йөрөһә лә, иптәштәренә ҡарата хыянаттары өсөн выжданы тыныс түгел ине. Үҙенең көньяҡҡа сәйәхәт итеү хыялының да әлегә тормошҡа ашмаҫтай буш нәмә булыуын аңлай башлағайны ул. Малайҙарҙы ҡайтыр яҡҡа бороу теләге барып сыҡмағас, хыянаты өсөн тынғыһыҙланыуы тағы ла көсәйә төштө. Төнгө эштәрен әлдә береһе лә белмәне, тип йөрөһә лә, һиҙенеүселәр бар ине. Шуларҙың береһе — Сафа ине. «Карап» ағып киткән төндө Әмин ҡыуыштан мүкәйләп сығышлай уның аяғына ҡулы менән баҫып китте. Сафа ярым йоҡоло көйө быны тойҙо, тик күңелендә шик-шөбһәһе булмағас, иғтибар итеү кәрәклеге башына ла килмәне.

Башҡалар ҙа шикләнде, әлбиттә. Тик береһе

лә күцелендәген асыҡтан-асыҡ ярып һалырға батырсылыҡ итмәне. Өстөндә тотолмағас, үҙеңдең шиктәреңә таянып ҡына кешене ғәйепләү әхлаҡһыҙлыҡ булыр ине.

Сафа бөгөн иптәштәренән тороп ҡалғас, ҡармаҡ һалырға әҙерләнде, ергә һуҙылып ятҡан Әмингә ҡарап-ҡарап алды.

— Әйҙә, бергә ҡармаҡ һалайыҡ, — тине ул.— Илнурҙың ҡармағы буш бит. Һуңынан ҡоро-һарыны икәүләп йыйырбыҙ.

Теге ҡуҙғалманы ла.

— Эй-й, туйҙырҙы бөтәһе лә. Тиҙерәк ҡайтаһы ине, — тине ул бер аҙҙан.

Ошо икәүҙән-икәү ҡалған уңайлы осраҡтан файҙаланып, Сафа үҙенең шиктәрен әйтергә булды.

— Әмин, тиҙерәк ҡайтырға теләп ағыҙҙыңмы ни «карап»ты?

Әмин, ҡорт саҡҡандай, шунда уҡ тороп ултырҙы.

— Һин нимә, миңә гел яла яғаһың? Күрҙеңме ни?

— Күрмәнем. Ләкин һиҙендем. Шул төндө ниңә ҡыуыштан сығып йөрөнөң? Минең аяҡҡа ҡағылып киткәненде тойҙом бит.

— Үҙ хәжәтем менән.

— Үҙ хәжәтең, имеш. Әгәр беҙҙең төйәккә ят кеше килеп сыҡһа, Аҡтырнаҡ, моғайын, тауыш ҡуптармай ҡалмаҫ ине. Ундай саҡта уның

нисегерәк ярһып абалауын беләһең. Ә мин «карап»ты ныҡ бәйләгәйнем.

— Һин юҡты һөйләмә. Бәлки, Аҡтырнаҡтың ситкә киткән сағы булғандыр...

— Был — икеле... Ярай, «карап»ты һин ағыҙманың, ти. Ә ниңә икмәкте йәшерҙең?

Әмин үҙенең был эшен дә бер кем күрмәүенә ныҡ ышана ине. Шуға таянып, ҡыҙып уҡ китте.

— Һин ауыҙыңды йыйып һөйләш. Юғиһә, һалдым осорҙом.

— Ҡыҙма, миңә һуҡһаң, Аҡтырнаҡ һиңә ташланырға әҙер тора. Ә бит мин икмәкте һин йәшергәнде асыҡланым.

— Нисек? — Әминдең күҙҙәре ҙур асылып, йөҙөнә ҡан бәреп сыҡты.

— Нисекме? Аҡтырнаҡҡа кейемдәреңде еҫкәттем дә эҙләргә ҡуштым. Ул төнгө эҙеңде тапты һәм туп-тура теге соҡорға табан китте. Аңланыңмы?

Әмин телһеҙ ҡалды. Бер аҙҙан, ниһайәт:

— Мин... ни... Эт яңылышҡандыр, — тине.

Сафа уға туп-тура ҡараны.

— Аҡтырнаҡ яңылышмай ул, һин яңылышҡанһың. Был хаҡта мин малайҙарға әйтмәнем әле. Үҙең менән һөйләшергә уңайлы мәлде көттөм. Ә әйтһәм, ни булырын үҙең самалайһыңдыр...

Әмин, Сафа саҡ ҡуҙғатҡан утын түмәрҙәрен баш өҫтөнә күтәрә алған көслө малай, ҡапыл ебеп төштө.

— Сафа, һин... быны... малайҙарға әйтмә инде, — тип ялбарҙы ул. — Үҙеңә, ҡайтҡас, бик ҡыҙыҡлы әкиәт китабымды бирермен...

— Миңә бер ни ҙә кәрәкмәй. Башҡаса бындай аламалыҡты эшләмә.

— Юҡ-юҡ... эшләмәм. Үҙем дә бик үкенәм хәҙер, хаталандым. Әйтмә инде. Ваҡыты еткәс, үҙем әйтермен. Тик әле түгел.

Уның үкенес тулы ҡарашын күреп, Сафа йомшарҙы:

— Ярай, әйтмәм.

Улар, ҡармаҡ тотоп, йылға буйына килде.

ӘРӘМӘ АША ҠАЛМАНАЙБАШҠА

Икенсе көндө «карап»ты һаҡлап береһе лә тороп ҡалырға теләмәне. Хатта Әмин дә: «Партизандар хаҡында минең белгем килмәйме ни! Мин кемдән кәм?» — тип һөйләнде. Был бәхәстән малайҙарҙы Иршат ҡотҡарҙы.

— Малайҙар, ҡайғырмағыҙ, — тине ул. — Зәңгәр патруль ағзаларынан ике-өс иптәшемде алып килермен. Әйҙә, һеҙ ҡайтҡансы «Дункан»ығыҙҙы һаҡлап та, йөрөп тә тороҙар.

Илнур, уны хуплап, башын ҡағып ҡуйҙы.

— Эйе-эйе, Иршат, был бик шәп булыр. Ә Актырнаҡты әйберҙәрҙе һаҡларға бәйләп ҡалдырырбыҙ. Нисек уйлайһың, Сафа?

— Шулай итербеҙ. Йәне кеүек һаҡлаясаҡ ул.

...Оҙаҡ та үтмәне, Иршат өҫтәренә футболка,

джинсы салбар кейгән, ҡояшта янып ҡарайғанлыҡтан, бер-береһенә оҡшап торған өс малайҙы эйәртеп килеп тә етте. Сәйәхәтселәр улар менән танышып аҡлашҡас, эйберҙәр янына Актырнаҡты бәйләп, күмәкләп Ҡалманайбаш ауылына юл тоттолар.

Ҡалманайҙың ауыл яғы ла әрәмәлек ине. Иршат малайҙарҙы шуның аша тар ғына һуҡмаҡтан алып китте. Уның артынан атлаған Хәсән тирә-яғына ҡарана-ҡарана барҙы. «Был тирәләр ҙә матур. Беҙҙең Ҡалманай буйҙары кеүек ерҙәр башҡа яҡтарҙа юҡтыр ҙа ул», — тип уйланы. Унан Бәхтиәр олатаһын күҙ алдына килтерергә тырышты. Уның хыялында ул олпат һынлы, Буденныйҙыҡы кеүек ҡалын мыйыҡлы булып кәүҙәләнде. Ҡапыл Хәсәндең күңеле тулҡынланып китте. Бәлки, ошо уҡ әрәмә аша ҡарт олатаһы колчаксыларҙы ҡыйратырға барғандыр. Әлбиттә, төн булғандыр. Күктә йондоҙҙар емелдәп, тулған ай балҡып, уларға юл күрһәткәндер. Әрәмә ситендә туҡталып, ауылға разведка ебәргәндәрҙер. Һуңынан унда һиҙҙермәй үтеп инеп, аҡтарҙы ҡырғандарҙыр.

Малайҙар тауыш-тынһыҙ атланы. Ихтимал, улар ҙа партизандар тураһында уйланғандарҙыр. Бара торғас, Илнур Иршаттан һорап ҡуйҙы:

— Партизандар ауылға ошо әрәмә аша инмәнеләрме икән?

Алдан барған Иршат артына ҡарап алды ла:

— Юҡ, өлкәндәрҙең һөйләүенә ҡарағанда,

партизандар ауылға ҡапма-ҡаршы яҡтан үтеп ингәндәр, — тине. — Ә үҙ биләмәләренә ҡайтҡан саҡта бынан бер аҙ үрҙәрәк Ҡалманай буйына алып барыусы юлдан киткәндәр. Әлеге обелиск тәңгәлендәге кисеүгә табан.

Был һүҙҙәрҙе иғтибар менән тыңлап килгән Хәсән:

— Ауыл аша үткәндәр инде, улайһа? — тине.

— Шулай булып сыға, — тине Иршат.

Ҡалманайбаш — был тирәләге ғәҙәти ауылдарҙың берене. Уның уртаһында — аҡ кирбестән һалынған бер ҡатлы һигеҙ йыллыҡ мәктәп. Ул йәм-йәшел рәшәткә менән уратып алынған.

Малайҙар мәктәп ихатаһына килеп ингәс, уларға ябай ғына һоро костюм, башына шаҡтай таушалған йәшкелт әшләпә кейгән, һыҙылып ҡына торған ҡара мыйыҡлы, урта йәштәрҙе уҙып барған ир кеше ҡаршы сыҡты.

— Һаумы, ағай! — тине Иршат.

— Ярайһы әле, — тине теге кеше бик ирен китмәй генә.— Был тирәлә ни әшләп йөрөйһөгөҙ, ҡустылар?

Иршат юлдаштарына ҡарап алды ла:

— Былар — Ишемйәр районының Ҡаран ауылынан килгән малайҙар, — тине.

— Һуң?..

— Улар партизандар мөйөшөн күрергә теләй. Берене — партизан Бәхтиәр Ирғәлин батырҙың бүләне.

Ағайҙың йөҙө шунда уҡ яҡтырып китте.

— Шулаймы ни? Һай, маладистар! Батырҙарҙы юллап килгәндәрме? Яҡшы! Яҡшы!.. — АҒай саҡ ҡына тынып торҙо ла: — Тик, ҡустылар, партизандар мөйөшөнә юл бикле бит әле.

— Ни эшләп? — Үҙе лә һиҙмәҫтән тауышын күтәреберәк һораны Хәсән.

— Унда үтә торған залды, бүлмәләрҙе иртән генә буяп сыҡтыҡ, — тине аҒай тыныс ҡына. — Кисә килһәгеҙ, бер һүҙһеҙ ҡарар инегеҙ.

Малайҙар һауала буяу, олиф еҫен эллә ҡайҙан уҡ тойҒайнылар. Улар, хәҙер ни эшләйбеҙ инде тигәндәй, аптырашып, бер-береһенә ҡаранылар. Шунда теге аҒай уларҙы дәртләндереп:

— Йә-йә, борсолмаҒыҙ, ҡустылар. Иҙән буяуҙары кипкәс тә, мәктәпте асабыҙ уны. Берике көндән килерһегеҙ, — тине лә боролоп китеп барҙы.

Иршат та ни тиергә белмәй уйланып ҡалды. Тик бер аҙҙан ғына йөҙө ҡапыл асылып:

— Хәҙер үк Таллыгүл ауылына Мәжит Зәбихович янына юл тотоҒоҙ, — тине. — Дөрөҫ, уны бик ҡаты ауырый, тиҙәр ине. Бәлки, һауыҡҡандыр. Нисек булһа ла белгәнен һөйләп бирер ул. Партизандарҙың исемдәрен асыҡлау, уларҒа һәйкәл ҡуйҙырыу эштәре менән оҙаҡ шөҒөлләнгән кеше бит ул. Белмәгәне юҡ, ти, уның.

Хәсән: «Малайҙарҙың барҒыһы килмәһә, үҙем генә китермен инде», — тип уйлап та өлгөрмәне, Илнур Иршаттан һорай һалды:

— Таллыгүл бынан нисә саҡрым?

— Ун биш самаһы...

— Автобус-фәлән йөрөймө?

— Йөрөй, — тине Иршат һәм ҡояшҡа ҡарап алды. — Оҙаҡламай үтергә тейеш.

Сафа менән Рәфҡәт ни ҙә булһа эйткәнсе, Әмин күтәреп тә алды:

— Киттек. Тыуған яҡ тарихын өйрәнеүҙе Бәхтиәр олатайҙан башлайыҡ.

ЮЛ — ТАЛЛЫГҮЛГӘ

Малайҙар оло юлға сығыу менән, бер автобус килеп тә туҡтаны, ултырып та киттеләр. Иршат ҡына тороп ҡалды. Машина ҡуҙғалғас: «Дункан» өсөн дә, Аҡтырнаҡ өсөн дә борсолмағыҙ»,— тип ҡысҡырҙы ул.

Ярты сәғәт үттеме-юҡмы, малайҙар Таллыгүл тәңгәленә килеп тә төштеләр. Ауыл юлдан бер таяҡ ташлам ғына ерҙә урынлашҡайны. Ул ҙур түгел, ҡыҫҡа ғына ике-өс урам. Эргәһендә, көҙгө һымаҡ ялтырап, йәшел ҡамыштар, бөҙрә талдар менән уратылған күле лә күренә. Башы менән шунда ымлап:

— Шулдыр инде уларҙың таллы күлдәре, — тине Хәсән.

— Эйе, шулдыр, — тине Илнур, уны йөпләп. — Ә ауылы былай ыҡсым ғына.

Урамға килеп ингәс, малайҙар колонканан күнәккә һыу ағыҙып торған өлкән йәштәрҙәге асыҡ сырайлы апай янына туҡталдылар.

— Апай, уҡытыусы Мәжит Зәбиховичтың өйө ҡайһы тирәлә? — тип һораны Илнур.

Апай тулы күнәген ергә ултыртты ла, һынағандай малайҙарға ҡарап:

— Уның өйө ана теге яҡта, Күл буйы урамында, — тине, ҡулы менән күрһәтеп. — Тик ул бер аҙна элек кенә үлеп китте шул.

Малайҙар был хәбәрҙән, тетрәнеп, аптырашып ҡалды. Күнәген күтәреп, ҡуҙғалып киткән апайға ла иғтибар итмәнеләр. Быға тиклем бер нәмәгә лә иҫе китмәгәндәй күренгән Илнурҙың да йөҙө ҡараңғыланды.

— Ни эшләйбеҙ инде? Был хаҡта, исмаһам, Иршат та белергә өлгөрмәгән бит. Килеп йөрөмәгән булыр инек, — тине ул, көрһөнөп. — Боролорғамы эллә?

— Боролорға, әлбиттә, — тине Рәфҡәт, капитанды хуплап.

Хәсән дә ни әйтергә лә белмәй торҙо. Башҡаларға ҡарағанда ла уның күңеле кителгәйне.

Шул саҡ Әминдең һайыҡсандыҡына оҡшаған шыҡырлығыраҡ тауышы малайҙарҙың иғтибарын тартты.

— Уҡытыусының әбейе иҫәндер, бәлки. Килеп еткәс, уны күрмәй китмәйек инде.

— Ысынлап та, — тине Хәсән, шунда уҡ дәртләнеп. — Ни ҙә булһа белеүе ихтимал да уның.

Илнурҙың да йөҙө яҡтырҙы.

— Әйҙәгеҙ!

Күл буйы урамынан стеналары тышҡы яҡтан таҡта менән көпләнеп, йәшелгә буялған алты мөйөшлө йортто табыуы ҡыйын булманы. Малайҙар ҡапҡаны асып инеү менән, ихата уртаһында башына сөйөлгән ап-аҡ яулыҡ аҫтынан маңлайында һәм сикәләрендә көмөш сәстәре балҡып торған асыҡ ҡуңыр йөҙлө әбейҙе күрҙеләр. Уның тирә-йүнендә һап-һары себештәр сипылдашып өйрөлөп йөрөй. Ә саҡ ҡына ситтәрәк сыбар тауыҡ, «ҡорт-ҡорт» килеп, суҡышы менән ергә төртөп-төртөп ала. Әбей себештәргә әҙ-әҙләп кенә ем һибә һәм үҙенә хас талғын, көйлө тауышы менән: «Йә-йә, кескәйҙәрем, сибәркәйҙәрем, сүпләгеҙ әйҙә, тиҙерәк ҙур булып үҫегеҙ», — тип һөйләнә, малайҙарҙың үҙ эргәһенә килеп баҫҡанын да тоймай.

Нинһайәт, Илнур саҡ ҡына тамаҡ ҡырғандай итеп:

— Һаумыһығыҙ, инәй, — тип өндәште.

Әбей тертләп китте, малайҙарға күҙҙәрен күтәреп ҡараны.

— Эй, күрмәй ҙә торам, ҡунаҡтар бар икән. Ни йомош ине, балаҡайҙар? Үҙегеҙҙе танып та бөтөрмәйем.

Илнур үҙҙәренең кемдәр булыуын, ҡайҙан һәм ни өсөн килеүҙәрен аңлатып бирҙе. Әбейҙең йөҙө тағы ла асыла төштө.

— Эй-й, — тине ул йәнә, — үҙе иҫән булһа, бик ҡыуаныр, белгәнен бәйнә-бәйнә һөйләр ине лә... Шул партизандар тип күпме йөрөнө! Улар

әҙе буйлап яҡын-тирәләге бөтә урмандарҙы гиҙеп сыҡты. Үҙе тапҡан урындарҙа ул ҡуйып киткән яҙыуҙар ҙа торалыр әле. Шундай эште бик изге һананы ул...

Әбей һөйләүҙән туҡтап, моңһоу ҡарашын себештәренә төбәне. Малайҙар ҙа, уның йөрәгендәге бөтмәҫ хәсрәтен тойғандай, шымып торҙо. Бер аҙҙан Хәсән һаҡлыҡ менән генә:

— Инәй, Мәжит Зәбиховичтың ниндәй сире бар ине? — тип һораны.

— Шул ҡәһәр һуҡҡан һуғыштан үпкәһендә снәрәт ҡыйпылсығы менән ҡайтҡайны. Шул урынға шеш сыҡты, яман шеш. — Әбей башын әйеберәк торҙо ла, ҡапыл иҫенә килгәндәй, өй ишегенә ишаралап: — Эй-й, балаҡайҙар, өйгә саҡырырға ла онотоп киткәнмен. Әйҙәгеҙ, сәй эсеп алырһығыҙ! — тине.

Әбейгә эйәрергә ҡуҙғалып ҡуйған малайҙарҙы Илнур туҡтатты.

— Инәй, беҙ инеп тормабыҙ инде, ваҡытыбыҙ юҡ, — тине ул. — Партизандар тураһында Мәжит Зәбиховичтың яҙмалары ҡалманымы?

— Бар ине, балаҡайҙар, бар ине,— тине әбей, яғымлы ҡарап. — Тик бер кеше, кем әле, эй хәтере... Илсеғолов... әйе, район газетаһынан... бөтәһен дә йыйып алып китте. Партизандар тураһында китап яҙам, тиме?

— Ҡыҙыҡ... — тине Илнур, уйға ҡалып.

— Ҡыҙыҡ, әлбиттә, — тине әбей, Илнурҙың һүҙен әләктереп алып. — Партизандар хаҡында

беләһегеҙ килһә, ана шул Илсеғоловҡа барығыҙ, балаҡайҙар.

— Ярай, инәй, — тине Илнур, ҡапҡа яғына ҡуҙғалып, — беҙ китәбеҙ. Һау булығыҙ!

— Юлығыҙ уң булһын, балаҡайҙар. Юҡҡа сәй әсеп, тамаҡ ялғап ҡына китмәнегеҙ, — тип өтәләнеп ҡалды әбей.

АЛТЫНСУРИН МЕНӘН ЙӘНӘ БЕР ОСРАШЫУ

Малайҙар яңынан оло юлға сығып, район үҙәге Ҡарабай поселогына автобус көттөләр. Ләкин ул килмәне лә килмәне. Илнур, аптырап, башын сайҡап ҡуйҙы, ни эшләйбеҙ инде, тигәндәй, иптәштәренә ҡараны. Шунда Сафа үҙенең сәрелдек тауышы менән күңелендәген әйтеп һалды.

— Әллә Ҡалманайбашҡа ҡайтып ҡына китәйекме?

Рәфҡәттең дә нескә хисле күңеле тыуған яҡтарға, өйҙәренә ҡош булып осорға әҙер ине. Сафаның һүҙҙәре шул ҡошҡа ҡанат ҡуйғандай итте.

— Ысынлап та, малайҙар, әллә тәртәне борайыҡмы? Беҙҙең йылға башына барып етәһе лә бар бит әле.

Рәфҡәт, үҙен яҡлауын өмөт итеп, Әмингә төбәлде. Тик тегеһе ни ҙә булһа әйтергә ашыҡманы, уйланды. Ул тарихтан дәреслекте уҡып гел «бишле» ала ине. Ә Иршат: «Дәреслекте һәр ҡайһыбыҙ уҡый. Тарихты өйрәнеү тыуған край-

ҙы, уның күренекле кешеләрен, батырҙарын өйрәнеүҙән башлана», — тине. Уға әлеге осрақ тап Иршат әйткән мөмкинлекте тыуҙыра түгелме? Партизан Бәхтиәрҙең яҙмышында, батырлығында тыуған яҡтың тере тарих еле сағылмаймы ни?! Был минуттарҙа ул элекке бөтә көйһеҙлектәрен онотто, күңеле батырлыҡ эҙенән барырға әйҙәне. Шуға күрә лә, иптәштәрен ғәжәпкә ҡалдырып:

— Беҙ нисек булһа ла шул Илсеғолов ағайҙы күреп ҡайтайыҡ инде, — тине ул.

Башта аптырабырақ ҡалған Илнур быйан һуң, үҙен ҡулға алып, хәл иткес һүҙен әйтте:

— Һиҙеп торам: беҙ Ҡарабайға бармаһаҡ, Хәсән унда бер үҙе китәсәк. Был беҙгә оят булыр ине. Бергә юлға сыҡтыҡ, бергә ҡайтырға ла тейешбеҙ.

Сабыр иткән — моратына еткән, тиҙәр. Йәнә бер сәғәтләп көткәс, Ҡарабай аша үтеүсе бер автобус малайҙарҙы ултыртып алып китте. Поселокка килеп еткәндә, төш ауышҡайны инде. Сәйәхәтселәр асыҡҡайны. Машинанан төшкәс тә, ашханаға инеп тамаҡ ялғап сыҡтылар ҙа район газетаһы редакцияһын эҙләп киттеләр.

Ҡарабай поселогының үҙәк өлөшө өс, биш ҡатлы кирбес йорттарҙан тора. Партияның район комитеты һәм район Советы башҡарма комитеты урынлашҡан үҙәк урам асфальтланған, башҡаларында — шоссе юл. Машиналар үтеп-һүтеп тора, өйрөлөп туҙан күтәрелә. Был — малайҙарға оҡ-

шап бөтмәне, әлбиттә. Улар, морондарын йыйырып, тротуарға, ағастар күләгәһенәрәк тайпылды.

Малайҙар, һораша-һораша, редакция урынлашкан йортка килеп етте. Ул поселоктың шәхси йорттар теҙелеп киткән бер урамында, ҙур ғына ағас бинала ине.

Илнур, артына боролоп, иптәштәренә карап алды ла һаклык менән генә «Хаттар бүлеге» тип яҙылған ишекте асып, эскә атланы. Бүлмәлә бер китап шкафы һәм ике яҙыу өҫтәленән башка бер нәмә лә юк ине. Тәҙрә эргәһендәге өҫтәл артында сәсен егеттәрсә алдырған бер ханым ултыра. Малайҙар килеп инеү менән, ул кағыҙҙарҙан башын күтәрҙе. Йәп-йәш кенә, ап-ак тулы йөҙлө. Кыҫынкырак күҙҙәре ғәжәпләнеү менән караны.

— Һаумыһығыҙ, апай, — тине Илнур кыйыу ғына.

— Һау ғынабыҙ әле, кустылар, — тине апай, сак кына йылмайып.

— Беҙгә Илсеғолов ағай кәрәк ине.

— Ә-ә... — тине апай, һуҙып. — Ул күрше бүлмәлә, партия булегендә эшләй.

Илнур, еңел һулап, ишек яғына кузғалып куйғайны ла, апай, нимәлер иҫенә төшкәндәй, кулын күтәрҙе.

— Ә-ә... ул колхозға киткәйне бит әле.

Малайҙар, аптырашып, бер-береһенә карашып куйҙы.

— Бөгөн кайтырмы икән? — тип һораны Илнур.

— Белмәйем. Иртәгә килһәгеҙ яҡшыраҡ булыр ине.

— Апай, — Хәсән бер аҙым алға атланы, — Илсеғолов ағайҙы нисек тә бөгөн күргә ине беҙгә.

— Шулайҙыр ҙа... — апай вайымһыҙ ғына башын ситкә борҙо, — тик бөгөн ҡайтып етермеюҡмы — белмәйем. Шулай ҙа эш аҙағынараҡ килеп әйләнерһегеҙ.

Апай менән һаубуллашып урамға сыҡҡас, Илнур асыу менән ҡулын һелтәп ҡуйҙы.

— Ниндәй уңмаған юлға сыҡтыҡ әле беҙ бөгөн!

Хәсән, уны тынысландырырға теләгәндәй:

— Эш аҙағына табан күрә алһаҡ та һәйбәг булыр ине әле. Ике-өс сәғәткә нисек тә түҙербеҙ, — тине.

Малайҙар редакцияның ҡапҡа төбөндә ҡайҙа китергә белмәй тапанып торғанда, Рәфҡәт әйәге менән ишаралап:

— Әйҙә, анау паркка барып, бер аҙ ял итәйек, — тине.

— Ысынлап та, туҙан араһында уралып йөрөгәнсе, киттек, — тине Илнур ҙа, йәнләнеп.

Район ял паркының ҡапҡаһынан үтеп, таш юлдан эскә атланылар. Олпат ҡайындар, йүкәләр, ҡолас етмәҫ тирәктәр уларҙың иғтибарын тартты. Кәнәфер һәм пион түтәлдәренә һоҡланышып ҡарап торҙолар, ҡыҙыл, ал, аҡ төҫтәр менән балҡыған сәскәләр күңелдәрен күтәрҙе.

— Ана, кемгәлер һәйкәл ҡуйылған, — тине алданыраҡ барған Сафа, ҡулын һуҙып.

Бөтәһе лә шул яҡҡа ҡараштарын йүнәлтте. Унда бетон постаментҡа мәрмәр бюст ҡуйылғайны. Һәйкәл тирә-яғы ҡап-ҡара баҙыҡ сылбырҙар менән уратып алынған, һәм ошо майҙан эсендә ҡып-ҡыҙыл ҡәнәферҙәр балҡып ултыра.

Малайҙар килеп еткәс тә постаменттағы яҙыуға ҡаранылар. Унда: «Большевик Ғабдулла Ҡорбан улы Алтынсурин. 1883—1919», — тип кенә яҙылғайны.

Һәйкәлдә Алтынсурин киң күҙелле, кешелекле һәм ихтыярлы кеше булып сағылған. Киң маңлайы, йөҙөндәге һиҙелер-һиҙелмәҫ һыҙаттар, алыҫҡа төбәлгән үткер күҙҙәре ошо хаҡта һөйләп тора һымаҡ.

— Бына тағы бер осрашыу, — тине Илнур, һәйкәлдән ҡарашын алмай.

— Бында ҡайҙа барһаҡ та Алтынсурин да Алтынсурин,— тине Рәфҡәт, ғәжәпләнгән һымаҡ.

— Ниңә, был насармы ни? Райондың халҡы үҙ геройҙары менән ғорурлана, иҫтәлектәрен ҡәҙерләп һаҡлай икән — был һәйбәт, минеңсә, — тине Хәсән.

Бер һәйкәлгә ҡарап, бер сәскәләргә һоҡланып торған Әмин, уға боролоп, башын ҡағып ҡуйҙы:

— Эйе, һәйбәт. Үҙ азатлығы, үҙ бәхете өсөн көрәшкәндәрҙе халыҡ онотмай, тиҙәр. Дөрөҫ икән. Мин шуны аңланым.

Хәсән уға ғәжәпләнеп ҡарап алды: Әминме

был, түгелме? Һуңғы мәлдә ул бөтөнләй икенсе кешегә әйләнде.

— Килеп яҡшы иттек, — тине Илнур.

Ләкин улар алдында йәнә бер осрашыу тора. Уныһы нисек булыр? Шул борсой ине сәйәхәтселәрҙе.

ҠАҺАРМАНДАР ҮЛЕМҺЕҘ!

Малайҙар редакцияға әйләнеп килгәндә, бәхеттәренә ҡаршы, Илсеғолов ҡайтҡайны. Ул үҙ бүлмәһендә яҙышып ултыра ине. Артҡа таралған ҡуйы ҡара сәстәре араһында буй-буй салдары күренгеләгән, атлет һымаҡ һомғол кәүҙәле кеше икән. Шешмәгерәк ҡабаҡтары аҫтынан һоро күҙҙәре йылмайыбыраҡ ҡарай.

— Йә ҡустылар, ни эш бөтөрөп йөрөйбөҙ? — тине ул, шариклы ручкаһын өҫтәлгә ҡуйып.

Илнур, ғәҙәтенсә, иптәштәренә ҡараш ташлап алды ла:

— Ағай, беҙ Ҡалманай буйы партизандары менән ҡыҙыҡһынабыҙ. Беҙҙе бигерәк тә Ишемйәр районы Ҡаран ауылынан Бәхтиәр Иргәлин ҡыҙыҡһындыра, — тине.

Илсеғолов башын күтәрә төштө, ҡарашында ғәжәпләнеү сағылды.

— Туҡтағыҙ әле, ҡустылар, һеҙ ҡайҙан булаһығыҙ һуң?

— Беҙ шул Ҡаран ауылынан. Бына был, — Илнур Хәсәнгә төртөп күрһәтте, — Бәхтиәр олатайҙың бүләһе.

Йылмайыуҙан ағайҙың яҫы йөҙө тағы ла йәйелә төштө, ҙур булмаған танауы биттәре менән тигеҙләшә яҙҙы.

— О-о... — тине ул, ҡыуанып, — алыҫтан килгәнһегеҙ икән. Ә мин Ҡаранда булғайным, алтмышынсы йылдарҙа. Ауыл ҡарттарын, партизан Бәхтиәрҙең улы Сәлих ағайҙы күреп һөйләштем. Әйткәндәй, Сәлих ағай иҫән-һаумы әле?

Хәсәндең күҙҙәре моңһоуланып, йөҙө ҡараңғыланып китте.

— Үлгән, — тине ул, Илсеғоловтан күҙҙәрен йәшереп. — Мин тыуғансы уҡ... Һуғышта алған орден-миҙалдары һаҡлана.

— Ауыр тупрағы еңел булһын. Эйе, беләм, батыр һуғышҡан ул. Фронттағы яралары алып киткәндер, моғайын. Мин барған саҡта уҡ сырхап тора ине. Аһ, был һуғыш! Күпме аҫыл кешеләрҙе һәләк итте. Шундайҙарҙың береһе Мәжит Зәбихович Усманов ине. Беләһегеҙҙер инде?

— Беләбеҙ, — тине малайҙар.

Илсеғолов тынып торҙо. Унан, ҡапыл уянып киткәндәй, ихлас бер яғымлылыҡ менән малайҙарға ҡараны.

— Ҡустылар, ултырышығыҙ әле. Әһә, ултырғыстар етмәй икән...

Ул, йәһәт кенә тороп, бүлмәнән сығып китте. Малайҙар ҡуҙғалышып ҡуйҙы.

— Әллә партизандар тураһында онотто инде, — тине Әмин.

Хәсән ҡаршы төштө.

— Ни эшләп онотһон ти...

Илнур бармағын ауыҙына ҡуйҙы:

— Тс-с...

Илсеғолов ике ҡулына ике ултырғыс күтәреп, бүлмәгә килеп инде лә:

— Ултырышайыҡ,— тине. Малайҙарҙы урынлаштырып бөткәс, үҙенең өҫтәл артына барып ултырҙы, йылмайып ҡына һүҙ башланы: — Хәҙер партизандар тураһында һөйләшеп алайыҡ. — Ул фекерҙәрен туплап торған арала, Хәсән үҙенең көндәлек дәфтәрен сығарып, ручкаһын уңайлап тотоп яҙырға әҙерләнде. — Башта шуны әйтеп китәйем әле. Мин бынан егерме биш йыллап әлек район газетаһы редакцияһына эшкә килдем. Яңы ғына университет бөтөрөп ҡайтҡан йәш егетмен, эшкә атлығып торған саҡ. Нисектер, редактор миңә район партия тарихын өйрәнеп, икеөс мәҡәлә яҙырға ҡушты. Яуаплы бурыс. Ең һыҙғанып тотондом. Башта уҡ Ғабдулла Алтынсурин шәхесенә килеп төртөлдөм. Уның партизан отрядында бик күп большевиктар була. Эҙләнә торғас, бер килке партизандарҙың исемлеген дә таптым.

Илсеғолов шунда, һүҙҙән туҡтап, тәҙрәгә бороло ҡараны. Тыштағы сирень ҡыуаҡтары араһында сырҡылдашҡан бер нисә сәпсек иғтибарын тартты, күрәһең. Хәсән шуны ғына көтөп торған кеүек:

— Ул исемлектә минең ҡарт олатай бар инеме? — тип һорай һалды.

Илсеғолов шунда уҡ малайҙарға боролдо.

— Бар ине. Хатта Бәхтиәр Ирғәлиндең ҡайҙан булыуы ла күрһәтелгәйне. Ләкин уның хаҡында башҡа бер ни ҙә яҙылмағайны. Һеҙҙең ауылға барғанда, Бәхтиәр Ирғәлин, бәлки, иҫәндер, тигән уй ҙа юҡ түгел ине. Өмөтөм аҡланманы, әлбиттә. Шулай ҙа уның улы Сәлих ағайҙы осратып һөйләшеүем яҡшы булды: Бәхтиәр партизандың тормош юлы бер аҙ асыҡлана төштө.

Шул уҡ алтмышынсы йылдар башында Ҡалманайбаш мәктәбе уҡытыусыһы Мәжит Зәбихович та эҙәрмәнлек эшен башланы. Ул үҙенең йәш ярҙамсылары менән райондың күпселек ауылдарын йөрөп сыҡты һәм иҫән-һау йәшәп ятҡан ике партизанды, үлгәндәренең байтағының фотоһүрәтен таба алды. Иҫән партизандарҙың берене, Етеҙәк йылғаһы буйындағы Таулы ауылы кешеһе, Ҡалманайбаштан партизан отряды сигенгәндә Алтынсурин эргәһендә булған, уның теге ике партизанға күрһәтмә биреүен күҙәтеп торған икән. Тик Бөйөк Ватан һуғышынан көслө кантузия менән ҡайтҡанғамы, ике партизандың да исем-фамилияһын хәтерләй алманы. Ә Фома Ивановичтың һарғайып бөткән фотоһүрәтен күреү менән таныны: «Отрядтың сигенеүен ҡаплап ҡалыусыларҙың берене ул ине», — тине.

Икенсе иҫән партизан Ҡалманайбаш операцияһында ҡатнашмаған. Ул отрядтың хәрби эштәре хаҡында байтаҡ нәмә һөйләһә лә, әлеге ике

партизанды белә алманы. Бәхтиәр Иргәлиндең фотоһүрәте һаҡланмағайны. Шуға күрә уны табыу оҙаҡарак һуҙылды.

— Нисек таптығыҙ һуң? — тип һорау ҡыҫтырҙы Хәсән.

— Нисекме? Осраҡлы рәүештә. Нисектер, 50-се йылдарҙа баҫылған республика газетаһын аҡтарғанда, бер некрологҡа иғтибар иттем дә шунда уҡ күҙ йүгертеп сыҡтым. Ҙур етәксе, элекке большевик хаҡында биографик белешмәлә: «Граждандар һуғышы осоронда колчаксыларға ҡаршы партизандар хәрәкәтендә актив ҡатнашҡан», — тип яҙылғайны. Тыумышы менән беҙҙең райондан булғас, яҡташыбыҙҙың ғаиләһен эҙләп Өфөгә киттем. Ҡарттың тормош иптәше менән осрашыу бәхетенә ирештем. Ул ниндәйҙер яҙмалар килтереп сығарҙы. Был — ҡаралама хәлендәге иҫтәлектәр ине. Унда Алтынсурин отрядының батырлыҡтарын асыҡлаусы ҡайһы бер мөһим белешмәләр менән бергә, Ҡалманайбаш ауылы янында партизандарҙың сигенеүен ҡаплап ҡалған ике ҡаһармандың да исем-фамилияһы бар ине. Тәүгеһен — Фома Иванович Петровты — беҙ дөрөҫ асыҡлағанбыҙ. Ә икенсеһен табыу беҙҙең өсөн оло ҡыуаныс булды. Ул — Бәхтиәр Иргәлин ине.

Илсеғолов үҙенә хас яғымлылыҡ менән йәнә йылмайып ҡуйҙы. Хәсән уның партизандарҙы эҙләүҙәге ныҡышмалылығына һоҡланып ултырҙы. Илнур менән Әмин дә хәбәрсе ағаларына ҡа-

раштарын ихтирам менән текләгәйне. Уларҙың иеҙҙәрендә, күҙҙәрендә әске бер нур, яҡтылыҡ балҡыуы шуны күрһәтеп тора ине.

— АҒай, — тине Илнур көтмәгәндә, — Фома Иванович ниндәйерәк кеше була?

— Ул — ярлы крәҫтиән малайы. Ун дүртенсе йылда рус-герман һуғышына алына. Бер йылдан яраланып ҡайта. Октябрь революцияһы еңгәс, ул ауылда Совет активисы булып китә. Шуға ла аҡ чехтар беҙҙең яҡҡа килеп сығыу менән, кулактар уны тотоп бирәләр. Атылырға тейешле бер нисә кеше менән Фома Иванович мунсаға ябып ҡуйыла. Алтынсурин үҙенең ҙур булмаған отряды менән ҡараңғы төндә Козлово ауылын килеп баҫа һәм тотҡондарҙы ҡотҡара. Шунан һуң Фома Иванович партизан булып китә. Колчаксылар килгәс тә, ул Алтынсурин отрядына ҡушыла. Ҡалманайбаш янында партизандарҙың сигенеүен ҡаплап ҡалыу бурысын командир, әлбиттә, үҙенең Фома менән Бәхтиәр кеүек һыналған һуғышсыларына тапшыра. Тегеләре, күренеүенсә, был ышанысты аҡлай.

Башын ҡыяраҡ һалып йотлоғоп тыңлап ултырған Әмин ҡалҡынып ҡуйҙы.

— Был ике партизандың батырлығы, һеҙҙеңсә, нимәлә һуң?

— Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уларҙың батырлығы ғулыһынса асылып бөтмәгән әле, — тип һөйләп китте Илсеғолов.— Әммә беҙгә билдәлеһе лә һоҡланғыс. Алтынсурин отряды Ҡалманайбашта һан

яғынан күпкә өстөн колчаксыларҙың көслө ҡаршылығына осрай. Ул тегеләрҙе баштағы дөйөм паника ваҡытында ҡыра-ҡыра ла, инде дошман иҫенә килеп, ойошҡан рәүештә ҡаршылыҡ күрһәтеүгә күскәс, сигенергә әмер бирә. Партизандар араһында яраланыусылар ҙа була. Билдәле, уларҙы ҡалдырып китергә ярамай. Төн ҡараңғылығынан файҙаланып, партизандар ауылдан Ҡалманай кисеүенә ашыға. Бында килеп етеүгә, аҡтар уларҙың үксәләренә баҫа башлай. Ҡаршы ярға сыҡҡас, Алтынсурин пулемет һәм винтовка менән ҡоралланған ике һуғышсыны сигенеүҙе ҡаплап торорға ҡалдыра.

Ике партизан, ут яуҙырып, аҡтарға йылғаны аша сығырға ирек бирмәй. Әммә тегеләр йылғаны аҫтаныраҡ кисеп, флангынан һөжүм иткәс, Бәхтиәр менән Фома урман буйынараҡ сигенә. Ошонда, күрәһең, пуля тейеп, Фома һәләк була. Бәхтиәрҙең пулеметы ут сәсеүҙән туҡталмай. Уға китергә лә мөмкин. Тик ул яраланған, хәлһеҙләнгән булырға тейеш. Шуға күрә, һуңғы патронғаса атҡас, ул тороп баҫа, дошмандарға нәфрәт һүҙҙәрен ҡысҡыра. Шул хәлдә колчаксылар уны уратып алалар һәм ҡылыс менән сапҡылап үлтерәләр. Был хаҡта аҡ һалдат үҙе квартирҙа торған бер ҡартҡа һөйләгән, имеш, тиҙәр.

Аҡтар киткәс, ауыл халҡы ике партизанды бер ҡәбергә күмә, әле обелиск торған урынға. Кеҫәләренән бер ниндәй документ та табылмай. Шулай итеп, рус һәм башҡорт — бер ҡәберҙә.

Бөйөк рус халҡы менән башҡорт халҡының уртаҡ яҙмышына, мәңгелек дуҫлығына ғәжәйеп бер символ был. Улар үҙ бурыстарын тулыһынса үтәйҙәр. Ҡаһарманлыҡтары — бәхәсһеҙ, минеңсә. Һеҙҙеңсә нисек һуң, ҡустылар?

Күҙҙәрен йәш ҡаплаған Хәсән бер һүҙ ҙә әйтә алманы. Бөтәһе өсөн Илнур яуап бирҙе:

— Беҙҙеңсә лә, был — оло батырлыҡ!

— Шула-ай, — тине Илсеғолов, һуҙып.

Баянан бирле тамағына тығылған төйөрҙө йота алмай ыҙалаған Рәфҡәт, ниһайәт, тыныслана төшкәс, башын күтәрҙе.

— Ни эшләп был ике партизан оҙаҡ ваҡыт билдәһеҙ ҡалды икән?

Илсеғолов, урынлы һорау тигәндәй, башын ҡағып ҡуйҙы.

— Быныҡ дөрөҫөн генә әйтеүе ҡыйын. Күп йылдар үткән, күп һыуҙар аҡҡан. Шулай ҙа фараз итергә мөмкин.

Алтынсурин отряды Ҡалманайбаштан киткәс, ҡабат был яҡтарға әйләнеп килмәй. Ул волостың бөтөнләй икенсе яҡ сигенә барып сыға, аҡтарға ике-өс тапҡыр ғына һөжүм итергә өлгөрә. Отрядтың ҡайһы ауылға юл тотасағын хыянатсы колчаксыларға хәбәр итеүгә ирешә. Дошман ҡыуана, әлбиттә. Үҙҙәренең әҙерлектәрен беҙҙекеләрҙең разведкаһына һиҙҙермәү хәстәрен дә күрә.

Төндә Ҡырлыяр ауылына яҡын ғына отряд урмандан асыҡ яланға килеп сыға. Шунда ук

аҡтар уны уратып ала. Батырҙар өҫтөнә ямғыр булып плуялар ябырыла. Бындай шарттарҙа командир берҙән-бер дөрөҫ ҡарар ҡабул итә: кулсаны йомшағыраҡ урындан йырып сығырға. Уның командаһы менән партизандар кирегә, урман яғына ташлана. Ләкин пулемет һәм винтовка пулялары уларҙы ҡыуып тота, ҡаһармандар күпләп ергә ауа, Алтынсурин үҙе лә һәләк була. Ҡулсаны халыҡ үс алыусыларының бик аҙы ғына үтеп сыға. Улар бөтәһе лә тиерлек колчаксыларҙы ҡыуып килгән Ҡыҙыл Армияға ҡушылып китә. Ҡалманайбаш, Таллыгул, Сабаталы һәм башҡа күп кенә ауылдарҙан бер партизан да тыуған яҡтарына әйләнеп ҡайтмай, Фома менән Бәхтиәрҙе белгән кешеләр табылмай. Ауылда уларҙы ныҡлап ҡына эҙләү эшенә тотонған кеше лә булмай, күрәһең. Халыҡ синфи көрәш, яңы тормош төҙөү мәшәҡәттәре менән мауығыпмы, уларға иғтибарын кәметә. Ихтимал, кешеләр ул саҡта был ике партизандың ҡаһарманлығын тейешенсә баһалап та бөтөрмәгәндәрҙер. Хәйер, бөтәһен дә ҡайҙан беләһең?! Шулай ҙа батырлыҡ онотолмай, ул ҡасан да булһа ер өҫтөнә ҡалҡып, балҡып сыға.

Илсеғолов башта тәҙрәгә, унан сәғәтенә күҙ төшөрҙө. Берәй эше барҙыр, шуға ҡабаланалыр, тип уйлап, Хәсән күңелен өйкәп торған һорауҙы бирергә ашыҡты:

— Ағай, минең ҡарт олатай хаҡында тағы нимәләр беләһегеҙ?

— Нимәләрме? — Илсеғолов аҫҡа ҡарап аҙ ғына уйланып торҙо ла: — Бәхтиәр Иргәлиндең тормош юлын бер аҙ беләм шикелле, — тине. — Ул да, Фома Иванович кеүек, беренсе Бөтә донъя һуғышына алына. Фронтта 1916 йылда большевиктар партияһына инә. 19-сы йылдың башында аҡ чехтарҙы, уларға ҡушылған революция дошмандарын Башҡортостандан ҡыуғас, ауыр ғына контузия алып, ҡыҙыл армеец Бәхтиәр Иргәлин тыуған ауылына ҡайта. Ныҡлап һауығырға ла өлгөрмәй, колчаксылар беҙҙең яҡтарға баҫып инә. Ул, шуларҙан ҡасып, Алтынсурин отрядына килеп ҡушыла. Ҡыйыу пулеметсы булараҡ, бик күп дошмандарҙың башына етә ул.

Ҡарт өләсәйең дә оҙаҡ йәшәмәгән, 21-се йылда ваба сиренән үлгән. Ете йәшендә бөтөнләй етем ҡалған олатайың туғандарында тәрбиәләнгән.

Эйе, илебеҙҙең азатлығы, бәхете өсөн көрәштә һәләк булған Бәхтиәр Иргәлин менән, Хәсән, һин дә, йәштәштәрең дә ысын-ысындан ғорурланырға хаҡлы...

Илсеғолов, һорауҙарығыҙ тағы бармы тигәндәй, тын да алмай тыңлап ултырған малайҙарға ҡараны. Көтмәгәндә, башын алғараҡ һуҙып, Сафа уға өндәште.

— Ағай, Ҡалманай партизандары тураһында китап яҙырға уйлайһығыҙ икән, тип ишеткәйнек. Шул дөрөҫмө?

— Дөрөҫ, мин уны яҫа башланым, — тине Илсеґолов етди итеп. — Алтынсурин, Бәхтиәр Иргәлин, Фома Иванович кеүек ҡаһармандарҫың һәр ҡайһыһы тураһында роман яҫырға мөмкин. Уларҫың батырлыҡтары, изге эштәре үлемһеҫ.

Илсеґолов тәҫрәгә күҫ ташланы. Кис яҡынлаша ине. Ул өҫтәлдәге таралып ятҡан бер нисә бит ҡағыҫҫы йыйыштырып ҡуйҫы ла:

— Йә, ҡустылар, беҫгә һаубуллашырға ваҡыт, — тине. — Минең кис ултырып газетаға мәҡәлә яҫаһым да бар әле. Ә һеҫ ҡайҫа бараһығыҫ хәҫер?

— Беҫ Ҡалманайбашҡа ҡайтырға тейешбеҫ, — тине Илнур шунда уҡ.

— Нимә менән?

— Йәйәүләп булһа ла... — тине Илнур.

— Туҡтағыҫ, улайһа, — тине Илсеґолов. — Һеҫгә ярҫам кәрәк тә баһа.

Ул ҡайҫалыр телефондан шылтыратты. Оҫаҡ ҡына һөйләште, аңлашты. Шунан, күп тә үтмәне, бер газик редакция ҡаршыһына килеп туҡтаны.

Урамға сыҡҡас, Илсеґолов малайҫарҫың иңдәренә еңелсә һуҡҡылап:

— Йә ҡустылар, хушығыҫ, иҫән-һау ҡайтып етегеҫ, — тине.

ҠАЛМАНАЙ БАШЫНА

Иртән торғас, тын ғына ағып ятҡан, өҫтөндә аҡ томандар йөҫгән Ҡалманайға ҡарап:

— Ни әшләйбеҙ? — тине Илнур. — Аҡса бөттө. Ашарға ла бер көнлөк кенә ҡалды. Ҡайтыр яҡҡа ҡуҙғалырғамы икән?

— Ай, йәл, барып етергә ине Ҡалманай башына, — тине Әмин, көйөнөп.

— Әй, ниндәй яҡшы булыр ине, йылға башланған ерҙе күреп ҡайтһаҡ, — тине Хәсән дә.

Илнур, ҡыҙа төшөп:

— Һуң ике көн буйы ас йөрөрбөҙмө ни? — тине.

Шул саҡ малайҙар менән бергә йылға буйында йоҡларға ҡалған Иршат улар араһына килеп инде.

— Һеҙ нимә? Мин барын оноттоғоҙмо ни? — тине, үпкәләп.— Биш саҡрым ерҙе йәйәүләп бөгөн барып әйләнәһегеҙ. Ә ашарға мин һеҙгә табам. Бына хәҙер мөгәрәптән бер күнәк картуф сығарып килтерәм. Аҡса ла, башҡаһы ла табылыр. Мин һеҙгә йәнә обелискының, партизандар мөйөшөнөң, Алтынсуриндың фотоларын әҙерләп торормон.

— Былай булғас, киттек. Дуҫтар барҙа юлда бирешмәбеҙ, — тине Илнур, бөтә йөҙө менән балҡып.

Әйе, улар Ҡалманайҙың тау аҫтынан гөрләп сыҡҡан аҫыл шишмәләрен күрерҙәр, һоҡланырҙар, онотолмаҫ тәьҫир алырҙар.

Әммә Ҡаран малайҙары кешелек даръяһының Алтынсуриндар, Бәхтиәрҙәр, Фомалар ғүмеренән торған гүзәл сығанаҡтарын аса башланылар ҙа

инде. Был сыганаҡтар уларҙың рухи шишмәләренә ҡушылып, тормоштарын сағыуыраҡ, ынтылышлыраҡ итеренә мин тәрән ышанам.

Ә хәҙергә хәйерле юл уларға! Тормош үрҙәренә ҡыйыу артылһындар.

ҺҮНГӘН ЙОНДОҘ ЯҠТЫҺЫ

Кластан Асман менән Вәсифтән һуңғарақ ҡалып сыҡтым. Ҡайтҡанда шулар менән бергә тура килдемме, мыҫҡыл итергә, ауыҙҙарын ҡолаҡтарына еткәнсе йырырға ғына торалар. Иҫем китмәгән кеше булып ҡыланам да ул, тик килеп сыҡмай, әстән әсенәм. Аҙаҡтан да оҙаҡ ҡына тынысланa алмай йөрөйөм.

Урам буйлап ашыҡмайынса ғына үҙ уйҙарыма күмелеп атлайым, бер кемгә лә иғтибар итмәйем. Бына үҙебеҙҙең урамға тоташҡан тыҡрыҡҡа боролдом һәм... һөйләшеп торған дүрт-биш малай араһында Асманды, унан Вәсифте күреп ҡалдым. Аҙымдарымды тағы ла әкренәйтә төштөм, нисек тә күҙҙәренә салынмайынса үтеп китергә самаланым. Ләкин Асмандан ҡотолоп буламы һуң! Мин килеп етер-етмәҫтән үк, иптәштәренән

айырылып, ҡаршыма сыҡты, ҙур ҡара күҙҙәрен зәһәр ялтыратып, бөркөт танауы аша миңә ҡараны.

— Ә-һә, беҙҙең «этличник», алланың ҡашҡа тәкәһе... — Ул, үҙенең тапҡыр һүҙ әйтеүенә ҡыуанғандай, иптәштәренә күҙ ҡыҫып алды. — Ни хәл?

— Алланың ҡашҡа тәкәһе... Һе-һе-һе, — тип Вәсиф тә сәңкелдәп көлөп ебәрҙе.

Мин, ғәҙәтемсә, һыр бирмәҫкә тырыштым.

— Әйе шул, һеҙгә алланың ҡашҡа тәкәһе булырға кәрәк әле, — тинем, күкрәгемде киреп, һәм үтеп китмәксе булдым.

— Нимә-нимә? — тип, күҙҙәрен секрәйтеп, Асман миңә эйелде һәм көтмәгәндә аяҡ салды. Мин алға табан мәтәлләп барып төштөм, ҡулымдағы портфелем дә осоп китте.

Асман да, Вәсиф тә, башҡа малайҙар ҙа хихылдашып көлөргә тотондо. Шул саҡ нәфрәтемдән бөтә тәнем ҡалтыранды, йөрәгем күкрәгемдән атылып сығырҙай булып типте. Урынымдан нисек ырғып торғанымды ла, кәртә буйында ятҡан ҙур ғына ташты нисек әләктереп алып, Асманға табан ажарланып барғанымды ла төштәге кеүек кенә хәтерләйем. Ҡулымдағы таш та арыу тос һәм минең ҡарашым да ҡурҡыныс булғандыр, күрәһең, бер аҙҙан Асмандың аҡрын-аҡрын артҡа сигенгәнен шәйләнем. Уның күҙҙәре ҙур асылған, ҡуңыр йөҙө ағарынған. Мин баш өҫтөмә күтәргән ташты әкрен генә төшөрҙөм дә:

— Мине тағы мыҫкыл итһәң, ҡара, ошо таш менән башыңды ярасаҡмын, — тинем теш араһынан һәм, боролоп, ҡайтыр яҡҡа атланым. Асман һәм уның иптәштәре ауыҙҙарын асып ҡарап ҡалды.

Эйе, беренсе тапҡыр мин үҙемде мыҫкыл итергә ирек бирмәнем. Ләкин ниндәй ҙә булһа ҡыуаныс кеүек нәмә кисермәнем. Киреһенсә, күңелемдә бушлыҡ, үкенес тойҙом. Бергә, бер класта уҡып та, дуҫтар булаһы урынға, низағлашып йөрөү эшме ни ул!

* * *

Өйгә күңелһеҙләнеп ҡайтып индем. Һеңлем Гөлшат сәй ҡайнатып ҡуйырға ла өлгөргән. Бишенсе класта ғына уҡыһа ла, аш-һыу әҙерләргә оҫта ул. Әсәйебеҙ сөгөлдөр баҫыуында, көндәр буйы ҡайтмай, ә донъяны һеңлем көтә. Өйҙө йыйыштыра, тауыҡтарҙы, ҡаҙҙарҙы ашата, кисен, көтөүҙе ҡаршы алып, һыйырҙы ла үҙе һауа. Тик шуныһы бар, бер аҙ ҡырыҫыраҡ, минең менән әрепләшергә ярата.

Мин, туфлиҙәремде һалып, кухня өҫтәле артына килеп ултырҙым. Гөлшат кәйефемдең ниндәй булыуына иғтибар итеп тә тормаҫтан:

— Ә ҡулдарыңды кем йыуа? — тине.

— Һин нимә... бәйләнәһең әле? — тинем мин, һарыуым ҡайнап. Шулай ҙа ҡулдарымды сайҡаштырып килдем. Һеңлем үҙенең йүгерек күҙҙәре менән миңә ҡарап-ҡарап алды. Ахыры, йө-

ҙөмдән нимәлер аңланы: алдыма сәй яһап ҡуйып, тыныс ҡына өндәште:

— Мәктәп сөгөлдөрөнә китәһеңме әле?

— Бөгөн минһеҙ генә эшләп ҡараһындар, — тинем мин, йөҙөмдө йәшереп.

— Ниңә? — Һеңлем һағайып миңә текләне.— Оят бит улай...

— Телеңә һалынма, һинән һорамайҙар.

Юҡҡа-барға ла ҡабынырға тороуымды күреп, һеңлем ҡаты бәрелмәҫкә булды, күрәһең.

— Ярай, улайһа, — тине ул, — мин баҫыуға китәм. Ҡайтышлай әсәй янында туҡталырмын. Һуңлап ҡайтырбыҙ, моғайын. Көтөүҙе ҡаршыларһың.

Гөлшаттар ҙа отрядтары менән мәктәп сөгөлдөрөндә эшләй. Ул ҡабаланып сығып киткәс, кәштәнән Марк Твендың «Принц һәм теләнсе» тигән китабын алып, өҫтәлгә ҡуйҙым да уйға ҡалдым. Кисә кис, баҫыуҙан ҡайтҡас, нисек мауығып уҡығайным. Принцтың, бәләкәй булһа ла, буйға таҙа, көслө берәҙәкте нисек оҫта туҡмауы, аҡылға ултыртыуы һоҡландырғайны мине. Ә бөгөн күңел китапҡа тартылманы. Шулай ҙа, уны асып, күҙ йөрөткеләнем, тик әҫәрҙең эсенә инеп китә алманым, уйҙарым эллә ҡайҙа, Асман тирәһендә уралды.

Әле ҡасан ғына тыныс холоҡло, минең ҡарашҡа, аҡыллы ғына малай ине ул. Ни өсөн ҡылығы үҙгәрҙе һуң? Ни өсөн дуҫлығыбыҙ өҙөлдө? Ҡасан, нисек юлдарыбыҙ айырылды икән?

Әһә, был IV класта уҡығанда булды шикелле. Асман буйға ҡапыл үҫеп китте. VI класс малайҙарына тиңләште лә ҡуйҙы. Мин, эле күптәнме уның менән бер сама кеше, Асман әргәһендә себешкә әйләндем дә ҡалдым. Шулай ҙа беҙҙең ара тиҙ генә өҙөлмәне эле. Буйға үҫһә лә, холҡо, аҡылы менән шул уҡ Асман ине бит ул. Мин уның менән дуҫ булырға тырыштым, дәрестәрҙе әҙерләргә йыш ҡына үҙебеҙгә саҡыра инем. Ни тиһәң дә, Асман кеүек көслө иптәшең барҙа үҙеңде тынысыраҡ тояһың инде ул.

Әммә Асман минән үҙе ситләште.

Йәйге каникул осоронда мин пионер лагерына киттем, Асман ауылда ҡалды. Ҡайтҡас, мин уны өлкәнерәк бер нисә малай араһында осраттым һәм, ихлас йылмайып:

— Сәләм! — тинем, күрешергә ҡулымды һуҙып.

Тик Асман минең ҡулымды күрмәне шикелле. Малайҙарға ҡарап алды ла, сәйер көлөмһөрәп:

— Салют! — тине, башын ҡағып.

— Хәлдәр шәпме? — тинем, эле бер ни ҙә уйларға өлгөрмәйенсә.

— Насар түгел, — ине ул, нисектер өҫтән ҡарап, һәм йәнә: — Шәп булмаһам, духтырлығың бармы әллә? — тип өҫтәне.

Асмандың был ҡыланышы мине кәмһетһә лә, һиҙмәмешкә һалыштым, хәҙер элекке алсаҡлығына ҡайтыр ҙа пионер лагерындағы хәлдәрҙе

һораша башлар тип көттөм. Ләкин, гәжәпкә ҡаршы, ул иптәш малайҙарынан сигарет алып ҡабыҙҙы ла быҫҡытып тарта башланы. Мин Асманға шаҡ ҡатып ҡараным.

— Ниңә иҫең китте? Әллә тартҡанғамы? — тип һораны ул, мыҫҡыллағандай күҙҙәрен ялтыратып.

Мин ни тиергә лә белмәнем. Ахырҙа:

— Тартыу зарарлы бит, — тигән булдым.

— Аһа-һа-һа! — тип Асман ҡысҡырып көлдө лә: — Минең тартыуҙа кемдең ни эше бар? Тәмәке тартҡандан берәү ҙә ятып үлмәй эле. Шулай бит? — тип, миңә ҡарап башын ҡаҡты.

Мин, ҡапыл асыуым ҡабарып:

— Шулай түгел, — тинем.

Шунда өлкән малайҙарҙың береһе:

— Асман — егет кеше, һинең кеүек себештәрҙең кәңәшенә мохтаж түгел, — тине, ауыҙ йырып.

Асман, дуҫ күргән кешем, мине яҡлап тик бер һүҙ әйтһәсе. Киреһенсә, теге малайҙы хуплағандай, уға ҡушылып йылмайҙы ғына.

Башымды ғорур тотоп, ситкә атланым. Ә үҙемде ғәрлек быуа ине. Бирешмәҫкә тырышам. «Һынатма, Тамир!» — тим үҙ-үҙемә.

Ғәрсел булһам да, үпкәмде оҙаҡ һаҡлап йөрөтә алмайым, онотам мин. Икенсе көндө үк Асманды көтә башланым. «Килер, шунда ныҡлап һөйләшермен, аңлашырмын», — тинем. Тик ул беҙҙең тирәлә күренмәне. Ә үҙемә уларға барыр-

ға ғорурлығым ҡушманы. Шулай көн артынан көн үтте. Мин Асмандан һыуындым.

Ниңә шулайҙыр инде, ҡайһы бер малайҙар яҡшылыҡҡа ҡарағанда насарлыҡты йәһәтерәк үҙләштереүсәндәр. Бына Асман да тәмәке тартырға, үҙенән көсһеҙәрәктәрҙе ҡыйырһытырға бик тиҙ өйрәнеп алды. Үҙ артынан күршеләрендә йәшәгән Вәсиф исемле малайҙы ла эйәртте. Дөрөҫ, Вәсиф үҙе башҡаларға бәйләнмәй, тик ул Асмандың һәр ҡылығын хуплай һымаҡ.

Уҡыуҙар башланғас, Асман мине айырыуса үҙ итмәне. Мин унан көсһеҙәрәк, ә уҡыуҙа яҡшыраҡ инем. Отличник булыуым миңә бәйләнеү өсөн уға сәбәп кенә ине, буғай...

Кисә генә йотлоғоп уҡыған китапты бөгөн уҡый алма, имеш. Бына ғәжәп. Асман тураһындағы уйҙар башымды быраулап тик тора. Нимә эшләргә инде уның менән? Мәрйәм апай менән һөйләшеп ҡарарғамы эллә? Ошаҡлашыу кеүегерәк килеп сыға бит эле. Ундай нәмәне енем һөймәй. Хәйер, Асманды улай ғына тыйып булырмы? Юҡ. Уға мине мыҫҡылларға яңы сәбәп кенә өҫтәләсәк. Ни эшләргә һуң?.. Унан һис тә ҡурҡмаҫҡа кәрәк икән — һуғышырға. Ана, йәшкә минең һымаҡ принц көслө берәҙәкте нисек һүтеп ташлай. Миндә ундай таҫыллыҡ юҡ, элбиттә. Ләкин мин кемдән кәм? Ҡурҡмаҫҡа...

* * *

Иртәнән бирле Асман яғына эйләнеп тә ҡарамайым. Ҡараһам, шул гел генә телендә эйлән-

гән «алланың ҡашҡа тәкәһе»н әйтмәй ҡалмаҫ ине. Был һүҙҙе иптәштәр, бигерәк тә ҡыҙҙар алдында ишетеү ауыр. Ҡаршы бер һүҙ әйтһәң, күҙҙәрен ҡыҫып: «Нимә? Нимә?» — тип һиңә яҡынлашҡанда, һуҙылған танауын йәмшәйткәнсе һуғып ебәрге килә. Ләкин теләк — теләк менән, ярһыуға аҡыл баш булырға тейеш.

Оҙон тәнәфестә ул, математиканан өйгә эште күсереп алмаҡсы булып, Вәсифтән дәфтәрен һораны. Тегеһе: «Йүнләп эшләй алманым», — тине. Шунан, һиҙеп торам, Асман миңә өндәште:

— Эй һин... — Мин әйләнеп тә ҡараманым. Ул тауышын күтәрә төштө: — Эй, алланың...

Мин, ишетмәгән кеше һымаҡ, урынымдан тиҙ генә ҡуҙғалдым да кластан сығып киттем. Асман минең арттан:

— Ҡара һин уны, алланың ҡашҡа тәкәһен... Үҙен бер өшкөрөп алмай булмаҫ, — тип ҡалды.

Ҡарҡылдаһын әйҙә, мин унан ҡурҡмаясаҡмын хәҙер. Етте. Кемдәндер өркөп, ебеп йөрөү — егетлек түгел. Шулай ҙа: «Был нәмә бөгөн тағы ҡаршыма сығырмы икән?» — тип борсолоп ҡуйҙым.

Дәрес башланғас, Асман кемдәндер күсереп алған өйгә эшен таҡтаға яҙып, килделе-киттеле аңлатҡан булды. «Өслө» әләктереп, шуға бик ҡәнәғәт йылмайып, урынына ултырҙы. Ана шулай тартып-һуҙып уртасалар рәтендә бара ул.

Хәйер, беҙҙең класта «уртаса»лар күбәйеп китте шикелле. Был бер кемде лә борсомай. Тар-

тып-һуҙып булһа ла өлгәшһәң — яраған, һиңә бер кем һүҙ әйтмәйәсәк. Класс етәксеһе Мәрйәм апай йыш ҡына сирләй, больницаларҙа ятып сыға. Шуның арҡаһында ул алып барған әҙәбиәт дәресе артта ҡала. Уны ҡыуып етеү өсөн уҡытыусыбыҙ класс сәғәттәрен дә файҙалана.

Отряд советының эше һүлпәнәйҙе. Байтаҡтан бирле сборҙар үткәрелмәй, артта ҡалыусыларға ла ярҙам ойоштороломай. Асман кеүектәргә яҡшы: янмай-көймәй генә йәшәй бирәләр.

Ай-һай, бөтәһен дә тәнҡитләйем түгелме һуң?! Ә үҙем? Отрядты алға ебәреү өсөн нимә ҡылғаным бар? Юҡ шул. Класта ике отличниктың береһе, староста Зәлифәнән ҡала, мин бит. Етмәһә, отряд советы ағзаһымын.

Дәрестәр тамамланғас, бөгөн дә һуңғараҡ ҡалып сыҡтым. Коридорҙа Зөлфәткә тап булдым. Буй-һынға минең менән бер сама малай ул, тик бер аҙ йоҡараҡ. Түңәрәк йөҙөнә тәпәшерәк киң танауы килешеп тора.

— Бына һин ҡайҙа икән! — тине ул, ғәҙәтенсә эскерһеҙ йылмайып. — Кисә лә дәрестән һуң күренмәгәйнең.

— Ә һин ни эшләп йөрөйһөң?

— Мин... китапханасыны көтәм. Хәҙер киләм, тип киткәйне.

— Бәлки, бергә ҡайтырбыҙ? Әйҙә, китапты иртәгә алырһың әле.

— Китапханасы тиҙҙән килә ул. Һин яйлап ҡына атлай тор, мин ҡыуып етермен әле.

— Ярай, — тинем дә әкрен генә урамға атланым. Бик үк йылы булмаһа ла, аяҡ аҫты ҡоро, күктә унда-бында йөҙгән һоро болоттар аша, алтын шар һымаҡ, һары ҡояш моңһоу ғына көлөмһөрәп тора.

Зөлфәт килмәйме тип, артыма әйләнеп ҡарай-ҡарай барам. Тик ул һаман күренмәй. Беҙ икебеҙ бер тирәлә йәшәйбеҙ. Зөлфәт бөхтә малай. Мәктәп формаһын, күлдәген, галстугын һәр саҡ үтекләп кенә кейә. Тағы ла яҡшы ғәҙәте бар: әҙәби китаптарҙы күп уҡый, шуның менән дәрестәренә бер аҙ зыян да килтерә шикелле. Ул үтә йомшаҡ һәм бөтөнләй һуғыша белмәй.

Атлай торғас, тыҡрыҡҡа ла еттем. Унда боролоуым булды, ҡаршыма ҡапыл Асман килеп баҫты. Ҡыҫылған күҙҙәре зәһәр емелдәй.

— Ә-һә, алланың ҡашҡа тәкәһе, әлэктеңме? Ташың юҡ бөгөн, ҡурҡыта алмаҫһың. — Ул, бер ситтәрәк торған Вәсиф яғына ҡарап күҙен ҡыҫып алды.— Күсерергә өйгә эшеңде лә бирмәнең, ҡартәсәйеңдең кем икәнен танытам хәҙер.

Асман яғамдан бороп тотто. Ҡулы ҡаты йүнһеҙҙең. Тик мин был юлы ла ҡаушап төшмәнем, теге принц малайҙы күҙ алдыма килтерҙем дә: «Ҡыйыу бул, Тамир!» — тип үҙемде дәртләндерҙем. Асмандың күҙҙәренә мыҫҡыллы ҡарашымды текләнем. Был тегенең асыуын ҡуҙғатып ебәрҙе шикелле.

— Ҡарама миңә, алланың ҡашҡа тәкәһе, — тип екерҙе ул ҡапыл.

Тик унан күҙемде алманым. Теге мине ныҡ ҡына артҡа төртөп ебәрҙе. Арҡам менән ҡолап барып төштөм. Шунда уҡ һикереп торҙом да Асмандың яғаһынан әләктереп алмаҡсы булдым, ләкин өлгөрмәнем, яурынға һуғылған йоҙроҡтан йәнә салҡан барып төштөм. Инде яйлабыраҡ торҙом да әкрен генә Асманға ҡаршы атланым. Асыу, ярһыу менән күҙҙәремде йәнә уға текәнем. Шунда бер мәлгә генә йөҙөндә ҡаушау, аптырау кеүек нәмә күреп ҡалдым. Шулай ҙа ул көслө һәм үҙенең еңеүенә тамсы ла шикләнмәй ине. Асман йоҙроҡланған ҡулын юғары күтәрҙе, минең һөжүмде кире ҡағырға әҙерләнде. Шунда мин йәшен тиҙлегендә уның яғаһына йәбештем, шытырлатып, ике ҡуллап йәбештем. Теге төртөп тә, һуғып та ҡарай, тик ысҡындырыу ҡайҙа! Муйынын, һулышын ҡыҫырға тырышам. Асман борҫолана, мине алып осормаҡсы итә, бер нисә тапҡыр күҙ, ҡолаҡ төптәремә арыу ғына ҡундырып та алды, танауға ла әләкте — йылы бер нәмәнең әйәк буйлап йыбырлап киткәнен тойҙом.

Һиҙәм, Асмандың да хәле бөткәндән-бөтә, буғай. Йоҙроҡтары баштағы һымаҡ өҙә төшмәй.

— Ебәр-р! — тип хырылдай ул. — Етер-р...

Шул саҡ ул, мине үҙенән ситкә алып ырғытырға теләп, бар көсөнә һелтәнмәксе булды һәм ҡолап китте. Мин уның өҫтөнә килеп төштөм һәм, ҡағыҙҙай ағарынған йөҙөн күреп, яғаһынан ҡулымды ысҡындырҙым. Тороп баҫҡас:

— Бына шулай, аңланыңмы, алланың ахмаҡ

тәкәһе, — тинем нәфрәт менән һәм ҡойма буйында күләгәләй баҫып торған Вәсифкә мәғәнәле генә ҡарап алдым да, ҡайҙалыр аунап яткан портфелемде әҙләп, күҙәрем менән тирә-йүнде байҡаным. Шунда Зөлфәт күҙгә салынды. Портфелем уның ҡулында ине.

Мин, башымды ғорур тотоп, атлап киттем. Бер аҙ барғас, Зөлфәт миңә:

— Һиңә йыуынырға кәрәк, — тине.

Мин, өйгә табан китмәйенсә, уңға, ярлауыҡ аҫтындағы Хәйернас шишмәһенә боролдом. Зөлфәт тә миңә әйәрҙе. Уның йөҙө үтә етдиләнгән, борсолоуы күренеп тора.

— Һине былай уҡ уҫал һуғышаһыңдыр, тип уйламай инем, — тине ул, нисектер, тамаҡ төбөнән килгән һалҡын тауыш менән. — Ҡот оскәс, әй. Ул тиклем йәбешеп...

Зөлфәт минең еңеүҙе хуплар, хәлемә керер, тип көткәйнем. Ә ул нимә һөйләп килә. Әлеге һүҙҙәренә кәйефем китһә лә, ҡаты бәрелмәнем.

— Көслөрәктәр менән алышҡанда үҙеңде аярға тура килмәй инде. Ул хаҡта уйланыңмы — еңеләһең, хурлыҡҡа ҡалаһың, — тинем дә йыуынырға керешеп киттем.

Ә Зөлфәт шул саҡ, теленә тилсә сыҡҡыры нәмә:

— Улай кешене үлтереп ҡуйыуың бар бит, — тимәһенме!

Минең былай ҙа ҡуҙғалырға торған асыуға күп кәрәкме ни, ҡабындым да киттем.

— Һин, нимә, ҡуян йөрәк, мине ғәйепләйһеңме?! — Мин ҡулдарымды йоҙроҡлап, уға яҡынлаштым. — Һиңә лә, Асманды яҡлап, миңә йәбешергә кәрәк ине, бешмәгән бәлеш...

Зөлфәткә мин хәҙер уның өҫтөнә ташланырмын һымаҡ күрендемме. Етмәһә, минең йөҙ, ҡарашым аяуһыҙ булғандыр, моғайын. Ул, ағарынып, артҡа сигенде һәм, ҡапыл боролоп, шәпшәп атлап китеп барҙы.

— Һин уҫал, уҫал ғына түгел, ҡот осҡос кеше, — тине ул, аралар бер аҙ алыҫлашҡас.

Бына «ҡот осҡос» кеше лә булдым. Үҙеңде яҡлаған, кәмһетеүгә бирмәгән өсөн шундай баһа ал инде! Кемдән тиген? Дуҫ күреп йөрөгән кешеңдән. Хәйер, Зөлфәт үҙе лә сәйерерәк шул ул. Күңеле ҡыҙҙарҙыҡы кеүек нескә, йомшаҡ. Малайҙар менән һуғышыу түгел, әрләшкәне лә юҡ шикелле уның. Тик мин тормошта улай булырға ярамай, тип уйлайым хәҙер. Егет кеше үҙен яҡлай ҙа белергә тейеш.

* * *

Өйгә ҡайтҡас, мине күреү менән һеңлем Гөлшат ни әйтергә лә белмәне. Бары тик бер аҙҙан ғына:

— Кем... Һине шулай... — тине тотлоға-тотлоға. Аҫҡы ирене ҡалтыранып ҡуйҙы.

— Иҫең китмәһен юҡҡа, — тинем мин, бер ни булмағандай, һәм сисенә башланым. — Төҙәлер әле, ямауы өҫтөндә.

Һеңлем, аптырап, башын сайҡап торҙо.

— Һине кемдер туҡмаған бит, ағай.

— Юҡ-юҡ, йығылдым мин, — тинем һәм әсәйем өйҙә булмағанға ҡыуандым. Юғиһә ул төпсөнөр, һорау алып үҙәккә үтер ине.

Һеңлем яуабыма ышанманы, әлбиттә. Шулай ҙа ҡабатлап һорашманы. Мине йәлләүҙәнме, башҡа көндәргә ҡарағанда йомшағыраҡ, итәгәтлерәк булырға тырышты. Ул миңә сәй ҡуйҙы ла баҫыуға ашыҡты. Ә мин, барырғамы, юҡмы, тип уйландым. Кисә лә әшкә сыҡманым, бөгөн дә ҡалһам, минең хаҡта ни тиерҙәр? Яҡшы түгел. Кыйын булһа ла, китергә кәрәк.

Тамаҡ ялғап алғас, баҫыуға йүгерҙем. Зөлфәткә лә инеп торманым. Баяғы хәлдән һуң уға асыуым баҫылмағайны.

Ауылды сығып, бер аҙ барғас та, шәкәр сөгөлдөрө баҫыуы башлана. Был яҡ башта колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар эшләй, ара-тирә уларға ярҙамға килгән бала-сағалар, ир-аттар ҙа күренә. Мин, кешеләрҙең күҙҙәренә салынмаҫҡа тырышып, баҫыу ситенәнерәк атлайым. Башҡа ваҡыт булһа, бәлки, әсәйем янына ла һуғылып китер инем, тик әле ярамай. Кискә лә һуңлабыраҡ ҡайтырға тура килер. Йоҡларға ятһа, күрмәй ҙә ҡалыр...

Баҫыуҙың арғы башында — мәктәп участкаһы. Шунда бишенсенән алып һигеҙенсегә тиклем һәр класс үҙ алдына эшләй. Улар араһында үҙара ярыш тигән нәмә ойоштороған. Тик ул мине әллә ни борсомай. Еңдек ни, еңмәнек ни — минең

өсөн барыбер, башҡалар һымаҡ бер сама йөрөһәм — шул еткән.

Нисек ҡабаланһам да, һуңғараҡ ҡалдым. Иптәштәрем эшкә тотонғайны инде. Улар бер нисә төркөмгә бүленгәндәр ҙә, комбайн ҡаҙып ҡалдырған сөгөлдөр өйөмдәре тирәһенә баҫып, бысаҡтар менән тамырҙарҙы япраҡтарынан һәм батҡаҡтан таҙарталар.

Бөтәһенән дә элек күҙемә Асман салынды: «Нисә көн күренмәгәйне, бөгөн сыҡҡан эле эт ялҡауы», — тип уйланым мин,ештәремде ҡыҫып. Ә ниңә Зөлфәт юҡ? Ул интеллигентҡа нимә етмәгән? Әллә беҙҙең һуғышыу күңеленә яраманымы икән? Булыр-булыр...

Әһә, яңы өлкән пионервожатый ҙа бында түгелме? Венер ағай... Ул, әлбиттә, баҫыуҙа эшләүсе отрядтарға күҙ-ҡолаҡ булып йөрөргә килгән. Мәктәптә күренә башлауына өс-дүрт кенә көн әле.

Мин яҡынлаша башлағас, алдағы төркөмдәгеләр ҡапыл боролоп ҡаранылар. Күҙҙәрендә аптырау уҙа, ғәжәпләнеү ҙә сағылды. Быға минең ҡара янып сыҡҡан күҙ төбөм, ярылып, бүлтәйеп торған иренем, йөҙөмдәге бер нисә ҡара «мөһөр» сәбәпсе ине. Иң беренсе булып «һоҡланыуын» өлкән вожатый белдерҙе.

— Кем һине былай «биҙәне»? — тип һораны ул, ҡаршыма килеп.

Нисек яуап бирергә уйлап ҡуйғайным инде.

— Йығылдым. Йүгереп килгәндә ҡаты ергә йөҙөм менән барып төштөм.

Венер ағай, шикләнеп, башын сайҡаны.

— Юҡ-юҡ, йығылғанға оҡшамаған, туҡмалған һымаҡ. Ошо тиклемгә кемдең ҡулы барыр икән?!

Мин аҫтан ғына күҙ һалам: «Ни эшләр икән Асман?» Ул тыныс ҡына сөгөлдөр таҙартыуын белә. Башҡа ваҡытта ҡуҙғалыр-ҡуҙғалмаҫ ҡулдары әле етеҙерәк хәрәкәтләнә түгелме? Туҡта, йөҙөндә һиҙелер-һиҙелмәҫ ҡыҙыл тимгелдәр ҙә күренә бит. Үҙен ошаҡлап, кешеләр алдында ҡыйын хәлгә ҡалдырыр, тип ҡурҡалыр, моғайын. Ҡурҡма, мин ошаҡлашып йөрөүселәрҙән түгел. Унан һуң бөгөн һин дә күрмәгәнеңде күрҙең инде. Әлегә шул еткән.

— Бер кем дә туҡмаманы мине, — тинем мин, асыуланған һымаҡ. Һәм, бер ни булмағандай, эшкә тотондом. Һиҙҙермәҫкә тырышып, иптәштәрем миңә ҡарап-ҡарап ала. Йәлләйҙәрме икән? Береһе-бер ауыҙ асып һүҙ әйтмәй, һыу уртлағандармы ни.

— Ниңә тынып ҡалдығыҙ әле? — тинем мин, шат булырға тырышып. Тик миңә ҡушылып бер кем дә йылмайманы.

— Ҡайһы саҡта тауыш-тынһыҙ эшләп алыу ҙа килешә, — тине староста Зәлифә.

Венер агай икенсе төркөмгә китте. Асман, һүҙ теймәҫен һиҙеп, үҙен иркенерәк тойҙо. Эшенән

туктап, тирә-ягына каранды. Якындагы төркөмдә эшләгән Вәсифкә өндәште:

— Эй, арыманыңмы эле?

Вәсиф мәктәптә һәм урамда Асмандан айырылмаһа ла, бында уга эйәрмәй, нисектер, бирелеп эшләй белә. Ул өйҙәре әргәһендә кыяр, кишер, помидор һәм кыҙыл сөгөлдөр үҫтереү менән мауыға. Бындай эш менән мин дә шөгөлләнәм. Шуның арҡаһында беҙ касандыр Вәсиф менән дә дуҫлаша яҙғайныҡ. Үҫтергән йәшелсәләребеҙҙе бер-беребеҙгә күрһәтешеп, кәңәшләшеп ала торғайныҡ. Асман менән борсағыбыҙ бешмәй башлағас, мин Вәсифтән дә һыуындым.

Әле Асмандың һорауына Вәсиф әйләнеп ҡараны ла:

— Юҡ, арыманым эле, — тине, — яңы башланыҡ бит.

Шул саҡ Зәлифә, Асманға баш ҡағып:

— Ай-һай, Асман, арыҡанһыңдыр шул, күп эшләнең бит, өс-дүрт сөгөлдөр таҙарттың, — тине.

— Нимә һин юҡты һөйләйһең, — тип кыҙып китте Асман. — Ни эшләп өс-дүрт кенә булһын! Кәмендә ике тиҫтә барҙыр инде...

Был һүҙҙәргә бөтәһе лә көлөп ебәрҙе.

— Ха-ха-ха... Күп икән!..

— Ну йоҡа елкә лә инде.

— Әллә ниҙә бер килә, шунда ла йүнләп эшләмәй.

— Ҡайҙа эшләү? Башҡаларҙың күңелен һүреп йөрөй.

— Ярышта башҡа отрядтарҙан былай ҙа артта барабыҙ.

— Барһа эллә... Нимәгә беҙгә ярыш? Былай эшләгәс тә еткән.

— Улай ҡарарға ярамай.

— Ниңә ҡарамай ти? Уҡы ла, эшлә лә. Бигерәк күп егәләр.

Эш туҡталды, кемдең нимә һөйләгәнен дә белгән юҡ. Асман, ҡулын һелтәп, Вәсиф янына китеп барҙы.

Мин бындағы тел сарлауҙарға ҡушылманым. Унан ни файҙа?.. Әкрен генә сөгөлдөр таҙартам.

Өлкән вожатый менән бер ағайҙың беҙгә табан килгәне күренде. Ағай тигәнебеҙ бригадир икән. Ибраһим исемле ул. Буйға тәпәш кенә, әммә үҙе киң яурынлы, асыҡ түңәрәк йөҙөнә ҡалын мыйығы олпатлыҡ биреп тора.

Ибраһим ағай, килеп етер-етмәҫтән:

— Һаумыһығыҙ, балалар! — тине бер йылылыҡ менән. — Эштәр барамы?

— Бара-а... — тине бер юлы бер нисә тауыш һуҙыбыраҡ, тик был яуап бик үк күңелле сыҡманы шикелле, ағай беҙгә аптырағандай ҡарап ҡуйҙы.

— Ярай, барһа...

Ибраһим ағай беҙ таҙартҡан өйөмдән бер сөгөлдөрҙө үрелеп алды ла:

— Бына, балалар, сөгөлдөрҙөң япрағын киҫеп ташлаганда уны былай юнғыламағыҙ, тамырҙың үҙенә бысаҡ теймәһен. Аңланығыҙмы?

— Аңлашылды, ағай,— тине Зәлифә бөтәбеҙ өсөн.

Әлеге киҫкеләнгән сөгөлдөр, ниңәлер, минең күңелдә уңайһыҙланыу тойғоһо уятты. Уны нисек таҙартырға кәрәклеген күпме аңлаттылар, ә кемдер һаман төшөнмәгән. Шул Асмандыр әле...

Ибраһим ағай ҡулындағы сөгөлдөрҙө өйөмгә кире ташланы ла уйға ҡалғандай ергә ҡарап торҙо.

— Ер күкрәге йомарт, — тине ул, ҡапыл башын күтәреп. Уның киң йөҙөндә ҡыуаныс сағылды. — Ни генә үҫмәй унда, ә? Мөғжизә бит!

— Ысынлап та мөғжизә шул, — тип йөпләне уны Венер ағай. — Әммә шуныһын да оноторға ярамай, ерҙә мөжғизәне кешеләр яһай.

Ибраһим ағайҙың былай ҙа киң йөҙө йылмайыуҙан тағы ла йәйелә төштө.

— Дөрөҫ әйтәһең бит әй, Венер ҡусты. Һин шулай тигәс тә, әсәйем менән Фатиха апай хәтеремә килеп төштө.

— Ниндәй Фатиха апай ул? — тип һорай һалды Зәлифә.

— Теге, тракторы менән ярҙан осоп һәләк булған Нурлыбай ағайығыҙҙың әсәһе.

— Ә-ә, Асмандың өләсәһе инде, улайһа, — тинеләр шунда уҡ бер нисә тауыш.

— Эйе, шулайҙыр... — тине Ибраһим ағай һәм һалмаҡ ҡына һөйләп китте. — Беҙҙең яҡта сөгөлдөрҙө һуғыштан һуң ғына үҫтерә башланылар. Үәт, мин уны тәүге сәскән мәлде хәтерләйем. Бер төркөм ҡатын-ҡыҙҙан звено төҙөлөп, уның етәксеһе итеп Фатиха апай тәғәйенләнде. Шул звенола минең әсәй ҙә булғас, ундағы хәлдәрҙе яҡшы белеп тора инем.

Фатиха апай иптәштәре менән иртә яҙҙан эшкә кереште. Баҫыуға ат менән, хатта бәләкәй сана менән тиреҫ сығарҙылар.

— Тракторҙар ҡайҙа ине? — тип һораны шунда уҡ береһе.

— Ул ваҡытта тракторҙар юҡ тиерлек ине,— тине Ибраһим ағай, ҙур ҡара күҙҙәре менән беҙгә етди ҡарап. — МТС-та ун бишләп колхозға өсдүрт трактор бар, шуларҙан береһенең колхозға килеп сығыуы ҙур байрам була торғайны...

Фатиха апайҙар тракторҙы көтөп тормай, баҫыуға тиреҫ сығарҙылар. Шунан апай үҙе Украинаға, Кировоград өлкәһенә китте, сөгөлдөрҙө нисек сәсеү, нисек үҫтереү серҙәрен өйрәнеп ҡайтты. Үтә тынғыһыҙ, үҙенә лә, иптәштәренә лә ҡул ҡаушырып ултырырға ирек бирмәҫ ине. Ул ваҡытта ерҙе һөрөп, сөгөлдөрҙө сәсеп сығыуҙан башҡа бөтә эште ҡул менән башҡарҙылар. Тәпке менән рәт араларын һирәкләп, ике ҡат ҡый үләндәрен утап, үҫентеләрҙең төптәрен йомшартып сыҡтылар. Ҡалай-талай ғына түгел, бик ентекләп эшләнеләр улар. Үәт, бына шуға күрә лә көҙ

көнө сөгөлдөрҙө лә мул алдылар, дүрт йөҙ ҙентнерға етте.

Зәлифәнең нәҙек кенә ҡаштары ҡапыл маңлайына күтәрелде:

— Бөтәһеме?

Ибраһим ағай йылмая биреп ҡуйҙы.

— Ни эшләп бөтәһе булһын? Һәр гектарҙан дүрт йөҙ ҙентнер. Ә алдағы йылдарҙа бишәр йөҙ ҙентнерға күтәрҙеләр уңышты.

— Күү-үп! — тине Зәлифә, һоҡланып.

— Үәт бына шуның өсөн дә шул Фатиха апай Ленин ордены менән наградланды, — тине Ибраһим ағай, эске бер тантана менән.

Ҡыҙҙарҙың береһе, ғәжәпләнеп:

— Ул ваҡытта уҡ орденлы сөгөлдөрсө булған икән дә беҙҙә! — тип ҡуйҙы.

Ибраһим ағай әлеге ҡыҙыҡайҙы хуплағандай башын һелкеп алды.

— Ундайҙар байтаҡ ул колхозда...

Бригадир ҡапыл, үҙенең һүҙҙәренә мауығып, эштән туҡтап тороуыбыҙға иғтибар итте.

— Эй-й... Үәт бына, күп һөйләп, һеҙҙе эштән айырғанмын да баһа. Эшкә, балалар, эшкә!..

— Эйе шул, — тине Венер ағай ҙа, — эш әкренерәк бара бит бөгөн, ҡуҙғала төшөгөҙ!

Ибраһим менән Венер ағайҙар киткәс, ҡабаланып, таҙартылмаған сөгөлдөр өйөмөнә ябырылдыҡ. Шунда Асманға иғтибар иттем. Ул бер сөгөлдөрҙө алды ла япраҡтары үҫкән башын юнғылай ҙа башланы. Нәфрәтләнһәм дә, өндәшмә-

нем. Мине дөрөҫ аңламаҫ ине барыбер. Уның эшен Зәлифә лә күреп алды.

— Асман, улай тәләфләмә сөгөлдөрҙө,— тине ул киҫкен генә. — Япрағын төптән генә киҫеп ташла, ә тамырына теймә. Әле генә Ибраһим ағай киҫәтеп китте бит шул хаҡта...

— Һинән һорамайҙар, ҡарға, — тине Асман, ҡабынып, һәм ҡулындағы сөгөлдөрөн таҙартылған өйөмгә ташланы.

Зәлифә ҡыҙарынды, күҙҙәре ҡапыл түңәрәкләнеп, осҡондар сәсте. Хәҙер бер уҫал һүҙ әйтә инде тип көткәйнем, әйтмәне, үҙен ҡулға алды.

— Эй Асман, Асман, — тип башын һелкеп торҙо Зәлифә, — кеше менән гел тешләшергә генә тораһың. Әле генә Ибраһим ағай, үҙең ишеткәнһеңдер, өләсәйең хаҡында ниндәй матур һүҙҙәр һөйләп китте. Ниндәй иҫ китмәле тырыш сөгөлдөрсө булған бит. Ул, моғайын, һинең ҡылығыңды хупламаҫ ине.

Асман ҡулын ғына һелтәне.

— Юҡты һөйләмәгеҙ әле, мин бер ниндәй ҙә өләсәйҙе белмәйем. Күптән үлгән инде ул, мин тыуғансы уҡ.

Кемдер:

— Әсәйең һөйләмәнеме ни? — тип һораны.

— Юҡ, — тине Асман һалҡын ғына.

Ҡыҙҙар ҙа, малайҙар ҙа шымып ҡалды, кемдер көрһөнөп ҡуйҙы.

— Ай-һай...

— Шундай өләсәй хаҡында ла һөйләмәгәс...

Эш аҙағына тиклем Венер ағай беҙҙең янға тағы килеп сыҡты. Таҙартылған сөгөлдөр өйөмөнә ҡарап торҙо ла:

— Беләһегеҙме, — тине уйланғандай, — Ибраһим ағай Фатиха инәй хаҡында юҡҡа һөйләмәне, минеңсә. Шундайҙарҙан өлгө алығыҙ, тигән һүҙе булғандыр ул. Эйе, Фатиха инәй кеүектәр — Бөйөк Ватан һуғышы осоронда ил өсөн алял белмәй эшләгән кешеләр, геройҙар. Улар булмаһа, беҙ, бәлки, фашистарҙы еңә лә алмаҫ инек. Ундайҙарҙы оноторға тейеш түгелбеҙ.

* * *

Ошо һуғышыуым арҡаһында күңелһеҙлектәрем иртән үк башланды. Кис һуң ғына ҡайтҡанлыҡтан, әсәйем дә, атайым да йоҡларға ятҡайны инде. Уларҙы борсомаҫҡа тырыштым. Үҙем генә аш йылытып ашаным да карауатҡа ауҙым.

Иртән әсәйем мине күрҙе лә «аһ» итте, ҡосаҡлап алды, күҙҙәрендә хатта йәштәре күренде. Шул саҡ үҙемдең дә күңелем йомшап, саҡ дөрөҫөн һөйләп ташламаным. Ярай әле ваҡытында тыйылып ҡалдым. Әсәйем: «Кем һине шул тиклем йәберләне?» — тип үҙәккә үтте. «Йығылдым» тигәнгә ышанманы, әлбиттә. Ләкин мин сигенмәнем. Әсәйҙән саҡ-саҡ ысҡынып, мәктәпкә киттем. Урамға сыҡҡас, иркен тын алғандай булдым. Шулай ҙа күңел күтәрелмәне. Көнө лә эллә нисек һалҡынса. Ямғыр яуырға торған һымаҡ, ҡап-

ҡара болоттар күк йөҙөндә шәҡтай түбәндә аҫылынып тора. Етмәһә, үткән-һүткән кешеләр, ғәжәпләнеп, йөҙөмә төбәлә. Ирекһеҙҙән ситкә боролам.

Мине класта сәйер тынлыҡ ҡаршы алды. Турҙәге тәҙрә эргәһендә Зөлфәт, уның янында бер нисә ҡыҙыҡай һәм малай баҫып тора. Арала Зәлифә лә күренә. Класҡа инеп, портфелемде парта өҫтөнә ҡуйыуым булды, ул ҡаршыма килеп:

— Тамир, һине Асман туҡмаған бит, — тине. — Ниңә кисә йәшереп маташтың? Йығылдым, имеш...

Мин аптырабыраҡ ҡалдым. Кем әйткәнен самалаһам да:

— Ҡайҙан белдең? — тип һораным.

— Зөлфәт әйтте.

— Асман Тамирҙы туҡманы, тинеме?

— Юҡ. Һуғышыуығыҙ хаҡында әйтте. Ә туҡмалғаныңды йөҙөңдәге биҙәктәрҙән күреп торабыҙ.

— Биҙәктәр, имеш... Асманға мин кисә күрмәгәнен күрһәттем, белгегеҙ килһә...

Зәлифә тәҙрә төбөндә баҫып тороусы малайҙарға, ҡыҙҙарға ҡарап алды ла:

— Тамир Асманды туҡмаған, ти... Күҙ төптәре ҡара янған, ирендәре бәлшәйгән, ти. Ха-ха-ха... — тип ҡысҡырып көлөп ебәрҙе. Башҡалар ҙа ауыҙҙарын йырҙы. Минең асыу ҡабара башланы. Зәлифәнең телен тешләтерлек бер әсе һүҙ

әйтергә тип кенә торғанда, ишектә Асман менән Вәсиф күренде. Улар, бер кемгә лә иғтибар итмәйенсә, үҙ парталары артына килеп ултырҙылар. Асман портфелен рәтләп маташты ла, тынып ҡалған класҡа аптырағандай, башын күтәрҙе. Шунда уның ҡарашы Зәлифәнең сәнскеле күҙҙәре менән осрашты.

— Асман, — тине ҡыҙыҡай киҫкен генә, — һин Тамирҙы туҡмаганһың икән. Быға тиклем дә уға гел бәйләнеп йөрөүең хаҡында белә инек. Шундай ҡанһыҙ булырһың тип кем уйлар? Атамандай, иптәштәреңде ҡурҡытып алғанһың да, хатта туҡмалыуҙарын да йәшерергә тырышалар... Быға сик ҡуйырға ваҡыт.

Зәлифә Асманға һүҙ әйтергә лә ирек бирмәй һамаҡланы-һамаҡланы ла кластан шәп-шәп атлап сығып та китте. Белеп торам: Мәрйәм апайға яңылыҡты еткерергә ашыға. Быны Асман да һиҙенде. Һүҙҙәрен танауы аша һығып:

— Шуны бында лығырламаһаң ни була, алланың ҡашҡа тәкәһе, — тине ул, миңә асыулы ҡарап.

«Һин нимә миңә бәйләнәһең әле?!» — тип ҡысҡырмаҡсы булғайным да, ваҡытында тыйылып ҡалдым. «Шуның менән телләшеп ваҡыт әрәм иткәнсе...» — тип үҙемде тынысландырҙым.

Кемдер:

— Тамир түгел, Зөлфәт һөйләне бит уны, — тине.

Асман, Зөлфәт яғына боролоп, йоҙроғон күрһәтте.

— Ә-ә... һинме, интеллигент?!

Зөлфәт, ҡаушап, ҡобараһы осоп, урынына һеңде лә ҡуйҙы. Бары тик бер аҙҙан ғына:

— Мин ни... һине түгел, Тамир хаҡында ғына әйтмәксе инем.

Асмандың күҙҙәре ҡыҫылды, уларҙан боҙ һалҡыны һирпелде.

— Эй һин, интеллигент, ауыҙыңды йыйып һөйләш, — тине ул теш араһынан.

Шул саҡ ишек асылып китте лә класҡа мәктәп директоры Гөлғәйшә Мөрсәлимовна, Мәрйәм апай һәм Зәлифә килеп инде. Бөтәбеҙ ҙә аяҡ үрә баҫып, шымып ҡалдыҡ. Һәр ҡайһыбыҙ хәҙер ғәҙәттән тыш бер хәл буласағын һиҙендек.

— Һаумыһығыҙ! Ултырығыҙ! — тине Гөлғәйшә Мөрсәлимовна ҡоро ғына. Уның йөҙө етди, эммә был етдилек артына ел-дауыл йәшеренгәнлеге һиҙелеп тора ине.

— Балалар! — тине ул ниндәйҙер һалҡын, һағайтҡыс тауыш менән. — Кисә беҙҙең мәктәпкә тап төшөрөүсе, совет уҡыусыһы өсөн ят бер ваҡиға булған. Һеҙҙең класташығыҙ Асман Зарипов тәртипле уҡыусыбыҙ, отличник Тамир Шәүкәтовты туҡмаған. Иптәшегеҙҙең йөҙөнә ҡарап, быны үҙегеҙ ҙә күреп тораһығыҙ. Зариповтың үҙенән көсһөҙөрәк малайҙарҙы йәберләүе хаҡында элегерәк тә сигналдар ишетелеп ҡалғайны. Һәм бына һөҙөмтә, бик күңелһеҙ һөҙөмтә.

Былай ғына ҡалдырып булмай бындай хәлде. Зарипов, — тип өндәште Гөлғәйшә Мөрсәлимовна, тауышын күтәрә төшөп һәм шунда уҡ урынынан тороп баҫҡан Асманға тишерҙәй итеп текләп, — хәҙер өйөгөҙгә ҡайтып, атайыңды, юҡ, әсәйеңде алып кил. Шунһыҙ мәктәпкә аяҡ баҫма! Аңлашылдымы?

Бөтәһе лә Асманға ябырылды. Мине иҫәпкә алыусы ла юҡ. Гүйә, мин меҫкендең дә меҫкене. Кисә Асманға ла ныҡ ҡына әләкте бит, ҡартәсәһен таныны, буғай. Дөрөҫ, ул башламаһа, һуғышырға уйымда ла юҡ ине. Шулай ҙа, мине буйға бәләкәй, көсһеҙ тип, һанға ла һуҡмауҙары һарыуымды ҡайнатты. Урынымдан торҙом да:

— Гөлғәйшә Мөрсәлимовна, мин дә ауыҙ асып торманым бит, ҡаршы һуғыштым, — тинем.

— Кемдең нисек һуғышҡаны күренеп тора, Шәүкәтов. Һиңә һүҙебеҙ юҡ. Ултыр! — тине директор һәм кластан сығып барған Асман артынан: — Тиҙ йөрө, бер аяғың — бында, икенсеһе тегендә булһын, — тип ҡалды.

Бөтәһе лә мине туҡмалғанға һанайҙар. Ныҡлап тикшереп, һорашып тороу ҙа юҡ. Кәйефем ныҡ ҡырылды. Ә Асман менән лайыҡлы алышыуымды, унан ҡурҡмауымды баштарына ла килтермәйҙәр. Был мине кәмһетә, әлбиттә. Ошо шаушыуҙы тыуҙырған өсөн Зөлфәткә лә үпкәм ҡабарҙы.

* * *

Көҙгө күңелһеҙ, һоро көндәрҙең береһе бөгөн. Һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә, әнә осондай ғына ямғыр һибәләй. Үҙе шулай булһа ла, әкренләп кенә ерҙе еүешләй. Куртка кеҫәләренә ҡулдарымды тығып, бөршәйеп кенә баҫыуға килеп еттем. Тағы аҙ ғына һуңланым шикелле. Башҡалар әшләй башлаған. Иптәштәремдән ныҡ ҡына уңайһыҙландым. Шуға күрә йәһәт кенә эшкә тотонған булдым. Үҙемдең ғәйепте таныйым, ҡырын ҡарамағыҙ, йәнәһе...

Зәлифә миңә күҙ һирпеп ҡуйҙы, бер һүҙ ҙә өндәшмәне. Бары бер аҙҙан ғына башын борғолап, тирә-яҡты байҡаны ла:

— Асман күренмәй, — тине.

Был һүҙ көтмәгәндә иптәштәремдең телен сисеп ебәрҙе.

— Асман — Асман инде ул: теләһә — килә, теләмәһә — юҡ. Кисә Зөлфәт эшкә сыҡманы. Ниңә икән? — тине береһе.

Икенсеһе Зөлфәттең яуабын көтөп тормай:

— Өсөнсө көн Тамир ҙа күренмәне, — тип өҫтәне.

Шунан ҡыҙҙар күтәреп алды.

— Берәүҙәр — эштә, икенселәр ял итә...

— Аҡыллылар ял итә инде, беҙҙең кеүек аҡылһыҙҙар ғына көн дә ошонда аҙаплана.

— Етер, тел сарламағыҙ әле, — тине Зәлифә тауышын күтәреберәк. — Намыҫтары еткәс, сыҡ-

маһындар әйҙә. Тик белһендәр, — ул ҡулын һелтәп, баҫыуға күрһәтте, — был эште барыбер беҙ бөтөрөргә тейешбеҙ.

— Намыҫ, имеш, — тип мығырланы береһе.— Асман кеүектәр төкөрҙө намыҫыңа.

Иптәштәрем алдында гөнаһым булғас, улар ҡыйыш атып миңә тура тейҙерәләр. Уларҙың үпкәләрен тыңлау ҡыйын, әлбиттә. Иғтибар итмәгәнгә һалышам. Әсемдән: «Асман эшкә килһә, был һүҙ сыҡмаҫ ине», — тип әсенеп ҡуям. Хәйер, унда эш ҡайғыһымы ни! Бар тип белә ти... Директор ҡайтарып ебәргәс, ул мәктәпкә ҡабат килмәне. Әсәһе лә күренмәне. Асман, моғайын, уға әйтеп тә тормағандыр. Әсәһе малайы өсөн борсолған була ла ул. Тик эскесе ир менән йәшәп, нервылары үтә ҡаҡшаған, юҡҡа-барға ла ҡабынып бара. Уның ҡысҡырыныуҙарына Асмандың иҫе лә китмәй. Етмәһә, ҡаршы өндәшә.

Ҡабаланмай ғына эшләгән һымаҡ булһаҡ та, таҙартылған сөгөлдөр өйөмө арткандан-арта. Бер йөк машинаһын тултырып тейәп тә ебәрҙек әле. Беҙҙең отрядтың бөгөнгө өлөшө шөйлә мулыраҡ булды. Яныбыҙға килеп сыҡҡан Ибраһим ағай ҙа мәктәп алды үҙебеҙҙе. «Бына шулай, үәт, балалар, эшләһәң, эш ҡарышмай ул», — тине. Кәнәгәтләнеү менән ҙур мыйығын һыпырып, күн кепкаһын ҡалҡытыбыраҡ ҡуйҙы. Шул саҡ көтмәгәндә Зәлифә уға бер һорау бирҙе:

— Ибраһим ағай, һөйләүегеҙгә ҡарағанда, Фатиха инәй бик уңған, яҡшы кеше булған.

Ә уның берҙән-бер улы Нурлыбай ағай нисегерәк ине һуң?

Бригадир, башын саҡ ҡына эйеп, бер аҙ уйланып торҙо. Беҙ һағайып ҡалдыҡ. Ағай ҡапыл башын күтәрҙе лә Зәлифәгә текләне.

— Нурлыбай — Фатиха апайҙың берҙән-бер улы түгел. Уның ике улы һуғышта һәләк булды. Ҡарты ла шунан ҡайтманы. Үәт бына... Ә Нурлыбай нисегерәк ине, тиһегеҙме? Бик аҡыллы, йомшаҡ күңелле, эшсән егет ине ул. Әсәһенең кәңәшен тотоп, тракторсы һөнәрен һайланы. Тырышып эшләне, һәйбәт механизатор ине. Үәт бына.

Асмандың атаһы хаҡында шундай мактау һүҙҙәре миңә оҡшап бөтмәне, күңелемдә шик, ышанып етмәү кеүек тойғолар уянып ҡуйҙы.

— Ул, һәйбәт механизатор була тороп, нисек тракторы менән Ҡырлауыс ярынан ҡоланы икән? — тип һорай һалдым мин.

— Бәлә — аяҡ аҫтында тиҙәрме әле? — Ибраһим ағай миңә ғәжәпләнгәндәй ҡараны. — Әлеге фажиғә былай була. Нурлыбай төн буйы Яубаҫҡан баҫыуында ер һөрә. Таң алдынан бында эште бөтөрә. Оло яланға ашыға, унда культивация үткәрергә тейеш була. Яҙҙың бер көнө йылды туйҙыра, тиҙәр бит. Нурлыбай эште йәһәтерәк тоторға уйлай. Таң алдынан ергә ҡуйы томан төшә. Нурлыбай тракторын тура Оло яланға йүнәлттем, тип уйлай, асылда ул уңғараҡ ҡайы-

рыла һәм, Ҡырлауыс йылғаһының бейек ярына юлығып, нисек ҡолағанын да һиҙмәй ҡала.

Ҡаты имгәнһә лә, Нурлыбай ярға сығырға көс таба. Тик шунда уҡ аңын юғалта. Уны килеп тапҡанда, артыҡ һуң була шул. Ул больницаға илткән саҡта йән бирә.

Фатиха апай ауырыу булһа ла, бер аҙ йәшәрлеге бар ине әле. Төпсөгөнөң, күҙ нурының һәләкәтен күтәрә алманы. — Ибраһим ағайҙың йөҙөндә тәрән һағыш сағылды. — Эйе-е, Нурлыбайҙы әйтеп тә тормайым, Фатиха апай ҙа беҙҙе иртәрәк ташлап китте. Ғәжәп кешелекле, яғымлы ине ул. Ә уңғанлығы! Ундайҙар, моғайын, меңгә берәү генә булалыр. Үәт бына...

Ибраһим ағай башын ситкә борҙо. Унан, ҡапыл боролоп, китеп барҙы. Мин уның күҙҙәрендә йәш күреп ҡалдым шикелле.

Иптәштәрем бөтәһе лә шымып торҙо. Әллә болоҡһоп ҡуйҙылар инде? Ә мин аҙыраҡ тулҡынланған кеүек булһам да, тыныслығымды юйманым. «Ағай әҙерәк фәстерәлер, моғайын. «Меңгә берәү», имеш. Нисек кенә тимә, Асман шул инәйҙең тоҡомо бит, кеше йәнен ҡыйыусы», — тип уйланым мин. Шуны һиҙеп ҡалдым: Асманға булған нәфрәтем бында ла үҙ ролен уйнаны, буғай.

Тынлыҡты Зәлифә боҙҙо.

— Беләһегеҙме, малайҙар, ҡыҙҙар, мин бынә нәмә уйлап алдым әле, — тине ул мәғәнәле бер тауыш менән.

— Нимә? — тип һораны кемдер.

— Әйҙәгеҙ, Фатиха инәйҙең фотоларын табып, уны белгән кешеләрҙән иҫтәлектәр яҙҙырып, матур бер альбом яһайык.

Иптәштәрем ни әйтергә лә белмәне, күңелем менән мин был эште хупламаным. Һәр төрлө йәмәгәт эштәрен енем һеймәй. Һин — отличник, фәлән-төгән тип, миңә уны иң беренсе йөкмәтергә торалар.

— Фатиха инәй — Асмандың өләсәһе... Һеҙ быға нисек ҡарайһығыҙ? Беҙҙе аңларҙармы, хупларҙармы икән? — тип иптәштәремдең күңелендә шик уятырға тырыштым.

Зәлифә шунда уҡ миңә ҡаршы төштө.

— Мин был хаҡта уйланым инде. Ләкин Фатиха инәй үҙенең ейәне өсөн яуап бирмәй. Ул — хеҙмәт батыры. Шул батырлыҡ беҙгә, беҙгә генә түгел, күптәргә өлгө бит, — тине ул ышаныс менән.

— Фатиха инәйҙең Асманда ни ҡатнашы бар? — тип һүҙгә ҡушылды Вәсиф. — Унан һуң Асман, һин уйлағанса, артыҡ насар малай ҙа түгел.

Был һүҙҙәр миндә асыу уятты.

— Яҡшылыр шул, дуҫың булғас... Шул һуғыш суҡмарын, насар түгел, тип тораһың. Хәйер, ике сабата бер кейем инде.

— Һуғыш суҡмары түгел. Кем менән һуғышҡаны бар? Кемде туҡмағаны бар?

— Минең менән һуғышты бит. Күрмәнеңме ни?

— Күрҙем. Тик Асмандың һинең менән һуғышырға уйында ла юк ине. Мәрәкәләргә генә ине иҫәбе. Ә һин күҙен алған күгәүен кеүек күҙенә кереп киләһең. Асыуын килтерҙең. Унда ла әле бер төртөп осорор ҙа шуның менән бөтөрөр ине. Һин тағы һеләүһен кеүек уға ташландың. .

— Ташландым шул, — тинем мин киҫкен генә. — Үҙемде артабан да мыҫкыл итергә юл ҡуйманым. Былай ҙа ике йыл буйы үҙәккә үтте.

— Ниндәй ҡырағайлык! — тине Зәлифә, аптырап, һәм ҡысҡырып ебәрҙе. — Етерегеҙ, әрепләшмәгеҙ. — Беҙ бер аҙға тынып ҡалғас: — Фатиха инәй тураһында альбом яһайбыҙмы, әллә теләмәйһегеҙме? — тине.

Был юлы битарафтар юк ине инде.

— Яһайыҡ әйҙә, — тине береһе.

— Изге эш тә ул, — тип өҫтәне икенсеһе.

— Моғайын, файҙаһыҙ ҙа булмаҫ әле, — тине өсөнсөһө.

— Ваҡытты әрәм итеү генә булмаҫмы был? — тип шик белдерҙе дүртенсеһе.

«Минең яҡлылар ҙа юк түгел икән әле», — тип уйлап ҡуйҙым. Үҙемдең еңелеүемде, күпселектең Зәлифәне яҡлаясағын төшөнгәйнем инде. Әлеге иптәшемдең шиктәрен дә шунда уҡ юҡҡа сығарып ташланылар.

— Ленин орденлы кешенең тормош юлын өйрәнеү ни эшләп ваҡытты әрәм итеү булһын?

— Колхоздың элекке хеҙмәт батырҙары хаҡында былай ҙа бер нәмә белмәйбеҙ.

— Беҙҙең Ҡондоҙлола шундай кешеләр булғанлығына ғорурланырға кәрәк!..

— Ундайҙарҙы оноторға ярамай, уларҙың иҫтәлеге яҡты йондоҙҙай балҡып йәшәргә тейеш.

«Ай-һай, ҡайһылай патриот булып киттеләр, — тинем мин, әсемдән генә көлөп. — Танымаҫһың да. Бигерәк тә ҡыҙыҡайҙар. Ҡайҙан шулай ҡыҙыл һүҙҙәрҙе өйрәнеп алғандар?»

Тик Зөлфәт кенә бер һүҙ ҙә ҡыҫтырманы шикелле. Был эште хуплаймы, хупламаймы — белмәҫһең. Һәр йыйылышта, шундай һәр һөйләшеүҙә тауыш-тынһыҙ ҡалыуҙы артығыраҡ күрә ул.

Ҡараңғы төшөр алдынан ғына ҡайтырға сыҡтыҡ. Төштән һуңғы ваҡ ҡына ямғыр күптән туҡтағайны инде. Күк йөҙө асылып, көн аяҙып киттте. Өҫтәребеҙ кипте, аяҡ аҫты ла еңеләйҙе. Быныһы һәйбәт тә ул, тик арытты, асыҡтырҙы. Зөлфәт минең эргәнән атлай, ара-тирә ауыр һулап ҡуя. Ундай кешегә асыу һаҡлап йөрөп буламы? Үҙе лә бер ҡатлы ул. Әммә бөгөн күңелемдә уға ҡарата үпкә лә бар һымаҡ.

— Ниңә Асман менән һуғышҡанды һөйләнең? Телең ҡысыттымы ни? — тинем мин киҫкен генә.

— Асмандың ниңә бәйләнеүен генә һөйләргә теләгәйнем...

— Иртән үҙең башҡасараҡ әйткәйнең, әле килеп...

— Шул һинең еңеүең тураһында ла әйтмәксе инем. Өлгөрә алмай ҡалдым.

— Бөтөнләй лығырламаҫҡа ине. Егетлекме ни шул? Һуғышыу — яҡшы эш түгел, тик кәрәк саҡта үҙеңде яҡлай белергә лә тейешһең. Асман аҡыл алды. Шул еткәйне уға...

— Мин... ни... — тип Зөлфәт нимәлер әйтергә теләне, тик тотлоҡто, ауыҙынан һүҙе сыҡманы. Хәйер, ни әйтһең инде ул: булғаны булған инде.

* * *

Асман һаман мәктәпкә килмәне. Мәрйәм апай класҡа ингәс тә, уның буш урынына ҡараш ташлап алды ла Вәсифкә өндәште.

— Ғабдуллин, Асманды күрмәнеңме?

Теге тиҙ генә урынынан тороп:

— Күрҙем, — тине.

— Мәктәпкә ниңә килмәне икән?

— Уҡырға теләмәйем, ти.

— Әсәһе беләме быны?

— Һораманым.

Мәрйәм апайҙың йөҙөндә борсолоу сағылғандай булды. Ул Вәсиф менән һүҙҙе шул урында бөтөрөп, дәрескә күсте. Шунда уҡ, бөтәһен онотҡандай, яңы теманы аңлата башланы.

Мәрйәм апай әҙәбиәтте, яҙыусыларҙы бик ихтирам итә. Һөйләп китһә, ауыҙына ғына ҡарап ултыраһың. Тик әле Асман хаҡында һүҙ булғас,

күңелем тағы тыныслығын юғалтты ла ҡуйҙы. Мин әсенеп уйландым. Әгәр Зөлфәт телен тыйған булһа, Асман былай дәрескә килмәй әллә ҡайҙа йөрөмәҫ ине. Ултырыр ине ана шунда, үҙ урынында. Тартып-һуҙып булһа ла «өслө»ләрен алыр ине. Туҡта, ниңә һуң әле уны йәлләй башланым? Көн һайын мине мыҫҡыллаған ул түгелме ни? Ул, әлбиттә. Ҡайһы саҡта үҙен бәреп үлтерерҙәй була инең бит. Әле ни эшләп йомшарҙың? Йомшарҙыммы икән? Юҡ. Уның менән һуғышҡандан һуң, мин үҙемдең көсөмдө тойҙом. Хәҙер унан элекке кеүек шөрләмәйем. Был хәл минең нәфрәтемде һүрелдерә төштө шикелле.

— Тамир Шәүкәтов! — тигәнгә ҡапыл уйҙарымдан айнып киттем. Мәрйәм апай өндәшә икән. Мин тороп баҫтым.

— Әле генә мин нимә хаҡында һөйләнем — ҡабатла әле? — тине уҡытыусыбыҙ.

Уңайһыҙланып, башымды әйҙем. Мәрйәм апай ҡыҫығыраҡ ҡара күҙҙәре менән миңә тишерҙәй итеп ҡарап торҙо ла:

— Ултыр! Иғтибарыңды дәрескә йүнәлтергә тырыш, — тине.

Юҡ, күңелде ҡырып торған нәмә булһа, дәрескә иғтибарҙы бирермен тимә икән, һаман шул Асман иҫемдән сыҡмай ҙа ҡуя.

Тәнәфес ваҡытында коридорҙа йөрөй инем, көтмәгәндә Мәрйәм апай бер яҡ ситкәрәк саҡырып алды ла:

— Тамир, һиҙәм, һин дә Асман хаҡында уйланаһың шикелле, — тине, нисектер, яҡын итеп.

Мин йәшермәнем, йөрәкте өйкәп торған нәмәләрҙе әйттем дә һалдым:

— Көтмәгәндә класҡа килеп индегеҙ ҙә Асманды ҡайтарып ебәрҙегеҙ. Ул хәҙер ҡайҙалыр йөрөй, мин бында тыныс ҡына ултырам. Ә бит икәү һуғыштыҡ...

— Ниңә һуғыштығыҙ һуң? Нилектән килеп сыҡты?

Уҡытыусыбыҙ менән бер етди һөйләшеүҙе көтә инем инде. Уның алдында алдаша, борғолана белмәйем. Фәҙәттә, нимә уйлайым, нимә булған — шуны ярам да һалам.

— Асман миңә күптән бәйләнеп йөрөнө, — тинем мин, хәтерем менән үткәндәрҙе байҡап. — Бәйләнеп тиеүем, бәлки, бик үк дөрөҫ тә түгелдер... Ул мине мәрәкәләй, шундай мәрәкәләй ине: күңелемде рәнейтә, түбәнһетә... Үҙенең көсө менән маһайғаны һиҙелеп тора. Оҙаҡ түҙҙем, үҙенән бер аҙ шөрләй ҙә инем. Тик һуңғы ваҡытта түҙемем бөттө, — тип теге көндәге хәлде һөйләп бирҙем.

— Һуғышыу — насар нәмә, — тине Мәрйәм апай, көрһөнөп. — Алданыраҡ миңә килеп әйтһәң, Асман менән яҡшылап һөйләшкән булыр инек.

— Унан ул, ошаҡсы, тип, мине тағы ла ныҡыраҡ мыҫҡыллар ине.

— Ниңә улай уйлайһың? Бәлки, башҡаса булыр ине. Һәр хәлдә, бындай осраҡта өлкәндәр менән кәңәшләшеү зыян итмәҫ ине.

— Апай, мин Асмандың ҡылыҡтарын беләм инде, — тинем мин, үҙ уйымда ҡалыуымды һиҙҙереп.

— Шулаймы? — тине Мәрйәм апай, саҡ ҡына көлөмһөрәгәндәй итеп. — Улай булғас, әйтмәҫһеңме: һинеңсә, Асман ни өсөн мәктәпкә килмәй икән?

— Директорҙың һүҙен, моғайын, әсәһенә әйтмәгән, үҙе генә килергә ҡурҡалыр, бәлки...

— Ярай, — тине Мәрйәм апай, һөйләшеүгә йомғаҡ яһағандай. — Өйҙәренә үҙемә барырға тура килер. Ун-ун биш көн әсәһен дә күргән юҡ. Үгәй атаһы менән дә һөйләшеп ҡарарға кәрәк.

Уҡытыусыбыҙ менән әңгәмәләшеп тороп, мин класҡа һуңғы кеше булып индем. Бынан һуң күңелем тыныслангандай булды.

* * *

Һуңғы дәрес тамамланғас та, Венер ағай отрядтарҙың активистарын пионер бүлмәһенә йыйып алды. Яңы вожатыйыбыҙ өлгөр булмаҡсы. Элеккеһе ғинуар айында уҡ икенсе әшкә күскәйне. Шунан бирле пионер бүлмәһе бикле торҙо. Бәләкәй генә, ләкин бик бөхтә йыйыштырылған ул. Ни өсөндөр, көн һайын шунда бер инеп, түрҙәге Ленин бабайҙың мөләйем портретын, салют

бирегусе пионер төшөрөлгән һәм «Һәр вакыт әзәрбеҙ!» тип яҙылған плакатты, дружина байрағын, кәштәләргә ҡуйылған барабан һәм борғоларҙы күреп сыҡмаһам, күңел булмай.

Әле пионер бүлмәһенең, нинәйәт, асылыуына сәйер бер тулҡынланыу кисереп, эскә атланым. Беҙҙе түрҙәге өҫтәл артына баҫҡан түңәрәк кенә асыҡ йөҙлө Венер ағай ҡаршы алды. Урта буйлы, йәшкелт костюм аҫтынан күк күлдәге, һарғылт-йәшел галстугы иғтибарҙы тартып тора.

— Әйҙәгеҙ, үтегеҙ, үт, урынлашығыҙ! — тине ул, оҙон өҫтәл артындағы ултырғыстарға күрһәтеп. — Бөтәгеҙгә лә урын етмәй, әлбиттә. Ҡайһы бер егеттәр баҫып торһа ла ярар.

Миңә ултырғыс әләкте. Ултырҙым да тирәяғыма күҙ һалдым. Зәлифәнең аяҡ өҫтө тороуын күргәс, шунда уҡ урынымды уға бирҙем дә үҙем стена буйынараҡ барып баҫтым.

Венер ағай ҡарашы менән бүлмәне байҡап сыҡты ла тоноғораҡ тауыш менән һүҙ башланы.

— Мине беләһегеҙ инде. Шулай ҙа үҙем менән таныштырып китәм: Венер Әбүзәр улы Ғилемханов булам.

Һеҙҙе саҡырыуымдың сәбәбе шул: һеҙ бик файҙалы һәм ҡыҙыҡлы бер эш башламаҡсыһығыҙ икән. Заманында сөгөлдөр үҫтереү буйынса ҙур хеҙмәт күрһәткән, яҡшы эше өсөн Ленин ордены менән наградланған Фатиха Зарипованың тормош юлына арнап альбом яһарға булғанһығыҙ. Һәйбәт башланғыс, беҙҙеңсә, быны бөтә

отрядтарға ла таратырға була... Шул хақта Гөлгәйшә Мөрсәлимовна менән кәңәшләшкәс, белә-һегеҙме, нимә тине? — Венер ағай беҙгә йылмайыбыраҡ ҡарап торҙо. Үҙем дә һиҙмәҫтән, һорай һалдым:

— Нимә тине?

— «Әгәр бай һәм ҡыҙыҡлы материалдар тупланһа, «Хеҙмәт даны» музейы ойошторорға ла мөмкин», — тине. Ә мин ышанам. 30-сы йылдарҙан бирле колхоз тормошонда актив ҡатнашҡан, хөкүмәтебеҙҙең орден-миҙалдары менән наградланған, ләкин хәҙер онотолған байтаҡ кешеләр барҙыр. Уларҙың иҫтәлеген яңыртыу — бик ҙур эш, беҙҙеңсә. Күмәкләп тотонһаҡ, ҡулдан килер, моғайын. — Венер ағай бер аҙ шымып торҙо ла: — Нисек, ҡулдан килерлекме? — тигән һорау менән һүҙен бөтөрҙө.

Бүлмәлә тынлыҡ урынлашты. Минең күңелдә йәнә кире, асыу килеүгә яҡын бер тойғо уянды. Ошо Асман йүнле малай булһа, бындай кисереш маҙаламаҫ ине, бәлки. Венер ағай бер аҙ көткәндәй итте лә, беҙҙе дәртләндергәндәй:

— Йәгеҙ, йә, кем нисек уйлай? — тип, талапсан ҡарашын беҙгә теклә́не. Мин түҙмәнем, үҙ уйымды әйтергә булдым:

— Венер ағай, Зәлифә уйлап сығарған нәмәне шул тиклем ҡуйыртырға кәрәкме икән? Алдынғы сөгөлдөрсө икән, ну... сөгөлдөрҙө утаған, төбөн йомшартҡан... Ну... орден алған. Тракторсының да, малсының да эштәрен беләбеҙ. Улар-

ҙың нимәһе менән кемде шаҡ ҡатыраһың? Минеңсә, был юҡты бушҡа ауҙарыу булыр һымаҡ... Ну... быны эшләргә бик кәрәк тиһегеҙ икән, беҙ уны, иң яҡшыһы, былай итәйек: Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларҙыҡы кеүек исемлектәрен төҙөйөк тә кем булып эшләүҙәрен, ниндәй орден-миҙал алыуҙарын яҙайыҡ. Шунан бөтәһе лә аңлашыла бит инде.

Зәлифә шунда уҡ урынынан тороп баҫты, ҙур ҡара күҙҙәре баҙлап китте.

— Үҙең алдынғы уҡыусы иҫәпләнәһең, отряд советы ағзаһыһың, ә шундай һүҙҙәр һөйләйһең... — Зәлифә тулҡынланыуҙан һүҙҙәрен әйтә алмай торҙо. — Һиңә ҡарап, иҫең китерлек...

— Нимәһенә иҫең китә уның? — тинем мин, үсекләгәндәй. Мине аңламауҙары, хатта бер ҡатлылыҡта ғәйепләүҙәре һарыуымды ҡайната башланы.

— Бер нәмә лә аңламайһың һин, — тине Зәлифә, ҡыҙарынып.

Мин яуап бирергә ауыҙымды ғына аскайным, һүҙгә Венер ағай ҡыҫылды.

— Туҡтағыҙ, әрепләшмәгеҙ! Исемең кем әле? — Венер ағай миңә төбәлде. Әйтеп биргәс: — Тамир, ысынлап та улай еңел генә уйларға ярамай, — тине етди итеп, унан аҙ ғына шымып торҙо ла, башын күтәрә төшөп, саҡ ҡына йылмайып ҡуйҙы. — Йәгеҙ, дуҫтар, башҡаларҙың да фекерен ишетәйек.

Бынан һуң күптәр сығыш яһаны:

— Һәйбәт башланғыс.

— Хуплауға лайық эш.

— Хеҙмәттәре менән танылған, заманында ҙур ихтирам ҡаҙанған яҡташтарыбыҙҙың иҫтәлеген мәңгеләштереү — мактаулы бурысыбыҙ ул.

Тағы байтаҡ шундай һүҙҙәр әйтелде. Ундай яңғырауыҡлы һүҙҙәрҙе мин үҙем яратып бөтөрмәйем. Тик, ни эшләйһең, тыңларға тура килә. Шуныһы ғәжәп, мине яҡлаусы берәү ҙә табылманы.

Йыйылыштан ауыр тойғо менән ҡайтырға сыҡтым. Артымдан ғына килгән Зәлифәгә әйләнеп тә ҡарағым килмәне.

* * *

Мәктәптән ҡайтып килешләй үҙебеҙҙең урамға сығыуым булды, Зөлфәтте осраттым. Ул ниңәлер тулҡынланған, сикәһе ҡыҙарып янып тора.

— Ни булды? — тинем мин, аптырап.

— Асман... бәйләнде, — тине Зөлфәт, сикәһен ыуып.

— Ниңә?

— Шул һинең менән һуғышҡанын һөйләгәнем өсөн. Сикәгә һуҡты. «Быныһы — әжере, — ти, — киләсәктә телеңә хужа булмаһаң, нығыраҡ әлегер», — ти.

Мин Зөлфәтте йәлләп ҡуйҙым. Бер уйлаһаң, ни ғәйебе бар инде? Алдашмаған, дөрөҫөн әйткән. Ниңә уға ҡул күтәрергә? Былай ҙа йомшаҡ

ҡына инде ул, үҙе һуғышыу түгел, башҡаларҙың бәйләнешкәнен күрһә лә, ҡото оса.

— Һиңә бәйләнмәһә инде, ахмаҡ, — тинем мин, Зөлфәт өсөн әсенеп, һәм шунда Асманға булған нәфрәтем тағы ла ҡабынып китте. — Ана үҙе, директорҙан ҡурҡып, мәктәпкә лә килмәй йөрөй. Ә батыр булып ҡыланған була. Көсһеҙерәктәргә генә шәп ул.

Күк йөҙөн һоро болот ҡаплаһа ла, ямғыр-фәлән булыр һымаҡ тойолмай, һауа ла һалҡын түгел. Әкрен генә беҙҙең өйгә табан атлайбыҙ. Зөлфәттең йөҙөндә, күҙҙәрендә әрнеү сағыла.

— Эй-йе... — ти ул, минең һүҙҙәрҙе хуплап. — Хәҙер мин унан барыбер ҡурҡып тормаясаҡмын. Теләгән һүҙемде һөйләйәсәкмен, теләгән эшемде эшләйәсәкмен.

— Шулай кәрәк тә ул...

Эй Зөлфәт, ни булһа ла, мине дуҫ итә ул. Ҡайһы саҡта асыуланһам да, әсендә кер һаҡламай, икенсе көндө үк килеп етә. Үпкәләһә лә, бик тиҙ онота.

— Тамир, беләһеңме, теге альбом хаҡында һүҙ булғас, һин мине бер яҡҡа ла ҡушылмағанға тиргәгәйнең. Дөрөҫ эшләнең һин. Мин уйлап йөрөнөм-йөрөнөм дә, Фатиха инәй хаҡында альбом булдырыу — һәйбәт эш, тип таптым.

Минең күҙҙәрем дүрт булды.

— Нимәгә кәрәк ундай альбом? — тинем мин, ҡыҙып.

— Ни... ҡыҙыҡ биҙ, кеше тырышып эшләгән, орден алған...

— Кыҙыҡ, имеш... Ҡайҙан килгән аҡыллы баш?!

— Үпкәләмә, Тамир. Бар, тиҙерәк ҡапҡыла ла, баҫыуға йүгерәйек.

Беҙҙең өй тәңгәленә еткәнбеҙ икән. Һүҙгә мауығып, әкренерәк тә ҡайтылды. Сөгөлдөргә барырға тейешлегебеҙ бөтөнләй иҫтән сыҡҡан. «Ҡасан бөтөр икән шул эш», — тип һыҡрандым мин әсемдән.

* * *

Асман барыбер мәктәптә күренмәне. Уның хаҡында Вәсиф аша белешеп торҙоҡ. Кисә Мәрйәм апай әсәһе менән дә һөйләшкән. Малай үҙе өйҙә булмаған.

Асман ҡайтҡас, әсәһе уны тиргәгән, иртәгәнән мәктәпкә барырға ҡушҡан, ләкин теге: «Бармаясаҡмын», — тип ҡарышҡан. Әсәһе, сабырлығын юйып, ҡулына сыбыҡ алған икән, малай өйҙән сығып ҡасҡан, кис булғас та ҡайтмаған.

Быны ишеткәс, Мәрйәм апайҙың тағы йөҙө боҙолдо. Боҙолор ҙа шул. Ул бит Асмандың әсәһенә: «Тыныс ҡына, һәйбәтләп кенә һөйләш», — тип кәңәш биргән. Тегеһе уҡытыусы һүҙен тотмаған һәм шуның менән эште тағы ла ҡатмарлаштырған.

Мәрйәм апай бөгөн дәресте лә нисектер тарҡауыраҡ алып барҙы. Шаярып йә һөйләшеп ул-

тырыусыларға ла иғтибар итмәне. Уға үкенес менән ҡараным: «Шул йүнһеҙгә иҫе киткән икән». Бөгөн мин Асман хаҡында уйламайым. Иҫемә төшһә, күңелдә бары тик асыу ҡуҙғала. Кисә Зөлфәткә лә ҡул күтәреүен белгәс, был тойғом тағы ла көсәйеп китте.

Бер мәл, көтмәгәндә, Мәрйәм апай һөйләүенән туҡтап:

— Ғабдуллин! — тип ҡаты ғына Вәсифкә өндәште һәм, ҡапыл йомшап: — Тыныс ҡына тыңлап ултыр, — тине.

Вәсиф бер аҙға тынып ҡалды. Ләкин күпкә түгел, тағы әйләнеп-тулғанып ултыра башланы. Үҙе насар ҙа уҡымай ул: күберәк «өслө»ләр ала, «дүртле» әләктергән сәктары ла була. Тырыша төшһә, «бишле»гә лә тарта алыр ине. Тик эллә нисек еңелерәк ул. Мин айырыуса уның юҡҡабарға ла көлөргә яратыуын оҡшатып бөтөрмәйем.

Тәнәфес ваҡытында класҡа Гөлғәйшә Мөрсәлимовна килеп инде. Өҫтәл артында баҫып торған Мәрйәм апайға аптыраулы ҡараш ташлап:

— Зарипов бөгөн дә юҡмы ни? — тип һораны.

— Юҡ шул, Гөлғәйшә Мөрсәлимовна.

— Ата-әсәһен ауыл Советына саҡыртырғамы эллә?

— Юҡ-юҡ, Гөлғәйшә Мөрсәлимовна, — тине Мәрйәм апай, ашығып. — Килер ул. Бөгөн булмаһа, иртәгә...

Мәрйәм апай менән Гөлғәйшә Мөрсәлимовна кластан сығып китте. Беҙ уларҙы аяҡ өҫтө оҙатып ҡалдыҡ. Мин үҙем директорҙан бер аҙ ғына шөрләйем. Нисектер, уҫал кешегә оҡшап тора ул. Коридорҙа, мәктәп ишек алдында уйнаған саҡтарҙа уның күҙенә әләкмәҫкә тырышам. Хәйер, директор кеше тап шулай булырға тейештер һымаҡ миңә.

Һуңғы дәрес тамамланып, ҡайтырға йыйынганда ғына, ишектә Ибраһим ағай күренде. Уның ҡояшта янған йөҙөндә, ҡыҫығыраҡ күҙҙәрендә йылмайыу сағылды.

— Балалар, мин бер писә минутҡа ғына, — тине ул, ҡулын саҡ ҡына күтәреп. — Мәктәпкә йомош менән килгәйнем дә, һеҙҙе лә күреп сыҡмаҡсы булдым. Фатиха инәйегеҙ тураһында альбом төҙөмәксе булғанһығыҙ икән. Үәт бына шуға бик ҡыуандым да...

— Ибраһим ағай, был хаҡта ҡайҙан белеп өлгөрҙөгөҙ әле? — тип уның һүҙен бүлде Зәлифә.

— Яҡшы хәбәр тиҙ тарала ул, ҡыҙым. Үәт бына ошо хәбәргә ҡыуандым да, ҡыуанысымды уртаҡлашайым, тип һеҙгә индем.

«Был да, «ҡыуандым», «яҡшы хәбәр», тип шаштыра», — тип, ризаһыҙлыҡ менән уйлап алдым.

— Ярҙамым, бәлки, кәрәк булыр, балалар, — тип дауам итте Ибраһим ағай. — Мин Фатиха апайҙың һуңғы йылдарын яҡшы хәтерләйем. Әсә-

йем менән бергә төшкән фотолары ла бар. Унан һуң уны белгән кешеләрҙе лә әйтә алам.

— Хәҙер үк әйтһәгеҙ ҙә була, — тине Зәлифә шунда үк.

— Әйтәм, ниңә әйтмәҫкә?.. Үәт бына Шәнгәрәев Лотфулла. Элекке колхоз председателе...

Мин инде тыңламаным. «Кем һуң әле ул Лотфулла?» — тип хәтергә төшөрөргә тырыштым...

* * *

Нинһайәт, Асман мәктәпкә килде. Ул, бер кемгә ҡарамайынса, класҡа инде лә үҙ урынына барып ултырҙы. Йыуашланып ҡалғандай күренде ул миңә. «Кикреге шиңгән, ахыры», — тип уйланым мин. Әммә бер аҙҙан Асман башын Вәсиф яғына борҙо ла мут ҡына йылмайып ҡуйҙы:

— Бик тә саҡырғас, бына килдем инде, — тине.

Әллә-лә... Оятһыҙлыҡ түгелме был? Хәйер, шулай әйтергә урыны ла бар шул. Асманды әсәһе менән Мәрйәм апай күрше ауылдан, олаталарынан, көйләп-сөйләп алып ҡайтҡандар, уҡырға барырға саҡ күндергәндәр...

Беҙҙән өс-дүрт өй аша ғына Лотфулла бабай йәшәй. Бик йонсоған ҡарт инде ул, йыш ҡына ауырый ҙа буғай. Әйткәндәй, Ибраһим ағай шуның исемен телгә алманымы һуң әле? Шуныҡын булһа кәрәк... Бына шул ҡарттың һуҙҙәре хәтергә һеңеп ҡалған. Бер саҡ ҡаҡса төптәренә килгәй-

нем. Бабай тирәһенә өс-дүрт егет йыйылған да гәп һаталар. Нисектер, мәктәп, ҡайһы бер балаларҙың йүнләп уҡымауҙары тураһында һүҙ сыҡты. «Эй-й, заманалар нисек үҙгәрҙе! — тип һөйләп киткәйне бабай шул саҡта. — Элек, революцияға тиклем, уҡырға бик теләһәк тә, мәктәбе лә, уҡытыусылары ла юҡ ине. Ә ауыл мәҙрәсәһенә нисә ҡыш йөрөһәк тә, шул, «әлеп, би, ти, си»ҙән уҙманыҡ. Ҡалаларҙағы мәктәптәр, гимназиялар беҙҙең кеүек ярлы балалары өсөн ябыҡ ине. Эй заманалар... Хәҙер уҡырға теләгең генә булһын: мәктәбе лә, уҡытыусылары ла бына тигән! Шуның ҡәҙерен белергә кәрәк бит. Юҡ, ҡайһы бер балалар ялҡаулаша, уҡыуҙан ситләшергә тырыша. Ундайҙарҙы өгөтләйбеҙ, хәйләләйбеҙ. «Уҡы инде, кеше булырһың», — тибеҙ. Асылда быны һәр бала үҙе аңларға тейеш. Эй заманалар... Йәш быуынды артығыраҡ иркәләйбеҙ шикелле...»

Бөгөн Асмандың ҡылығын күргәс, ошо һүҙҙәрҙе ҡапыл хәтеремә төшөрөп, уйға ҡалдым. Бабай хаҡлы бит. Бына тигән ҡыҙыл кирбестән ике ҡатлы итеп һалынған мәктәбебеҙҙең дә, уҡытыусыларыбыҙҙың да ҡәҙерен белеп бөтөрмәйбеҙҙер, моғайын. Миҫалға үҙемде генә алам. Мин, әйткәнемсә, — кластағы ике отличниктың береһе. Тик ниндәй отличник булайым ти мин? Белемем бөтә фәндән дә «бишле»лек түгел. Шулай ҙа мин гел «өслө», ара-тирә «дүртле» алыусыларҙан өҫтөнмөн. Уҡытыусыларым шуларҙан

айырылып торғаным өсөн генә юғарырақ билдә ҡуялар, мине маяҡ итергә тырышалар. Мин быны аңлайым һәм шуға ҡәнәғәтмен. Ә тағы ла саҡ ҡына күберәк шөғөлләнергә түҙемлегем етмәй. Фөмүмән, мин эште яратып бөтмәйем шикелле. Шулай ҙа «отличник», «тәртипле уҡыусы» тигән дан миңә оҡшай. Быға ата-әсәйем дә шат, миңә теләһә ниндәй эш ҡушып бармайҙар, үҙ иркемдәрәк йәшәй бирәм...

Әйе, Лотфулла бабай һөйләгәндәр күптәре-беҙгә ҡарата дөрөҫ икән шул. Ана Асман, бөгөн дәрескә килгәс, ике сәғәт тынысыраҡ ултырҙы, ә өсөнсөһөндә тағы иркенләп китте. Вәсиф һәм үҙенән алдараҡ ултырған бер малай менән һөйләшә, шыпырт ҡына көлөшә башланы. Уның мәктәпкә ни өсөн килмәй йөрөүен яҡшы белгәнлектән, уҡытыусылар уға һағыраҡ булырға, «ваҡ-төйәк» гөнаһтарын күрмәҫкә тырышты. Береһе лә унан өйгә эште һораманы. Әйтерһең, ул уҡырға түгел, ҡунаҡҡа килгән.

Асман дәрескә йүнләп эҙерләнмәй. Математиканы насар белә, рус теленән хаталы яҙа, диктант һәм иншаларына гел «икеле» ҡуйыла. Әммә был фәндәрҙән сиреккә уға һәр саҡ «өслө» сыға. Быны күреп торған ҡайһы бер уҡыусылар: «Әһә, бик үк тырышмаһаң да була икән», — тиҙәр һәм Асманға әйәрәләр.

Ниңә шул ялҡауға үҙенә лайыҡ «икеле»һен ҡуймаҫҡа? Ни өсөн уны көҙгө һынауға йәки класта ултыртып ҡалдырмаҫҡа? Миңә уҡытыу-

сыларҙың Асманға булған мөнәсәбәте аңлашылмай. Ҡайһы саҡта: «Бындайҙарҙан кемдәр сығыр икән һуң?» — тип уйлап ҡуям.

Мин, ғәҙәтемсә, кластан һуңғараҡ ҡалып ҡайтырға сыҡтым. Әлеге шул юлда Асманға тап булғым килмәй. Тик иҫәбемдә тағы яңылыштым. Тыҡрыҡты үтеп, оло урамға боролғанда ғына, ҡаршыма Асман килеп баҫмаһынмы!

— Әһә, эләктеңме, алланың ҡашҡа тәкәһе? — Асман, мыҫҡыллап, ауыҙын йырҙы. — Миңә үс итеп, өләсәй хаҡында альбом яһауға ҡаршы киләһеңме?..

Мин шунда уҡ, портфелемде ергә ташлап, һуғышҡа әҙерләндем. Бәлки, Асман минең ҡаушап ҡалыуымды көткәндер. Әммә төйнәлгән йоҙроҡтарыма, ҡурҡыуһыҙ ҡарашыма күҙ һалғас:

— Ҡара, ҡара, сыҫҡан өҫтөнә ташланырға әҙерләнгән бесәй кеүек был, — тине, аптырап. Унан көлөп ебәрҙе: — Ха-ха-ха-ха... Ал портфелеңде, юлыңда бул! Һинең менән һуғышмайым мин бөгөн. Тик ҡара, өләсәйҙе минең менән бутама.

Мин алға атланым, бер һүҙ ҙә өндәшмәнем: «Нимә булды һуң эле был? — тип уйландым мин. — Асман шулай, үҙенсә, өләсәһен яҡлаған буламы? Альбом төҙөүгә битараф түгел, күрәһең».

* * *

Беҙҙең Ҡондоҙло һигеҙ йыллыҡ мәктәбе үҙенә беркетелгән участкалағы сөгөлдөрҙө йыйып алып, таҙартып һәм дәүләткә тапшырып бөтөрҙө. Был көндө баҫыуға Гөлғәйшә Мөрсәлимовна килеп, ҡалдыҡ-боҫтоҡ тамырҙарҙы йыйыштырып, машинаға тейәүсе балалар араһында йөрөнө. Уның ҡаҡса һәм, ғәҙәттә, ниндәйҙер эске көсөргәнеш сағылған йөҙө бөгөн тыныс, яғымлы ине.

Әле тегендә, әле бында Ибраһим ағай күренеп ҡала. Һәр урында ҡәҙимге, ләкин йөрәгенән сыҡҡан ихлас һүҙҙәрен һөйләй ул.

— Рәхмәт, балалар, һеҙгә! — ти ул, тулҡынланып. — Ҙур эш эшләнегеҙ. Тырышлығығыҙҙы көн һайын тиерлек күреп торҙом, сикһеҙ ҡыуандым. Үәт бына. Фәжәп күркәм дә, йомарт та шул беҙҙең еребеҙ. Нимәләр генә үҫмәй унда! Мөғжизә, ысын мөғжизә ул. Үәт бына ошо еребеҙгә ысын хужалар кәрәк. Яратығыҙ уны, уға лайыҡ булығыҙ.

Был һүҙҙәрҙе мин йәй буйы әллә нисә тапҡыр ишетеп, ятлап бөткәнмен. Ләкин Ибраһим ағай уларҙы шундай эске бер хис менән әйтә, һәр өнөн яңы кеүек итеп тыңлайым. Эйе, ҡыуанысы уның аңлашыла. Ун гектар майҙанда сөгөлдөр үҫтереп, уңышын йыйып биреү бәләкәй эшме ни! Ҡайһы саҡта ялҡауланһаҡ та, ҡайһы берҙә үпкәләшеп, әйткәләшеп алһаҡ та, яҙҙан алып көҙгә тиклем беҙҙең аҙ көс түгелдеме ни!

Сөгөлдөр генә түгел, уның япраҡтары ла әрәм булманы: йыйылып, фермаға оҙатылды. Бөтә эштәр тамам булғас, кластар баҫыу ситендәге сиҙәмгә теҙелде. Гөлғәйшә Мөрсәлимовна менән бер нисә уҡытыусы, Венер һәм Ибраһим ағайҙар беҙҙең ҡаршыға баҫты. Улар, нимәлер һөйләшеп, йылмайышып ҡуйҙы. Бөтәһенең дә күңелдәре күтәренке булыуы күренеп тора.

Гөлғәйшә Мөрсәлимовна ирҙәрҙекенә тартым тауышы менән әкрен генә һүҙ башланы:

— Балалар, яҙ көнө колхоздан сөгөлдөр майҙаны бүлеп алғанда, беҙ был эштең нисек барып сығыуын күҙ алдына ла килтерә алмай инек әле. Ошоға тиклем бындай тәжрибәбеҙ булмағас, күңелебеҙгә был бурысты үтәп сыға алырбыҙмы тигән шик тә килмәне түгел. Ләкин, күмәкләгән яу ҡайтарған, тиҙәр. Был эште беҙ һәйбәт осланыҡ, ҙур уңыш үҫтереп алдыҡ. Был — беҙҙең оло еңеү! Оҙаҡламай бөтә халҡыбыҙ тантана итәсәк Бөйөк Октябрь байрамына лайыҡлы бүләк!

Беҙ дәррәү ҡул саптыҡ. Һәр ҡайһыбыҙҙы күңел күтәренкелеге биләп алған. Хатта Асмандың йөҙөндә лә йылмайыу сағылып ҡалды.

Гөлғәйшә Мөрсәлимовна уҡыусыларҙың тынысланғанын көтөбөрәк торҙо ла һүҙен дауам итте.

— Был еңеү, әлбиттә, еңел генә килмәне. Һеҙҙең ең һыҙғанып эшләүегеҙ менән яуланды ул. Уға күп кенә уҡыусылар айырыуса ҙур өлөш индерҙе.

Директор алдынғыларҙың исемдәрен һанап китте. Беҙҙең кластан Зәлифә менән минең исемде лә телгә алды. Быны көтмәгәйнем. Эшкә сыҡмаған саҡтарым да булғыланы, уңғанлыҡта башҡаларҙан әллә ни айырылып та торманым шикелле. Баҫыуҙа Зөлфәт менән бер сама эшләнем. Күптәрҙең эшкә сыҡмаған көндәре минекенән аҙыраҡ. Ни өсөн улар ҙа маҡталмай? Уларҙан ни ерем артыҡ? Уҡыуҙа алдараҡ барам. Был аҙмы ни? Бер аҙ уңайһыҙыраҡ булһа ла, миңә күңелле. Ни тиһәң дә, яҡшы иҫәптә йөрөү һәйбәт инде ул.

— Киләсәктә лә тыуған колхозыбыҙға көсөгөҙҙө йәлләмәҫһегеҙ, уның байлығын, күркен арттырыу өсөн тағы ла тырышыбыраҡ эшләрһегеҙ, тип ышанам, — тип һүҙен бөтөрҙө Гөлғәйшә Мөрсәлимовна.

Ҡайтырға сыҡтыҡ. Көн бөгөн сыуаҡ, атлауы еңел. Тик бына кискә табан күк йөҙөндә болоттар күренгеләй башланы, еле лә, һалҡынайып, көсәйә төштө.

Йәнәшәмдән Зөлфәт килә. Күңел күтәрелеп киткәс, уға үпкәмде лә онотҡанмын. Һөйләшеп киттек.

— Беләһеңме, Тамир, — тине Зөлфәт бер мәл, — һине директор юҡҡа маҡтаны...

— Ни эшләп юҡҡа булһын? — Зөлфәткә асыулы ҡараным. — Мин насар эшләнемме ни?

— Насар тип әйтмәйем дә...

— Һуң?

— Һинән, минән якшыраҡ эшләгәндәр ҙә бар ине. Гөлгәйшә Мөрсәлимовна кеше хаҡында уҡыуына ҡарап фекер йөрөтөүсән.

Элек үҙ уйын ҡысҡырып әйтергә баҙнат итмәгән малай ҡапыл ғына һүҙсән булып китте түгелме һуң? Нилектән был? Аптырабыраҡ ҡуйҙым. Шулай ҙа уның ни әйтергә уйлауын яҡшы төшөнһәм дә, аңламаған булып ҡыландым.

— Юҡка-барға ҡыҫылма, кемде маҡтарға, кемде яманларға директор үҙе белә ул, — тип Зөлфәттең ауыҙын яптым.

Ә үҙем: «Уңғанлығыңды, тырышлығыңды иҫтәштәрең танымағас, унан ни мәғәнә? Ялған дан нимәгә кәрәк?» — тип уйланым да ҡапыл күңелһеҙләндем.

* * *

Оҙон тәнәфес ваҡытында елт-елт атлап Зәлифә эргәмә килде. Мин һаҡайып ҡалдым: беләм, ул тиктәҫкә йөрөмәҫ, берәй эш йөкмәтергә теләйҙер. Ә мин шул йәмәғәт эше тигәндәрен... Ай-һай-һай... Тешем һыҙлағандағы кеүек йөҙөмдө боҙоп, башымды күтәрҙем.

Зәлифә менән беренсе кластан бирле бергә уҡыйбыҙ. Уның менән асыуланышҡан, үсегеп, сәсен тартҡан саҡтарым да булды. Былары, әлбиттә, бәләкәйерәк саҡта, башланғыс кластарҙа уҡығанда.

Зәлифә беренсе ошаҡсы ине. Берәйһе ярамаған һүҙ әйтһә лә, тәртип боҙһа ла, ә сәсен тартһалар, бигерәк тә, баҫыр ҙа уҡытыусыға һамаҡлай башлар ине. Шуға күрә малайҙар уны яратмай торғайны. Әммә юғарыраҡ класҡа күскәс һайын, уның холҡо яҡшыра барҙы, ә үҙе буйға ла үҫте, ҡыйыуланды. Элекке ҡылығынан бары тик кластағы һәр яңылыҡты, алдан алып, Мәрйәм апайға еткереү ғәҙәте генә ҡалды. Быныһына инде беҙ күнегеп бөткәнбеҙ.

— Тамир, ниҙә йөҙөң һытылды? — тине Зәлифә, йылмайып. — Әллә миҙә берәй үпкәң бармы?

— Юҡ та, — тинем мин, ситкә ҡарап.

— Ярай, Тамир, — тине Зәлифә етди төҫтә, — мин һиҙә пионер поручениеһы менән...

— Ниндәй поручение ул тағы?

— Зөлфәт менән Лотфулла бабайға барып, Фатиха инәйҙең тормош юлы тураһында уның иҫтәлектәрен яҙып алырһығыҙ.

— Ниндәй Лотфулла бабай ул? — тип белмәмешкә һалыштым.

— Бәй-бәй, күршегеҙҙәге бабайҙы белмәйһеңме ни? — Зәлифә ғәжәпләнде.

— Белмәйем, белергә лә теләмәйем...

— Улай ярамай, Тамир, пионер поручениеһы...

«Был эшкә ҡаршы булыуымды белә торон, юрый миҙә бәйләнә», — тип уйланым мин, асы-

уым ҡабарып. Тик эсемдәген тышҡа сығармаҫҡа тырыштым. Шунда эргәбеҙгә Зөлфәт килде лә:

— Ярай инде, Тамир, шул бабайға барып, һөйләшеп ултырырбыҙ. Унан ғына бер еребеҙ ҙә кәмемәҫ, — тине.

Зәлифә, шуны ғына көткән кеүек:

— Килештек, малайҙар, — тине, ҡыуанып Мин Зөлфәткә асыуланып ҡарап ҡуйҙым.

— Туҡта әле, Зәлифә, был эште миңә түгел, бәлки, башҡа берәйһенә йөкмәтерһең, — тинем мин, үтенгән һымаҡ.

— Юҡ, һәр ҡайһыбыҙға эш бүленгән. Бынысы — Зөлфәт менән һиңә.

Зәлифә китте. Зөлфәт мине тынысландырғандай:

— Пионер поручениеһын да үтәргә кәрәк бит. Былай ҙа бер ни эшләгәнебеҙ юҡ, — тине.

Мин өндәшмәнем. Зөлфәт уныһын дөрөҫ әйтә. Беҙҙә отряд советы ни ҙә булһа эшләү түгел, быйыл уның һайланғаны ла юҡ әле. Үткән йылғы председатель ҡыҙыҡай иҫәпкә бар, һанға — юҡ. Дәртләнеп китеп староста Зәлифә берәй нәмә уйлап тапмаһа, үҙебеҙҙең пионер булыуыбыҙҙы ла онотор инек инде.

* * *

Зөлфәт менән мин Лотфулла бабай янына төш ауғасыраҡ барырға уйлағайным. Өйгә ҡайтып, тамаҡ туйҙырып алғас, был эшкә күңелемдә

ҡаршылыҡ яңы көс менән ҡабынып китте. «Альбом төҙөүгә минең мәнәсәбәтте белә тороп, юрый миңә эш бирәләр, мыҫҡыл итәләр, — тип әсенеп уйландым мин һәм, ҡапыл киреләнеп: — Бармайым, үтәмәйем поручениеларын, минән башҡа ла эшләрҙәр әле», — тинем. Өҫтәл артына ултырып, Александр Дюманың «Өс мушкетер» романын уҡырға уйланым. Китаптың тәүге битен асыуым булды, Гөлшат һеңлем минең эргәмә килде. Ул, ҡыҙыҡһынып, китаптағы мушкетерҙар һүрәтенә ҡарап торҙо ла:

— Ағай, — тип өндәште, — Асманға асыу итеп, уның өләсәһе хаҡында альбом төҙөүгә ҡаршы сығаһың икән.

— Кем әйтә?

— Бөтәһе лә...

— Бөтәһе лә?

— Бөтәһе лә. Ҡырҡ кеше бер яҡлы, ҡырын кеше бер яҡлы, ти әсәй. Кеше көлдөрөп йөрөмә, ағай.

— Ай-һай, күп беләһең. Мин Асманға асыу итмәйем, берҙән; икенсенән, эллә ҡасан үлгән бер сөгөлдөрсө хаҡында альбом төҙөү кемгә кәрәк?

— Кәрәк шул бына, кәрәк, — тине һеңлем, үҙ һүҙләләнеп. — Беҙҙең отряд та элекке хеҙмәт ветераны тураһында мәғлүмәттәр йыясаҡ.

— Бар, бар, күп теленә һалынма! — тинем мин һәм, һеңлем киткәс, үҙем уйға ҡалдым. «Бына әй, мине, Асманға үс итеп, альбом төҙөүгә ҡаршы, тип һөйләйҙәр икән. Иҫәрҙәр... Ә төпкә-

рәк ҡарағанда, минең ҡаршылыҡтың нигеҙендә шул Асман ятмаймы ни? Шул бит... Юҡ, былай ярамай. Ундай уйҙарҙан өҫтән булырға кәрәк». Мин шунда, эске бер ярһыу менән, йоҙроҡлап өҫтәлгә һуҡтым. Көслө шапылдауға һеңлем хатта, икенсе бүлмәнән башын тығып, аптырап миңә ҡараны. Ҡапыл һикереп торҙом да кейенә башланым.

Бер аҙҙан Зөлфәт менән Лотфулла бабайҙың йортона табан атланыҡ. Минең күңел кеүек көнө лә болотло, йәмһеҙ. Иртән яуып киткән һалҡын ямғырҙан һуң өйҙәр, ағастар, хатта ҡоймалар, рәшәткәләр күшегеп ултыралар һымаҡ.

Бына Лотфулла бабайҙың иҫке генә йорто. Ел-ямғырҙан бүрәнә баштары ярғыланып бөткән, тәҙрә ҡапҡастарының, кәрниздәрҙең семәрҙәре лә уңғандар. Түбә ҡалайы ла тутыҡҡан.

Беҙ бер аҙ ҡаралтыларға ҡарап торҙоҡ та, солан ишеген асып, эскә үттек. Тәҙрәләргә туҙан ҡунғанлыҡтан, бында эңер төшкән ваҡыттағы кеүек томһа ине. Өй ишеген саҡ-саҡ шәйләп, ипләп кенә шаҡыным. Һағайып, бер аҙ көтөп торҙоҡ, тик эстән тауыш биреүсе булманы. Тағы ла, быныһында инде ҡатыраҡ итеп, ҡаҡтым.

— Әллә үлгән инде? — тинем мин, шаяртмаҡсы булып.

— Улай тимә, Тамир, ҡарт кеше хаҡында. — Зөлфәттең тауышы ҡалтыранып сыҡты.

Мин ишекте тарттым. Ул бикле түгел ине. Тупһаны атлап үтеү менән өй эсенә күҙ һалдым.

Унда бер кем дә күренмәй. Түрә стеналағы сәғәт гере иҙәнгә тиклем төшөп, туктап ҡалған, һауыт-һаба шкафына, тәҙрә тупһаларына туҙан ҡунған.

Был хәл миндә ҡыҙғаныу ҙа, шул уҡ ваҡытта ниңә килгәнемә үкенеү ҙә кеүегерәк бер тойғо уятты. Кинәт мөйөштәге карауат шығырлап ҡуйғандай булды. Унда бер йән эйәһе ҡыймылданы түгелме һуң? Зөлфәт менән шунда барҙыҡ. Йомшаҡ түшәккә сумып, бөгәрләнеп ятҡан ҡарттың бәләкәй генә кәүҙәһен күрҙек. Йөҙөн һаҡал-мыйыҡ баҫҡан, күҙҙәре лә сәйер ҡарайҙар. «Әллә хыялыйландымы икән?» — тип, йөрәгем жыу итеп китте. Зөлфәт шул саҡ, ҡарттың ҡолаҡ тәңгәленә эйелеп:

— Бабай, ауырып киттеңме әллә? — тип һораны.

Лолфулла бабайҙың ирендәре ҡыбырлап, бышылдап ҡына әйткән һүҙҙәре ишетелде:

— Шулай шул, улым, бер нисә көн инде.

Зөлфәт, көрһөнөп, башын сайҡап ҡуйҙы.

— Врач булманымы?

— Юҡ.

Зөлфәт мәғәнәле итеп миңә ҡараны:

— Минеңсә, хәле хөрт. Врач саҡыртмай булмай. Сәй ҡайнатып эсерергә лә өйөн бер аҙ йыйыштырып алырға кәрәк.

Беҙҙең маҡсаттың тормошҡа ашмаясағы көн кеүек асыҡ ине. Ниңә килгәнемә үкенеп ҡуйҙым. Тик шунда уҡ үҙем тертләп киттем: «Беҙ инмә-

һәк, уның менән нимә булыр ине?» Үҙемдең баштағы уйымдан үҙем оялдым.

— Беләһеңме, Зөлфәт, — тинем мин, — һин бабай янында ҡал, уға ярҙам итә тор, мин врач саҡырайым.

— Ярай, — тине Зөлфәт, ҡыуанып.

Урамға сыҡҡас, еңел һулап ҡуйҙым. Унан ашығып ауыл Советы бинаһына табан атланым. Унда өҫтәл артында яҙышып ултырған секретарь ағайҙан башҡа бер кем дә юҡ ине. Ул миңә иғтибар ҙа итмәне. Телефондан шылтыратырға рөхсәт һорағас, башын ҡағып ҡына ҡуйҙы.

Участка больницаһында трубканы ҡатын кеше алды. «Эйе»,— тине ул йомшаҡ тауыш менән. Мин үҙемдең кем булыуымды ла әйтеп тормай:

— Шәңгәрәев Лотфулла бабай бик ҡаты ауырып киткән, ашығыс ярҙам кәрәк, — тинем.

— Ҡайһы ере ауырта? Температураһы нисек? — тип һораны элеге тауыш.

— Белмәйем, бик ауыр хәлдә ул, — тигәс, ҡатын кеше бер аҙға тынып торҙо ла:

— Ярай, оҙаҡламай барып етербеҙ, — тине.

Мин ҡайтҡанда, Зөлфәт Лотфулла бабайҙы карауатына ултыртып, бер ҡулы менән уны ҡосаҡлаған, икенсеһе менән уға сәй эсерә ине.

— Эс, бабай, хәл кереп китер үҙеңә, — ти ул. Үҙе бал ҡалағы менән бабайға варенье тәмләтеп тә ала.

Был күренешкә аптырап торҙом. Минең ҡулдан килмәҫ ине, моғайын. Зөлфәтте: «Егет түгел

һин» — тип әрләгәнем иҫемә төшөп, уңайһыҙланыу тойғоһо кисерҙем. Баҡһаң, егет икән дә ул.

* * *

Иртән класҡа инеп ултырыуым булды, Зәлифә өндәшә һалды:

— Лотфулла бабайға барҙығыҙмы?

— Барҙыҡ, — тинем мин иғтибарһыҙ ғына.

— Йә, нисек? Һөйләштегеҙме?

— Юҡ.

— Ни эшләп? — Аптырауҙан Зәлифәнең күҙҙәре ҙурайып китте.

— Бик ҡаты ауырып ята ине. Врач саҡыртып, больницаға оҙаттыҡ.

— Ә-ә... — тине Зәлифә, аңлағанын белдереп. — Тимәк, уны ҡараусы юҡ икән.

Яҡында ғына беҙҙе тыңлап торған Зөлфәт, уға яуап биргәндәй:

— Мин белештем: күршеһендәге Сәрбиямал апай бабайҙың кейем-һалымдарын йыуғылап, сирләп торған саҡтарында аш-һыуын эҙерләп биргән. Тик был көндәрҙә ул да өйҙә юҡ, эш менән ҡайҙалыр киткән. Лотфулла бабай бөтөнләй яңғыҙ ҡалған.

— Былай булғас, бер кеме лә юҡтыр инде ҡарт кешенең, — тине Зәлифә, бабайҙы ҡыҙғанып.

— Ҡалала ҡыҙы бар ҙа ул, — тине Зөлфәт ниндәйҙер битараф ҡиәфәттә. — Тик Лотфулла

бабай уларға барырга телəмəй икəн. «Тыуган еремдəн бер ҡайҙа ла китмəйем, ошонда тыуҙым, ошонда үлəм», — тип əйтə, ти.

«Алйып бөткəн, ə уға тыуған ер кəрəк. Нимəгə икəн?» — тип уйланым мин, иҫем китеп.

— Ҡыҙыҡ ҡарт əй, — тинем мин, уйҙарымды йомғаҡлағандай.

Зəлифə миңə сəйер генə ҡарап ҡуйҙы.

— Тыуған ерҙəн башҡа йəшəй алмай, тимəк. — Ул шул саҡ ҡапыл ғына етдиленеп: — Малайҙар, — тине, тауышын түбəнəйтеп, — Лотфулла бабайға ярҙам кəрəк. Шул хаҡта уйлашырбыҙ эле.

Зəлифə, нимəлер иҫенə төшөп, ашығып кластан сығып китте. Ə мин тыуған ер хаҡында уйландым. Кеше өсөн, күрəһеҥ, бик кəҙерлелер ул. Шулай булмаһа, һикһəнде уҙған ҡарт бер əйҙə бер үҙе, ҡараусыһыҙ килеш, йəшəп ятмаҫ ине.

Əлегə ауылдан бер ҡайҙа ла киткəнем юҡ. Мине шаулы ҡалалар, заводтар тарта. Ҡайһы саҡта алыҫ илдəр, океандар буйлап сəйəхəт иткем килə. Бəлки, сит яҡтарҙа булғандан һуҡ, тыуған ерҙеҥ нəмə икəнен ныҡлап төшөнөрмөн һəм бер ваҡыт, бик һағынып, ауылыма урап ҡайтырмын...

* * *

Зəлифə класҡа Мəрйəм апайҙың сирлəп китеүе, тəүге дəрестеҥ булмаясағы хаҡында хəбəр итте. Быны ишетеп, ҡапыл тынып ҡалдыҡ. Уҡы-

тыусыбыҙҙы йәлләп ҡуйҙым. Тик эле дәрестең булмауына ҡыуаныс һымаҡ тойғо ла кисерҙем. Был тойғо күптәребеҙгә уртаҡ ине, күрәһең. Класс шунда уҡ умарта күсе кеүек гөжләй башланы. Ҡайһы берәүҙәр сығып уҡ китергә йыйынды, шунда, көтмәгәндә, Венер ағай килеп инде.

— Йәгеҙ әле тынысланығыҙ, ултырышығыҙ, — тине ул, уҡытыусы өҫтәле артына баҫып, һәм ыҡы-зыҡы баҫылғанды көтөбөрәк торҙо. — Һеҙҙең класта отряд советының яңы составын һайларға кәрәк. Кандидатураларҙы ныклап уйлағыҙ, ең һыҙғанып эшләрҙәй кешеләр булһын.

— Үткән йылғы советтың отчеты булмаймы ни? — тип һораны кемдер урынынан.

— Ярай, — тине Венер ағай, һорау биреүсе яғына төбәлеп, — хәҙер отряд советы председателенең отчетын тыңлайыҡ, улайһа.

Отчет, әлбиттә, килеп сыҡманы. Мәктәп буйынса үткәрелгән һәм беҙҙең отряд та ҡушылған ҡайһы бер сараларҙы иҫкә алмағанда, телгә алырлыҡ эш тә юҡ ине. Әммә, иң ҡыҙғанысы, үткән йыл һайлап ҡуйылған отряд советын тәнҡитләүсе лә табылманы. Бары Зәлифә генә:

— Өлкән вожатый мәктәптән киткәс, отрядта пионер эшенә йүнәлеш биреүсе лә булманы инде, — тип ҡуйҙы.

Был йыйылышта мин ниндәйҙер бер уңайһыҙлыҡ кисереп, иптәштәремә ҡарамаҫҡа тырышып ултырҙым. Отчет тигән нәмәнең, үҙебеҙсә

эйткәндә, «көтәк» килеп сығыуында минең дә ғәйебем бар ине, билдәле.

— Аңлашылды, — тине Венер ағай, башын ҡағып. — Отчет биреү өсөн эш кәрәк, ә ул юҡ. Бушҡа ваҡыт әрәм итмәйек. Һайлауҙарға күсәйек.

Шунан һуң кандидатуралар күрһәтеү китте.

— Отряд советына ағзалыҡҡа пионер Зөлфәт Иркәбаевты күрһәтәм, — тине Зәлифә, урынынан тороп.

Венер ағай, Зөлфәттең һәм тағы бер нисә пионерҙың исемен яҙып ҡуйғас:

— Минең дә бер кандидатурам бар, — тине. — Отряд советының яңы составына Зәлифә Сәғитованы һайларға тәҡдим итәм.

— Ул класта староста бит, — тине шунда уҡ бер нисә тауыш.

Венер ағай беҙгә аҙ ғына көлөмһөрәп ҡараны.

— Беләм, шулай ҙа Зәлифәне отряд советына тәҡдим итәм, ә староста итеп икенсе кешене һайларға мөмкин.

Төрлө урындан Венер ағайҙы хуплаған ауаздар ишетелде:

— Ҡыйыу, талапсан.

— Үҙ эшебеҙ өсөн янып тора.

— Ысынлап та...

— Фатиха инәй хаҡында альбом төҙөүҙе кем башланы? Ул.

— Зәлифәнең тағы ла бер шәп яғын эйтәйемме? — тине Вәсиф, ауыҙын йырып. — Клас-

тағы һәр яңылыҡты, ЧП-ны Мәрйәм апайға иң беренсе еткереүсе тиһәм дә аңларһығыҙ, моғайын.

Бер нисә кешенең шырҡ-шырҡ көлөшкәне ишетелде. Зәлифәнең бит алмалары янып сыҡҡа ла, ул тыныс ултырҙы. Венер ағай ауыҙ йырыусыларға, юҡҡа тештәрегеҙҙе йылтыратаһығыҙ тигәндәй, етди ҡарашын төбәне. Тегеләр тынып ҡалды.

Зәлифәне отряд советына һайларға риза булдыҡ. Ә бына үҙемде яңы состав һайлағанда телгә алмауҙары һағайтты. Минең уйымса, яҡшы уҡыусыны, «отличник»ты ситләп үтергә тейеш түгелдәр ине. Тыштан тыныс күренергә тырышһам да, ике битемдең бешеүен тойҙом.

Кандидатуралар бер-бер артлы тауышҡа ҡуйылды. Мин иҫе китмәгән кеше ҡиәфәте алдым да һәр ҡайһыһына ҡулымды күтәрҙем.

Зәлифә беҙҙең отряд советы председателе булды. Мине һайламауҙарына күнеп, тынысланып та бөткәйнем инде. Көтмәгәндә Зәлифә урынына староста иттеләр ҙә ҡуйҙылар. Дөрөҫ, тауышҡа ҡуйғанда, ҡаршылар ҙа табылды. Ләкин күпселек мине хуплап ҡулын күтәрҙе. Ошо хәл кәйефемде үҙгәртте. Иптәштәрем миңә ышаныстарын бөтөнләй үк юғалтмағандар икән әле. Был мине шатландырҙы ла, уйландырҙы ла.

* * *

Зәлифә шундай тынғыһыҙ бер ҡыҙыҡай инде ул. Тимурсылар командаһы хаҡында башына уй

төшөү менән Венер ағайға барып та еткән. Бөтә отрядтарҙа ошо турала һүҙ булды. Беҙ ҙә үҙ командабыҙҙы төҙөнөк һәм иң тәү башлап Лотфулла бабайҙың үҙен һәм өйөн шефҡа алырға һөйләштек. Ҡарт әлегә үҙе больницала. Врачтың әйтеүенә ҡарағанда, биш-алты көнһөҙ уның менән осрашып булмаясаҡ.

Кисә Зөлфәт менән мәктәптән ҡайтып килгәндә, утын тейәгән самосвал Лотфулла бабайҙарҙың ҡапҡаһы төбөнә килеп туҡтаны, кабинанан, шофер эргәһенән, Ибраһим ағай төшөп, ҡапҡаны асты. Машина ипләп кенә арты менән ихатаға инде. Беҙ ҡапҡа төбөнә килеп еткәс, ҡаршыбыҙға Ибраһим ағай сыҡты.

— Ҡустылар, бабайығыҙ больницаламы? — тип һораны ул, йоҙаҡлы ишеккә күрһәтеп.

— Больницала, — тинем мин.

— Эй, сирләп киткән икән шул, бахырыҫ, — тине Ибраһим ағай, бабайҙы йәлләп. — Үҙе лә бер сәйер ҡарт булды. Колхоздың яңы йортонан квартир бирҙек. Үҙәктән йылытыла, йылы һыуы, ваннаһы, туалеты, газы тигәндәй... Шунда ғына рәхәтләнеп йәшә лә бит. Юҡ. «Ғүмер иткән нигеҙҙән китмәйем», имеш. Үәт бына, нимә эшләйһең уның менән?

— Ошо нигеҙенән башҡа йәшәй алмай, тимәк, — тине Зөлфәт, ахыры, мәктәптәге һөйләшеүҙе хәтерләп.

— Уныһы шулайҙыр инде, — тине Ибраһим ағай, Зөлфәт менән килешеп. — Тик бына үҙенә

ҡыйын бит әле. Йорто ла иҫкерҙе инде. Ошо арала бер-ике оҫта ебәрергә тура килер. Ни тиһәң дә, ауылда иң оло ветеран бит.

Шофер, утынды бушатып, машинаһын урамға сығарҙы. Ибраһим ағай ҙа китергә ҡуҙғалды.

— Һау булығыҙ, ҡустылар! — тине ул кабинаға күтәрелгәндә. — Был утынды бысып-ярып биреүҙә ҡартҡа ярҙамлашһағыҙ ине.

...Ошо турала Зәлифәгә һөйләп биргәс, ул ҡыуанысынан ҡысҡырып уҡ ебәрҙе.

— Малайҙар... утын килтереп нисек яҡшы иткәндәр! Бөгөн үк күмәкләп бысып-ярып, өйөп ҡуябыҙ, бабайыбыҙ больницанан ҡайтҡас, аптырап торһон.

— Ысынлап та,— тине Зөлфәт тә, дәртләнеп.

Уға ҡарап, тағы бер аптырап ҡуйҙым. Ҡайһылай үҙгәрҙе ул был арала! Кем йоғонтоһо? Бер ни аңламайым.

Мин генә үҙгәрмәйем, буғай. Бына әле, Лотфулла бабайға утын бысырға тигәс, бик үк ирепкитмәнем. Дөрөҫөрәге, бындай эште яратып бөтөрмәйем мин. Өйҙә лә балта, бысҡы кеүек нәмәләр тотоп бармайым. Атайым утынды «Дружба» менән «шаж-шож» бысып ташлай ҙа үҙе үк ярып та ҡуя. Ләкин хәҙер мин — староста. Башҡаларҙың һәйбәт башланғысын яҡлау ғына түгел, үҙем алдан йөрөргә тейешмен.

— Эйе, бөгөн үк утын быса барайыҡ, — тинем.

Дәрестән һуң бөтә отряд Лотфулла бабайҙарға йыйылды. Асман менән Вәсиф тә бар. Берәһе — балта, икенсәһе бысҡы тотоп килгән. Тыштан һиҙҙермәһәм дә, уларҙы күргәс, кәйефем ҡырылды. Дөрөҫ, һуңғы ваҡытта улар юлымды баҫмай. Ләкин үткәндәгеләрҙе тиҙ генә онотоп буламы ни!

— Эшкә башлайыҡ! — тинем мин, малайҙарға, ҡыҙҙарға ҡарап.

Зәлифә миңә башы менән ымлағандай итте лә:

— Бабайҙың өйөн дә йыйыштырып ҡайтырға ине, — тине.

Мин шунда уҡ өйҙөң ниндәй хәлдә булыуын күҙ алдына килтерҙем.

— Һәйбәт фекер, хуплайым, — тинем, шаяртып.

Зөлфәт менән йәшереп киткән урындан йоҙаҡ асҡысын ҡыҙҙарға алып бирҙем. Улар, дөбөршатор ишекте асып, өйгә инеп тә киттеләр.

Өйөлөп ятҡан утын миңә бик күп һымаҡ күренде. «Ай-һай, бөгөн бысып бөтөрөрбөҙмө икән?» — тип уйланым мин, борсолоп.

Асман менән Вәсиф йыуан ғына ағасты ситкә тәгәрәтеп быса ла башланы. Асманы, миңә боролоп:

— Нисек уйлайһың, Тамир, был утын беҙҙең кәҙә майын сығармаҫмы икән? — тип һораны. Был һүҙҙәрҙә мине кәмһеткән эске мәғәнә тойғандай булдым. Асманға етди генә ҡарап алдым

да өндәшмәнем. «Һөйләшмәҫкә!» — тип, үҙемде нығытып ҡуйҙым. Минең урынға Зөлфәт яуап бирҙе.

— Ҡайһы берәүҙәрҙең кәзә майы сыҡһа сығыр, шулай ҙа, күмәкләгән яу ҡайтарған, ти. Беҙ был утынды бысып бөтөрөргә тейешбеҙ.

— Ярай-й, кемдең кәзә майы сығыр — күрербеҙ, — тине Асман асыуһыҙ ғына. Уның бөгөн күңеле күтәренке ине.

Зөлфәт менән мин дә йыуан ғына ҡараманы ситкә тәгәрәтеп, ерҙә ятҡан килеш быса башланыҡ. Шунда уҡ минең һәләтһеҙлегем асыҡланды Арҡыры бысҡы йә өҫтән шыйлап шыуып үтә, йә эткән саҡта көйәнтә һымаҡ бөгөлә лә ҡуя. Әлдә Зөлфәт түҙемле. Ул миңә ипләп кенә аңлатырға тырыша.

— Сама менән генә тарт, артыҡ көсәнмә...

Минең хәлде күреп ҡалған Вәсифкә етә ҡалды. Ғәҙәтенсә, ауыҙын йырып:

— Ә-һә, беҙҙең староста «оҫта» һүҙенә айырым мәғәнә биреп. — Былай булғас, эш бараса-аҡ... Ха-ха-ха...

Башҡа малайҙар ҙа йылмайыша. Ә мин, бер кемгә лә иғтибар итмәҫтән, үҙ эшем менән мәшғүлмен. Артыҡ көсөргәнештән маңлайыма борсаҡтай тирҙәр атылып сыҡты. Тиҙерәк өйрәнергә, һыр бирмәҫкә иҫәп. Ысынлап та, этә-төртә бер нисә тумырау киҫеп ташлағас, эш яйлана төштө.

Үҙем бысам, үҙем күҙ ҡырыны менән генә Асман менән Вәсифте күҙәтәм. Ашыҡмайынса тигеҙ бер ритм менән бысалар ҙа бысалар. Асманға ни булған? Миңә ул гел йоҡа елкә булып күренә ине. Ана, сөгөлдөрҙә эшләп ыраттымы ни? Бер-ике тамырҙы таҙарта ла туҡтап тора, Вәсиф йәки башҡа берәйһе менән һөйләшеп йә шаярып ала. Ҡайһы саҡ, бер ҙә булмаһа, баҫыу буйлап эйләнеп килә.

Бер тын эшләгәс, ял итеп алырға уйланыҡ. Утын бысыуҙан туҡтауыбыҙ булды, шуны ғына көткән кеүек, өйҙән, ашығып, Зәлифә килеп сыҡты.

— Малайҙар, килегеҙ әле, — тине ул, ҡулын ҡыҙыу-ҡыҙыу болғап. Үҙе ниндәйҙер ҡағыҙ киҫәге тотҡайны.

Беҙ уға табан атланыҡ:

— Ни булды?

— Нимә таптың? Әллә Лотфулла бабайҙың алтын-көмөштәре килеп сыҡтымы?

Зәлифәнең ҙур ҡара күҙҙәрендә нурлы осҡондар һикерешә.

— Алтын-көмөш нимә ул? Сүп кенә. Ә бына быны күрәһегеҙ килмәйме? — тип, ул миңә бер фото тотторҙо.

Мин фотоға теклəп ҡараным. Унда түңәрәк йөҙлө, ҡалын сәстәрен артҡа тараған, бөхтә генә костюм кейгән кеше баҫып тора. Күкрәге тулы орден-миҙалдар.

— Был кем? — тинем мин, бер ни аңламай.

Зәлифә киң йылмая.

— Үҙең бел...

— Тукта, Лотфулла бабай, тиһәм?..

— Шул үҙе бит! — тине Зәлифә, түҙемен юйып.

Фото ҡулдан ҡулға күсте, һәр кем уны күрергә, үҙ тәьсирен уртаҡлашырға тырышты.

— Күпме орден-миҙал, ә!

— Бына быныһы Ҡыҙыл Йондоҙ ордены, ә быныһы?..

— Ҡыҙыл Байраҡ бит. Һуғышта алған...

— Бынауһы ла Ҡыҙыл Байраҡ та...

— Был — Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены, — тине Зәлифә, фотоны ҡулына алып. — Минең атайымдыҡы кеүек.

* * *

Зөлфәт менән больницаға Лотфулла бабайҙың хәлен белергә барҙыҡ. Мин үҙем, бәлки, ҡуҙғалмаған да булыр инем, Зөлфәт дәртләндерҙе. Староста башың менән кешенең һәйбәт теләгенә ҡаршы төшөп булмай бит инде. Киттек. Үҙебеҙ менән күстәнәс тә алдыҡ. Зөлфәт — бер банка бал, мин — шул ҡәҙәр үк варенье.

Шатланды Лотфулла бабай. «Рәхмәт, балалар!» — тине, күстәнәстән дә бигерәк, бәлки, беҙҙең килеүгә ҡыуанып. Үҙенә бер аҙ хәл кергән. Шулай ҙа оҙаҡлап һөйләшерлек түгел. Врачты күреп, бабайҙың хәлен һорашҡас: «Бер ун көндән аяҡҡа баҫасаҡ», — тине.

Көндәр бер-бер артлы үтә торҙо. Беҙ Лотфулла бабайҙың хәлен йыш ҡына белешеп, яныҡна барғылап йөрөнөк. Бына уның больницанан сығыр көнө лә етте. Зөлфәт менән ҡаршы алырға киттек. Беҙ палатаға килеп ингәндә, бабай больница кейемен үҙенекенә алмаштырып ултыра ине. Беҙҙе күргәс, йөҙө ҡояштай балҡыны.

— Һа, Зөлфәт, Тамир улдарым, бабаларын онотмағандар әле, рәхмәт яуғырҙары...

— Һине алып ҡайтырға тип килдек, — тинем мин.

Бабайҙың йөҙөндә ҡәнәғәтләнеү сағылды.

— Ярай, ярай, бик рәхмәт, уландар!

Лотфулла бабай таҡыялы башына күк эшләпәһен, өҫтөнә ҡара бишмәтен, аяҡтарына резина калуштарын кейгәс, тороп, ишеккә йүнәлде.

— Йәгеҙ, уландар, яйлап ҡына, йәйәүләп кенә ҡайтайыҡ. Йортомдо, күрше-тирәне һағындым, — тине ул тәрән кисереш менән.

Өсәүләп урам буйлап үҙебеҙҙең яҡҡа атланыҡ. Бабайҙың бер яғында — мин, икенсе яғында — Зөлфәт. Аҙна буйы болотлап, ҡайһы берҙә ямғыр һибәләп торғандан һуң, ниһайәт, көн асылып, ҡояш сыҡты, еүешләнеп ятҡан шоссе юлдар кипте. Лотфулла бабай, ҡыуанып, саҡ ҡына күҙҙәрен ҡыҫып, ҡояшҡа ҡарап ҡуя, һалҡынса саф һауаны рәхәтләнеп һулай. Уның ҡарт тәненә көс өҫтәлә, күрәһең: йәһәтерәк атлап китә.

Мин элек ҡарттарҙы яратмай һымаҡ инем. Бына Лотфулла бабайға ҡарата бер ниндәй ун-

дай тойғо кисермәйем хәҙер. Киреһенсә, уны йәлләйем мин: «Яҡындарынан, исмаһам, ауылда бер кеме юҡ. Ҡарсығы ла үлеп киткән бит әле», — тип борсолам.

Бер аҙ шулай атлағас, Фатиха инәй хаҡында ла һүҙ ҡуҙғатырға баҙнат иттем.

— Бабай, — тинем мин һаҡ ҡына, — һеҙ сөгөлдөрсө Фатиха Зарипова тигән инәйҙе беләһегеҙме?

Лотфулла бабай, ғәжәпләнгәндәй саҡ ҡына әйелә биреп, минең йөҙөмә текләп торҙо ла, турайып, көрһөнөп ҡуйҙы.

— Эй заманалар... Фатиханың бөтә тормошо күҙ алдымда үтте, — тине ул, уйланып, унан ҡапыл миңә бороолдо. — Ниңә кәрәк булды әле ул?

Мин альбом төҙөргә уйлауыбыҙҙы, бындай эшкә башҡа отрядтар ҙа тотоноуын, бай материал тупланһа, музей ойошторолоу ихтималын да һөйләп бирҙем. Бабайҙың быға эллә ни иҫе китмәҫ, тип уйлағайным, улай булып сыҡманы. Ул, сикһеҙ шатланып:

— Бына һәйбәт, бик мәслихәт эш, — тип хупларға керешеп китте.

Зөлфәт, миңә ҡарап, йылмайғандай итте. Йәнәһе, күрҙеңме, бөтәһе лә яҡлай. ә һин шундай эштең мөһимлеген аңламайһың.

— Ҙур эш башлағанһығыҙ, балалар, — тип һүҙен дауам итте Лотфулла бабай. — Әлбиттә, белгәнемде һеҙгә һөйләп бирәсәкмен. И-и... Фатиха үҙе берәү ине шул... Ҡайҙан килеп иҫегеҙгә

төштө һуң әле ул. Хәйер, уның һуңғы, сөгөлдөрсө булып эшләгән ғүмерен күптәр белә. Ә бына уның тәүге камсамулка икәнен, кулак ҡуштаны менән алышыуын кем генә хәтерләһен хәҙер?! Эй-й, заманалар...

Мин һағайҙым. Зөлфәттең дә ҡолағы ҡарпайҙы: күҙҙәренең осҡонланыуынан күренеп тора.

— Бабай, Фатиха инәй комсомолка ла инеме ни? — тип һорай һалды ул.

— Бәй, шулай булмай ни! — тине бабай, был һорауға ғәжәпләнгәндәй. — Ауылда тәүге камсамул ячейкаһын ул ойоштороҙо...

Һөйләшеп килеп һиҙмәй ҙә ҡалғанбыҙ: ҡайтып та еткәнбеҙ икән. Лотфулла бабай ҡапҡанан ингәс тә, аптырап, туҡтап ҡалды, йылмайып, һаҡалын һыпырып ҡуйҙы. Ҙур булмаған бурама аҙбар буйына ярып өйөлгән утынды күрҙе ул.

— Был — һеҙҙең эш, шилмалар, — тине, эйәге менән ымлап. — Йә, ни әйтәһең, бабайығыҙҙы шатландырҙығыҙ!

Лотфулла бабай, ғәҙәтенсә, әкрен генә атлап, өйгә инде. Инде лә, артабан атларға ҡурҡҡан шикелле, ишек төбөндә туҡтап ҡалды.

— Бәй-бәй, был минең өймө, эллә беҙ яңылыш башҡа бер өйгә барып эләктекме? — тине ул, иҙәне, тәҙрәләре йыуылып, мендәр-юрғандары ҡағылып-һуғылып йыйыштырылған өй әсен ҡарашы менән байҡап.

Уның мыйыҡ аҫтынан йылмайып бирелгән һорауына мин дә шаяртып яуап бирҙем:

— Был — һинең өй, бабай, тик уны кемдәрҙәр йыйыштырғандар.

— Йыйыштырғандар, тиген, э, рәхмәт яуғырҙары. Үҙҙәренең ҡулдарынан, игелектәренән ҡыуанһындар.

Лотфулла бабай өҫтәл эргәһендәге иҫке генә артлы ултырғысҡа барып ултырҙы. Байтаҡ ерҙән йәйәү ҡайтып, бер аҙ йонсоп киткәнлеге күренеп тора ине.

— Бабай, сәй ҡуйып ебәрәйек әле, — тине Зөлфәт, һауыт-һаба яғына ҡаранып. — Һыу юҡ икән. Тиҙ генә ҡоҙоҡҡа барып киләйем дә...

Мин, Зөлфәттән йәһәтерәк ҡуҙғалып, күнәкте әләктерә һалдым.

— Һыуҙы үҙем алып килермен, һин һауыт-һабаны, кәрәк-яраҡты ҡараштыра тор.

* * *

Өҫтәл әҙерләнгәс, Зөлфәт өсөбөҙгә лә сәй яһаны. Лотфулла бабай ашыҡмай ғына, варенье менән тәмләп кенә бер сынаяҡ сәй эсте. Икенсе-һен яһатып ҡуйҙы ла:

— Хәҙер бына Фатиха инәйегеҙ хаҡында һөйләй башлаһам да була, — тине, ҡәнәғәтләнеү менән һаҡалын һыпырып.

Зөлфәт менән бер-беребеҙгә ҡарашып ҡуйҙыҡ: ҡулыбыҙҙа ҡәләм дә, ҡағыҙ ҙа юҡ ине.

Больницаға барырға әҙерләнгәндә, был хаҡта уйға ла килмәгән. «Ярай, — тинем мин эсемдән, — бер сөгөлдөрсө тураһында эллә нәмә һөйләмәҫ әле».

Лотфулла бабай, алыҫ йылдарҙы хәтере менән байҡағандай, мөйөшкә ҡарап бер килке тын торҙо ла, ҡапыл башын беҙгә табан бороп, һалмаҡ ҡына һөйләп китте.

— Эй заманалар... Бөгөнгөләй күҙ алдымда... Өҫтөнә ҡырҡ ямаулы киндер күлдәк кейгән, аяғына иҫке сепрәк урап, сабата бәйләгән, иңенә тоҡсай аҫҡан ун ике-ун өс йәштәрҙәге хәйер һорашыусы йәтимә ҡыҙыҡай. Атаһы герман һуғышында ятып ҡалғас, әсәһе ваба сиренән үлгән. Иҫке, тәпәшәк өйҙә бер үҙе. Көндөҙҙәрен кеше тупһаһын тапап үткәрһә лә, төндәрен, атаһын, бигерәк тә әсәһен юҡһынып, мендәрен аҙ сылатмағандыр, моғайын. — Бабай, тамағын ҡырып, бер аҙ ғына тынып торҙо ла, һыуына башлаған сәйен ҡулына алып уртланы, унан, сынаяғын ипләп кенә ултыртып, малайҙарға ҡараны. — Ун бишенсе йылдар, буғай. Тимерйән байҙар йәтимәне үҙҙәренә аҫрау итеп алдылар. Фатиха уларҙа бер нисә йыл йәшәне. Ул зифа буйлы, күркәм йөҙлө, оҙон ҡара сәсле ҡыҙ булып үҫте. Уға күҙ атыусылар ҙа юҡ түгел ине. Әммә Тимерйән бай аҫрауының яҙмышын үҙенсә хәл итергә теләне. Бер көндө уны саҡырып ала ла:

— Ҡыҙым, һин хәҙер ҙур үҫтең, еткән ҡыҙ булдың инде, — ти йомшаҡ ҡына итеп. — Һине

үҙ ҡыҙыбыҙҙай күреп аҫранык. Шуның өсөн һинең хаҡта хәстәрлекте лә үҙ өҫтөбөҙгә алырға хаҡыбыҙ бар, тип уйлайым. Беләһеңме, нимә тураһында әйтергә теләйем мин бөгөн? Һине башлы-күҙле итер ваҡыт етте бит, ҡыҙым.

Ун бише тулып, саҡ уны алтыға киткән ҡыҙыҡай, әлбиттә, ояла һәм, башын әйеп кенә:

— Тимерйән ағай, мин йәш бит әле, — ти.

— Юҡ-юҡ, ҡыҙым, — ти тегеһе, хәйләләп,— йәш түгел инде һин, тап алма кеүек өлгөрөп еткән сағың. Шундай саҡта тормошҡа сығып ҡалмаһаң, һуң була ул. Әле бына тигән урыны ла йылмайып тора.

Фатиха һүҙҙең нимәгә табан барғанын да, уны кем менән бәйләргә йыйыныуҙарын да һиҙенә. Шуға күрә, бөтә ҡыйылығын йыйып, байға үҙ уйын әйтә лә һала:

— Мине күрше ауыл байына бирергә йыйынаһығыҙ, буғай. Ул бик ҡарт кеше бит.

Был һүҙҙәр Тимерйәнде бер аҙ аптырашта ҡалдырһа ла, ул сигенергә уйламай. Сөнки күрше ауылдың алтмыш йәштәрҙәге тол ҡалған байы менән күптән килешенгән: эште яйлаһа, Тимерйәнгә теге бик яҡшы бер ат бирергә вәғәҙә иткән.

— Эй ҡыҙым, — ти ул, ҡыҙыҡайҙы бик тә яҡын күргән кеше һымаҡ ҡыланып, — беҙ һиңә тик яҡшылыҡ ҡына теләйбеҙ, һүҙемде кире ҡаҡма: өлкәнерәк булһа ла, бай кешегә әлегәһең. Бындай бәхет һәр кемгә лә теймәй.

— Ундай бәхет миңә кәрәкмәй, — ти ҡыҙыҡай, өҙөп.

Бынан һуң Тимерйән төлкө тиреһен һалып ташлай.

— Беҙ һиңә ниндәй бәхет кәрәген яҡшыраҡ беләбеҙ, — ти ул, ҡара көйөп. — Үлергә дусар булған сағында, урамдан алып инеп, һине үҙ балабыҙҙай күреп үҫтерҙек. Туйып һикермә. Рәхим итеп, беҙгә буйһон! Төшөндөңмө?

Фатиха өндәшмәй. Тимерйән, һүҙҙе бөткәнгә һанап, эйәге менән генә уға китергә ишара яһай. Бай өсөн яҡшы ат ҡаршыһында йәтимә ҡыҙҙың яҙмышы һуҡыр тингә лә тормай ине, әлбиттә.

Йәш булһа ла, күпте күреп, күпте кисереп өлгөргән Фатиха быны күңеле менән тоя һәм үҙе өсөн мәғҡул бер ҡарарға килә. Шул уҡ төндө ул Тимерйәндәр өйөнән сығып китә. Иртән уны ауыл буйлап эҙләп ҡараһалар ҙа, таба алмайҙар.

Лотфулла бабай һөйләүҙән туҡтап, сынаяғына сәйнүктән сәй ҡойоп алды ла яйлап ҡына эсә башланы. Күрәһең, тамағы кибеп киткәйне. Беҙ түҙемһеҙлек менән уның һүҙҙе дауам итеүен көттөк. Шулай ҙа бер аҙҙан Зөлфәт һорап ҡуйҙы:

— Фатиха инәй ҡайҙа китә һуң?

Бабай, был һорауҙы ишетмәгәндәй, сәйен эсеп бөтөргәс, һаҡалын һыпырып:

— Эй заманалар... — тине. Шунан һуң ғына Зөлфәткә күҙ ташлап алды ла йәнә һалмаҡ ҡына һөйләп китте. — Ә Фатиха таң атыр-атмаҫтан ҡалаға юл тота. Яҡшы кешеләргә тап булып, ун-

да эшкә урынлаша. Йәштәр менән аралашып, кыйыулана төшә, күп кенә нәмәләрҙе аңлай башлай.

Оҙаҡламай революция була, батшаны төшөрәләр. Фатиха кеүектәр иркенерәк һулай башлай, ғилем алырға ла мөмкинлек тыуа.

Мин инде уның ниҙәр эшләүен, нисек белем алыуын белеп бөтөрмәйем, үҙенән ишеткәндәрҙе генә һөйләйем. Бер саҡ ҡалала культура-ағартыу эштәренә өйрәтеүсе курс асыласағы хаҡында хәбәр тарала. Быны ишеткәс, Фатиханың тыныслығы юғала: нисек тә шунда әлегергә ҡарар итә. Әҙерлеге наҡыҫыраҡ булһа ла, камсамулка ҡыҙ аптырап ҡалмай, үҙ тигәненә ирешә. Курста уҡып, таныҡлыҡ алып, тыуған яғына ҡайта.

Беҙҙең Ҡондоҙло ауылы, әлбиттә, Фатиханы ҡолас йәйеп кенә ҡаршы алмай. Берәүҙәр:

— Элекке йәтимә ана нисек ғилем эстәп, кеше булып ҡайтҡан, танымаҫһың да, — тиҙәр, хуплап.

Икенселәр, уны яратмайынса:

— Мәрйәгә әйләнгән, сәсен киҫтергән, бетле баш сағын онотҡан, — тиҙәр.

Мәгәр Фатиха, бер нимәгә ҡарамай, камсамул ячейкаһын булдырыу хәстәренә керешә. Ул беҙҙе һәр саҡ дәртләндереп торҙо. Беҙ үҙебеҙҙең камсамул булыуыбыҙ, халыҡты яҡтылыҡҡа, яңы тормошҡа әйҙәүсебеҙ менән бик ғорурландыҡ. Ә Фатиха, клуб, уҡыу өйө мәдире эштәрен алып барыу менән бергә, халыҡты, айырыуса йәштәр-

ҙе уҡырға-яҙырға өйрәтеүгә лә күп тырышлыҡ һалды.

— Нисек? Уҡытыусы ла булдымы ни? — тип һорау ҡыстырҙы Зөлфәт.

— Эйе, — тине Лотфулла бабай, башын ҡағып. — Бер урам йәки бер тирә кешеләре иркенерәк өйгә йыйылалар ҙа уҡырға, яҙырға өйрәнәләр. Быны «ликбез» тип йөрөттөләр ул саҡта. Фатиха бына шул «ликбез» уҡытыусыһы булды.

Эй заманалар... Совет тип, яңы тормош тип, Фатиха тынғы белмәне, илһамланып йәшәне. Был — Совет власы дошмандарына оҡшап бөтмәне. Шуға ла уға һөжүм ойоштороло. Спектакль ҡуйып, һуң ғына өйөнә ҡайтып килгәндә, урамдың ҡараңғы мөйөшөндә баҙыҡ кәүҙәле, ҡара мыйыҡлы берәү Фатиханың ҡаршыһына сығып баҫа.

— Һеҙгә ни кәрәк? — тип өндәшә Фатиха, ҡыйыу булырға тырышып.

— Тауышланма! — ти теге һәм ҡыҙҙың сигенә башлағанын күреп, көрәктәй ҡулы менән яғаһынан элэктерә һала. Фатиха ҡара мыйыҡлының юл баҫыуы юҡҡа түгеллеген һиҙеп, ҡысҡырып ебәрә:

— Ҡотҡа-арығы-ғыҙ!

Мыйыҡлы уны тағы ла ҡатыраҡ быуып, теш араһынан ыҫылдай:

— Хаҡ мосолмандарҙы аллаға ҡаршы ҡотортҡаның өсөн яуап бирер мәлең етте.

Тыны ҡыҫылып, хәле мөшкөлләнеп барһа ла, Фатиха ысҡынырға ынтылып тартыла, сәбәләнә, ҡысҡырырға тырыша. Бындай ҡаршылыҡты көтмәгән бандит, эште тиҙерәк бөтөрөргә ашығып, бысағын сығара ла, һелтәнеп, ҡыҙҙың күкрәгенә ҡаҙай, бәхетенә ҡаршы, йөрәгенә тап килтерә алмай. Инде күҙ алдары ҡараңғыланып ҡуйһа ла, Фатиха йән-фарман алышыуын дауам итә. Юлбаҫар бысаҡлы ҡулы менән икенсе тапҡыр һелтәнәм тигәндә генә кемдер күҫәк менән уның башына ҡундыра, теге шунда уҡ артына ауа. Тамам хәлһеҙләнгән Фатиха Нурислам исемле комсомолецты танып һәм шатланып, уның күкрәгенә килеп ҡаплана.

Нурислам күптән үк Фатиханы яратып йөрөгән икән. Кистәрен үҙенә күренмәй генә уны оҙатып ҡуя торған булған. Был кистә лә ана шулай итә ул һәм Фатиханы үлемдән ҡотҡарып ҡала. Был хәлдән һуң Фатиха айҙан артыҡ больницала ятты. Уның йөрәк тәңгәленән юғарыраҡ күкрәге яраланғайны. Комсомулка ҡыҙҙың эштәре, төнгө фажиғә тураһында газеталарҙа яҙып сыҡтылар. Уға тиҫтәләгән хаттар килде.

— Ә теге бандитҡа нимә булды? — тип һораным мин, үҙем дә һиҙмәҫтән.

— Язаһын алды, — тине бабай. — Ул бер кулак малайы булған. Фатиханы юҡ итергә уны ҡотортҡаны өсөн Тимерйән бай ҙа ғәҙел язанан ҡотолманы.

Фатиха больницанан һауығып сыҡҡас, Нурис-

лам менән уның туйы булды. Комсомул туйы. Ул бөтә ауылдың байрамына эйләнде.

Бабайҙан күҙен алмай ултырған Зөлфәттең ауыҙы асылып ҡуйҙы.

— Комсомол туйы ул сәкта ла бар инеме ни? — тип һорай һалды ул.

— Фатиханың туйы бына шулай үтте, һәр кем уның шатлығын уртаҡлашырға теләне... Оҙаҡламай Нурислам ауылға беренсе тракторҙы алып ҡайтты ла халыҡты шаҡ ҡатырҙы. Үҙенең ҡорос айғыры менән яңы ғына ойоша башлаған колхоз ерҙәрен һөрҙө. Кешеләрҙең күңеле күтәрелде, улар бергәләп эшләүҙең тәмен тойҙо. Был ваҡытта Фатиха китапханасы вазифаһын үтәй ине. Элеккесә ихлас һәм ал-ялһыҙ эшләне. Әммә һуғыш алдынан сәләмәтлеге ҡаҡшағайны уның. Бандиттың бысаҡ әҙе үҙен йыш ҡына һиҙҙерә башланы. Врачтар уға бер аҙ ял итергә кәңәш иттеләр. Әммә Фатиха риза булманы. Һуғыш башланып, механизаторҙар яуға китеп бөткәс, ул үҙ һаулығы менән иҫәпләшмәй иренең тракторына ултырҙы. Етмәһә, тыныс ваҡыттағы менән сағыштырғанда икеләтә, өсләтә тырышырға тура килде.

Һуғыш туҡтағанда, Фатиханың сәләмәтлеге насарланғайны, тракторҙан айырылырға мәжбүр булды. Шунан, бер аҙ даулаганғас, беҙҙең өсөн яңы эшкә — сөгөлдөр үҫтереүгә тотондо.

— Эйе, бабай, ул хаҡта Ибраһим ағайҙан да ишеткәйнек, — тинем мин.

— Ибраһим да беләлер шул. Уның әсәһе лә сөгөлдөрсө ине бит. — Бабай сәй менән тамағын сылатты ла сынаяғын ҡаплап ҡуйҙы. — Фатиха — оло рухлы кеше ине. Сөгөлдөр үҫтереүгә лә үҙенә хас ғәйрәт менән тотондо ул. Мин колхоз председателе булһам да, был яңы шөғөлгә, беҙҙең ерҙе үҙ итерме, уңырмы, тип шикләнеберәк ҡарай инем. Ә ул шикләнмәне, үҙенә нык ышанды һәм еңеү яуланы.

* * *

Лотфулла бабай һөйләгәндәрҙе Зөлфәт менән икәүләп тырышып-тырышып ике көн яҙҙыҡ. Айырым урындарын йәнә барып һорашырға тура килде. Яҙыу еңел булмаһа ла, эште бөткәс, икебеҙ ҙә шатландыҡ.

— Ҡара әй, Фатиха инәй ысынлап та герой булған бит, — тине Зөлфәт, тулҡынланып.

— Эйе, — тинем мин, уны йөпләп. — Ауылыбыҙҙа ниндәй кеше йәшәгән, ә беҙ уның хаҡында бер ни ҙә ишеткәнебеҙ булмаған.

Зөлфәт менән шулай һоҡланышып, ҡыуанышып һөйләшеп ултырғанда, яныбыҙға Гөлшат һеңлем килеп инде. Ул да, минең кеүек, буйға бәләкәй һәм ҡаҡса. Әммә аҡылы менән ҡайһы саҡта өлкән кешене хәтерләтеп ҡуя. Гел «бишле»гә уҡыу менән бергә, отрядтарындағы йәмәғәт эштәрен, минән айырмалы булараҡ, ихлас башҡарып йөрөй ул.

— Ағай, — тине һеңлем, үҙенә хас булмағанса, уңайһыҙланып, — һеҙ Лотфулла бабай янына инеп-сығып йөрөйһөгөҙ шикелле. Сәләмәтлеге нисек әле уның?

— Ярайһы, — тинем мин, аптырап. — Ә ниңә кәрәк ул һиңә?

— Ни... — тип һеңлем, әйтергәме, әйтмәҫкәме тигәндәй, тотлоғоп торҙо ла, — уның тормош юлын өйрәнергә булдыҡ, — тине.

— ОҺо, — тинем мин, ғәжәпләнеп.

Был хәбәр Зөлфәттең күңелен күтәреп ебәрҙе, буғай.

— Һәйбәт эш, — тине ул, йылмайып. — Лотфулла бабай быға лайыҡ кеше.

* * *

Революция, рәхимһеҙ синфи көрәш тураһында китаптарҙан уҡығаным, кинофильмдар ҡараған бар. Мәгәр беҙҙең ауылда ла шундай аяуһыҙ көрәш булыуын башыма ла килтергәнем юҡ ине. Минең уйымса, байҙар менән ярлылар ҡайҙалыр үҙ-ара алышҡан, үлтерешкән, ә беҙҙең тирәгә ундай бәрелештәр ҡағылмай үткән, йәнәһе. Ҡағылған икән шул. Ана, Фатиха инәйҙең яҙмышы ошо хаҡта һөйләмәйме ни! Ғөмүмән, уның торомош юлы күҙемде асҡандай булды. Нисектер, үҙем дә һиҙмәҫтән, кешеләргә, уларҙың эштәренә етдиерәк ҡарай башланым. Шул

Асманға асыуым мине һуҡырайтҡан, күрәһең. Фатиха инәй ауылыбыҙҙағы яҡты йондоҙҙарҙың береһе булған бит. Үҙенең хеҙмәттәре, йөрәк ялҡыны менән башҡаларҙы йылытҡан, шатландырған. Инде был йондоҙ һүнһә лә, уның нурҙары һаман кешеләргә һирпелә, матурлыҡҡа, яҡшылыҡҡа эйҙәй. Нисек башта уҡ шуны аңламаным икән?!

Беҙ Фатиха инәй тураһында иҫтәлекте мәктәпкә алып килгәс, был үҙенә күрә бер ваҡиға булды. Зәлифә уны шунда уҡ Мәрйәм апайға күрһәтте. Уҡытыусыбыҙ иҫтәлекте бөтә отрядҡа уҡып сыҡты. Һуңынан, уйсан ҡарашын класҡа төбәп:

— Ошондай гүзәл кеше менән беҙ һәммәбеҙ ҙә ғорурланырға хаҡлыбыҙ. Бөтә ғүмере — илгә бирелгәнлек, намыҫлы, тырыш хеҙмәт бит уның, — тине.

Мин һиҙҙермәй генә Асман яғына күҙ ташлайым. Уның бөтә йөҙөн алһыу ялҡын ялмаған. Тулҡынланалыр. Ни тиһәң дә, өләсәһе бит. Альбом төҙөү эшенә ул да дәртләнеп ҡушылып китте, өләсәһенең бер нисә фотоһүрәтен, уның тураһында ҡасандыр газетала баҫылып сыҡҡан мәҡәләне һәм орден-миҙалдарын, Почет грамоталарын алып килде. Бынан тыш ул Фатиха инәйҙең байтаҡ шәхси әйберҙәре һаҡланыуын да хәбәр итте. Был беҙҙе аптырашта ҡалдырҙы: улар менән ни эшләргә? Зәлифә Венер ағайға йүгерҙе. Өлкән вожатый беҙҙе шунда уҡ тынысландырҙы.

— Әйберҙәр әлеғә урынында ятып торһон. Музей төҙөлөү менән үҙебеҙ һоратып алдырырбыҙ, тик уларҙы һаҡлау, улай ғына түгел, тағы ла яңыларын табыу эшен Асманға йөкмәтәбеҙ, — тине.

Асман быға бик ҡәнәғәт инде.

* * *

Уңыш байрамы...

Ул беҙҙә һуңғы йылдарҙа гел үткәрелеп килә. Көҙҙөң бер матур көнө шуға арнала.

Быйыл беҙ уңыш байрамына айырыуса тырышып әҙерләндек. Мәктәп залы, кластар биҙәлде. Ошо тантанаға арнап, стена газеталары сығарылды. Үҙебеҙ ҙә бөхтәрәк, матурыраҡ кейенеп килергә тырыштыҡ.

Бына нурҙар сәсеп торған яҡты залға бөтә мәктәп уҡыусылары, өлкәндәр йыйылды. Ә сәхнәлә, президиум өҫтәле артында, мин Гөлғәйшә Мөрсәлимовна менән Лотфулла бабайҙы, Ибраһим ағайҙы һәм тағы бер нисә колхозсыны күрҙем. Директорҙан башҡаларының һәммәһенең күкрәктәрендә орден-миҙалдары балҡып тора. Лотфулла бабайға айырыуса һоҡланып ҡараным. Яңы һоро костюмын кейеп, күкрәгенә наградаларын тағып алғас, ниндәй һөйкөмлөләнеп, йәшәреп киткән ул!

Тантаналы кисә асылғас, беренсе һүҙ Гөлғәйшә Мөрсәлимовнаға бирелде. Ул һалмаҡ атлап

трибунаға сыҡты һәм залға ҡарап үтә ихласлыҡ менән йылмайҙы. Был йылмайыу беҙгә лә күсте. Ошо мәлдә байрамдың ысынлап башланыуын, күңелемде дөйөм күтәренкелек, тулҡынланыу биләп алыуын тойҙом.

— Күреп торам, йөҙҙәрегеҙҙә шатлыҡ балҡый, — тине директор. — Эйе, бөгөн оло байрам, хеҙмәтте, тыныслыҡты һөйгән халҡыбыҙҙың иң ҡыуаныслы байрамы. Был көнгә бөтә колхозсылар менән бер рәттән, беҙ ҙә арыу уҡ тос бүләк менән килдек. Малдарға аҙыҡ әҙерләүҙә, урып йыйыуҙа актив ҡатнаштыҡ. Ә беҙ үҫтергән татлы сөгөлдөрҙөң һәр гектары алты йөҙ центнер уңыш бирҙе!

Һуңғы һүҙҙәрҙе ишетеү менән бөтә зал урынынан күтәрелеп ҡул сабырға кереште. Президиумдағылар ҙа, аяҡ өҫтө баҫып, уҡыусыларға ҡушылды. Башҡалар менән бергә мин дә ҡыуандым, ғорурландым.

Гөлғәйшә Мөрсәлимовна йәнә эштә айырыуса тырышлыҡ күрһәткән уҡыусыларҙы һанап китте. «Мине иҫкә алмаһа ярар ине», — тип уйлап та өлгөрмәнем, исем-фамилиям яңғырап та китте. Әле генә мине ҡанатландырған ҡыуаныстарым һыпырып алғандай юҡҡа сыҡты. Етмәһә, эргәмдә ултырған Зөлфәт ҡабырғама төрткөләп, мыҫҡыллағандай, йылмайып ҡараны. Ер ярылһа, шунда төшөп китерҙәй булып, башымды эйҙем. Сөгөлдөр үҫтергән, уңышын йыйған мәлдә вайымһыҙ ҡарауым, юҡ-бар сәбәп менән дә эштән

ҡалыуҙарым өсөн үкенеп ҡуйҙым. Шундай уйҙарға бирелеп, трибунаға сыҡҡан Лотфулла бабайҙы ла йүнләп тыңламаным. Уның бары тик: «Һеҙҙең аранан да Фатиха инәйегеҙ кеүек бынамын тигән сөгөлдөрсөләр үҫеп китәсәгенә шикләнмәйем», — тигән һүҙҙәрен генә ишетеп ҡалдым.

Ә бер аҙҙан икенсе бер таныш тауыштың: «Үәт бына...» — тип әйтеүенә, уйҙарымдан ҡапыл арынып, башымды күтәрҙем. Ибраһим ағай трибуна эргәһенә сығып баҫҡан да, ғәҙәтенсә, бөтә йөҙө менән йылмайып һөйләп тора имеш.

— Сөгөлдөр үҫтереүҙә, уны юғалтыуһыҙ йыйып алыуҙа айырыуса тырышып эшләгән балаларыбыҙҙы колхоз идараһы китаптар менән бүләкләргә ҡарар итте, — тине лә, ҡулындағы ҡағыҙға күҙ төшөрөп алғас, һигеҙенсе класта бер ҡыҙыҡайҙың исемен әйтте.

Ҡыҙыҡай трибуна янында ғына ултырған икән. Йәһәт кенә урынынан тороп, сәхнәгә күтәрелде. Уның былай ҙа сандыр оҙон буйы юғарыла тағы ла оҙоная төшкәндәй күренде. Ибраһим ағай уға, нисектер, аталарса яғымлы итеп ҡараны һәм трибуна артынан ҡалын ғына бер китапты алып:

— Һеҙ Аркадий Гайдарҙың «Һайланма әҫәрҙәр»е менән бүләкләнәһегеҙ, — тине.

Ҡыҙыҡайға китапты тотторғас, Ибраһим ағай уның ҡулын ҡыҫты һәм арҡаһынан еңелсә генә ҡағып ҡуйҙы.

— Рәхмәт! — тине ҡыҙыҡай, туҡынланыуҙан бит остары алһыуланып.

Бүләктәр тапшырыу залда ҙур йәнләнеү тыуҙырҙы. Сәхнәгә күтәрелгән һәр уҡыусыға гөрләтеп ҡул саптыҡ. Бына Зәлифәнең дә исем-фамилияһы әйтелде. Ҡыҙыҡай, Ибраһим ағай ҡаршыһына килеп, бүләк-китапты алғас та, урынына төшөп ултырырға ашыҡманы. Йөҙө менән залға әйләнеп:

— Тыуған колхозым өсөн киләсәктә тағы ла тырышыбыраҡ эшләргә, Фатиха инәйҙәр аманатына тоғро булырға һүҙ бирәм, — тине.

Күрәһең, был һүҙҙәрҙе ул алдан уйлап ҡуйғандыр: шундай оҫта итеп әйтте, артистка тип тороРһоң, үҙе ҡыҙарманы ла.

Зәлифә өсөн ҡул сабыуҙар баҫылырға ла өлгөрмәне, Ибраһим ағай йәнә ҡулындағы ҡағыҙға текләп:

— Шәүкәтов Тамир, — тип уҡыны.

Мин бүләк көтмәй инем. Теге ваҡытта Зөлфәт менән һөйләшкәндән һуң, бүләккә түгел, маҡтап телгә алыныр ҡа лайыҡһыҙ булыуымды аңлағайным инде. Етмәһә, класта ҡайһы бер оҙон телдәрҙең: «Берәүҙәр тир түгә, икенселәр маҡтала», — тип төрттөрөүҙәрен дә ишетергә тура килгәйне. Әлеге бүләкте лә ҡабул итһәм, тағы нимә тимәҫтәр? Һәм улар хаҡлы буласаҡ. Староста ла бит эле мин. Был хаҡта оноторға хаҡым бармы? Ни эшләргә? Әллә алып ҡына ҡуяймы? Бүләге лә ниндәй бит! Китап. Юҡ-юҡ!..

Башымдан йәшен тиҙлегендә шундай уйҙар үтте. Ә үҙем һаман баҫып торам. Президум өҫтәле артында ултырған Гөлгәйшә Мөрсәлимовна, башы менән минең яҡҡа ымлап:

— Йә-йә, Шәүкәтов, ниңә аптырап ҡалдың? Йәһәтерәк бул, — тине.

Мин, киҫкен ҡарарға килеп, шунда уҡ үҙ уйымды әйттем дә һалдым:

— Мин бындай ҙур бүләккә лайыҡ түгелмен.

Ныҡ тулҡынланыуҙан биттәрем янып, урыныма ултырҙым.

Ибраһим ағай, был ниндәй хәл тигәндәй, бер миңә табан, бер президиум яғына ҡарап алды.

Гөлгәйшә Мөрсәлимовнаның йөҙөндә лә ғәжәпләнеү билдәһе сағылды. Тик ул үҙен бик тиҙ ҡулға алып:

— Эй Шәүкәтов, һабаҡты бирҙең һин беҙгә, — тине. Мәктәптең отличнигы тип, бүләкләнеүселәр исемлегенә һине үҙем индергәйнем. Был хатаны ла хәҙер үҙемә үк төҙәтергә тура килер, ахыры. Шәүкәтов, һинеңсә, мәҫәлән, кем һеҙҙә шәберәк әшләне?

— Мәҫәлән... — Мин тотлоғоп ҡалдым. — Мәҫәлән... Вәсиф Ғабдуллин... — Йәнә Зөлфәтте, тағы бер нисә уҡыусыны әйтмәксе инем, мине Гөлгәйшә Мөрсәлимовна шунда уҡ бүлде:

— Вәсиф Ғабдуллин... — Директорҙың йөҙө һиҙелер-һиҙелмәҫ ҡараңғыланып ҡуйҙы. Ул үҙенән арттараҡ ултырған Мәрйәм апай менән ни-

мәлер һөйләшеп алғас: — Ысынлап та, беҙ Ғабдуллинға тейешле бүләкте Шәүкәтовҡа бирә яҙғанбыҙ икән, — тине. — Ярай әле Шәүкәтов быны үҙе һиҙеп ҡалған. Был хатабыҙ өсөн Ғабдуллиндан ғәфү үтенәбеҙ. Әйҙә, Вәсиф, сәхнәгә сыҡ. Бүләк — һинеке!

«Вәсиф киреләнмәгәйе», — тип шикләнеп тә ҡуйғайным. Юҡ, улай булып сыҡманы. Йөҡа, еңел кәүҙәле Вәсиф бөтә зал аша шәп-шәп атлап үтеп, сәхнәгә күтәрелде. Директорҙың һүҙе уға килеште, күрәһең. Ибраһим ағай, арҡаһынан һөйә-һөйә, уға Марк Твендың «Принц һәм теләнсе» тигән ҡалын ғына китабын тапшырҙы. Мин быға ҡыҙығып та, көнләшеп тә ҡараным.

Быйылғы уңыш байрамы минең өсөн бик үк күңелле булмаһа ла, үҙемде кеше итеп хис иттем. Иптәштәрем алдында ғорурлығым кәмһетелмәне. Ә бүләк... Уныһын алда, лайыҡ булһам, алырмын әле. Үҙемә тәғәйендәрен.

* * *

Дәрестән һуң Зөлфәт менән пионер бүлмәһенә инеп сыҡмаҡсы булдыҡ. Лотфулла бабай тураһындағы альбомды асып ҡарағы килә ине. Сөнки иптәштәре менән һеңлем Гөлшат уны эшләгәндә Зөлфәт менән минең дә өлөш инде. Улар өсөн бабай менән эңгәмәне беҙ ойошторҙоҡ. Үҙебеҙҙең тәжрибәгә таянып, ҡарттың тормош юлын һәйбәтләп яҙып сығырға ла ярҙамлаштыҡ.

Пионер бүлмәһендә беҙҙе Венер ағай ҡаршы алды:

— Йә, егеттәр, хәлдәрегеҙ нисек?

— Һәйбәт әле, — тинем мин.

Венер ағай миңә һынабыраҡ ҡараны.

— Хеҙмәт ветерандары менән осрашыу сборына әҙерлек нисек бара?

— Әҙерләнәбеҙ, — тинем мин, нисектер, вайымһыҙ күренергә тырышып. — Фатиха инәй тураһында материалдар туплауҙы дауам итәбеҙ.

— Ярайһы, улай булғас, — тине Венер ағай, хуплап.

Шунда Зөлфәт тә һүҙгә ҡушылды:

— Сборға беҙҙең рапорт һәйбәт буласаҡ.

Венер ағай, саҡ ҡына йылмайғандай итеп, Зөлфәткә күҙ ташлап алды, тик бер һүҙ ҙә өндәшмәне. Мин, ошо тынлыҡтан файҙаланып:

— Венер ағай, бишенселәрҙең альбомын ҡарарға ине, — тинем.

Өлкән вожатый ҡарашын миңә һирпеп:

— Ә, һеңлеңдәрҙең эшенме? Ҡара әйҙә, — тине һәм, шкафты асып, ҡалын ғына альбомды алды ла минең алға, өҫтәлгә, ҡуйҙы.

Зөлфәт менән икебеҙ ҙә альбомға әйелдек. Һеңлемдәр, ҡулдарынан килгәнсә, уны биҙәргә тырышҡандар. Тышына, журналдарҙан киҫеп алып, һалдаттарҙың һуғыштағы батырлығын күрһәткән бер нисә һүрәт йәбештергәндәр. Уларҙа туптан атып торған артиллеристар ҙа, танкы-

лар артынан һөжүмгә барған уҡсылар ҙа, осоп барыусы ике-өс истребитель дә бар. Әммә иң иғтибарҙы йәлеп иткәне — лейтенант Егоров менән сержант Кантарияның рейхстаг көмбәҙенә байраҡ ҡаҙап торғанды сағылдырған һүрәт. Ул күңелдә тантана, ғорурлыҡ уята. Шул уҡ ваҡытта ауыр һәм ҙур юғалтыуҙар менән тулы Еңеү юлын да күҙ алдына баҫтыра.

Лотфулла бабай ҙа Волганан Одерғаса ошо юлды үткән. Һеңлемдәр альбомдың беренсе битенә уның орден-миҙалдарын тағып төшкән ҙур ғына фотоһын ҡуйғандар. Аҫтына эре хәрефтәр менән «Бөйөк Ватан һуғышы һәм хеҙмәт ветераны Лотфулла Низаметдин улы Шәңгәрәев» тип яҙылған. Унан һуң уның тормош юлы бәйбә-бәйнә һөйләп бирелгән. Быныһын беҙ яттан беләбеҙ. Шуға күрә уҡып торманыҡ. Бары тик яугирҙың төрлө йылдарҙағы фотоларын, альбом биттәренә йәбештерелгән йәки яһап ҡуйылған матур-матур һүрәттәрҙе генә ҡыҙыҡһынып ҡарап сыҡтыҡ.

Уның ғүмеренең һәр осоро үҙенсә матур һәм һоҡланғыс.

Революциянан һуң ул ауылда тәүге комсомолец, тәүге колхозсы булған. Кулактарға ҡаршы көрәшкән, спектаклдәрҙә, концерттарҙа ҡатнашҡан. Башҡалар менән бергә ең һыҙғанып ер һөргән, иген сәскән, урған, һуҡҡан...

Һуғыш алдынан уны «Ҡыҙыл юл» колхозының бригадиры итеп һайлағандар.

Ә ҡалғаны... һугыш, ауыр һәм данлы еңеү юлы... Йәнә тыныс хеҙмәт...

Уйлап ҡараһаң, Лотфулла бабайҙың бөтә тормошо илгә, халҡыбыҙға арналған бит. Альбомдағы һүрәттәрҙән, ошо ябай биографик яҙманан уның һәр саҡ тормоштоң алғы һыҙығында булыуын күрәһең. Был үҙе батырлыҡ түгелме ни!

Альбомдың һуңғы битен ябып, пионер бүлмәһенән сыҡҡанда, мин ошо хаҡта уйланым һәм Зөлфәткә ҡарап ҡуйҙым. Уның да йөҙө етди ине. Бәлки, ул да Лотфулла бабай хаҡында уйлағандыр.

Мәктәп ҡапҡаһы төбөндә беҙгә Вәсиф осраны. Ул беҙҙең ҡайҙа ингәнде күреп ҡалып, көтөбөрәк торған икән. Шым ғына ҡайтыр яҡҡа атланыҡ. Һиҙәм: Вәсиф миңә ҡарап-ҡарап ҡуя. Моғайын, үҙемә генә эйтер һүҙе барҙыр, тик Зөлфәт алдында уңайһыҙлана, күрәһең. Шулай ҙа, тыҡрыҡты сыҡҡас, беҙҙең юлдар айырыласағын аңлап, ул һүҙ башланы.

— Тамир, уңыш байрамында минең хаҡта яҡшы һүҙең өсөн рәхмәт. Ә мин быны һинән һис көтмәй инем.

— Ни эшләп? — тинем мин, ғәжәпләнеп.

Вәсиф был һорауҙан ҡаушабыраҡ ҡалғандай күренде.

— Теге... ни... Асман менән мин дуҫ, э һин, киреһенсә...

— Бында Асмандың ни ҡыҫылышы бар?

— Һин әскерһеҙ... ғәҙел, ә мин...

Беҙ, тыҡрыҡты үтеп, урамға сыҡтыҡ. Мин туҡталдым.

— Ярай, Вәсиф, һау бул! — тинем, һаубуллашырға ҡулымды һуҙып.

Вәсиф, ҡулымды ҡыҫып тотҡас, саҡ ҡыпа арыраҡ киткән Зөлфәткә ҡарап алды.

— Тамир, — тине ул, тауышын әкренәйтеп, — һинең алда мин ғәйепле бит.

— Һинең ниндәй ғәйебең булһын?

— Бар шул, — тине Вәсиф үкенес менән һәм аяҡ аҫтына төбәлде. — Асман менән һинең дуҫлығың өҙөлөүҙә минең дә ғәйеп бар. Беләһеңме, беҙ дүртенселә уҡығанда мин дә Асман менән дуҫлашырға теләй инем. Тик ул гел һиңә тартылды. Һеҙ гел бергә булдығыҙ. Был мине бик көнләштерә торғайны. Түҙмәнем, бер ваҡыт, һин пионер лагерына киткәс, мин Асманға: «Тамир һинең хаҡта: «Асманды көслө булғанға ғына дуҫ күрәм. Минең телохранитель ул», — тип һөйләй», — тинем. Асмандың ҡолағына әлек тә бер нисә һүҙ төшөргөләп, уның кеше һүҙенә ышаныусанлығын һиҙеп алғайным инде. Ә был юлы, минең һүҙҙәрҙе ишеткәс, ул буҙарып, ҡыҙып китте: «Мин уға күрһәтермен «телохранител»де!» — тине.

Һуңынан, һеҙ дошманлашып йөрөй башлағас, мин бик үкендем, тик ғәйебемде танырға булдыра алманым. Ғәфү ит!

Вәсиф, бәлки, минең ҡабынып китеүемде, әрләүемде көткәндер. Ләкин күңелемдә уға ҡарата асыу ҙа, үпкә лә юҡ ине.

— Ярай инде, үткән эшкә — салауат, — тинем.

Был һүҙҙәрҙән һуң Вәсифтең башы күтәрелеп, йөҙө яҡтырып китте.

— Беләһеңме, үҙемдең ғәйепте Асманға ла һөйләп, һеҙҙе дуҫлаштыра алам.

— Кәрәкмәй, — тинем мин шунда уҡ. — Асман менән дуҫлаша алмамдыр. Беҙ ул саҡта бәләкәйерәк инек, әлбиттә. Шулай ҙа уның урынында мин булһам, кеше һүҙенә ҡарап, дуҫлыҡты өҙмәҫ инем. Юҡ, дуҫлыҡ һәр төрлө ваҡлыҡтан, ғәйбәттән өҫтөн булырға тейеш. Шунһыҙ ул оҙаҡ йәшәй алмай.

Вәсиф менән ҡул ҡыҫышып айырылыштым. Мине көтөп торған Зөлфәт янына ашыҡтым. Ул миңә серле генә ҡарап алды ла:

— Кисәлә бүләк алғаны өсөн рәхмәтен бик оҙаҡ белдерҙе, — тине.

— Юҡ, беҙ башҡа нәмәләр хаҡында һөйләштек.

— Ә һинең кисәге сығышыңды класта хуплайҙар. «Егет икән беҙҙең Тамир», — тиҙәр.

Зөлфәттең был һүҙҙәре күңелемде күтәреп ебәрҙе. «Намыҫым ҡушҡанса йәшәргә, үҙ-үҙемә бер ҡасан да хыянат итмәҫкә», — тип үҙ-үҙемде әстән ныҡыттым мин.

ЭПИЛОГ

Беҙ инде VII класта уҡыйбыҙ. Быйыл Октябрь байрамына «Хеҙмәт даны» музейын астыҡ. Уны йыһазлауҙа сөгөлдөрҙә эшләп алған аҡсабыҙ тотолдо. Биҙәү өсөн ҡаланан махсус рәссам саҡырылды. Музейыбыҙ бына тигән килеп сыҡты! Уны ҡарарға үҙебеҙҙең ауыл халҡы ғына түгел, ситтән дә кешеләр килә.

Музейҙың иң түрендә Фатиха инәй Зарипованың ҙур фотоһүрәте, уның тормош һәм хеҙмәт юлын сағылдырған стенд, ә витринала, быяла аҫтында, орден-миҙалдары, Почет грамоталары, уның хаҡында газетала баҫылып сыҡҡан материалдар һәм шәхси әйберҙәре.

Лотфутлла бабайға арнап та шундай уҡ стенд һәм витрина яһаныҡ.

Колхоз тарихында үҙ хеҙмәттәре менән айырыуса дан ҡаҙанған тиҫтәләгән кеше музейҙа урын алды. Әҙләнеүҙе әле лә дауам итәбеҙ. Беренсе тракторсы Нурислам Зарипов тураһында ла материалдар туплайбыҙ. Был эш бөтә балаларҙы мауыҡтырҙы.

Асман, өләсәһе тураһындағы материалдар музейға ҡуйылғас, ныҡ үҙгәрҙе. Уҡыуын, тәртибен яҡшыртты. Быйыл колхоз сөгөлдөрөндә лә һәйбәт эшләне. Ә музейҙа директорҙың актив ярҙамсыһына әүерелде. Һәр көндө бында тегеһен — тегеләй, быныһын — былай итеп йөрөй, килеүселәрҙе ҡаршы алып, уларға үҙе белгәндәрҙе һөйләй,

Шуныһы ғәжәп, әлек туҡтауһыҙ сирләп, өйөнән сыҡмай ятҡан, сыҡһа ла ҡапҡа төбөнән китмәгән Лотфулла бабай хәҙер һис тынғы белмәй, йыш ҡына мәктәптә, музейҙа, колхоз идараһында була.

Лотфулла бабайҙы беҙ ҙә онотмайбыҙ. Көн һайын тиерлек өйөнә барып, уға донъя көтөүҙә, колхоз ремонтлап биргән өйөн тәртиптә тотоуҙа ярҙам итәбеҙ. Өҫтәп шуны әйтәм: мин Асман менән дә, Вәсиф менән дә ысынлап дуҫлашып китә алманым. Осрашҡанда һөйләшеп тә торабыҙ, бергәләп төрлө уйындар ҙа уйнайбыҙ, уҡыуҙа ярҙам иткәнем дә бар үҙҙәренә. Ләкин йөрәгемде тулыһынса аса алмайым уларға. Ниңәлер, эске бер көс рухымды бығаулап тора. Ихтимал, мин дуҫлыҡҡа үтә юғары талап ҡуя торғанмындыр. Хәйер, ҡуйырға кәрәк тә ул. Бына мин Зөлфәткә үҙемә ышанған кеүек ышанам, теләһә ниндәй серемде сисә алам. Ул үҙе лә бөтә уйхыялдарын минең менән бүлешә.

Асман менән Вәсиф тә III—IV класта уҡыған саҡтағы малайҙар түгел инде. Быны яҡшы беләм дә ул, әммә барыбер уларҙы үҙ итеп бөтөрә алмайым. Күрәһең, дуҫлыҡ хисенә бер тап төшөрһәң, ул ҡабат уянмаҫҡа ла мөмкиндер.

Үҙеңдең тормош юлыңа ла, дуҫлыҡҡа ла тап төшмәһен, ғүмер йондоҙоң һүнгәс тә, Фатиха инәйҙәрҙеке кеүек, кешеләргә йылы нурын һибеп торһон ине.

Хикәйәләр

ҺАЙЛАУ

Ҡарманай ауылының зәңгәр патруль отряды колхоз келәттәре янына йыйылды. Бында ҙур булмаған ҡарауылсы өйө көндөҙҙәрен йыш ҡына буш тора. Ул штаб ролен үтәй. Бөгөнгөләй сыуаҡ иртәлә, ҡояш күтәрелеп кенә килгән саҡта, сәйер еҫтәр аңҡыған тынсыу бүлмәгә инеп тороуҙың хәжәте юҡ. Һүҙҙе тышта ла алып барып була.

Уртаса буйлы, эммә баҙыҡ кәүҙәле отряд командиры Әхтәр янып торған ҙур күҙҙәре менән иптәштәрен барлап сыҡты ла һүҙ башланы:

— Кисә Ҡамышлы буйында патруль командиры Хәйҙәр Моратшин үҙен тейешенсә тотмаған, ҡармаҡ һалыусы бер малайға сәбәпһеҙ бәйләнгән.

— Эйе-эйе, — тип әлэктереп алды шунда уҡ ҡылыс танаулы, ҡуңыр йөҙлө, ҡаҡса кәүҙәле Ҡасим, — ул үҙен патрулсегә хас булмағанса тотто. Улай ярамай ул. Беҙ үҙебеҙҙең исемгә тап төшөрөргә тейеш түгелбеҙ.

— Уныһы дөрөҫ, — тине бер ҡыҙ. — Матур һайрайһың.

Әхтәр эллә Ҡасимды, эллә ҡыҙҙы хуплап, ҡап-ҡара сәсле ҙур башын ҡағып ҡуйҙы:

— Әлбиттә.

— Командир кисә кис үҙҙәренә килеп Ҡасим һөйләп киткәнде, һуңынан шуны башҡалар дөрөҫләгәнде иптәштәренә еткермәксе булып ауыҙын асҡас, Хәйҙәр яғына күҙ ташланы ла тыйылыбыраҡ ҡалды. Теге ҡара көйөп, башын эйеберәк баҫып тора. Хаталаныуы өсөн үкенә, күрәһең. Әхтәр, уның хәлен аңлап, артыҡ һүҙ ҡуйыртмаҫҡа булды.

— Эйе, Хәйҙәр дуҫ, әҙерәк яңылышҡанһың...

Ҡасим шунда уҡ ҡысҡырып ебәрҙе:

— Нисек «әҙерәк»? Тыныс ҡына ҡармаҡ һалып торған малайға патрулсе бәйләнергә тейешме ни?

— Тейеш түгел, — тине Әхтәр. — Шуға күрә лә «әҙерәк яңылышҡан», тим бит.

— Әҙерәкме? Әллә күберәкме? Ниңә башҡаларға һөйләп бирмәйһеңме?

Әхтәр саҡ ҡына йылмайғандай итте:

— Уныһы кәрәкмәҫтер, һин башҡаларға ла еткергәнһеңдер инде.

— Һөйләне, беләбеҙ, — тиеште патрулселәр.

Шунда Әхтәрҙең башына бер уй килде. Ул Ҡасимдың теләгән күптән һиҙеп йөрөй, тик уны аңламағанға һалыша ине. Әле шуға ла ныҡлы ҡарарға килеп:

— Эйе, Хәйҙәрҙең ғәйебе бар, — тине. — Ҙур түгел, билдәле. Уны ғәфү итергә лә була. Ләкин, ике́нсе яҡтан, Ҡасим да хаҡлы инде. Әллә Хәйҙәр урынына уны һайлап ҡуябыҙмы?

Ҡасимдың йөҙө яҡтырып, ауыҙы йырылып китте, хатта ғәҙәттәге баҫалҡылыҡты ла һаҡлай алманы.

— Һайлаһағыҙ, мин ҡаршы түгел, — тине ул, аҫҡа ҡарап.

Әммә иптәштәре ни өсөндөр тынып ҡалды. Был тынлыҡ Ҡасимға шомло тойолдо, тулҡынланыуҙан йөрәге ҡыҫылып-ҡыҫылып ҡуйҙы. Башында бер генә уй әйләнде: «Һайларҙармы, юҡмы?..»

— Йә, ниңә һүҙһеҙ ҡалдығыҙ? — тине Әхтәр, иптәштәренә текләп. Тегеләренең бер нисәһе икеләнепме, ҡәнәғәтһеҙлек менәнме, тамаҡ ҡырып ҡуйҙы. Командир уларҙың Ҡасимды өнәп бөтөрмәүҙәрен һиҙенде, тик был һынау коллек-

тив өсөн, бигерәк тә Ҡасимдың үҙе өсөн кәрәк, тип уйланы.

Ә Хәйҙәр иһә үҙенең кисәге ҡылығы өсөн ысынлап та үкенеп: «Бер ҙә юҡтан килеп сыҡты бит, бер ҙә юҡтан...» — тип үртәнә ине.

Нисек булды һуң эле был? Эйе, төштән һуң Хәйҙәр өс иптәше менән Ҡамышлы йылғаһы буйлап китте. Көн бөгөнгө кеүек үк аяҙ, йылы ине, яр буйындағы таллыҡтарҙа ҡоштар һайраша, йылғала эле унда, эле бында балыҡтар ҡарпый. Башта таллыҡ буйында ғына ҡармаҡ һалып торған бер ағайҙы осраттылар. Малайҙарҙы күргәс, ағайҙың ҡаҡса йөҙөндә йылмайыу сағылды.

— Тәбиғәтте һаҡлайбыҙмы? — тине ул, оҙонса башын ҡыйшайтып ҡарап. — Һаҡлағыҙ әйҙә, һаҡлағыҙ! Һеҙ тотонғас, эш алға китәсәк инде ул.

Хәйҙәргә был ағайҙың һүҙҙәре оҡшаманы: ниндәйҙер кинәйә, мыҫҡыллау бар ине уларҙа. Ул, үҙенең башлыҡ икәнен иҫтә тотоп:

— Ҡамышлыны браконьерҙарҙан һаҡлаясаҡбыҙ, әлбиттә, — тине ҡоро ғына, унан тирә-йүнгә ҡарап алды ла: — Ағай, һеҙ сүпләнегеҙме бында яр буйын? — тип һораны.

— Мин дә сүпләгәнмендер, бәлки. Киткәндә йыйыштырырмын.

— Тик бынау консерва банкаларын Ҡамышлыға ырғытмағыҙ инде.

Ағай кеше тағы кинәйәле йылмайҙы.

— Ырғытмамын, ырғытмамын.

— Һау булығыҙ! Балық күберәк ҡапһын үҙегеҙгә, — тине Хәйҙәр, иптәштәренә үҙ артынан әйәрергә ишаралап.

Ошоға тиклем бөтәһе лә һәйбәт барҙы. Тик Хәйҙәрҙең йәнен ҡыйған элеге ваҡиға бына шунан һуң булды ла инде.

Ҡуйы таллыҡ аша сығып, текә ярға күтәрелделәр. Йәнә бер аҙ барғас, яр һөҙәкләнде. Шунда ҡармаҡ һалып торған сандыр кәүҙәле, аҡһыл һары сәсле бер малай күренде. Патрулселәр килеп етәрәк, уға ҙур ғына сабаҡ эләкте. Ҡырсында ялтлап һикерендәгән сабаҡ Хәйҙәрҙең күҙен ҡыҙҙырҙы. Ул да ҡармаҡ һалырға, шундай сабаҡтарҙы ҡаптырырға ярата шул. Ҙурыраҡтарын эләктерергә лә хыяллана, тик был бәхет уны элегә урап үтә.

Хәйҙәр, малай яныны килеп, сабаҡты тотоп ҡарап торҙо ла:

— Ҙур, матур сабаҡ. Бәхетең бар икән, — тип, уны сандыр малайға бирҙе. Тегеһе сабаҡты шешкә теҙеп ҡуйғансы, үҙе, уның ҡармағын емләп һыуға ташланы. Талғын ғына аҡҡан йылға эсендә ҡалҡыуыс экрен генә һыу түбәненә йөҙҙө. Хәйҙәр ҙә, эйелә биреп, яр буйлап уның артынан атланы. Бына бер мәл ҡалҡыуыс ҡапыл һыуға батып китмәһенме! Хәйҙәрҙең тулҡынланыуҙан ҡулы ҡалтыраны, сабаҡты ярға ырғытҡан һымаҡ, элеге сирткән балыҡты ла күтәреп алмаҡсы булды, тик сыбығы ғына көйәнтәләй бөгөлдө, ә балыҡ күтәрелмәне. Улай ғына ла түгел, яман

ҡулап, Хәйҙәрҙең ҡулын дер һелкетте. Ярҙағылар бөтәһе лә, ауыҙҙарын асып, уға төбәлгәйне. Шунда береһе:

— Һөйрәп сығар, һөйрәп, — тип ҡысҡырҙы. Сандыр малай ҡармаҡ сыбығына тотонмаҡсы булғайны, тик Хәйҙәр:

— Үҙем, үҙем, — тип ҡармаҡ ебен ипләп кенә ярға тарта башланы. Борғолана-борғолана терһәк буйы ажау килеп сыҡмаһынмы! Хәйҙәр уны ярға етер-етмәҫтән, айғолағынан элэктереп алып, ҡырсынға ташланы:

— Ағайың ҡаптырҙымы? Ҡаптырҙы!

Ул тантаналы төҫтә иптәштәренә ҡараны. Сандыр малай ажауҙы ҡулына алып, юғары күтәрҙе. Балыҡтың көмөш тәңкәләре ҡояшта алтын һымаҡ балҡып китте. Бөтәһе лә уны тотоп ҡарарға теләне:

— Бына, исмаһам, балыҡ!

— Кескәй генә ҡармаҡҡа нисек элэккән ул? Ай-һай оҫта балыҡсы икән Хәйҙәр!

Ҡасим тотоп ҡарап торған ажауға Хәйҙәр ҡулын һуҙып:

— Үҙем ҡаптырҙым, үҙемә буласаҡ, — тине.

— Булмай торһон эле.— Сандыр малай, Хәйҙәргә тиклем балыҡты элэктереп, артына йәшерҙе. Уның эле генә көмөш тәңкәләй балҡып торған йөҙөн ҡара болот баҫты. — Минең ҡармаҡҡа элэктерҙеңме — минекенә. Шулай булғас, балыҡ та минеке.

— Шаярма, бир ажауҙы!

— Бирмәйем...

Хәйҙәр ҡыҙа башланы. Күпме ҡармаҡ һалырға йөрөнө, бындайы ҡапҡаны юҡ ине шул уға. Был табышты ҡармаҡ хужаһына ҡалдырыу бик тә йәл ине. Шунлыҡтан, бирмәйем, тип тартышҡан сандырға үҙенең кемлеген күрһәтеп алыуҙы кәрәк тапты:

— Былай телләшеп торһаң, балығыңды ла, ҡармағыңды ла тартып алдыҡ, киттек. Минең кемлекте белмәйһеңме ни әле? Танытырмын, белмәһәң...

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, Ҡасим пырхылдап көлөп ебәрҙе. Хәйҙәрҙең күҙҙәренән асыу осҡондары сәсрәне.

— Ниңәештәреңде ыржайтаһың?

— Ыржайтырһың да, бер ғәйепһеҙ малайға бәйләнәһең дә.

Башҡа иптәштәре лә һүҙгә ҡушылды:

— Балыҡ һинеке түгел дә инде, Хәйҙәр.

— Уның ҡармағын былай ғына һалып ҡараның бит.

Үҙен хуплауҙарын күреп, Ҡасим Хәйҙәрҙе тағы ла әсерәк тешләргә тырышты.

— Үҙеңдең кемлегең менән маһайма. Йәнәһе, берәү патруль етәксеһе...

Хәйҙәрҙең Ҡасимға һарыуы ҡайнаһа ла, тыйылып ҡалды. Балыҡ менән мауығып, ысынлап та үҙенең кемлеген онотоп ебәрҙеме эллә?! Ҡайҙан бынау ажауы килеп ҡапты... Хәйҙәр тешен ҡыҫып, үртәнеп кенә:

— Ярай, минең арҡала бер рәтле балығың була инде, — тине теге сандырға.

Ихтимал, был ваҡиға бер көлкө булып ҡына ҡалыр ине, әммә Ҡасим уны элэктереп алып, ҙурға ебәрҙе. Ул Хәйҙәрҙе яратмай, уны әсенән: «Маҡтансыҡ, ҡупыр», — тип атай ине. Быйыл алтынсы класты бер парта артында ултырып тамамланылар. Хәйҙәр гел «дүртле», «бишле»гә генә уҡыны, ә Ҡасим, нисек тырышһа ла, ул тиклем үк булдыра алманы, бер-ике «өслө»һө лә сыҡты. Уҡыуҙағы был айырма уның мин-минлегенә тейә, ярһыта ине. Ул ғына етмәгән, ип-тәштәре Хәйҙәрҙе, унан өҫтөн ҡуйып, зәңгәр патруль отрядында звено командиры итеп һайлап ҡуйҙылар. Ҡасим йәнә түбәндә, буйһоноусы ғына. Йәнең көймәҫме шунан һуң...

Әлеге ваҡиға уны ҡыуандырҙы. Малай үҙенең Хәйҙәрҙән кәм түгеллеген, хатта өҫтөн икәнлеген иҫбатларға иҫәп тотто. Шуға күрә, Ҡамышлы буйында йөрөп ҡайтҡас, ул күп кенә ип-тәштәрен күреп, «ЧП» хаҡында ҡабартыбыраҡ һөйләп сыҡты...

Тынлыҡты нәҙек оҙон буйлы, ҡаҡса ҡуңыр йөҙлө Сулпан боҙҙо. Ул алғараҡ сығып:

— Мин Хәйҙәрҙең ғәйебе юҡ тип уйламайым. Бәйләнмәҫкә ине шул малай менән. Тағы шуныһын да онотмайыҡ: теге ажауҙа Хәйҙәрҙең дә өлөшө бар бит. Әҙ генә булһа ла бар. Ни бары шуның өсөн генә уны командирлыҡтан алырға ярамай, минеңсә.

— Мин Ҡасимды алама малай тип әйтмәйем, — тине сәсен малайҙарса алдырған, зәңгәр кофталы, джинсы салбар кейгән ҡыҙ. — Звено командиры эшен ул да башҡара ала. Бәлки, насар ҙа башҡармаҫ. Шулай ҙа Хәйҙәрҙе мин уға алмаштырмаҫ инем. Ни өсөн, тиһегеҙме? Ул иптәштәрен, бигерәк тә Хәйҙәрҙе, йыш ҡына яманлап һөйләй. Кисә лә, йорт һайын инеп, уның хаҡында тел шымартып йөрөнө. Улай егетлек түгел ул.

Был һүҙҙәрҙән һуң патрулселәр умарта күсе кеүек гөжләне лә китте.

— Хәйҙәрҙең дә ғәйебе бар...

— Барыбер уны Ҡасимға тиңләп булмай инде.

— Хәйҙәр — ҡыйыу ҙа, ғәҙел дә малай ул.

— Ә теге ваҡытта ике браконьерҙың ҡойроғона нисегерәк баҫты. Оноттоғоҙмо ни?

— Бер ҙә онотманыҡ...

Иптәштәренең һүҙҙәрен ишетеп, Хәйҙәрҙең күңеленә йылы йүгерҙе. Теге ике браконьер ваҡиғаһы күҙ алдына килде.

Көн киске яҡҡа ауышып һүрәнләнә башлаған саҡ. Хәйҙәр бер нисә иптәше менән Ҡамышлы буйына патрулгә сыҡҡайны. Беләктәрендә — зәңгәр таҫма. Бына улар балыҡ һөҙөп йөрөгән ике ир кешене күреп, шулар тәңгәленә ҡырсынға килеп туҡтанылар.

— Аҡайҙар, һөҙөргә ярамай бит,— тине Хәйҙәр тауышын артыҡ күтәрмәй генә.

Әммә һыуҙағы икәү бар тип тә белмәне, шөгөлдәрен дауам итә бирҙе.

Был юлы шаҡтай ҡатыраҡ итеп:

— Һөҙөүҙе туҡтатығыҙ! — тип ҡысҡырҙы Хәйҙәр.

Ҡамышлының бирге яҡ ситенәнерәк барған оло ҡорһаҡлы ҡап-ҡара ир, нинһайәт, Хәйҙәрҙәр яғына башын бороп:

— Барығыҙ, бар, үҙ юлығыҙҙа булығыҙ, — тине, күҙҙәрен асыулы ялтыратып.

Бына улар йылымдарын һөйрәп ҡырсынға сыҡты. Тиҫтәнән артыҡ йомро сабаҡ, алабуға ҡомда һикереште. Тегеләр, шатланышып, йылтыр тоҡсайға уларҙы тултыра башланы.

Хәйҙәр, браконьерҙар ҡаршыһына килеп:

— Ағайҙар, яҡшы саҡта балыҡтарҙы һыуға ебәрегеҙ, — тине, ҡыҙарынып. — Ә йылымығыҙҙы беҙ алырға тейешбеҙ.

Малай йылымды таяғына урарға уҡ керешкәйне, оло ҡорһаҡлы уны төртөп осорҙо.

— Буталып йөрөмә эле бында, маңҡа!..

Икенсеһе, шырпы кеүек төҙ буйлы һәм ап-аҡ тәнлеһе, йәшел күҙҙәрен сәйер ялтыратып көлөмһөрәне, тик бер һүҙ ҙә өндәшмәне. Шулай ҙа уның иптәшен хуплағаны һиҙелеп тора ине.

Былар менән һуғышып булмай, низағлашыуҙан да файҙа юҡ. Хәйҙәр, аптырап, Ҡасимға ҡараны.

— Ни эшләйбеҙ?

Теге яурынын ғына йыйырҙы.

— Белмәйем. Һин бит башлыҡ, үҙең ҡара инде.

Шул арала теге ике ир, йылымдарын һөйрәп, йәнә һыуға төшөп китте. Хәйҙәр, көсһеҙлөктән һарыуы ҡайнап, тирә-яҡҡа ҡаранды һәм таллыҡ буйында торған бишекле мотоциклды күреп ҡалды.

— Ҡасим, ҡыҙҙар менән бында ҡал, мин — хәҙер... — Ул мотоцикл янына йүгереп барҙы. Бәхетенә, тоҡандырыу асҡысы үҙ урынында ине.

Мотоцикл гөрөлтөһөн ишетеп, браконьерҙар ашығып һыуҙан сыҡты. Тик һуң ине инде. Ә бер аҙҙан уларға милицияның участка инспекторы менән осрашырға, «аңлашырға» тура килде.

Был ваҡиғанан һуң Хәйҙәрҙең иптәштәре араһында ла, ауылда ла абруйы күтәрелде. Хәйер, ул тәбиғәтте һаҡлау эшенә һәр саҡ тоғро булды. Ә кисә яңылышты, юҡҡа ҡыҙып китте. Оят ине уға хәҙер...

— Йә, — тине отряд командиры Әхтәр, — Ҡасимды һайлайбыҙмы, эллә Хәйҙәрҙе ҡалдырабыҙмы?

— Ишетмәнеңме ни? — тине Сулпан, Әхтәргә үтә ҡарап.

— Ишеттем, — тине Әхтәр. — Шулай ҙа тауышҡа ҡуям. Кем дә кем Ҡасим патруль командиры булһын ти, шулар ҡулдарын күтәрә. Берәү, икәү, өсәү... Тимәк, Хәйҙәр үҙ урынында ҡаламы ни?

— Ҡалһын!

— Ҡалһын әйҙә! — тип ҡыскырҙы бер нисә тауыш.

Әхтәр ҡулбашын һикертеп ҡуйҙы ла Ҡасимға ҡараны.

— Һайламанылар...

Тегенең йөҙө боҙолоп, иларға етешкәйне.

— Мин зәңгәр патрулдән китәм.

Әхтәрҙең иҫе лә китмәне.

— Беҙҙе тәбиғәтте, тыуған яҡты һаҡларға бер кем дә көсләп ҡушманы, уға үҙ иркебеҙ менән килдек, үҙ иркебеҙ менән китә лә алабыҙ.

Ҡасим урынынан ҡуҙғалманы. Ул да тыуған яҡты, тәбиғәтте ярата ине. Ләкин үҙен Хәйҙәр урынына патруль командиры итеп һайлауҙарын бик теләгәйне. Һайламанылар. Уны, һүҙ йөрөтөүсе, ғәйбәтсе, тип уйлайҙар. Шуның өсөн отрядтан китергәме? Һуңынан иптәштәре ни тиер? Моғайын, көлөрҙәр генә. Юҡ, ул үҙенең хатаһын төҙәтергә, ысынлап та ниндәй икәнлеген иҫбат итергә тейеш...

Әхтәр уға төбәлде:

— Ниңә китмәйһең?

— Китмәҫкә булдым.

Ҡасимдың күҙҙәре йәшкәҙәгәйне. Иптәштәре уны йәлләп ҡуйҙы.

ӨЙКӨМ ТАЛ ҺАНДУҒАСЫ

Май айының сыуаҡ бер көнө. Еләҫ. Сағыу ҡояш нурҙары аҫтында Ҡуҫыҙлы күле йымылдап балҡып ята. Ана, яр буйында ике малай — Ғаян менән Ринат — ҡармаҡ һала. Улар бында уҡыуҙан ҡайтҡас та килгәйне.

Бына Ғаяндың ҡалҡыуысы һелкенеп-һелкенеп ҡуйҙы. Белеп тора ул, ҡармаҡтағы емде табан балығы тәмләп ҡарай. «Әйҙә, ҡыйыуыраҡ бул!» — тине малай, ҡыуанып, һәм, ҡалҡыуысы батып китеү менән, сыбығын күтәреп тә алды, ус аяһы ҙурлыҡ ҡына баҡыр табан һыуҙан йылҡылдап килеп сыҡты.

— Һиңә әләгә, ә минең ҡармаҡты еҫкәп тә ҡарамай, — тине Ринат, көнләшеп.

Ғаян, Ринатты тынысландырып:

— Еҫкәр, еҫкәү генә түгел, килеп тә ҡабыр әле, — тине.

Әммә улай булып сыҡманы. Тиҙҙән Ғаянға йәнә балыҡ әләкте. Был юлы Ринаттың түҙемлеге бөттө.

— Етте, — тине ул, ҡармаҡ сыбығын ергә ташлап, — бүтән һалмайым, кешенең нисек ҡаптырғанын ҡарап торорға килмәнем, ҡайтам.

Ғаян, өтәләнеп, уның янына килде.

— Шул тиклем ҡыҙма әле, һиңә лә әләгер. Ҡайҙа, ҡармағыңды күрәйем әле.

Ринат һүҙһеҙ генә сыбығын юғары күтәрҙе, ә Ғаян, уның ҡармағын тотоп ҡарау менән:

— Был бит ажауҙыҡы, — тип ҡысҡырып уҡ ебәрҙе. — Тиҙ генә алмаштырайыҡ. Миндә табан ҡармағы бар.

Ҡармағын алмаштырғас, Ринатҡа ла балыҡ ҡаба башланы. Уның күңеле күтәрелде. Тик Ғаян һыуҙан табанды йәки сабаҡты тартып сығарған һайын, ул ялт итеп боролоп ҡараны, ҡысҡыҡ күҙҙәрендә көнсөллөк осҡондары сағылып ҡалды.

Ҡояш байығайны инде, ҡапыл бер ҡоштоң һайрағаны ишетелде. Бынан алыҫ түгел күл ситенән ике-өс аҙымда ғына бер өйкөм тал ултыра — тауыш шунан килә ине. Тауыш көсәйә төштө, дәртле бер моңға әйләнде. Эйе, был һандуғас йыры ине. Ғаян быны ғына айыра. Ул ҡармағын ҡуйҙы ла сихри моңдарҙы бирелеп тыңлай баш-

ланы. Ә Ринат балык каптырыуын белде. Етмәһә, иптәшенә күҙ һалып, мыҫкыллы көлөмһөрәп куйҙы: иҫе китмәй иҫке сәкмәнгә, йәнәһе.

Һандуғас өҙҙөрҙө генә. Уның моңдарында ошо аяҙ, тыныс кискә, көҙгөләй балкып яткан күлгә мәдхиә яңғырай һымак. Юк, улай ғына ла түгел, был моңдарҙа йөрәктәрҙе елкендергән, якшылыкка, якшылыкка әйҙәгән тылсымлы көс, аһаң бар ине. Ғаян, шуны тойоп, әҫәрләнеп торҙо. Шул сак Ринат уға өндәште:

— Ниңә шул тиклем һушың китте? Кош тауышы ишеткәнең юкмы эллә?

Ғаян, капыл йоконан уянғандай:

— Бар, әлбиттә, — тине. — Ә был һандуғас бит. Нисек һайрай, ә!

— Кош һайрар инде ул, акса һорамаҫ, тыңларға вакытың ғына булһын.

— Эллә беҙ ҙә бер аҙ тыңлайыкмы?!

— Куй әле, кайтырға кәрәк.

Бер аҙҙан ике малай, кармак сыбыктарын һәм балыклы йылтыр токсайҙарын тотоп, ауыл яғына атланы.

Ринат, мактанғандай:

— Мин һинән күберәк каптырҙым, — тине.

Ә Ғаян уны ишетмәне лә, үҙ уйҙарына күмелеп килә ине.

— Иртәгә һандуғас тыңларға Фәриҙәне сакырам әле, — тине ул, күңелендә әле генә тыуған серҙе асып.

Ринат, һағайып, ауыҙына һыу ҡапҡандай булды, әңер төшмәһә, йөҙө ҡараңғыланып китеүен Ғаян да күрер ине.

Фәриҙәгә Ринат үҙе күҙ атып йөрөй ине шул. Етенсе кластағы ап-аҡ түңәрәк йөҙлө, зәп-зәңгәр күҙле, оҙон ҡара толомдары биленә төшөп торған ҡыҙ менән дуҫлашырға ул күптән юл эҙләй, бер тапҡыр хатта киноға саҡырып, яҙыу ҙа биргәйне. Тик Фәриҙә ни өсөндөр яуапһыҙ ҡалдырҙы.

Ринат, ниһайәт, көнләшеүен һиҙҙермәҫкә тырышып:

— И-и, тапҡанһың эш, ҡыҙҙарҙы кеше һандуғас тыңларға саҡырамы ни! Үҙеңдән көлөр генә ул, — тине.

— Көлһә көлөр, уныһы һинең эш түгел, — тине Ғаян, бер аҙ күңеле кителеп.

* * *

Математика дәресе бара ине. Оҙон буйлы, ялтас башлы уҡытыусы ағай таҡтаға миҫалдар яҙған саҡта Фәриҙәнең алдына дүрткә бөкләнгән ярты бит ҡағыҙ килеп төштө. Фәриҙә, уны йәйеп, күҙ йүгертеп сыҡты ла йылмайып ҡуйҙы: Ғаян уны Ҡуңыҙлы күле буйына һандуғас һайрауын тыңларға саҡырғайны. «Ҡыҙыҡ бит әй, күпме йәшәп, һандуғасты ла йүнләп тыңлағаным юҡ. Был осраҡтан файҙаланмай ярамаҫ», — тип уйланы Фәриҙә. Тик уның Ғаян менән осрашып

йөрөгөһө килмәй. Былай ул — тәртипле, баҫалҡы малай, яҡшы уҡый ҙа, эммә буйы тәпәш, йыуантыҡ, етмәһә, йөҙө, сәсе ерән. Ә бына Ринат егет тиһәң дә егет. Буйға Ғаяндан тотош бер башҡа ҡалҡыу, ҡуңыр йөҙө янып тора, ҡыҫығыраҡ булһа ла күҙҙәре ҡап-ҡара. Телгә — үткер, әллә ҡайҙан яйын, һүҙен табып, күҙеңә инеп килә. Ринат, әлбиттә, Фәриҙәгә оҡшай төҫлө ине. Шулай ҙа Ғаяндың саҡырыуын кире ҡаға алманы. Унда ниндәйҙер сихри көс бар ине һымаҡ.

Был көндө Фәриҙәне Ринат та һаҡланы. Бына тәнәфес ваҡытында коридорҙа үҙен генә осратты ла уйлап та тормай һүҙ башланы.

— Яңы косынкаң ҡалай килешә! Ҡотло булһын!

— Һиңә лә булһын.

— Косынкамы?

— Косынка... һи-һи-һи...

Фәриҙә көлә-көлә китергә ҡуҙғалды. Ринат уның ҡулынан эләктереп алды.

— Әйтәһе һүҙем бар.

— Әйт һуң.

— Һине кискә киноға саҡырам. Бараһыңмы? — Ринаттың ҡара күҙҙәре өмөт менән ҡыҙға төбәлде. Ә Фәриҙә мөләйем йылмайҙы ла:

— Берәй яңыраҡ нәмә уйлап таба алманыңмы? — тине.

— Ә ниңә? — Ҡыйыу булһа ла, Ринат аҙыраҡ ҡаушаны, бит алмаларына алһылыҡ йүгерҙе. — Яңы ҡыҙыҡлы кино, ти. Фантастика.

— Бөгөн вақытым юқ. Ғәфү ит, — тине Фәриҙә, Ғаянға биргән яуабын хәтерләп. — Бәлки, башқа көндө...

Фәриҙәнең һуңғы һүҙҙәре Ринатты тынысландырҙы. Ул эсенән генә көлөп ҡуйҙы: Ғаяндың бәкәленә һуҡты, йәнәһе. Бөгөн булмаһа иртәгә Фәриҙә уның киноға барасаҡ, э ерән Ғаян менән ни эшләп йөрөһөн ул...

* * *

Ауыл осонда Ғаян менән Фәриҙә осрашҡанда, ҡояш байыр-байымаҫ ҡына тора ине. Бынан бер саҡрымда Ҡуңыҙлы күле ялтырап ята.

— Кискә ҡаршы ҡурҡынысыраҡ та, — тине Фәриҙә, ярым шаяртып.

Ғаян ихлас көлөмһөрәне.

— Нимәһе ҡурҡыныс? Ундағы һандуғасты тыңлағас, ҡурҡыуыңды ғына түгел, бөтә донъяңды онотороҫоң эле.

— Шулаймы?

— Шулай...

— Ә көндөҙ ни эшләп һайрамай ул һандуғас?

— Ғәҙәтє шундай. Май айында кистән башлап иртәнгә тиклем һайрай...

Һөйләшә-һөйләшә, улар күл буйына, элеге таллы утраусыҡ тәңгәленә килеп тә еттеләр. Тирә-йүн тып-тын, өйкөм таллыҡта ла бер нинДәй йән эйәһе юҡ кеүек. Бары тик ара-тирә ба-

лыҡ ҡарпығанда һыу сыптырлағаны ишетелеп ҡала.

Фәриҙәнең йөҙөндә һиҙелер-һиҙелмәҫ борсолоу сағылды.

— Ҡара әле, һандуғасыңдың өнө-тыны ла юҡ бит.

Ғаян уға аптырап ҡарай:

— Әле һайрай башламаған.

— Бәлки, ул бынан күсеп киткәндер.

— Юҡ, ул бында оя ҡорған булырға тейеш. Бына-бына һайрап ебәрәсәк.

Ысынлап та, оҙаҡ көтөргә тура килмәне, таллыҡтан ҡоштоң тауышы ишетелде. Башта, пианино клавиштарына саҡ ҡына ҡағылып-ҡағылып алғандай, өҙөк-өҙөк өндәр сыҡты; унан, дәртилһамы ташып барған музыкант шикелле, сихри моңдарын тирә-яҡҡа таратты ла таратты.

Ғаян Фәриҙәгә күҙ һалды. Теге ҡайҙалыр алыҫҡа төбәлгән дә тынып ҡалған. «Ихлас тыңлай. Һандуғас тауышын яратты шикелле», — тип уйланы малай. Эйе, был йырсы ҡоштоң моңона кемдәр генә һоҡланмай! Ғәжәп теүәл ритмлы асыҡ, саф тауыш, көтөлмәгән боролоштар менән йә ҡапыл юғары күтәрелә, йә түбәнәйә. Ул тәбиғәттең үҙе кеүек ябай ҙа, ҡатмарлы ла. Унда икһеҙ-сикһеҙ зәңгәр күк киңлеге лә, ҡояш нурҙарының сыуаҡлығы ла, япраҡтар серләшеүе лә, шишмә сылтырауы ла — бөтәһе лә бар. Һиҙгер йөрәкле кеше шуларҙы тоя, кисерә һәм йәшәү өсөн рухи көс, илһам ала.

Ғаян менән Фәриҙә, һәр ҡайһыһы үҙенсә уйхистәргә сумып, күпме тыңлап торғандарҙыр. Инде ҡараңғы ла төшкәйне. Бер мәл Фәриҙә Ғаян яғына бороолдо. Ап-аҡ йөҙөнөң эске бер йылылыҡ менән балҡығаны һиҙелеп тора ине.

— Рәхмәт, Ғаян! — тине ул, тулҡынланып.— Мин һандуғас тауышын бер ҡасан да былай иғтибар менән тыңлағаным юҡ ине. Иҫ киткес икән!

Ғаян Фәриҙә өсөн ҡыуанып йылмайҙы.

— Мөмкин булһа, мин үҙем һандуғасты таңдар аткансы ла тыңлар инем, — тине ул.

— Мин дә. Тик бөгөн дәрескә әҙерләнәһе бар. Ҡайтайыҡ инде.

Ғаян, килешеп, баш ҡаҡты:

— Ярай, һуң шул инде.

Фәриҙә, ҡайтыр яҡҡа атлай-атлай, көтмәгәндә:

— Ә беҙ иртәгә тағы килербеҙ, йәме, — тине.

* * *

Улар күл буйына килгәндә, яҡты ине әле. Һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә һалҡынса ел иҫә. Һыу өҫтө, нисектер, асыулы йөҙҙө хәтерләтеп, ҡарағусҡылланып йыйырылып-йыйырылып ала. Өйкөмдәге тал япраҡтары тынғыһыҙ ҡыштырлаша. Был күренештәр күңелгә шом һала. Фәриҙә өшәнеп, ҡалтыранып ҡуйҙы. Ғаяндың уйынса, һандуғас инде һайрай башларға тейеш. Тик ни өсөн һаман да тауыш-тыны юҡ икән?

Малай, күл буйын иғтибар менән ҡарап:

— Бында кемдер булған, ялан аяҡ йөрөгән, — тине, борсолоп. — Ана, таллыҡты ярып ингән, әҙе ярылып ята.

Фәриҙә лә, аптырап:

— Эйе, күрәм, — тине. — Унда нимә юғалтты икән ул әҙәм?

— Белмәйем... Ә һандуғас һаман һайрамай.

— Бәлки, уны бынан өркөтөп ебәргәндәрҙер.

— Әллә инеп ҡарарғамы? Унда ни эшләнеләр икән?

— Һандуғасты ҡурҡытырһың бит.

— Ә мин, ул унда юктыр, тип шомланам шул. Булһа, һайрар ине хәҙер.

— Ипләп кенә инеп ҡара һуң.

Ғаян, һә тигәнсе туфлиҙарын сисеп, салбар балаҡтарын төрҙө лә һаҡлыҡ менән генә күлгә инде. Һыу һалҡын, төбөндәге мәтегә аяҡтар бата. Тик малай быларға иғтибар ҙа итмәне. Бына ул, өйкөмдө шыптырлатмай ғына аралап, әскә ҡараны һәм үҙ күҙҙәренә үҙе ышанманы: талдар төбөндә, ерҙә, бәләкәй генә түңәрәк оя аунап, тирә-яғында мамыҡтар туҙып ята. Ҡараңғыраҡ булһа ла, Ғаян бармаҡ башындай ғына һоро йомортҡа ҡабығын да шәйләне. Тал сатаһындағы ояны бәреп төшөргәндә селпәрәмә килгәндер, моғайын. Кемдең эше был? Нисек ошондай вәхшилеккә ҡулы барған?..« Йыртҡыс!» — тип бышылданы Ғаян,ештәрен ҡыҫып. Ул ауыр кисерештән саҡ ҡуҙғалып, ярға сыҡты. Уны күҙә-

теп торған Фәриҙәгә ҡарамай ғына, таллыҡ яғына ишаралап:

— Бер йүнһеҙе ояһын туҙҙырған, — тине һәм аяҡтарына ойоҡбаштарын, туфлиҙарын кейергә эйелде.

— Туҙҙырған?!. — Фәриҙә тетрәнеп әйтте был һүҙҙе. — Ниндәй шәфҡәтһеҙлек!

Шул саҡ уның күҙҙәре алдына Ринат килде. Ул бөгөн дә Фәриҙәне киноға саҡырҙы.

— Бара алмайым, — тине ҡыҙ, бер аҙ ғына хафаланғандай. «Ярай, киноның һуңғыһы булмаҫ әле, һандуғасты тағы бер кис тыңлайым инде», — тип үҙен тынысландырғайны ул.

Ә Ринат серле көлөмһөрәне:

— Ниңә бара алмауыңды төшөнәм шикелле.

— Төшөнгәс, бик һәйбәт, — тине Фәриҙә, үсегеп, һәм класҡа инеп китте...

Капыл Фәриҙәнең башына: «Быны Ринат эшләмәнеме икән? — тигән уй килде. — Ана, күл ситендәге ялан аяҡ эҙҙәре лә уныҡы булыуы ихтимал: береһен тура баҫҡан, икенсеһе арҡырыраҡ».

Ҡыҙ дөрөҫ һиҙенә ине. Ринат кисә үк уларҙың күл буйына киткәндәрен дә, ҡайтҡандарын да күҙәтеп торҙо. Ә бөгөн, Фәриҙә үҙе менән киноға барыуҙан баш тартҡас, көнләшеүенән ярылырҙай булып, һандуғас ояһын туҙҙырып ҡайтты.

«Ниндәй шәфҡәтһеҙлек!» — тип бышылданы Фәриҙә нәфрәт менән. Һәм шул саҡ башын

әйеп, әсенеп баҫып торған Ғаянға ҡарата күңелендә йәлләү, яҡынлыҡ тойғоһо уянды. Малайҙың әргәһенә килеп, беләгенән йомшаҡ ҡына тотто:

— Һин бик һәйбәтһең...

Ғаян әкрен генә башын күтәрҙе һәм күңеле төбөнән сыҡҡан бер генә һүҙен әйтә алды:

— Һин дә...

Шәфҡәтһеҙ берәү ояһын туҙҙырғандан тәбиғәттә һандуғас бөтмәҫ. Был төбәкте ташлап китһә, икенсеһен үҙ итер, ҡәҙимгесә һайрар, оя ҡорор, балалар сығарыр. Шулай ҙа шәфҡәтһеҙҙәр булмаһын ине. Мин быны ихлас теләйем. Әммә өйкөм тал һандуғасы ике йөрәктә һүнмәҫ моңдарын ҡалдырып китте. Был иң яҡшыһы, минеңсә.



ТӘҮГЕ ЕҢЕҮ

Тәбәнәк кенә буйлы был ҡаҡса егет сәйер булып сыҡты әле. Техникумда дәрестәр тамамланғандан һуң, дөйөм ятаҡта күренеп кенә ҡала, әллә ҡайҙа китә лә юғала. Башта быға иғтибар ҙа итмәнек. Әммә ун биш-егерме көн үттемеюҡмы, уның менән, нисектер, ҡыҙыҡһына башланыҡ. Кешеләр менән еңел аралашыусан, йә мәрәкәләп һөйләшергә яратҡан Ғилман, яйы тура килгән һайын:

— Ҡайҙа тая һуң был көҙгө әтәс? — тип һорап ҡуя. Мин ни.. яурынды ғына һикертәм: кем белһен уны, йәнәһе. Ә теге үҙе ҡайтып ингәс, ҡайҙа булыуын һорашырға, ниңәлер, Ғилман да, мин дә онотабыҙ.

Шулай ҙа бер көндө, кискә табан Наил бүлмәгә күҙен күгәртеп ҡайтҡас, Ғилман был хаҡта һүҙ ҡуҙғалып:

— Әй һин, лилипутия вәкиле, әллә берәҙәклектә йөрөйһөңмө? — тип һораны, шаяртҡандай йылмайып.

Наил асыуланманы, үҙенә хас мөләйемлек менән көлөмһөрәне генә:

— Бокс секцияһына яҙылдым, шунда йөрөйөм, — тине.

Ғилман түҙмәне, ҡысҡырып көлөп ебәрҙе.

— Наил... — боксер... Ха-ха-ха... Чемпион ..

Ғәжәпләнерлек тә шул. Ирендәренән әсә һөтө лә кипмәгән егет киҫәге: «Бокс секцияһына яҙылдым», — тип торһон әле. Көлөрһөң дә. Беләктәре ептәй нәҙек, муйыны ла уҡлау йыуанлығы ғына. Тар ғына күкрәген ҡалҡытыбыраҡ йөрөргә тырыша тырышыуын. Әммә шуның арҡаһында үҙе тап көҙгә этәскә оҡшай ҙа ҡуя...

Бер саҡ, киноға билет алып, сеанс башланғансы йөрөп әйләнергә урамға сыҡтыҡ. Спорт һарайы тапҡырына етеп килә инек, Наилды күреп ҡалдыҡ. Үҙенең кәҙимге ҡара сумкаһын аҫып, әлеге һарайға инеп китте.

— Күрҙеңме беҙҙең «чемпион»ды? — тине Ғилман, алға ымлап.

— Күрҙем, — тинем мин. — Әйҙә янына инеп сығайыҡ. Нисек һелтәнә икән?

— Ҡуй әле, шуны ҡарап йөрөйһө генә ҡалғайны.

— Әйҙә инде, — тинем мин, спорт һарайы яғына атлап. Ғилман теләр-теләмәҫ кенә миңә әйәрҙе.

Боксерҙар шөғөлләнгән залда Наилды күрҙек. Ул беҙгә алыҫтан ғына баш ҡағып ҡуйҙы ла нимәлер тултырылып аҫып ҡуйылған дерматин тоҡто үҙенең башы ҡәҙәр перчаткалар менән тырышып-тырышып дөмбәҫләргә кереште.

— Кара, лилипутия вәкиле, нисек көсәнә, һинең менән миңә үҙен күрһәтергә теләй, йәнәһе, — тине Ғилман, ауыҙын йырып.

Миңә ҡалһа, Наилдың хәрәкәттәрендә нинДәйҙер таҫыллыҡ та, ысын боксерҙарға оҡшатырға тырышыу ҙа һиҙелгәндәй булды. Шуға күрә мин Ғилман менән килешмәнем.

— Спортсмен сыҡмаһа ла, бер аҙ көсө артыр. Йөрөһөн әйҙә!

Ғилман ризаһыҙлыҡ менән башын сайҡап ҡуйҙы. Шул сак залға зәңгәр спорт костюмы кейгән, сәстәренә сал төшкән урта йәштәрҙәге бер ағай килеп инде. Тренер, күрәһең. Ул Наил янында туҡталып, бер аҙ ҡарап торҙо ла:

— Маладис, Вәлиуллин! — тине.

Наил, уның һүҙҙәрен ишетмәгәндәй, теге тоҡто туҡмауын белде, маңлайында, сикәләрендә бөрсөк-бөрсөк тирҙәр күренде. Тик беләктәренең етеҙлеге һиҙелерлек һүлпәнәйә башлағас ҡына туҡтаны ла тренерына ҡараны.

— Тиҙҙән ярыш бит, һеҙ әйткәнсә, тырышып ҡарайым әле.

Беҙ спорт һарайынан сығып киттек.

...Күпмелер вақыттан һуң, Наил ҡала беренселеге өсөн ярышта ҡатнашты. Беҙҙең уйҙарыбыҙҙы дөрөҫләгәндәй, ул унда һуңғы урындарҙың береһен алғайны. Ғилманға шәп булды: яйы тура килгән һайын, Наилды мәрәкәләй башланы:

— Йә, Наил, ҡасан чемпион булаһың инде? — ти ул, ауыҙын йырып. Йәки, мыйыҡ аҫтынан ғына көлөп:

— Үҙеңде элеге ярыштағы кеүек күрһәтһәң, мастерлыҡҡа ла алыҫ ҡалмай, — тип ҡуя.

Мин үҙем башҡаларҙы мәрәкәләүҙе яратмайым. Уның нигеҙендә кешене кәмһетеү ята, тип уйлайым. Шуға күрә асыуым килеп Ғилманға ҡысҡырам:

— Етер инде һиңә. Кешене мыҫҡыллама.

Ғилман етдиләнеп:

— Мыҫҡылламайым, шаяртам ғына, — ти.

— Һин бит мыҫҡыллап шаяртаһың.

— Юҡ та, — тине Ғилман, асыулана төшөп.

Беҙ бәхәсләшеп алабыҙ. Ә Наилдың иҫе лә китмәй, ғәҙәтенсә, йылмая ғына. Ярышта һуңғы урындарҙың береһен алыуына ла эллә ни ҡайғырманы шикелле. Һәр хәлдә, морон төшөрөп йөрөгәне һиҙелмәне. Элеккесә, күнекмәләрҙән ҡалманы, күҙен күгәртеп, ирендәрен күмәстәй күптереп ҡайтҡан саҡтары ла булды. Шулай уҡ уҡыуҙан да артта һөйрәлмәне егет. Бөтә буш вақытын китапханала үткәрҙе, бүлмәлә лә ярты төндәр ауышҡансы дәреслектәр, ярҙамсы әсбап-

тар менән шөғөлләнеп ултырҙы. Беҙ бер ниндәй секцияға йөрөмәһәк тә, Наил менән бер сама уҡый инек.

Бер көндө, техникум китапханаһынан ҡайтышлай, яңы газета эленгән витрина алдында туҡталдым. Шул Наил арҡаһында инде. Газета күрһәм, үҙем дә һиҙмәҫтән, спорт хәбәрҙәренә күҙ ташлайым: боксерҙар хаҡында берәй нәмә яҙмағандармы, йәнәһе.

Был юлы өмөтөм аҡланды. Кескәй генә бер мәҡәләлә ике ҡала боксерҙары ярышында Наил Вәлиуллиндың иң еңел ауырлыҡта беренсе урынды алыуы хаҡында әйтелгәйне. Был хәбәр миндә аптырау ҙа, ышанып бөтмәү тойғоһо ла тыуҙырҙы. Киоскынан әлеге газетаны һатып алдым да ятаҡҡа ашыҡтым. Ни тиһәң дә, үҙебеҙҙең егет бит: тиҙерәк шатлығын уртаҡлашырға кәрәк.

Мин ҡайтҡанда егеттәрҙең икеһе лә бүлмәлә ине. Тулҡынланыуымды йәшермәйенсә, Наилдың ҡулын ҡыҫып:

— Тәүге еңеүең менән! — тип һөрәнләнем.

Шул саҡ Ғилмандың мыҫҡыллы йылмайыуын күреп, асыуым килеп китте.

— Ниңә ауыҙ йыраһың? Әллә көнләшәһеңме? — тинем киҫкен генә.

Теге һаман ауыҙын йыймайынса:

— Көнләшмәгән ҡайҙа инде! Көрәшһеҙ килгән еңеү өсөн.. — тине.

Мин, аптырап, бер Ғилманға, бер Наилға ҡараным.

— Нисек? Улай беренсе урынды алып булмы ни?..

— Була икән шул, — тине Ғилман. — Финал еткәс, ҡаршы команданан Наил менән алышырға тейешле спортсмен ярышҡа килмәгән. Бына һиңә беренсе урын!

Мин Наилға ҡараным.

— Шулаймы ни?

Теге, бер ни булмағандай:

— Шулай инде, — тине.

Өсөбөҙ ҙә шымып ҡалдыҡ. Күңелемдә Наилдың булдыҡлылығына ҡарата тыуған баяғы шигем раҫланған һымаҡ тойолдо. «Көрәшһеҙ килгән еңеү еңеүме ни ул?..» — тип уйланым, күңелем төшөп.

Өҫтәл артында китап аҡтарып ултырған Ғилман тәҙрәгә ҡарап алды.

— Кис яҡынлаша. Әйҙәгеҙ, киноға барып ҡайтабыҙ.

Наил ултырғысынан һикереп торҙо.

— Киттек.

Улар ҡуҙғалғас, мин дә тороп ҡала алманым...

Кинофильм ҡарап, һуң ғына ҡайтып киләбеҙ. Ноябрь урталары булһа ла, көн артыҡ һыуыҡ түгел. Шулай ҙа йылы залдан сыҡҡанғамы, эллә еңелсә курткалар ғына кейеп алғанғамы, бер аҙ өшәнеп, бөршәйеберәк атлап барабыҙ. Ҡаланың шәхси йорттарҙан торған өлөшөн үткәндә, бер ҡараңғыраҡ тыҡрыҡтан асырғанып ҡысҡырған

ҡатын-ҡыҙ тауышы беҙҙе шып туҡтарға мәжбүр итте.

— Ҡотҡарығыҙ!..

Шунда уҡ уның тауышы өҙөлдө.

— Ы́м-м... — тип иламһырағаны ғына ҡолаҡҡа инеп ҡалды. Беҙ, ни эшләргә лә белмәй, тыҡрыҡ яғына ҡаранык. Ир кешенең теш араһынан сыҡҡан һүҙҙәре киске һауаны ярҙы:

— Тауышланма, юҡһа бөтөрәм!

Шунда уҡ ҡурҡыныс бер хәлде һиҙенеп, хәүефләнеп, бер-беребеҙгә ҡараштыҡ.

— Тайҙыҡ бынан, ундай нәмәгә ҡатышып бәләгә тарыуың бар, — тине Ғилман.

— Һин нимә?..— тип ҡысҡырып ебәрҙе Наил һәм, ҡулын һелтәп, ҡараңғы мөйөшкә йүгерҙе. Мин дә уның артынан ташландым. Ғилман да беҙҙең арттан ыңғайланы.

Наил барып етте лә:

— Ебәр уны! — тип ҡаты ғына өндәште.

Яҡыныраҡ килгәс, бер ирҙең йәш кенә ханымдың муйынынан быуып тотҡанын күреп, ҡаушап киттем. Ә Наил:

— Ебәр! — тип ҡабатлап ҡысҡырҙы, тегенең эргәһенә үк барып.

Ир кеше, үҙ алдында бер бәләкәй генә малайҙы күреп һәм асыуы сығып, Наилдың яғаһынан эләктереп алмаҡсы булды. Иптәшебеҙ тайшанып өлгөрҙө. Теге лә күпте күргән сәпсек ине, буғай. Ҡулы һауала аҫылынып ҡалғас, тибеп ебәрмәксе итте. Ләкин Наил күҙ асып йомғансы икенсе

якҡа һикереп ҡотолдо. Ир кеше, ханымды ебәреп, көрәктәй ҡулы менән Наилға һалып ебәрергә теләп, ҡапыл һелтәнде. Тик был юлы ла бушҡа ғына, ҡулы бары тик һауаны ғына ярып үтте. Шул арала нисек яйын тура килтергәндер, Наил тегенең яңағына шундай итеп тондорҙо: ир кеше, «ы-ы» тип ыңғырашып, ергә ауҙы.

Шунда миңә лә йән инде.

— Маладис, Наил! — тинем, ҡыуанып. — Был һинең тәүге ысын еңеүең!

Урынынан торорға маташҡан теге иргә беҙ өсәүләп ябырылдыҡ.

— Егеттәр, ебәрегеҙ! — тип ялынды ул беҙгә. Үҙенән араҡы еҫе бөркөлә ине.

Инде һушына килгән йәш ханым:

— Ебәрә күрмәгеҙ юлбаҫарҙы, — тине нәфрәт менән. Уның биттәре буйлап күҙ йәштәре ағып төшкәнен шәйләнем. — Кинонан ҡайтып килгәндә, көтмәгәндә ошонда әләктереп алды ул ҡәбәхәт.

Юҡ, ысҡындырманыҡ хулиганды. Яҡындағы милиция участкаһына алып барып тапшырҙыҡ. Ул байтаҡтан бирле ғәҙел хөкөмдән ҡасып йөрөгән бер енәйәтсе булып сыҡты.

Был хәлдән һуң икенсе көндө үк беҙ спорт һарайына барҙыҡ. Ғилман көрәш секцияһына яҙылды, э мин — самбоға. Оҙаҡламай Наил ҙур бер ярышта ысынлап та беренсе урынды яуланы. Был — өсөбөҙ өсөн дә оло ҡыуаныс булды.

ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Повестар

Ағым үрепә 3
Ҡалманайҙа боҙ киткәндә 3
Тағы кемде алырға? 6
Сафа менән Аҡтырнаҡ 8
Кәмә буласаҡ 15
Йәнә бер сер 17
«Карап» әҙер! 23
Иртәнге сәғәттә! 27
Ағым үренә 30
Тынғыһыҙ төн 40
Аҙашыу 48
«Морон төшөрмәгеҙ, малайҙар!» 64
Әмин асыулы 67
Браконьерҙар һабаҡ алырға тейеш 71
«Һай, матурҡайым, батырҡайым...» 75
«...Артыҡ көймәйек әле» 79
Ят малай менән осрашыу 81
Тетрәткес хәбәр 85
Ҡалманайбаш күренде 90
Бәхтиәр — халыҡ батыры 92
Сафа Әминде фашлай 98
Әрәмә аша Ҡалманайбашҡа 101
Юл — Таллыгүлгә 105
Алтынсурин менән йәнә бер осрашыу . . . 109
Ҡаһармандар үлемһеҙ! 114
Ҡалманай башына 125
Һүнгән йондоҙ яҡтыһы 127

Хикәйәләр

Һайлау 225
Өйкөм тал һандуғасы 237
Тәүге еңеү 248

Урта йәштәге мәктәп балалары өсөн

Рашит Махмутович САБИТОВ

СВЕТ УГАСШЕЙ ЗВЕЗДЫ

Повести и рассказы

(на башкирском языке)

Редакторы *Р. Ф. Зәйнуллин*
Рецензенты *С. Ғ. Сафуанов*
Художество редакторы *Х. Ғ. Насиров*
Техник редакторы *З. Ғ. Чингизова*

ИБ № 3700

Наборға бирелде 06.05.88. Баҫырға ҡул ҡуйылды 10.06.88. ПО0027. Ҡағыҙ форматы 70×90 1/32. Академик гарнитураһы. Ҡалҡыу ысул менән баҫылды. Тип. ҡағыҙы № 2. Шартлы баҫма таб. 9,36. Шартлы буяу отт. 9,86. Учет.-изд. таб. 7,98. Тираж 7000 экз. Заказ № 365. Хаҡы 45 тин.

Башкортостан китап нәшриәте. 450000, Өфө-үҙәк, Совет урамы, 18. Башкирское книжное издательство. 450000, Уфа-центр, ул. Советская, 18. Башкорт АССР-ы Нәшриәттәр, полиграфия һәм китап сауҙаһы эштәре буйынса дәүләт комитетының Өфө полиграфия комбинаты. 450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

45 тин.